# АҒИҘЕЛ

**Өфө,**
**март**
**2013**

**3(1079)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС҆ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Тәнзилә Сәлихова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августа теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.03. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 316 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0031.13.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2013 (3,1079)**

# БЫЛ ҺАНДА:


*“Ағиҙел”гә – 90 йыл*

**Ирек Кинйәбулатов.** Һулар һауа, эсәр һыу һымаҡ.
Шиғыр. ...5

ШИҒРИӘТ

**Әнисә Таһирова.** Шиғриәттә мин ябай бер йырсы…
Шиғырҙар. ...8
**Таңһылыу Ҡарамышева.** Ҡарыһүҙ серҙәре. Дастан. ...16
**Гөлназ Ҡотоева.** «Күңел биҙмәй яҡты яҙҙарҙан...» Шиғырҙар. ...31

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Әхмәр Гүмәр-Үтәбай.** Эстафета. Хикәйә. ...44
**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Миңә Париждан алып ҡайт…
Хикәйә ...55
**Спартак Ильясов.** Сөкәк. Хикәйә. ...75
**Зифа Ҡадирова.** Һағынырһың – мин булмам. Повесть.
Дауамы. ...99

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Мөғлифә Үтәшева.** Хыялдарым минең; **Гөлкәй Исмәғилева.**
Изге ер; **Зөһрә Сафина.** Аҡ нур. Шиғырҙар. ...129

КӨНДӘЛЕКТӘР

**Рауил Бикбаев.** Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер... Дауамы. ...138

*“Ағиҙел”гә – 90 йыл*

Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
**Фәнил Күзбәков.** Алдынғы әҙәбиәт – йәмғиәттәге
ҡараштар сағылышы. ...162

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Тәүгеләрҙең береһе
*(Прозаик Закир Һаҙиҙың тыуыуына – 150 йыл).* ...177
**Әхмәт Мәхмүтов.** Ҡыҫҡа жанр оҫтаһы
*(Шакир Насировтың тыуыуына – 100 йыл).* ...181
**Фәнил КҮЗБӘКОВ.** Яугир шағир, ҡоласлы прозаик,
алыштырғыһыҙ мөхәррир.
*(Хәким Ғиләжевтың тыуыуына – 90 йыл).*
**Хәким ҒИЛӘЖЕВ.** Һәйкәл ҡуйыр инем. Шиғырҙар. ...182

ПУБЛИЦИСТИКА

**Рим Гәрәев.** Һөнәрҙе тыуған ерендә тапты. ...188

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*«Агидель» — 90*

**И. Киньябулатов.** Посвящение.

ПОЭЗИЯ

**А. Тагирова, Т. Карамышева, Г. Кутуева.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Ахмер Гүмер-Утябай.** Эстафета;
**Ф. Акбулатова.** Привези мне с Парижа;
**Спартак Ильясов.** Инвалид поневоле. Рассказы.
**З. Кадырова.** Затоскуешь по мне... *Повесть. Продолжение.*

ТВОРЧЕСТВО ЧИТАТЕЛЕЙ ЖУРНАЛА

**М. Утяшева, Г. Исмагилова, З. Сафина.** *Стихи.*

ДНЕВНИКИ

**Р. Бикбаев.** Жизнь проходит, а память остаётся. *Продолжение.*

*«Агидель» — 90*

*Художественная литература: мечта, реальность, требование жизни.*
**Ф. Кузбеков.** Высокохудожественная литература — отражение общественных взглядов.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**М. Надергулов.** Был одним из первых
*(150 лет со дня рождения Заки Хадыя).*
**А. Махмутов.** Мастер короткого жанра
*(100 лет со дня рождения Ш. Насырова).*
**Ф. Кузбеков.** Поэт-фронтовик, маститый прозаик, замечательный редактор *(90 лет со дня рождения Х. Гиляжева).*
**Х. Гиляжев.** Воздвиг бы памятник. *Стихи.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Гареев.** Нашел себе призвание на малой родине.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Ирек
КИНЙӘБУЛАТОВ

# ҺУЛАР ҺАУА, ЭСӘР ҺЫУ ҺЫМАҠ

*Әйтеп, һөйләп бөтөрлөк тә түгел,*
*Утлы уйҙар тулған башыма:*
*Эй, ҡәҙерле журнал, һин бит беҙгә*
*Аңлатып та булмаҫ машина.*

*Унда – меңйыллыҡтар хазинаһы,*
*Меңйыллыҡтар аңы өйөлгән;*
*Күпме быуат халыҡ кисергәне –*
*Күпме янып, күпме көйөлгән.*

*Икмәк һымаҡ, һауа һымаҡ кәрәк,*
*Сарсағанда эсәр һыу һымаҡ.*
*Рухта зилзиләләр ҡупҡан саҡта,*
*Кәрәк ҡулға тотор тыу һымаҡ.*

*Һинең юлың шундай һикәлтәле –*
*Башҡорт юлы, башҡорт тарихы;*
*Әле нимәләрҙе күрәһе бар,*
*Әле нимәләргә тарыйһы.*

*Унда – күпме хыял осоштары,*
*Иң яралы йылдар аһы ла;*
*Сират күперҙәрен үтеү юлын*
*Үткәргәне халыҡ ҡайһылай.*

*Оло йөктә уй өйөлөп килә,*
*Ул, әйтерһең, зиһен ояһы.*
*Уны күрһәң, офоҡ киңәйә лә,*
*Унда таяныс та тояһың.*

*Был машина шундай етеҙ елә,*
*Дүрт тарафҡа ҡарай фараһы.*
*Ул яҡтырта барлыҡ әйләнәне,*
*Оҙын быуаттарҙың араһын.*

*Аҡһаҡалдың күҙе менән ҡарай,*
*Төплө уйлап, һәр көн заманға;*
*Олатайҙар ҡыуған хаҡлы юлдар*
*Боролмаһын өсөн яманға.*

*Милләт йөҙөн юғалтмаһын өсөн,*
*Телен нисек имен һаҡларға;*
*Бар булмышын тулы күрһәтергә,*
*Ер йөҙөндә үҙен аҡларға.*

*Оло юлда, оло ғәмәлдәрҙә*
*Ҡеүәтләнһә һәр саҡ һүҙебеҙ,*
*Тиңдәр менән һәр саҡ бер тиң булып,*
*Мәңге раҫланырбыҙ үҙебеҙ.*

## РӘСӘЙ ЯҘЫУСЫЛАР БЕРЛЕГЕ

### ИДАРА

119146, Мәскәү, Комсомол проспекты, 13

### ТЕЛЕГРАММА

*Рәсәй Яҙыусылар берлеге идараһы Һеҙҙе – редакция коллективын, журнал авторҙарын һәм уҡыусыларҙы «Ағиҙел»дең тәүге һаны сығыуға 90 йыл тулыуы менән ҡотлай!*

*Бына быуатҡа яҡын инде «Ағиҙел» башҡорт милли мәҙәниәтенең һәм теленең художество традицияларын һаҡлаусы булып сығыш яһай. Журнал эшмәкәрлеге арҡаһында уҙған туғыҙ тиҫтә йыл дауамында башҡорт әҙәбиәте әүҙем үҫеште. Унда Мәжит Ғафури һәм Һәҙиә Дәүләтшинанан алып Мостай Кәрим менән Зәйнәб Биишева кеүек талантлы башҡорт шағирҙары һәм прозаиктарының иң яҡшы әҫәрҙәре донъя күрҙе. Шуға күрә лә Һеҙҙең журналды бәгзе саҡта «башҡорт әҙәбиәтенең йылъяҙмаһы» тип атайҙар икән, был һис тә осраҡлы хәл түгел. Беҙҙең көндәрҙә лә «Ағиҙел» тәрән етди фекерле, замандаш яҙыусылар өсөн бына тигән һыйыныр урын булып ҡала, сөнки ул алыш-бирешкә ҡоролған түбән сифатлы әҫәрҙәр менән мауыҡмай.*

*Журналда һәр саҡ Пушкиндан алып Шукшинға бәрәбәр урыҫ классикаһын, шулай уҡ донъя әҙәбиәтенең иң яҡшы өлгөләрен тәржемә итеп баҫыуға иғтибар кәмемәй.*

*«Ағиҙел» журналы коллективын һәм уның бихисап авторҙарын киләсәктә лә зауыҡлы уҡыусыларыбыҙҙы Башҡортостан һәм Рәсәй хаҡына яңы әҫәрҙәр, ҡыҙыҡлы публицистик мәҡәләләр менән киләндереүҙе теләйбеҙ.*

*Һәммәгеҙгә лә – ныҡлы һаулыҡ, илһам, ижади асыштар!*

**Рәсәй Яҙыусылар берлеге**
**идараһы рәйесе** **Валерий ГАНИЧЕВ.**

**Идараның беренсе сәркәтибе** **Геннадий ИВАНОВ.**

450076, Өфө, Коммунистик урам, 34

**ТЕЛЕГРАММА**

*Хөрмәтле «Ағиҙел»селәр!*

*Журналдың мөхтәрәм мөхәрриәте!*

*Ғәҙәттә, йылғаларҙың исеме быуаттар буйы үҙгәрмәй... Башҡортостаныбыҙҙың төп йылғаһы атамаһын аҙаш иткән «Ағиҙел» журналы ла бына ярты быуат инде ошо шағирәнә исем аҫтында сығып килә. Хикмәт исемдә лә түгел, ә баҫманың асылында: «Яңы юл», «Белем», «Сәсән», «Үктәбер», «Әҙәби Башҡортостан», «Ағиҙел» – шаңдау кеүек яңғыраған был һүҙҙәр үҙҙәре үк республикабыҙҙың тарихи йылъяҙмаһын, этнокультурологик балҡыштарын, иң мөһиме, әҙәби-мәҙәни ҡаҙаныштарын сағыу күҙаллата. «Ағиҙел»де һис икеләнмәйсә үҙебеҙҙең татыу яҙыусылар ғаиләһенең ҡорос һандалына сағыштырырға мөмкин. Ысынлап та, журналда сүкелеп-баҫылып сыҡҡан сәсмәүер, нур бөрккән аҫыл шиғриәт, сәхнәүи әҫәрҙәр, осҡонло публицистика, фәһемле юмор, сәнғәти аҙмалар нисәмә быуындың рухиәтен илһамландырҙы һәм күңелен зауыҡландырҙы. Иң ҡыуандырғаны шул: «Ағиҙел» ул абруйлы мәктәп, йәш яҙыусыларҙың остазы һәм тәрбиәсеһе. Быныһы инде – хәҙерге заманда айырыуса маҡтаулы бурыс, журнал иһә ошо бурысты үтәүгә тос ижади көсөн түгә.*

*«Ағиҙел» ғүмер баҡый Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының ышаныслы таянысы, алыштырғыһыҙ уң ҡулы, ижади эшмәкәрлегенең көҙгөһө булды, киләсәктә лә ғәзиз баҫмабыҙҙың ошо ҡиблаларҙан тайпылмаҫына иманым камил. Тотош редакция коллективын, уның ветерандарын, журнал йөҙөндә мең-мең әҙәбиәт һөйөүселәрҙе, йөҙәрләгән авторҙарҙы, бихисап почта хеҙмәткәрҙәрен иҫтәлекле дата – журналдың 90 йәше менән ихлас йөрәктән ҡотлайым.*

*Хаҡ юлда халыҡҡа аҡ һүҙ еткереүҙә Һеҙгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт һәм ҡеүәт теләйем!*

**Башҡортостандың қәләм оҫталары исеменән**
**Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе** **Риф ТОЙҒОНОВ.**



**Әнисә**
**ТАҺИРОВА**

## *Шиғриәттә мин ябай бер йырсы...*

*Бала саҡта,*
*Бесән ваҡытында,*
*Туғандарым алыҫ туғайҙа*
*Бесән сапһа,*
*Тау һуҡмағын үтеп,*
*Аҙыҡ илтә инем уларға.*

*Оло юлға һис тә төшмәй инем,*
*Тау юлымы мине арбаған?*
*Ылаусылар унан үтһәләр ҙә,*
*Урын теләнмәнем арбанан.*

*Төйөнсөгөм ҡыҫып тотҡан килеш,*
*Текә тау юлынан мин үтәм.*
*Тау юлында, урман ҡосағында*
*Азат инем ҡурҡыу, өркөүҙән.*

*Туҡ-туҡ килә тилбер тумыртҡалар,*
*Ҡаршы ала ҡоштар сутылдап.*
*Урман сәскә һона,*
*Юлдарыма*
*Терпе килеп сыға тыпылдап.*

---

*Әнисә Таһирова (1941) Ишембай районы Маҡар ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияһында, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһында, мәктәптә эшләй. Ике тиҫтәнән ашыу китап авторы.*

*Ҡараҡайҙы төйәк иткән тейен,*
*Ялт-йолт килеп, миңә күҙ ата.*
*Ялбыр, аҡ ҡайындар шыбырлашып,*
*Тәлгәштәрен болғап оҙата.*

*...Әйҙәне гел сихри шиғыр, ләкин*
*Әүрәтмәне әҙер арбалар.*
*Үҙ һуҡмағым менән йәйәү килдем*
*Шиғыр тигән тиңһеҙ даръяға.*

*Әүрәтмәне мине дан аттары,*
*Бейемәнем «көслө» алдында.*
*Шуғалыр ҙа бик йыш таш аттылар,*
*Бик йыш ҡалдым утта, ялҡында.*

*Ләкин елкәнемде үҙем ҡорҙом,*
*Үҙем күтәрелдем тауҙарға.*
*Оло юлда әҙер арба көтөп,*
*Тырышманым шөһрәт яуларға.*

*Барам әле күнегелгән юлдан,*
*Дан атына ҡараш атмайым.*
*Шиғриәттә мин бер ябай йырсы,*
*Һуҡмағымдан йәйәү атлайым.*

## *Зәңгәрсүк*

Әсәйем Нәғимә Хажиеваның
яҡты иҫтәлегенә бағышлайым

*Урман гөлдәренең араһында*
*Табып булмай һине, зәңгәрсүк.*
*Әсәй төҫө булып ҡалғанғамы,*
*Һинән башҡа йәнгә йәмдәр юҡ.*

*Ул бит — ҡый үләне, тиһәләр ҙә,*
*Миңә шундай яҡын зәңгәрсүк.*
*Бала сағым илдәренән балҡый*
*Әллә йондоҙ, әллә зәңгәр ут.*

*Хәтеремдә, иген баҫыуында*
*Көлөп баға ине зәңгәрсүк.*
*Ал таңдарҙа зәңгәр тажын биҙәп,*
*Ҡаймалана ине саф ысыҡ.*

*Үҙе әллә етем үҫкәнгәме,*
*Һөйҙө әсәй ошо сәскәне.*
*Күрә инем сәскә-гөл орлоғон*
*Үҙ ҡулдары менән сәскәнен.*

*Әсәй күптән бакый донъяларҙа,*
*Уны иҫләмәгән мәлдәр юҡ.*
*Баҡсаһында ҡалды иҫтәлеккә*
*Зәңгәр утрау булып зәңгәрсуҡ.*

*Бала сағым иле — гөлдәр иле,*
*Гөл-сәскәһеҙ ерҙә йәмдәр юҡ.*
*Ул илдәрҙән әсәй менән йәнәш*
*Көлөп баға миңә зәңгәрсуҡ.*

## Һәр Яңы йыл шатлык алып килә...

Иң хәтәр йылан йылында — 41-се
йылда тыуғандарға бағышлайым

*Һәр Яңы йыл шатлыҡ алып килә,*
*Гүйә, балҡый йондоҙ сатҡыһы.*
*Һәр бер өйҙә ылыҫ еҫе аңҡый,*
*Ҡыуандыра күктәр сафлығы.*

*...Йылан йылы бик үк еңел булмаҫ,*
*Беҙ беләбеҙ уны, туғандар.*
*Беҙ бит фажиғәле ҡырҡ берҙең*
*Ҡара көндәрендә тыуғандар.*

*Беҙ тыуғас та, шатлыҡ гөлдәренең*
*Алһыу сәскәләре һулыған.*
*Ярһып илағанбыҙ,*
*Әсәйҙәрҙең*
*Күкрәгендә һөтө ҡороған.*

*Хоҙай беҙҙе кеше күңелдәрен*
*Имләр өсөн ерҙә яралтҡан.*
*Шуғалыр ҙа беҙҙең зиһендәргә*
*Ҡара төндө ярыр нур яҡҡан.*

*Булды, булды зәһәр йыландарҙың*
*Ымһындырғыс алма һуҙғаны.*
*Саф һыуҙарға ҡара ыуын сәсеп,*
*Юлдарҙы ла ҡыйып уҙғаны.*

*Юлыбыҙҙа ҡат-ҡат борғолаnып,*
*Ҡурҡыу һалғанда ла йәндәргә,*
*Беҙ күктәрҙән тик яҡтылыҡ алдыҡ,*
*Ғашиҡ булдыҡ ерҙә йәмдәргә.*

*Шуға беҙ, кешеләр, ситкә атып*
*Борғоланған йылан ағыуын,*
*Алдыҡ бары уның халҡыбыҙға*
*Һәр саҡ шифа булыр дарыуын.*

*Икмәк бары төшкә кергәндә лә,*
*Юлды ҡаплаһа ла боҙлауыҡ,*
*Йылан үәсүәсәһен ситкә аттыҡ,*
*Йылан алмаһына ҡыҙманыҡ.*

*Беҙ һиҙгер һәм ҡай саҡ үсал булдыҡ —*
*Йылан йылдарында тыуғандар.*
*Йылан арбауына ҡапмас өсөн,*
*Шулай кәрәк ине, туғандар.*

*Маяҡ булһа әгәр юлыбыҙҙа*
*Иман, намыҫ, аҡыл яҡтыһы,*
*Бер ни юймаҫ, тоноғайта алмаҫ*
*Яңы йылда ҡайтҡан шатлыҡты.*

* * *

*Елбәҙәкләп йондоҙ-ҡарҙар яуа,*
*Барлыҡ донъя аҡҡа төрөнгән.*
*Әйтерһең дә, ап-аҡ ҡарҙар булып*
*Бәхет, ырыҫ яуа күгемдән.*

*Бәхет, ырыҫ ауа күктәремдән,*
*Ерем яралары уңалыр.*
*Емелдәшеп яуған ҡар-йондоҙҙан*
*Күңелдәрҙә яҡты моң ҡалыр.*

*Яҙын ерем балҡып күҙен асыр,*
*Эсеп аҡ ҡарҙарҙың аҡ һыуын.*
*Төркөм-төркөм күсәр ҡоштар ҡайтыр,*
*Тойоп еребеҙҙең балҡыуын.*

*Хуш-еҫ бөркөп муйыл сәскә атыр,*
*Яңы көйҙәр көйләр йылғалар.*
*Һандуғастар шаңҡығансы һайрап,*
*Күңелдәргә кереп оялар.*

*Әллә ниндәй сихри хыялдарға*
*Сорнай аҡ йондоҙҙар сәсмәһе.*
*Әйтерһең дә, һарый тәҙрәләргә*
*Ҡышҡы таңда муйыл сәскәһе.*

## *Аҡ боландар булһын юлдашың!*

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы
Ноғман Мусин ағайға

*Мусин Ноғман,*
*Бар яҙмышы — урман!*
*Урман өсөн көрәш, артылыш!*
*Сағраларҙы ярып үткәс кенә,*

*Сағыл баштарына еткәс кенә,*
*Офоҡтарын аса нур-балҡыш.*

*Мусин Ноғман,*
*Мөхәббәте — урман!*
*Унда зәңгәр тауҙа — аҡ болан.*
*Һикәлтәле юлдар үтеп, әҙип*
*Аҡ боланлы тауға артылған.*

*Мусин Ноғман,*
*Йәнәшәлә урман*
*Йөҙәр саҡрым булып һуҙылған.*
*Шул саҡрымдар уның күңеленә*
*Һағышлы моң булып уйылған.*

*Һағышлы ла булмаҫ ине ул моң,*
*Талана шул ерем урманы.*
*Шуғалыр ҙа ярһып туҙыналыр*
*Уралымдың ҡырыҫ бураны.*

*Мусин Ноғман,*
*Ҡәләм уға — ҡалҡан!*
*Әйтерһең, ул әкиәт батыры!*
*Әҫәрҙәрен уҡып, кешеләрҙең*
*Күңелдәре үҫте, яҡтырҙы.*

*Әле әҙип,*
*Сағраларҙы ярып,*
*Тауҙар түбәһенә артылған.*
*Был бит беҙҙең Мусин Ноғман, тиеп*
*Текләп ҡарап тора аҡ болан.*

* * *

*Һәр Яңы йыл килеп еткән һайын,*
*Арта һағыштарым, аһтарым.*
*Инде килмәй һинең сәләмдәрең,*
*Инде килмәй һинең хаттарың.*

*Ҡайһылай ҙа ихлас, яҡты ине*
*Теләктәрең, таңғы нур кеүек.*
*Биләнең һин күңел түрҙәремде,*
*Һыҙылып аҡҡан моңло йыр кеүек.*

*Бер-бер артлы елеп йылдар үтте,*
*Ярға ҡаҡҡан тулҡын шикелле.*
*Ағылды моң бикле сиктәренән*
*Күҙ яҙҙырмаҫ Совет иленең.*

*Инде биктәр ҙә юҡ, сиктәр асыҡ,*
*Тынды моңоң, тынды тауышың.*
*Ахыры, ысынлап та, Мәңгелектә*
*Һалҡын гүрҙәр менән ҡауыштың.*

*Тынмайынса аҡҡан өнһөҙ моңоң*
*Йөрәгемдә йәшәй һаман да.*
*Мин һағынам һинең хаттарыңды,*
*Сәләмеңде шаулы ҡаламда.*

## Һөйөү йәшәй!

*Шаңдаҡтарҙың уты һүнә бара,*
*Сәстәремә ҡырау һарылған.*
*Мине әсир иткән яҙ гөлдәре*
*Күптән кипкән, күптән һулыған.*

*Татлы бер төш кенә булып ҡалды*
*Яҙ йәшене, яҙҙар ләйсәне.*
*Уйҙарымды ҡамай көҙ һалҡыны,*
*Ҡулдарымда һағыш сәйләне.*

*Һандуғастар яҙғы сәләмеңде*
*Шат моңдарға ҡушҡан бүлһәләр,*
*Көҙгө таңда инде исемеңде*
*Һағыштарға сорнай торналар.*

*Торналар бер ҡайтыр,*
*Бары ҡайтмаç*
*Уртаҡ шатлыҡ яҙҙар үгенән.*
*Гәлсәр шишмә төçлө һөйөүебеҙ*
*Һағыш сүлдәренә күмелгән.*

*Ләкин күңелебеҙ күлдәрендә*
*Йәшәй һөйөү — мәңге үл тере.*
*Һөйөү юлын өҙгән бәндәләрҙең*
*Был тарафҡа үтмәй мәкере.*

*Һөйөүебеҙ Йыһандарға ашһа,*
*Сыңлай йондоҙҙарҙың моң-сазы.*
*Мәкер ауын упҡындарға атып,*
*Ҡаршы ала Йыһан ҡосағы.*

*Мәкер упҡындарҙа борғолана,*
*Шаша, һаҙлыҡтарҙы эркелтеп,*
*Күктәр күкрәгендә йондоҙ булып*
*Һөйөү йәшәй, һөйөү — мәңгелек!*

## Ҡисер мине, кисер, күбәләгем!

*Күрмәйенсә, белмәйенсә, ҡапыл*
*Мин бер күбәләктең йәнен ҡыйҙым.*
*Әйтерһең дә, моңһоу йөрәгемә,*
*Өҫтәп, тағы ла бер яра уйҙым.*

*Ҡыҙыл биҙәк төшкән ҡанатына,*
*Оҡшап тора яҙғы сәскә-гөлгә.*
*Шуға мәллә килеп уралған ул*
*Минең ал биҙәкле күлдәгемә.*

*Ә мин, бер ни тоймай, күрмәйенсә,*
*Күлдәгемде йыуырға тип һалдым...*
*Бына ята минең алдарымда*
*Ваҡытынан алда һүнгән ялҡын.*

*Ҡанаттары һынған шул күбәләк*
*Тере ҡуҙҙай яна устарымда.*
*Әрнеү булып һарҡый йөрәгемдән*
*Күҙ йәштәре керпек остарымда.*

*...Бала саҡтан алып,*
*Мине күрһәң,*
*Алдарымда күпме сүгәләнең.*
*Ғүмереңде һаҡһыҙ өҙгән өсөн,*
*Ҡисер мине, кисер, күбәләгем!*

## Моңло миләш

*Бала саҡтан яҙмышымда*
*Моңло миләш.*
*Моңло миләш минең менән*
*Һәр саҡ йәнәш.*

*Ул миләште бүләк итте*
*Миңә Маҡар.*
*Миләштәрҙән ялҡынланды*
*Хатта аҡ ҡар.*

*Нурлы Мәскәү Маринаны*
*Миңә асты.*
*Миләштәрҙе тағы нығыраҡ*
*Ялҡынлатты.*

*Хәҙер һәр саҡ йәнәш йөрөй*
*Минең йырҙа*
*Моңло миләш,*
*Маҡар, Мәскәү*
*Һәм Марина.*

* * *

Талантлы шағир, ғалим Вафа Әхмәҙиевтың
75 йыллығы үҙе уҡыған Маҡар мәктәбендә үткәрелде

*Ҡайтып киләм ҡәләмдәштәр менән,*
*Йәнгә ғәзиз Маҡар ҡаршылай.*
*«Бик көттөрөп ҡайттың...» — тигән кеүек,*
*Селтербейтау әйҙәй ҡаршыла.*

*Мәктәп юлы...*
*Был ҡәҙерле юлдан*
*Ун йыл буйы күпме үтелгән!*
*Күпме уйҙар бында тағатылған,*
*Күпме хыял бында һүтелгән.*

*Һабаҡташтар инде олпат йәштә,*
*Бик күптәре ситкә таралған.*
*Хәтирәләр генә күңелдәрҙә*
*Шиңмәҫ сәскә булып яралған.*

*Һин дә, Вафа, аҡ хәтирә булып,*
*Күңел түрҙәрендә ҡалғанһың.*
*Сая рухлы, тура һүҙле булдың,*
*Һис булманы һинең ялғаның.*

*...Бына мин бәпкәләр көткән ерҙәр,*
*Таныш төбәк үтә күҙемдән.*
*Инде бында, саҡрымдарҙы уҙып,*
*Яңы, күркәм йорттар теҙелгән.*

*Бына Һикәҙегә илткән һуҡмаҡ,*
*Ул һинең дә булды уйыңда.*
*Бармы икән мин яратҡан аҡ таш*
*Моңло Һикәҙенең буйында?*

*Уҡый ине ҡыҙҙар һыу юлында*
*Һөйгәндәрҙең йырлы хаттарын.*
*Һин дә күҙләй инең бик йыш ҡына*
*Бер һылыуҙың һыуҙан ҡайтҡанын...*

*Үтә йылдар, арта юғалтыуҙар,*
*Күҙ йәштәрем тама, түҙем юҡ.*
*Маҡарыма рухың менән ҡайттыҡ,*
*Йырың менән ҡайттыҡ — үҙең юҡ.*



**Таңһылыу**
**ҠАРАМЫШЕВА**

# ҠАРЫҺЫҘ СЕРҘӘРЕ

## ДАСТАН

(“Урал батыр”эпосы мотивтары буйынса)

### *Өс донъяның берлеге*

*Башланғанбыҙ Уралдан беҙ —*
*Өс улдың атаһынан:*
*Яйыҡ, Нөгөш, Ағиҙелдең*
*Булабыҙ сатағынан.*

*Башланғанбыҙ Уралдан беҙ —*
*Өс батша кейәүенән:*
*Ҡатил, Әзрәҡә, Самрауҙың*
*Өс бөйөк төйәгенән.*

*Башланғанбыҙ Уралдан беҙ —*
*Иренән өс ҡатындың:*
*Гөлөстандан, Һомайғоштан*
*Һәм ҡыҙынан Ҡатилдың.*

*Тыуҙырған беҙҙе донъяға*
*Өс әсә, килен, кәләш.*
*Өс батшалыҡ һылыуҙары*
*Уралға йәнкәй-йәнәш.*

*Таңһылыу Ҡарамышева (1948) Бөрйән районы Байназар ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Оҙаҡ йылдар Башҡортостан матбуғатында, телевидениеһында эшләне. Байтаҡ шиғри йыйынтыҡтар авторы. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты.*

*Башланғанбыҙ Уралдан беҙ.*
*Тоҡомобоҙ йыраҡтан:*
*Ерҙең аҫты, өҫтө, күктән —*
*Хасилбыҙ өс тарафтан.*

*Өс батшалыҡ балаһы беҙ,*
*Өс донъяның берлеге!*
*Хәтер шулай һөйләп тора*
*Ҡешелектең кемлеген.*

## *Үҙгәреш*

*“Урал алға сапҡан, ти,*
*Аты диңгеҙ ярған, ти.*
*Аты барған урында*
*Ҙур тау ҡалҡа барған, ти”.*

*Был тауҙарҙың диңгеҙ булғанлығын*
*Белмәй әҙәм,*
*Белә тик таштар,*
*Үле һыуҙар һәм дә тере һыуҙар,*
*Аҫылташтар, тупраҡ, ҡурғаштар.*

*Ниҙән өйөлгәнен был тауҙарҙың*
*Хәтерләйҙер, тимен, Буҙаттар,*
*Ирәмәлләп сапҡан, ҡырҡа ярған*
*Тутыҡмаҫ һәм һынмаҫ булаттар.*

*Ниҙән төҙөлгәнен яңы ерҙең*
*Иҫләй Ирәмәлдәр, Ҡырҡтылар,*
*Ямантауҙар менән Янғантауҙар —*
*Диңгеҙ төбөндәге ятҡылар.*

*Был тауҙарҙан нимә ҡаласағын*
*Әҙәм белмәй.*
*Белә тик Алла.*
*Ул — төҙөүсе!*
*Ул уҡ — емереүсе!*
*Диңгеҙҙәрҙән тауҙар асала!*

*Үҙгәртала ул бит ҡотоптарҙы,*
*Ҡоро ерҙән яһай дарғяны.*
*Йәшәй ала, ижад итһә генә —*
*Үҙгәрталһа ғына донъяны!*

## Йылҡысыҡҡан*

“Үҙ тылсымым яһаған
Диңгеҙемдең ҡалдығы”.

*Ғәжәп күл ул Йылҡысыҡҡан!*
*Һыу сыҡҡан был урындан.*
*Йылҡы — йылға тигән һүҙ ул,*
*Һыу тигән һүҙ борондан.*

*Донъя һыуҙан сыҡҡан, тиеп*
*Инанған баш бабалар.*
*Һыуҙан сыҡҡан ҡоро ерҙәр,*
*Һыуҙан сыҡҡан һауалар.*

*Ер менән күк айырылған,*
*Һыу барлыҡҡа килгән һуң.*
*Һыу иң тәүҙәгеһе булған,*
*Ҡалған нәмә — һүлдән һуң.*

*Ҡалған барлыҡ бүтән нәмә*
*Аҙаҡ килгән барлыҡҡа.*
*Һыу яралтҡан, һыу тыуҙырған,*
*Сыҡмаған һыуҙар юҡҡа!*

*Ҡарап торам Йылҡысыҡҡан*
*Күлгә, таңға ҡалыптар —*
*Донъяларҙың һыуҙарынан*
*Тороп ҡалған ҡалдыҡҡа...*

## Йыһан упҡыны

“Бер ҡулҡының янында...
Ғәләмәт ҙур бер йылан...”

*Төбө лә юҡ, яры ла юҡ,*
*Икһеҙ-сикһеҙ бөйөк йыһан.*
*Үҙ ҡойроғон үҙе тешләп,*
*Бөгәрләнеп, дуғаланып,*
*Ята унда ҡара йылан.*

*Яҡты ла юҡ, ваҡыт та юҡ*
*Ҡара йырыҡ* — был ышыҡта.*
*Дәү балыҡҡа әүерелеп,*
*Ҡояш ҡыҙын йотоп ятҡан*
*Зәрҡүм йоҡлай был бушлыҡта.*

---

*Бөрйән районындағы күл.

*Черная дыра — һәр егерме алты мең йыл һайын Ер беҙҙең галактиканың уртаһындағы космик объекттарҙы үҙенә йотоусы бушлыҡҡа яҡыная.

*Тик ашыҡма ғәйепләргә*
*Йыһандағы ҙур йыланды:*
*Ауыҙын ул шар асыр ҙа,*
*Мәле еткәс, кире ҡоҫор*
*Үҙе йотҡан бар донъяны.*
*Һәм ғәләмдең яралмышын*
*Ошо йылан белһә белер:*
*Ҡояш ҡыҙын кире сөйөр!*
*Үҙе биргәнде алған ул,*
*Үҙе алғанды ул бирер.*
*Бирер!*

## *Яуап*

“Ҡиң диңгеҙҙең өҫтөндә
Тау барлыҡҡа килгән, ти”.

*Торатау әле тормаған,*
*Ятып торған сағында,*
*Түбәләр төп булған мәлдә*
*Өҫтөң түбән яғында,*

*Туфан сығып, диңгеҙҙәрҙең*
*Аҫты өҫкә килгәндә,*
*Ерҙәр һыуға күмелгәндә,*
*Өҫтәр аҫка иңгәндә,*

*Һыуҙан тауҙар күренгәндә,*
*Төптәр түбә булғанда,*
*Уралтауҙар күккә ашып,*
*Торатауҙар торғанда,*

*Пәйғәмбәрҙең ҡайығында*
*Ҡешелек ҡотолғанда,*
*Тереклек тере ҡалғанда,*
*Йәшәргә ынтылғанда,*

*Башланған яңы донъябыҙ*
*Бергә иҫкеһе менән:*
*Иҫке тереклеге менән,*
*Иҫке кешеһе менән.*

*Иҫке һыуҙары диңгеҙҙең*
*Яңы ярға ташланған.*
*Иҫке терек нигеҙендә*
*Яңы тормош башланған.*

*Өр-яңынан туфан сығып,*
*Утлы дауыл иҫкәндә,*
*Аҫтар өҫкә ҡалҡҡанында,*
*Өҫтәр аҫка киткәндә,*

*Иҫән ҡала алыр микән*
*Ҡабаттан был иҫкелек?*
*Был еребеҙ мәңгелекме?*
*Мәңгелекме кешелек?*
*Иҫкереп бөткән донъябыҙ*
*Яуызлыҡ менән тулһа,*
*Һәләкәттән ҡалмаҫ әҙәм,*
*Яңы тереклек тыуһа!*

## Йолалар

“Яуызлыҡты дан яһап,
Яҡшылыҡты хур яһап...”

*Муйынына таштар бәйләп,*
*Ҡойоға ҡыҙ һалғандар.*
*Тәңре өсөн ҡорбанға тип,*
*Тотоп әҙәм салғандар.*

*Әҙәм әҙәмдәшен ейгән,*
*Яуызлыҡты дан яһап,*
*Күк аҫтында, ер өҫтөндә*
*Йылға-йылға ҡан яһап.*

*Кешелекте кесе яһап,*
*Йыртҡыслыҡты ҙур яһап,*
*Ҡанлы туйҙар үткәрелгән,*
*Яҡшылыҡты хур яһап.*

*Хурлы шөһрәткә күмелгән*
*Борон-борон замандар.*
*Баш ашаусы, ҡан эсеүсе*
*Замандар бит ямандар!*

*Аҡланыу юҡ ямanлыҡҡа,*
*Аҡланыу юҡ вәхшәткә:*
*Хатта Тәңре хаҡына ла*
*Ҡылынылған дәһшәткә!*

*Шәфҡәтһеҙлек, ҡанһыҙлыҡтан*
*Тарихтың бар яраһы:*
*Изге булмағаны өсөн*
*Изге маҡсат сараһы!*

## Ҡан

“Ҡан ҡыймылдай башланы,
Серҙе һөйләй башланы”.

*Ҡабил Һабилды үлтергән —*
*Туған туғанын үлтергән,*
*Кеше кешене үлтергән:*
*Ергә яуызлыҡ килтергән.*

*Ҡанундарҙы боҙған кеше —*
*Тыйылынған ҡанды эскән:*
*Дошманлыҡты ҡабул иткән.*
*Һуғыштарға барып еткән.*

*Ҡарайып бөткән яу ҡанын*
*Ҡоҙғон да эсмәй башлаған,*
*Ер ҙә күтәрмәй башлаған:*
*Фәрештә кешене ташлаған.*

*Ҡан ҡыймылдап киткән шул саҡ,*
*Табан аҫтында эркелеп:*
*Бысрап бөткән йәндәрен*
*Таҙартһын, тип, кешелек.*

*Ер тетрәнеп киткән шул саҡ,*
*Ҡорбан таптырған туфандар:*
*Татыулашһын, тип, туғандар,*
*Ҡан ҡоймаһын, тип, уландар.*

*Ҡан эсеүсе кешелеккә*
*Яуап бирер сәғәт еткән:*
*Әҙәм үҙен ҡотҡарһын тип,*
*Тәбиғәт тик сәбәп иткән.*

## ***Талап***

“Бөтә ерҙе һыу баҫты...
Барын тейәп ҡайыҡҡа,
Яңғыҙ үҙем яу астым”.

*Эй, Тәбиғәт,*
*Донъяларға һыу япҡанда,*
*Кешеләрҙән иттергәндер тәүбәләрен.*
*Һәм, яңынан яһап-фәлән тормаҫ өсөн,*
*Ҡайыҡ биреп, ҡотҡарғандыр бәндәләрен.*

*Ҡотол, тиеп, йәбеш, тиеп, мөмкинлеккә,*
*Батҡандарға биргәндер ул һаламдарын.*
*Зарарлыҡтар һеҙгә зарур түгел, тиеп*
*Еткергәндер хөкөмөнөң ҡарарҙарын.*

*Тереклекте ҡоротоуҙан баш тартың, тип,*
*Бел, тигәндер кешегә үҙ бағланышын.*
*Йәншишмәнән эсмә, тиеп аңлатҡандыр*
*Матди тәндең ни балсыҡтан яһалмышын.*

*Ғазаплайһы килгән меҫкен ҡолдарына*
*Һис булмаһа биргәндер ул оҙон ҡартлыҡ.*
*Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ бөтмәҫ ғүмер —*
*Һәм әйткәндер: шул буламы һеҙгә шатлыҡ?*

*“Туфан — яҙа!*
*Тотон тәүбә һаламына!*
*Ултыра һал мөмкинлектең ҡайығына!*
*Тарт үҙеңде үҙең батҡан вәхшилектән!*
*Бата күрмә фани донъя яҙығына!”*

*Талап итә бар Тәбиғәт боларынып,*
*Сик ҡуймаҡҡа әҙәм-йыртҡыс эштәренә!*
*Ҡотҡарырмы кешелекте йәнә ҡайыҡ?*
*Түңкәрмәҫме донъя һыуы эстәренә?*

## Нухыбыҙ

“Ҡайыҡ яһап, бар кеше
Һыуға батып үлмәгән”.

*Туфандарҙан кеше затын*
*Ҡотҡарыусы Нухыбыҙ!*
*Нух замандағы өмөтөбөҙ!*
*Нух замандағы ҡотобоҙ!*

*Шул йәшәтә беҙҙе һаман,*
*Йәшәтә шул рухыбыҙ.*
*Ахрызамандарҙан алып*
*Нух һаман да дуҫыбыҙ.*

*Хәтерләйбеҙ, онотмайбыҙ,*
*Юймайбыҙ иҫ-һушыбыҙ,*
*Һыуҙан ҡалған, уттан ҡалған,*
*Ғүмер биргән Нухыбыҙ!*

*Был нисәнсе ахрызаман?*
*Нисәнсе һыу-утыбыҙ?*
*Һаҡланырмы ҡотомобоҙ?*
*Ҡайҙа яңы Нухыбыҙ?*

*Яңы ҡайығыбыҙ бармы?*
*Торлағыбыҙ, йортобоҙ?*
*Булырмы һуң усыбыҙҙа*
*Ер табыусы ҡошобоҙ?*

*Йәншишмәне тереклеккә*
*Бөркөрмө һуң уртыбыҙ?*
*Ҡабырсаҡтан ҡан һемертмәҫ*
*Бармы изге ҡортобоҙ?*

*Һаҡланырмы кешелектең*
*Нухтан һуңғы — ошоһо?*
*Бармы уға ғәрәсәттең,*
*Һәләкәттең ышығы?*

*Үҙ ҡойроғон тешләй Ваҡыт:*
*Тамамлана особоҙ.*
*Осто осҡа бәйләп тора*
*Нухтан килгән рухыбыҙ.*

## Тәғәйенлек

“Ярым бушҡа туҙа, тиеп
Һис бер йылға аҡмаһа...”

*Ярым бушҡа туҙа, тиеп*
*Һис бер йылға аҡмаһа,*
*Емереләм, ыуалам, тип*
*Ҡая күккә ашмаһа,*

*Иреп, ағып бөтөрмөн, тип*
*Башына ҡар ятмаһа,*
*Яуынламаһа болоттар,*
*Йәшендәре атмаһа,*

*Дауыллауҙан ҡурҡам, тиеп*
*Елдәр әгәр иҫмәһә,*
*Кибәм, быуға әйләнәм, тип*
*Ергә ысыҡ төшмәһә,*

*Ҡыуарам, тип, ҡоройом, тип*
*Үҫемлектәр үҫмәһә,*
*Диңгеҙ йотор мине, тиеп*
*Тауҙан шишмә тиртмәһә,*

*Барыбер ҙә батырға, тип*
*Иртән ҡояш сыҡмаһа,*
*Барыбер ҙә һүнергә, тип*
*Ай-йондоҙҙар баҡмаһа,*

*Түлләнмәһә шыуышҡандар,*
*Аяғында йөргәндәр,*
*Бар осҡандар, бар йөҙгәндәр –*
*Ҡан йә үлән ейгәндәр –*

*Ваҡыт етер шул сағында*
*Был донъяға бөтмәгә!*
*Барыбер ҙә туҡтайым, тип*
*Йөрәгебеҙ типмәһә,*

*Барыбер ҙә үлергә, тип*
*Бер бәндә лә тыумаһа,*

*Илгә ҡаза килгәнендә*
*Бер батыр ҙа булмаһа,*
*Нимә булыр донъяға?*

## Окшашлык

"Тәңре тиһәм, кешеһең".

*Асмандарҙың бар ҡанаты:*
*Бер түгел, ә икелер.*
*Бер ҡанаты Тәңре булһа,*
*Бер ҡанаты Кешелер.*

*Был йыһанда уларҙан тыш*
*Бер нәмә лә ҡылынмай.*
*Кеше — Тәңре, Тәңре — Кеше*
*Булмайынса булынмай.*

*Тәңреһенә оҡшаш тейеш*
*Кешенең бит асылы.*
*Ошо хаҡта бәйән итә*
*Башҡорт "Урал батыр" ы.*

*Уйланмышы шул донъяның,*
*Йәшәйештең был сере:*
*Үҙенә тиң булһын өсөн*
*Яралтҡан Күк Кешене.*

*Тәңрегә тиң булмағандар*
*Кеше тиеп танылмаç.*
*Асмандарҙа хөкөм ғәҙел:*
*Бөйөктәргә яғынмаç.*

*Батырҙарға яғынмаç Күк —*
*Улар Тәңре ишеләр.*
*Был донъяны алға илтә*
*Тәңрегә тиң кешеләр.*

## Һомосапиенс

"Донъя ул бер баҒ икән,
Йән эйәһе донъяла
Бары үçемлек, гөл икән".

*Тәбиғәттә бер ни мәңге түгел!*
*Донъя баҡсаһында беҙ тик емеш.*
*Йөҙөмлөктә ваҡытлыса үçә*
*Һомосапиенс тигән енес.*

*Ҡасан да бер йылъаларъа ҡоя,*
*Тамам итә юлын һәр бер инеш.*

*Шулай тыңҙәрәкләй үҙ ғүмерен*
*Һомосапиенс тигән енес.*

*Барыһы тамам. Сәғәтебеҙ һуҡты.*
*Ҡанун шулай: һуғырға ул тейеш!*
*Юлын тыңҙәрәкләй аңлы кеше —*
*Һомосапиенс тигән енес.*

*Үҫемлектәй үҫкән тән өсөн тик!*
*Йән өсөн бит түгел бындай өлөш:*
*Был Йыһанда мәңге бары Хоҙай*
*Һәм Кешелек тигән генә енес.*

*Йыһан аңы һәм дә Кеше аңы*
*Был ғаләмдә ҡала мәңге килеш!*
*Сәсеп үҫтерелә ҡабат-ҡабат*
*Йәнен үҫтереүсе генә енес!*
*Кеше була алған ғына енес!*

## *Үрнәк*

“Уҫал йөрәгең бөтһөн,
Бәғерле йөрәк үҫһен”.

*Януарлыҡтан арындырып,*
*Хайуанлыҡтан бушатып,*
*Алла кешене яһаған*
*Үҙенә, ти, оҡшатып.*

*Үҫтергән ул аңыбыҙҙы,*
*Хисебеҙҙе үҫтергән.*
*Йөрәгебеҙҙе үҙенең*
*Өлгөһөнән күсергән.*

*Үрнәк түгел беҙгә кейек,*
*Үрнәк беҙгә тик Алла.*
*Йыртҡыстарға түгелсе һис,*
*Кешелеккә беҙ бала.*

*Тамыры менән йолҡабыҙ*
*Йөрәктән беҙ нәфрәтте.*
*Үҫтерәбеҙ мәрхәмәтте,*
*Үҫтерәбеҙ шәфҡәтте.*

*Рәхимләнә барабыҙ беҙ —*
*Үҫә беҙҙең йөкмәтке.*
*Камиллаша барабыҙ беҙ —*
*Үҫтерәбеҙ йөрәкте.*

*Юҡҡамы ни Алла беҙгә*
*Мөхәббәтен күсергән,*
*Ҡеше була алһын өсөн*
*Бәғер итен үҫтергән!*

## Юл саты

"Йылан илен үткән ир,
Уңдан һулға сыҡҡан ир".

*Юл сатына ҡуйған кешене Хоҙай:*
*Теләгәнең һайлап ал, тигән.*
*Үҙ хөкөмкәйҙәрең үҙ ҡулыңда,*
*Ни ҡылһаң да, хаҡың бар, тигән.*

*Ирек биргән ул бит бәндәһенә,*
*Юл һайларға ихтыяр ҡуйған.*
*Мөмкин ҡылған уға хаҡһыҙлыҡты,*
*Хаҡ юлды ла ихтимал ҡылған.*

*Үҙендә ни — шуны биргән уға.*
*Азатлыҡты биргән кешегә.*
*Бирмәгән ул уны фәрештәгә,*
*Бирмәгән уны иблисенә.*

*Һайлай кеше уңды, һайлай һулды —*
*Ни ҡылһа ла, ирке бар уның.*
*Күркһеҙлеге әммә яманлыҡта!*
*Тик яҡшыла күрке бар уның!*

*Утта янмай, һыуҙа батмай яҡшы.*
*Уңдан һулға мөмкин сығырға.*
*Уйланырға урын бар кешегә,*
*Юл сатында торған сағында.*

## Һомай

"Йәншишмәнең һыу юлын
Һеҙгә әйтеп китәйем"

*Йәншишмәнең юлын белә Һомай,*
*Сығанаҡты белә Алиһә.*
*Шул белемгә эйә булыр Урал,*
*Аулап уны, тотоп ал иһә.*

*Ауламаһа әгәр, аңламаһа*
*Терек серен Урал, йән серен,*
*Тороп ҡалыр мәңге аң шишмәһе*
*Дейеү илдәрендә йәшерен.*

*Белә Һомай үлемһеҙлек юлын,*
*Баҡыйлыҡтың ҡайҙан килгәнен,*

*Ҡүбәләктәй йәндең мәңгелеген,*
*Үле донъяларҙың Шүлгәнен.*

*Кеше көсөн белә был Алиһә,*
*Батырҙарҙың белә үткәнен,*
*Уртлаһа ла, йотмай, бар белгәнен*
*Ниңә улар ергә бөркҡәнен.*

*Кеше исеменә лайыҡ бәндә,*
*Эсмәгәндә генә аҡылын!*
*Шундайҙарға Һомай серҙәр аса,*
*Йөрәгенең бирә ялҡынын.*

## Үлемһеҙлек

“Ҡулыңдағы һуйылға
Күҙ йүгертеп ҡарасы!”

*Был һуйыл да ҡасандыр бер*
*Ергә тамыр йәйгәндер,*
*Имсәк имгән сабый төҫлө,*
*Ерҙең һөтөн имгәндер.*

*Башта орлоҡ булғандыр ул,*
*Шунан ағас булғандыр:*
*Япраҡтарын сәпәкәйләп,*
*Елгә шаулап торғандыр.*

*Ботаҡтарын ботаған һуң,*
*Әйләнгән ул һуйылға.*
*Утҡа һалһаң, ҡалыр ине*
*Көлгә йәки торонға.*

*Ерҙә ятып сереһә ул,*
*Ҡалыр ине туҙанға.*
*Тупраҡҡа аш булыр ине,*
*Ғүмер өҫтәп Уралға.*

*Әйләнә ул ала ине,*
*Төҙөп ҡуйһаң, ҡорамға.*
*Һуйыл итеп яһағанға*
*Әйләнгән ул ҡоралға.*

*Үлем юҡ ул! Бар ни бары*
*Әүерелмеш, әйләнмеш,*
*Берҙән икенсегә күсмеш,*
*Яңы рәүеш — төрләнмеш.*

*Уйланырға булдым әле*
*Мин дә, ҡарап һуйылға:*
*Үлемһеҙлек цлем аша*
*Аша икән бойомға!*

## ***Йән кейеме***

“Теләһәң ҡош булырһың,
Теләһәң ҡыҙ булырһың”.

*Ҡоштан ҡыҙға әүерелгән*
*Һомайҙар һәм Нәркәстәр*
*Тағы кемгә әйләнерҙәр,*
*Әҙәм тунын сискәстән?*

*Аҡҡош тунын сискән ҡыҙҙан —*
*Һомайҙан мин һораным*
*Кеше булырҙан да алда*
*Уның кемдәр булғанын.*

*Өйрәк тунын сискән ҡыҙҙы*
*Аңлай алмай баҙаным.*
*Әйтсе, һылыу, кемдән тыуҙың?*
*Әйтсе, бәндә, ҡайҙанһың?*

*Урмандағы йәнлектәрҙән,*
*Һыуҙа йөҙгән балыҡтан,*
*Ерҙә шыуышҡан йыландан,*
*Ҡуралағы тауыҡтан —*

*Серҙе сисмәк, тапмаҡ булып,*
*Мин инәлеп һораным:*
*— Асығыҙсы цткәндәрҙе —*
*Һеҙме әҙәм туғаны?*

*Һеҙме терек башланғысы?*
*Беҙ һуң кемдән сыҡҡанбыҙ?*
*Тарихыбыҙ диңгеҙендә*
*Кем ул тәцге сирҡанғыс?*

*Таң ҡалдым мин ҡарыһцҙгә*
*Йәшерелгән хаҡлыҡҡа:*
*Кеше тунын кейгән-сискән*
*Өйрәккә һәм аҡҡошҡа.*

*Бер тунда улар йәшәмәй,*
*Улар йәшәй кцп тунда.*
*Беҙ, кешеләр, кцп кейемде*
*Аңламайбыҙ ҡапылда.*

*Йән туны тик — был тәнебеҙ!*
*Шуны яңы тоябыҙ.*
*Йән ғүмерен төшөнгәндә,*
*Гүйә, ҡабат тыуабыҙ.*

*Кеше тунын сисәһеләр*
*Яҙған микән беҙгә лә?*
*Ниндәй яҙмыш әҙерләнгән*
*Йән кейеме — кәүҙәгә?*

*Яңырынған донъяларға*
*Ни рәүештә тыуырбыҙ?*
*Ышанайыҡ: теләһәк — ҡош,*
*Теләһәк ҡыҙ булырбыҙ.*

## Кеше аша

“Кеше аша алайыҡ”.

*Бер Алланың барлыҡ уйлағаны*
*Кеше аша аша бойомға.*
*Кеше теләктәре, хыялдары*
*Ғәмәлләшә, Алла бойорһа.*

*Ҙур йыһанда барлығы бер Алла*
*Һәм аңлы зат — ул тик Кешелер.*
*Аңлы йән эйәһе — Кеше генә!*
*Ҡалғандары кейек ишелер.*

*Тик бер генә торлаҡ Кешенеке,*
*Кешенеке — беҙҙең Ер шары.*
*Шул шар өсөн яна беҙҙең Ҡояш—*
*Беҙҙең күктең ҡайнар усағы.*

*Бүтән күктәр, бүтән йыһандарҙа*
*Юҡ кешеләр — аңға эйәләр.*
*Кеше аша бирелә бар ҡанундар,*
*Кеше аша төшә сүрәләр.*

*Пәйғәмбәрҙәр аша — изге китап!*
*Ҡанун тәүҙә күктә ярала.*
*Кеше аша һәм тик Кеше өсөн*
*Бирә уны берҙән-бер Алла.*

*Ни күрергә теләй был донъяла —*
*Кеше күҙе аша ул баға.*

*Ниндәй үрҙе ул алырға теләй —*
*Кеше аша ғына алала!*

*Кешенән тыш Алла — Алла түгел!*
*Кеше Кеше түгел Аллаһыҙ!*
*Кеше аша барлыҡ ҡылынмыштар!*
*Бүтән ҡыланыштар файҙаһыҙ...*

## Йыл йыланы

"Йылан, боланды йотҡас,
Шундуҡ бер егет булған".

*Үтеп китте тағы бер йыл.*
*Үтеп китте йыландай.*
*Йыл йыланы һәр саҡ юлда,*
*Сейәләнмәй, уралмай.*

*Сәйнәп йотто ул боланды,*
*Сәйнәп йотто айҙарҙы.*
*Һәр бер көнөн һәр бер айҙың*
*Ҡорһағына ауҙарҙы.*

*Йоттормай ҙа, ҡоҫтормай ҙа*
*Тамағында кипсәлгән*
*Болан мөгөҙөн дә йотто —*
*Йылан түгел иҫәрҙән.*

*Йотмаһа ваҡыт туҡтарын*
*Белә йылдың йыланы.*
*Бына уның тамағында*
*Һуңғы минут туланы!*

*Һуңғы секундҡаса йотто —*
*Йылан йылды ашаны:*
*Шундуҡ йәш егет булды ла*
*Яңы сәфәр башланы.*

*Йәш йыл сәйәхәт башланы!*
*Тағы бына күңелгә*
*Болан булып саҡырыусы*
*Йылан тауышы килә,*
*Ваҡыт ауазы килә...*



Гөлназ
ҠОТОЕВА

# «КҮҢЕЛ БИҘМӘЙ ЯҠТЫ ЯҘҘАРҘАН...»

## *Майай*

*Май –*
*Сәскәле ай,*
*Кәләш кеүек кейенгән аҡтан.*
*Әсәйемде хәтерләтә,*
*Ҡоштар ҡайта йылы яҡтан.*

*Атайым менән әсәйем*
*Ҡауышҡандар ошо айҙа.*
*Аҡ күлдәк кейгән кәләште*
*Оҡшатҡандар сыуаҡ майға.*

*Әсәкәйем донъя менән*
*Хушлашҡайны ошо айҙа.*
*Ҡәҙерләмә аҡ күлдәкте*
*Тектек ошо илаҡ майҙа.*

*Май,*
*Ярарға тырышһаң да,*
*Һис ирәмәҫ күңел һиңә.*
*Шау сәскәлә күкрәр донъя*
*Күҙ алдымда ҡапыл шиңә.*

*Гөлназ Ҡотоева (1974) Әбйәлил районы Ишҡол ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Шиғри йыйынтыҡтар авторы. Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты.*

Муйыл һыуығынан йәнем
Ҡырау һуҡҡан сәскә кеүек.
Эх, май, һин, май,
Ниңә аҡтан
Кейенәһең,
Бәгер телеп?

## Үткәндәргә – күпер

Иҫтә, иҫтә йырлап йөрөгәндәр,
Төпкөл урмандағы беҙҙең йәйләү.
Шул саҡтарға бөгөн ҡайтыр инем,
Мөмкин булһа, йүгерә-атлай йәйәү.

Талпынғанда күңел бейектәргә,
Хыял күге әйҙәй ине йыраҡ,
Мең ут тоҡанғайны йәнебеҙҙә,
Дөрләп ҡабынғайны беҙҙең сыраҡ.

Үҙебеҙ ҙә ихлас, саф инек тә
Көслө инек өмөт-ышаныстан.
Күңелемдә моң ҡанатын елпә –
Баҙрай үткәнемдән, их, Айыстан!

Уяныуын иртән сәскәләрҙең,
Шишмә сылтырауын тауҙан аҫта
Хәтеремә уйҙым мәңгелеккә,
Бәхетемә илтте йәйгор-баҫма.

Таңғы ысыҡ кеүек емелдәр мәл –
Елкәндәрем тарта шул тарафҡа.
Дауыл елен юлдаш итеп алам,
Минең хәҙер тик хәстәрҙәр башҡа.

Ерем өсөн янам, илем өсөн,
Иман менән уянһын бар халҡым.
Ожмахтарға тиң был Еребеҙҙе
Урап үтһен хәтәр елдәр, ялҡын.

* * *

Булмаһа Аллаһтың рөхсәте,
Һелкенмәҫ әҙәмдең бер сәсе.
Һеңгәҙәп киткәндә гәжәпкә,
Осраҡлы был хәл, тип һин әйтмә.

*Әҙәмгә һалған ул ихтыяр,*
*Ирекпә ҡуйып та ул һынар,*
*Тойҙортоп берлеген, барлығын,*
*Бер юлға илтә ул барыһын.*

*Кемделер ул һынай муллыкта,*
*Күренә ул гәмһеҙ булып та.*
*Тик…булмай бер хәл дә осраҡлы,*
*Был тормош ҡаралы һәм аҡлы.*

*Күнгәнде, сабырҙы ярата.*
*Саманы ул ипләп аңғарта.*
*Ҡайырһа юлдарын яҙыҡҡа,–*
*Таш була ул йотор аҙыҡ та.*

*Бойорһа, барыһы – Аллаһтан.*
*Әҙәмдең урыны – ожмахтан.*
*Һелкенмәҫ әҙәмдең бер сәсе,*
*Булмаһа Аллаһтың рөхсәте.*

## ***Бөгөн***

*Бер нәмә лә уйламаҫка,*
*Борсолмаҫка,*
*Борсолмаҫка.*
*Ҡараштарымды сәнскәнмен*
*Күккә түгел,*
*Бөгөн аҫка.*

*Тулҡын-тулҡын булып килә,*
*Уйҙар ябырыла башҡа.*
*Ғәмһеҙ генә ҡағылмамын*
*Алдыма ҡуйылған ашҡа.*

*Киләсәк өсөн борсолам,*
*Бәргеләнәм үткәнемдә.*
*Ҡараштарым һүрән генә,*
*Борсолоу уты йәнемдә.*

*Ҡапыл йәйелде ҡосағым!*
*Бөгөн йәшәр кәрәк,*
*Бөгөн!*
*Саҡ ҡына башың әйҙеңме,*
*Бөгөлөдөң һин,*
*Тимәк,*
*Бөлдөң.*

*…Бер нәмә лә уйламаҫҡа,*
*Ҡасмаҫҡа үҙемдән бүтән,*
*Ҡоштар тауышын тыңлайым,*
*Күҙемде алмайым күктән.*

## *Шағир*

*Һаҡ булығыҙ шағир менән:*
*Өҫтән ҡаса аҫҡа.*
*Аҫтан өҫкә ҡалҡып сыға*
*Сөңгөлдәрҙән, батмай.*

*Тыңлағыҙ һеҙ иғтибарлап,*
*Ҡапыл үҙен аҫһа,*
*Туҡ хәленән ғибрәт алыр,*
*Өлөш эҙләр асҡа.*

*Үҙ-үҙенә йомолдомо*
*Таштай,*
*Ваталмаҫһың.*
*Бер ҡараһаң – даръя бит ул,*
*Һала өҫкә аҫтын.*

*Шағир ҡулын кире һуҡма:*
*Унда – алтын асҡыс!*
*Күктең етенсе ҡатына*
*Терәгән ул баҫҡыс.*

## *Көнсөлгә*

*Яҫҡынғанда, шикәйәт яҙып,*
*Ҡурҡманыңмы рәнйештән?*
*Күҙ йәшенән,*
*Яҙыҡ эштән?*

*Әйләндереп килеп һуғыр,*
*Ҡаты йығыр*
*Үҙ көсөңдән,*
*Тип уйламаныңмы?*
*Үс-ҡороңдо үрткә яғып,*
*Еңеүеңде туйламаныңмы?*
*Хәҙер көт.*
*Бөгөн йә иртәгә*
*Үҙеңде ҡоротор.*
*Гел кирегә китер эштәрең.*
*Ут булып тамыр яраңа –*
*Рәнйештең йәштәре…*

## Оҡшаймын

*Меңәрләгән йондоҙ ябырылды*
*Аҫтан өҫкә!*
*Хисем ҡойоно.*
*Мин үҙем дә меңгә сәсрәнем дә*
*Кисергәйнем гәжәп тойгоно!*

*Мин үҙем дә уттай яндыраймын,*
*Бер осҡондан баҙлап янып барам.*
*Янмайынса йәшәр хәлдәрем юҡ,*
*Юҡтыр, ахры, минең бүтән сарам.*

*Хисем ҡойононда аҙашҡанда,*
*Үҙ-үҙемә мине табып биреш!*
*Мин ышанам:*
*Һиңә мин оҡшаймын*
*Нисек бармын, бына шулай килеш.*

## Июнь

*Ниһайәт, мин йәйҙе ҡабат тоям,*
*Нисә йылдар һағынып көткән йәйҙе.*
*Табындағы йәшел һуған йәмен,*
*Боҫ бөркҡән хуш еҫле был сәйҙе.*

*Ҡуҙғалаҡтың әскелт кенә тәмен,*
*Еләктәрҙең татын тоямын.*
*Мин яратҡан йәйҙәр кире ҡайтты,*
*Сыйырсыҡтар тапты ояһын.*

*Парлап осҡан күбәләктәр күрһәм,*
*Күңел тантанаһы кисерәм.*
*Был сәскәләр ергә бал тамыҙа,*
*Мин яҡтырам улар еҫенән.*

*Елдәр ҡосағында бер елкәнмен,*
*Еләҫ елдә рәхәт тирбәләм.*
*Ҡурай моңо килә киң сәхрәлә*
*Күкрәк киргән яҡты тирмәнән.*

*Күктә йөҙгән ап-аҡ болоттарҙы*
*Етеҙ елдәр ихлас ҡабартҡан.*
*Зөмрәт йәшел үлән – күҙгә рәхәт,*
*Йәй йәмдәрен тоям ҡабаттан.*

*Бөтәһе лә миңә тиклем булған,*
*Ҡабатланыр минән һуңда ла.*
*Тик бәхетте ваҡытында той ҙа*
*Бәхет өләшергә*
*Һуңлама!*

## Әүешкүлдә

*Бер әүлиә ята бында,*
*Тау йөрәге тапҡырында.*
*Уға тиеп ашҡыналар*
*Артылып мең саҡрымдар.*

*Яҙ бәреп сыҡҡан шишмәнең*
*Һәр тамсыһы шифа, дауа.*
*Яҡтыраҡ бында ҡояшы,*
*Дауа бында хатта һауа.*

*Артылалар тауға ныҡыш*
*Йәше-ҡарты.*
*Ихлас доға*
*Яҡтырта һәр кем күңелен,*
*Яҡшы кәйеф бында йоға.*

*Тауға менеп төшөү – бәхет*
*Һау-һаҡ, теүәл ағзалыға.*
*Гонаһтарҙы ғәфү итә,*
*Юлын аса ыҙалыға.*

*Әүешкүлдә йөҙгән утрау –*
*Асыл кисәккәйе Ерҙең.*
*Күл өҫтөндә – ике аҡҡош*
*Асҡысымы бөйөк серҙең?*

*Әүешкүлдә ике аҡҡош.*
*Мөғжизәгә – ихлас алҡыш.*
*Ғүмер сәйләнендә был көн*
*Торғаны бер үҙе –*
*Балҡыш.*

## Йондоҙ

*Рәми ағай,*
*Һөйләшкән бар,*
*Һыҙып-һыҙып*
*Эстән генә.*

*Инҡар итер ижадыңды*
*Рухһыҙ,*
*Манҡорт,*
*Мөстән генә.*

*Инҡар итер һүҙҙәреңде*
*Көсһөҙ,*
*Ярлы күңел генә.*
*Һоҡланыуҙар,*
*Был алҡыштар*
*Бөгөнгө көн, шағир, һиңә!*

*Тетрәндерә,*
*Алға әйҙәй*
*Сафландырып Рәми рухы.*
*Күңел шишмәң һайыҡмаһын, –*
*Рәми шиғырҙарын уҡы!*

*Дауамы ул һәр кемдә лә –*
*Ҡанатлы, илһамлы һүҙҙә.*
*Рәми – үҙе алыҫ йондоҙ,*
*Үҙе шундай яҡын, үҙ ҙә…*

## Һеңләмә

*Бүләк булһын кейгәнең,*
*Күстәнәстән – ейгәнең.*
*Шаһиты бул,*
*Яуызлыҡты*
*Изгелектең еңгәнен*
*Алҡышларға яҙһын һиңә*
*Ҡыуанып,*
*Үрә тороп.*
*Ауыҙыңа бал да, май ҙа,*
*Әсәң яһаған ҡорот!*
*Атаң һалып сыҡҡан өйҙә*
*Иркә булып ғүмер ит!*
*Һөйөп, һөйөлөп йәшәгән*
*Йәш, матур күренә бит!*
*Ишеңә илткән юлдарың*
*Булмаһын урау-урау.*
*Татлы төштәреңдән яҙһын*
*Һиңә изгелек юрау.*
*Бүләктән булһын кейгәнең,*
*Күстәнәстән – ейгәнең.*
*Бәхетле яҙмышы яҙһын*
*Һиңә һылыу еңгәнең!*

## Ҡалһын!

*Тулған Ай –*
*Йүргәген асып*
*Тулғанған бер бәпес –*
*Болот араһында ята,*
*Йомро ғына,*
*Йәтеш.*
*Бейеп китһәң –*
*Батмус. Еҙҙән.*
*Сиртәм, уймаҡ кейеп.*
*Нескә ҡылына йәнеңдең*
*Аңғармаҫтан тейеп,*
*Илатырмын.*
*Ҡуй,*
*Ай ҡалһын.*
*Яңы ҡырҡкан ағас*
*Төпһәнен хәтерләтһен дә*
*Һиңә,*
*Яңғыҙ ҡалғас…*

## Хәүефле юл

*Юл аша йүгергән төлкө*
*Баҙланы фар яҡтыһында.*
*Еҙ батмустай ялтлап китте,*
*Ҡолаҡ осо аҡлы ғына.*

*Юл аша йүгергән төлкө*
*Албырғап ҡалды ла туҡтап,*
*Үҙен һаҡлау ебен тартты:*
*«Ҡарамайса алға уҡтал!»*

*Юл аша йүгергән төлкө,*
*Бүгеп тамам яңғыҙлыҡтан,*
*Иптәш, аҙыҡ эҙләп йөрөп,*
*Оло юлға килеп сыҡҡан.*

*Яңғыҙлыҡҡа кем сыҙаһын?*
*Һағыш йәнде өтөр утта.*
*Йәшен сатаҡтарын ярып*
*Эҙләмәҫ тә инек юҡһа*
*Йәндәш, иптәш, күңелдәште,*
*Өмөт өҙмәй ышаныстан.*
*Йүгереп үтеп киткән төлкө*
*Яңғыҙлыҡтан юлға сыҡҡан.*

## Кеше хаҡы

Үлмәҫ борон һалғас ҡәбергә,
Кешенең юҡ хаҡы, ҡәҙер ҙә.
Диңгеҙ төптәренән сағырыу
Ишетелгән кеүек хәҙер ҙә.

Ишетелгән кеүек сараһыҙ
Йәшен түккән аһы ҡатындың.
Аҡса түгеп эҙләп алынған
Хаҡы ҡиммәтерәк алтындың.

Кеше хаҡы һуҡыр бер тиңгә
Тормағанда, һине кем яҡлар?
Үҙен үҙе кеше яратһын,
Һыйынырға уға Хоҙай бар!

## Ау

Бер ауҙа, бер яҫылыҡта,
Бергә төйнәлгәнбеҙ,
Ҡаршылыҡһыҙ һөйләшәбеҙ
Сыҡмай өйҙән дә беҙ.

Гүйә, ауға эләккән дә
Тыпырсынған себен.
Ғүмеребеҙ кәмей бара,
Тартҡан һайын ебен!

Бер ауҙа, бер яҫылыҡта
Ҡалай йәтеш, рәхәт!
Тик яҡынаймай аралар,
Бына бәлә, афәт.

Ауыр йөгөн үҙе тарта
Кеше яңғыҙ һаман.
Күңелдәрҙе алыҫайтыр
Интернетлы заман…

## Рамаҙан айында

Үҙемдә үлтерәм нәфсене,
Эҙләйем көнсөллөк тамырын.
Гонаһтан арала, Хоҙайым,
Ебәр һин көндәрҙең сабырын.

*Ялт итһен Ҡояшым күңелдә,*
*Болоттан арала күгемде.*
*Йәйгорҙай балҡыған саҡтарым*
*Бәхеттең саткыһы түгелме?*

*Ауяһыҙ булғанда үҙеңә,*
*Мәрхәмәт, мөхәббәт өҫтәлә.*
*Үҙемде һаҡлауым был шулай,*
*Донъям да тик балҡыу төҫтәрҙә.*

*Үҙемде яратам мин шулай,*
*Таҙартам күңелде сүп-сарҙан.*
*Сайралып, таушалып бөтмәҫкә*
*Ҡаршыма юлыҡҡан юҡ-барҙан.*

*Үҙемде һаҡлайым мин шулай,*
*Донъямды һаҡлайым афәттән.*
*Күҙемә йәш тула,*
*Хисләнеп*
*Матур көн ҡалдырған шәфәктән.*

*Үҙемде яратам донъяла,*
*Тынмаҫ бер алышта – хәрәкәт.*
*Аҙҙан да ҡәнәғәт булыуым,*
*Йәшәүе донъяла йән рәхәт!*

* * *

*Мөхәббәттән мәңге туялмаҫмын,*
*Ваз кисмәмен татлы хыялымдан.*
*Бәхетлемен,*
*Әгәр был донъяла*
*Һинең барлығыңды тоя алһам.*

*Тоғролоҡто, изгелекте һөйгән*
*Ышанысым әгәр алдаһа,*
*Ер йөҙөндә ул берәүҙер, тигән*
*Таяу-терәгем дә ҡалмаһа, –*

*Мөхәббәткә генә ышанырмын,*
*Ваз кисмәмен һине ратыуҙан.*
*Мин бит һинең кәкре ҡабырғаңдан*
*Тик һинеке итеп яратылған!*

## Дауылдан һуң

*Үҙ ярымда ултырамын*
*Ҡоро сығып һыуҙан.*
*Хыялымдың елкәндәре*
*Елберләмәй,*
*Туҙған.*

*Йән дә тыныс, дауыл да юҡ,*
*Диңгеҙ шауы,*
*Тулҡын…*
*Ҡабырсаҡҡа ҡуям ҡолаҡ:*
*Хатта ул да тып-тын.*

*Итәгемдән ел дә тартмай,*
*Киттек, тиеп, киттек!*
*Усымды бер ынйы өтә,*
*Бөтөнмө ул,*
*Китек?*

*Ҡояш ҡалҡыуын күҙәтәм,*
*Болоҡһоуым – болот.*
*Үтә. Быныһы ла үтер.*
*Дауыл тынды. Онот.*

*Ти ҙә үрелә тулҡындар,*
*Ә мин ярҙа.*
*Рәхәт.*
*Бөтөнлөгөм, ташламаның,*
*Һиңә мең-мең рәхмәт!*

## Ҡала иртәһе

*Ҡала битен йыуа таңдан,*
*Йылмая томан аша.*
*Машиналар, даръя булып,*
*Ағыла юлдан, таша.*

*Ҡояш ыуыҙ уландәрҙең*
*Һыйпай өлпөк сәстәрен.*
*«Имен үтһен бөгөнгө көн!» –*
*Минең барлыҡ хәстәрем.*

*Йәнде биләтмәй хәүефтән,*
*Яҡты нурға тотонам.*

*Эй, Хоҙайым, мәхрүм итмә*
*Донъяларҙы ҡотонан!*

*Асфальт көҙгөләй ялтырай,*
*Йорттар әле йоҡола.*
*Өйрәнеп тә барам кеүек*
*Ҡалабыҙҙың холҡона.*

*Йәмдәр табып үтеп китәм*
*Күперҙәр, урам аша.*
*Кеше ҡулдары ултыртҡан*
*Сәскәләр күҙен аса.*

*Аса миңә яландарҙың*
*Киңлеген, әйтерһең дә.*
*Әйтке килә: «Онотманым,*
*Һаман да хәтеремдә!»*

## Күңелдәштәргә

*Рухташым бул, тимәйенсә,*
*Тартылалар күңел менән.*
*Бер һайлаһаң күңелдәш тип,*
*Айыралмаç бер ни һинән.*

*Шатлыҡтары – үҙеңдеке,*
*Хәсрәтенә ҡараяһың.*
*Бергә күтәрәбеҙ төçлө*
*Тормош йөгөн, донъя аһын.*

*Им булыр шул йөрәгеңә:*
*Ихлас ҡарап ҡулын һуҙһа.*
*Үҙе елкән дә ул һиңә,*
*Илһам ҡанаттарың туҙһа.*

*Күңелдәшем,*
*Тартыламын*
*Таныш һине әллә ҡайҙан!*
*Һин булғанда донъя йәмле,*
*Күңел биҙмәй яҡты яҙҙан.*

450077, Өфө, Киров урамы, 45

**ТЕЛЕГРАММА**

*«Ағиҙел» журналын уҡыусы хөрмәтле дуҫтар!*

*Журнал редакцияһында эшләүсе коллегалар!*

*Һеҙҙе республикабыҙҙағы иң абруйлы баҫмаларҙың береһе, төп әҙәби-нәфис журналыбыҙ «Ағиҙел»дең 90 йыллыҡ юбилейы айҡанлы ихлас йөрәктән ҡотлайбыҙ, һаулыҡ, ижади уңыштар теләйбеҙ.*

*Был журнал «Яңы юл» исеме менән 1923 йылдың март айында сыға башлай. Илебеҙ өсөн ауыр, һынылышлы осор булыуға ҡарамаҫтан, уның даими донъя күреүе өсөн ыңғай шарттар тыуҙырыла. Яңы башҡорт әҙәбиәтенең нигеҙ таштары – тәүге әҫәрҙәр ошо баҫма аша халыҡҡа еткерелә. Тап ошо журнал ижади көстәрҙе үҙ тирәһенә туплай, башҡорт әҙәби телен рәсмиләштереү буйынса күп эштәр атҡара.*

*Октябрь инҡилабынан һуң әҙәбиәткә килгән ҡайһы яҙыусыны ғына алмайыҡ, уның ижад биографияһы ошо баҫмаға бәйле. Дауыллы-фажиғәле йылдарҙа уны һаҡлап ҡалыуға, үҫтереүгә ҙур өлөш индергән әҙиптәребеҙ Дауыт Юлтый, Булат Ишемгол, Сәғит Агиш, Баязит Бикбай, Ғәли Ибраһимов, Хәким Ғиләжев, Әсғәт Мирзаһитов, Рәйес Низамов, Әмир Гәрәев, Рәшит Солтангәрәев, Булат Рафиҡовтар һәр саҡ халыҡ йөрәгендә, беҙҙең күңелдәрҙә.*

*Исемен бер нисә тапҡыр үҙгәртеп («Белем» – «Сәсән» – «Үктәбер» – «Әҙәби Башҡортостан»), 1961 йылдан бирле ул «Ағиҙел» тип аталып сығып килә. Барлыҡ ошо дәүерҙә журналдың төп бурысы халыҡты әҙәбиәтебеҙҙең өр-яңы ҡаҙаныштары менән таныштыра барыу, уҡыусыларҙа нәфис һүҙ ярҙамында матурлыҡ, гүзәллек һәм ватансыллыҡ тойғолары тәрбиәләү булды, артабан да шулай дауам итһен.*

*«Ағиҙел» журналы – әҙәбиәтебеҙҙең, мәҙәниәтебеҙҙең, рухи тормошобоҙҙоң көҙгөһө. Баҫманың киләсәктә лә ошо йүнәлешкә тоғро ҡалыуын теләйек.*

**Борис МЕЛКОЕДОВ,**
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе.






**Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ**

# ЭСТАФЕТА

## хикәйә

– Бәү, бәү!

Ыржайҙар уларға уйламағанда-көтмәгәндә ташланды. Уларҙың тәрән көрттө көслө күкрәктәре менән ярып, ырғый-ырғый йәнлектәр утлап йөрөгән аҡланға яҡынлай башлауҙары булды, ҡар бураны сыҡтымы ни: ташланыусыларҙың берсә өҫкә, берсә аҫҡа ырғандаған кәүҙәләре ҡар болото араһында сала-сола ғына күҙгә эленеп ҡалды. Тертелдәк менән Тырт-Мырттың әсәһе Инәк уларҙы, тештәре һәр саҡ ыржайып торғанға күрә, шулай ыржай тип атай. Ҡанэскестәр, аяуһыҙ заттар улар, күпме тоҡомдаштарының башына еттеләр. Ыржайҙар, кешеләр теле менән әйткәндә, – бүреләр. Ә бүреләрҙе иң яуыз йән, ыржай тип иҫәпләүсе үлән менән туҡланыусы йәнлектәрҙе кешеләр яғымлы ғына итеп ҡоралай, илек йә ҡыр кәзәһе тип йөрөтә.

Элегерәк кешеләр үҙҙәре лә ҡоралайҙарҙы күпләп ут бөркөүсе “төкөргөс” менән саҡтырып, тиреһен тунап, итен ала ине. Ҡоралайҙар өсөн мылтыҡ – төкөргөс. Ғифриттәй ҡарағош менән күктән, ҡаргиҙәр дөрпөлдәк менән ер өҫтөнән дә ҡыуып ҡыра ҡыр кәзәһе тоҡомон ике аяҡлы заттар. Кешеләрҙе ҡоралайҙар Төҙтәкә тип атап йөрөтә. Артҡы аяҡтарына баҫып, кәүҙәләрен төҙ тотоп, ҡулдарын буш көйө һелтәп йөрөткәнгә күрә шулай атайҙарҙыр инде. Тәкә тиеүҙәре – эре, һауалы булыуҙарына, йәнлектәргә өҫтән аҫҡа ҡарап йөрөүҙәренә ишара. Һуңғы ваҡытта төҙтәкәләрҙең ҡоралайҙарға ҡарата мөнәсәбәте ҡырҡа, шул уҡ ваҡытта ыңғай яҡҡа үҙгәреп бара һымаҡ. Кешеләр хатта уларҙың төйәк иткән урынын “курсаулыҡ” тигән хикмәтле исем менән атап, ҡырыу урынына, киреһенсә, үҙҙәрен һаҡлай, яҡлай башланы. Ҡоралайҙар был хикмәтле урындың ни өсөн ҡурсаулыҡ тип аталғанын аңлап бөтөрмәһә лә, уның төҙтәкәләрҙән ышыҡ икәнлеген дә яҡшы тоя. Шулай булмай һуң: шул уҡ кешеләр ҡурсаулыҡтан ситтә уларға рәхәтләнеп һунар итә, ә инде уның бер ниндәй ҙә кәртә, билдә менән күрһәтелмәгән сиген үтеү, йәғни ҡурсаулыҡ эсенә инеү менән, тәүге ниәтенән

---

*Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай (1960) — шағир, прозаик, публицист. «Киске Өфө» гәзите редакцияһында баш мөхәррир урынбаҫары вазифаһында.*

баш тартып, һаҡларға тотона. Бер үк мылтыҡ ҡурсаулыҡтың эсендә һәм тышында ике төрлө тәғәйенләнештә йөрөй. Кешеләрҙең ни өсөн шулай ике йөҙлө булыуҙарын ғына аңларлыҡ хәлдә түгел илектәр. Аңларҙар ине лә, уйлай ғына белмәйҙәр шул. Әгәр ҙә улар, үҙҙәренең күпләп ҡырылып, зат булараҡ юҡҡа сығыу ҡурҡынысы тыуыу сәбәпле, дәүләттең махсус ҡарары менән ошондай ҡурсаулыҡ ойошторолоуын аңлаған, белгән булһалар, төҙтәкәләр хаҡында ике төрлө ҡараштa булмаҫтар ине. Валлаһи...

Аптыраҡ. Был хәлгә ҡарата ҡоралайҙар ана шулай аптырай ғына алаларҙыр, булһа кәрәк. Тәбиғәттә иһә “Көслөнөкө – замана” тип аталған тәбиғи һайланмыш ҡануны хөкөм һөрә. Ҡурсаулыҡ төшөнсәһе тик тәбиғи инстинкт ярҙамында ғына көн иткән ҡоралайҙарҙың аңлауына һыйып бөтмәгәнгә күрә, улар был хаҡта бер нисек тә уйлай алмай. Ҡыр кәзәләре тәүҙә кешеләрҙең ҡурсаулыҡ ойоштороуға бәйле был ҡылығын үҙҙәрен аулау өсөн ҡоролған хәйләһе, мәкере, һуҡмаҡтарына һалынған ҡапҡаны һымаҡ ҡабул итеп, бер нисә тиҫтә йыл самаһы үҙҙәренсә, йәғни тик тәбиғи инстинкттары буйынса йәшәй бирҙе. Улар әҙәм балаларының үҙҙәренә ҡарата булған ошондай һаҡсыл һәм ихлас мөнәсәбәтен бар тип тә белмәне. Хатта йәйҙәр ҡоро килгән йылдарҙа кешеләрҙең уларға тип ҡурсаулыҡ эсенә һипкән танһыҡ ризығын да күрмәмешкә һалышты ҡыр кәзәләре. Ризыҡ ерҙә һибелеп, туҙырап ята, барыбер унда ниндәйҙер бер мәкер бар кеүек. Буштың атаһы үлгән. Ерҙә ятҡан нәмә ризыҡ түгел, ә уларҙың тояҡтарын шапылдатып эләктерер ҡапҡан, ҡармап алыр тоҙаҡ шулай ризыҡ рәүешен алған һымаҡ. Әммә һуңғы йылда ҡурсаулыҡта килеп тыуған бер ғибрәтле ваҡиға ҡыр кәзәләрен төҙтәкәләргә илтифат менән боролоп ҡарарға мәжбүр итте барыбер.

...Ул көндө кәзәләр һутлы үлән эҙләп ҡурсаулыҡтан күпкә ситкә сығып, иртәнге утлауҙа йөрөй ине. Һиҙгер йәндәр, тәмәке еҫен әллә ҡайҙан тойоп ҡалып, үҙҙәренә һунар итергә килеүселәрҙең утлы “төкөргөс”тәре телгә килеүҙән күпкә алда ҡурсаулыҡ яғына ырғандай-ырғандай ҡуҙғалды. Төҙтәкәләр уларҙы күрмәй ҙә ҡалды. Ике йөҙ-өс йөҙ аҙым самаһы һикергәндән һуң туҡталып ҡалалар ҙа, хәүеф барлығын-юҡлығын тикшергәс, тағы ла алға күсәләр. Бер нисә тапҡыр тын алмаштырып, һикерәндәп алғандан һуң, ҡоралайҙар ҡурсаулыҡтың сигенә лә килеп төртөлдөләр. Иркен һулыш алып, ҡалған юлды йүгермәй генә, алдарында осраған танһыҡ үләндәрҙе йолҡа-ҡаба барырға ине ниәттәре. Булманы. Ҡурсаулыҡтың бейек ҡая һәм тәрән һыулы йылға яры менән ҡаймаланған тар ғына үткәленән ыржайҙар өйөрө килеп сыҡмаһынмы!

Айыуҙан ҡасҡан – бүрегә, тигән һымаҡ, әйтәгүр. Ҡурсаулыҡ шырлығына инеп эҙ юғалтырға өлгөрмәй ҡалған кәзәләр, ҡайҙа баҫырға, ни ҡылырға белмәй, әле генә үҙҙәре ҡасып килгән яҡҡа кирегә боролорға мәжбүр булды. Тәбиғи булмыштары, эске тойомлауҙары кешеләргә яҡыныраҡ килеү юлын һайланы кеүек. Ҡоралайҙар ҡурсаулыҡтың үҙәк менән билдәләнгән сигенә килеп еткәс, ике урталыҡта туҡталып, ҡамауҙа ҡалды. Эс яҡта – эстәре үткәшкән ас ыржайҙар, тыш яҡта – ике аяҡлы дошмандары, “төкөргөс” тотҡан әҙәмдәр. Кәзәләр бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: уларҙы әлегә ошо үҙәктә, йәғни ҡурсаулыҡ сигендә тороуҙары ғына ҡотҡара. Кешеләрҙән ҡасып эскә китһәләр, ыржайҙар өҙгөсләй, ыржайҙарҙан өркөп үҙәк башына менһәләр, уларҙы төҙтәкәләрҙең утлы “төкөргөс”тәре сағып аласаҡ. Әммә ике яҡтың да уларға ҡарата этлек эшләргә аяҡ-ҡулдары бығаулы. Әҙәмдәр ҡурсаулыҡ эсендә һунар итә алмай, ыржайҙар, әҙәмдәрҙән шөрләп, ҡоралайҙарға ташланырға баҙнаты етмәйенсә, ауыҙҙарынан шайыҡтарын ағыҙып, үҙҙәрен саҡ-саҡ тыйып тота.

Был көсөргәнеш тағы ла күпмегә һуҙылыр ине икән, тәүге аҙымды төҙтәкәләр яһаны. Улар ҡыр кәзәләрен уртаға ҡалдырып, ике яҡтан урап сығып, ҡурсалыҡ

эсенә үтте лә, ыржайҙар йәшенеп һаҡҡан ҡыуаҡлыҡтарға тоҫмаллап, шарт та шорт атырға тотондо. Ыржайҙар, эштең ҡайҙа барғанын шундуҡ аңлап, ҡурсаулыҡтан үксәһен ялтыратты. Береһенең әсе итеп сыйнағаны ла ишетелде. Пуля эләккәндер үҙенә. Ҡоралайҙар әҙәмдәр тарафынан асылған “йәшел коридор” аша ҡурсаулыҡ эсенә иркен үтте. Тап ошо көндән башлап ҡыр кәзәләре ҡурсаулыҡ эсендә әҙәм балаларынан ҡурҡмаҫҡа өйрәнде, үҙҙәренә тип һалынған танһыҡ ризыҡтан ауыҙ итә башланы. Тик улар ҡурсаулыҡтан ситкә сыҡҡанда әҙәмдәрҙең үҙҙәренә мөнәсәбәте ни өсөн ҡырҡа үҙгәреүен һаман да аңларлыҡ хәләттә түгелдәр. Мәңге аңлай ҙа алмаҫтар инде.

Әммә, барыбер, ҡурсаулыҡ ҡоралайҙарҙы төп дошмандарынан – ыржайҙарҙан, төлкөбайҙарҙан, тайыш табандарҙан, йылғыр һеләүһендәрҙән һаҡлай алмай ине. Сөнки бында йыртҡыс хайуандар ҙа, ҡыр кәзәләре кеүек үк, яҡлаулы һәм һаҡлаулы, йәғни әҙәм балалары нисек кенә ҡеүәтле һәм аҡыллы булмаһын, ҡурсаулыҡ эсендә лә, уның тышында ла йәнлектәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡыҫыла алмай. Дөрөҫөрәге, теләмәй. Ни өсөн? Донъялағы иң камил, иң аҡыллы, иң көслө заттар, йәнәһе. Көслө булғастары, ниңә көсһөҙҙәрҙе яҡламай һуң улар? Ҡуяндарҙы – төлкөләрҙән, ҡоралайҙарҙы – бүреләрҙән, мышыларҙы – айыуҙарҙан, турғайҙарҙы – тәгәрләктәрҙән, сысҡандарҙы – типкестәрҙән, селберәләрҙе – суртандарҙан... Был һорауҙарға ла ҡоралайҙар бер ҡасан да яуап таба алмаҫтар инде. Ҡоралайҙар ике урталыҡта ҡамалып ҡалған теге көндө иһә ҡурсаулыҡ сигендә үҙҙәренә күҙ йәштәре түгелеп, мөлдөрәп ҡарап торған йәнлектәрҙе йәлләне булһа кәрәк төҙтәкәләр. Улайһа, ҡурсаулыҡтан ситтә шул уҡ йәнлектәрҙе ни өсөн аямайса ҡыра һуң шул уҡ кешеләр? Төҙтәкәләрҙең ошондай ике йөҙлө булыуҙарының сәбәбе нимәлә? Әгәр ҙә ҡоралайҙар, ысынлап та, уйларға, фекер йөрөтөргә һәләтле булһалар, бер хәҡиҡәтте һүҙһеҙ ҙә аңлап, үҙҙәрен һаҡлап, яҡлап маташҡан әҙәмдәр йөрөгән был урмандан баштары һуҡҡан яҡҡа сығып олағырҙар ине. Хәйер, урмандан ғынамы икән?

Төҙтәкәләр, шул уҡ ыржайҙар һымаҡ, ҡоралайҙарҙың һутлы, үҙҙәренең ләғәте менән әйткәндә, деликатес итенә дәғүә иткәнгә күрә генә уларҙы ыржайҙарҙың аҙау тештәренән йолоп алып ҡалды бит теге көндө. Улар ҡоралайҙарҙы шул уҡ урында ҡырып һалырҙар ине, ҡурсаулыҡ эсендә һунар иткән өсөн штраф санкциялары уларҙың тәтегә баҫҡан бармағын шаҡарҙы ғына. Әҙәмдәр теге көндө лә, ыржайҙарҙы үҙҙәренең табыштарынан ҡыуып ебәргәндән һуң, ҡурсаулыҡтан әҙ-мәҙ ситкә китеп, ҡоралайҙарҙың кире әйләнерен көтөп боҫоп ятты. Әлбиттә, төҙтәкәләр унда тик кенә ятманы. Милли һунар үҙенсәлектәренә ярашлы, ысын мәғәнәһендә гөжбан ойошторҙо. Башта шым ғына хәмер һемереүсе әҙәмдәр, эстәренә төшкән хәмерҙәре үҙҙәренә әмер биргәс, тәмәке тарта башланылар, тағы ла бер аҙҙан мәрәкә һөйләп көлөшөүҙәр, һүгенеү тауыштары ишетелеп торҙо ла, йырларға тотондолар. Урмандағы был кәнсирт таңға тиклем дауам итте...

***

Йәнлектәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтендәге аңлашыу мәсьәләһен башҡа осраҡта, әлеге лә баяғы, тәбиғәт үҙе көйләне. Ҡоралайҙар йәшәр өсөн үлән ашарға тейеш булған һымаҡ, бүреләргә йәнлек ите, йылы ҡан кәрәк. Ҡоралайҙарҙы үлән ашауҙан, ағас ҡайырыһы кимереүҙән тыйып булмаған һымаҡ, ыржайҙарҙы ла тәғәйен ризығын ҡабул итеүҙән дүндереп булмай. Бына, әле килеп, ыржайҙарҙың ҡоралайҙарға ошо ташланыуы ла, ҡар-буран туҙҙырып уларға яҫҡыныуҙары ла тап шул ҡурсаулыҡ эсендә бара.

Өйөр башы – тиҫтә йәшен күптән тултырыуына ҡарамаҫтан, һаман да оло урмандың ҡоралайҙар атаманы һаналған Таштояҡ, ҡурҡыныс килеүен белдереп,

ҡаты тояғын ҡарҙан әрселгән туң ергә бер тапҡыр туҡылдата баҫып алды. Йәш сағында артынан ҡыуа килеүсе бер ыржайҙың  башын яра тибеп үлтергәндән һуң йәбеште уға Таштояҡ ҡушаматы. Ҡушаматы ла, исеме лә – Таштояҡ. Өйөр башлығы фарман биреүе булды, аҡлан ситендә көҙҙән ҡалған үләнде утлаған, йығылған уҫаҡ ҡайырын кимергән ҡоралайҙар көтөүе ҡапыл ашауынан туҡтап, һындарын турайтып, башлыҡ ҡараған яҡҡа ҡарап хәрәкәтһеҙ  ҡалды. Әйтерһең дә, ошо мәл ваҡыт та туҡталды. Бары тик яҡындағы ағасҡа ҡунған тумыртҡа ғына үҙенең “туҡ-туҡ” эшен белде. Хәйер, тәбиғәттең һәр тере йән эйәһе тәүлек әйләнәһенә туҡланыу хәстәре менән йәшәй: утлаған ҡоралайҙар ҙа, ҡорт эҙләгән тумыртҡалар ҙа, ҡоралайҙарға яҫҡынған ыржайҙар ҙа. Тумыртҡаларҙың туҡылдауына ҡушылып, ҡоралайҙарҙың да йөрәктәре дөпөлдәп типте: “дөп-дөп-дөп...” Тағы ла кемдәрҙеңдер йөрәктәре өлпөлдәй. Былары кем булыр һуң, сөнки был тирәлә ҡоралайҙарҙан һәм тумыртҡаларҙан башҡа йән эйәләре күренмәй бит. Көсөргәнеш тағы ла арта төштө. Таштояҡ тағы ла бер ҡат тояғын туң ергә тыҡылдатып алды. Көсөргәнеш тағы ла артты. Барыһы ла өйөр башының хәрәкәтен түҙемһеҙләнеп көттө. Тап шул саҡта ҡар бураны араһында күренеп ҡалды ла инде уларға  баяғы ыржайҙарҙың аҫҡа-өҫкә ырғылған һындары. Ҡышҡы көн тыныс, елһеҙ ине, урмандың был урынындағы ел-дауылды ыржайҙар хасил итте.

Ошо көсөргәнешле мәлдән ун секунд ҡына алда ике йәшлек ҡыр кәзәһе Тертелдәк кимергән уҫаҡ ҡайыры, әсе булһа ла, йөрәгенә ятып тора ине. Әммә уның әселеге бер секунд эсендә юҡҡа сығып, ҡоралайҙар көтөүенең дөйөм хәүеф алды кисереше менән алмашынды. Ундай мәлдә йәнлектәрҙең бар булмышы фәҡәт бер генә ынтылышты, бер генә  хәҡиҡәтте ҡабул итергә әҙер: ыржайҙарҙың аҙауынан нисек ҡотолорға? Тертелдәк үҙе  янындағы игеҙәге Тырт-Мырт менән бер үк хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, тәүҙә ҡартаталары Таштояҡҡа ҡарап ҡатты, шулай ҡатып ҡалған килеш улар ҡараштарын берсә хәүеф көтөлгән яҡҡа, берсә әсәләре Инәккә, өйөр башлығы  янында ғорур баҫып торған өләсәләре Һөтләкәйгә күсереп-күсереп алды. Һөтләкөй ҙә башын бора һалып, бер генә секундҡа яратҡан ейәнсәре Тертелдәккә ҡараш ташланы. Мыҡырҙаны. Уның күҙәләр теле менән әйткән һүҙҙәрен Тертелдәк бик асыҡ төшөндө. “Нимә генә булмаһын, минең арттан ҡалма. Йәйгеһен мин һиңә ыржайҙарҙан нисек ҡасырға өйрәттем бит...” – ти ине уға өләсәһе Һөтләкәй.

Өйөрҙә Тертелдәктән йәшерәк бәрәстәр тулып йөрөһә лә,  өләсәһе, ниңәлер, фәҡәт Тертелдәкте яҡын күрә. Ярата. Тышҡы ҡиәфәттәре буйынса игеҙәге Тырт-Мырт менән улар бер яғы менән дә айырылмай. Айырма шунда ғына: Тырт-Мырт һауалыраҡ, тиҙ генә үсегеп бара, һүҙ күтәрмәй, әллә шуға инде өләсәләре Һөтләкәй уға һәр ваҡыт орошоп өндәшә. Ә бына Тертелдәкте ул башҡа бәрәстәрҙән айырып ҡарай. Бер йәшлек сағында хатта, үҙенең яңы тыуған бәрәстәренән йәшереп кенә, бер имсәген Тертелдәккә имеҙеп йөрөнө. Өләсәһенең ҡаймаҡтай ҡуйы һөтөнөң татын бик яҡшы хәтерләй Тертелдәк. Был хәл күпме дауам итер ине икән, ейәнсәрен имеҙеп йөрөгән Һөтләкәйҙе күреп ҡалған ҡартатаһы Таштояҡ, мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйып, алдағы йәй башында – ҡоралайҙарҙың йәшәү ҡануны буйынса – яңы йәшен тултырған Тертелдәк менән Тырт-Мыртты, тағы ла бер нисә йәш ҡоралайҙы, эш боҙоп тотолған өлкән ҡатыны Һөтләкәйҙе өйөрҙән ҡыуып уҡ сығарҙы. Өйөрҙән генә ҡыуһа – бер асыу, маңлайы менән ағастарға ышҡып сиген билдәләгән биләмәһенән ситкә үк баҫтырып ебәрҙе. Ҡаршылашып маташҡайнылар – Таштояҡтың тояҡтары ғына түгел, мөгөҙҙәре лә таш кеүек ҡаты, һөңгө кеүек осло. Өйөр башлығынан һеҙөлөүҙең

нимә икәнен Һөтләкәй бик яҡшы белә. Уның мөгөҙөнөң ҡатылығын һәм үткерлеген үҙ ҡабырғаларында һынап ҡарағаны бар. Шуға күрә Һөтләкәй иренең үҙен өйөрҙән һәм биләмәнән ҡыуыуына артыҡ үпкәләмәне, яҙмышына өнһөҙ буйһоноп, ейәнсәрҙәрен һәм бүләсәрҙәрен эйәртеп урман төпкөлөнә китеп, үҙҙәре һымаҡ уҡ йола үтәп өйөрҙән китеүсе башҡа йәндәштәрен табып, улар менән йәйоҙоно донъя ҡыҙырыуҙарын белделәр. Һөтләкәй былдай үҙенсәлекле сәйәхәткә тәүге тапҡыр сыға, сөнки ул быйыл тәүге тапҡыр ҡыҫыр ҡалды.

Әҙәмдәрҙең йәйләүгә сығыуына оҡшағайны ҡоралайҙарҙың был йәйге сәйәхәте. Өйөрҙән уларҙы ситнәткән йә яратмаған өсөн ҡыумайҙар. Йола буйынса, өйөрҙәге йәш бикәләрҙең быуаҙ икәнлеге билдәле булғас та, бер йәштән өлкән барлыҡ йән эйәһе өйөрҙө һәм биләмәне ташлап китергә, күҙгә тиклем үҙ йүнен үҙе күреп йәшәп торорға тейеш. Тәбиғәт ғали йәнәптәре ҡоралайҙарҙы шулай итеп яралтҡанға күрә үтәлә был йола. Йәғни инә ҡоралай менән атаның барлыҡ иғтибары уларҙың затын дауам итер, донъяға яралыр йәндәргә бағышланырға тейеш был йәйге осорҙа. Инә ҡоралайҙың бауырындағы яралғыға тыныслыҡ та, әсәһе аша күскән яҡшы ҡан да, бының өсөн таҙа һыу ҙа, шифалы һутлы үлән дә кәрәк. Бына шуға, бәрәстәр һау килеш донъяға яралһын өсөн дә, башҡалар был саҡта өйөрҙән генә түгел, хатта биләмәнән дә ситкә сығып йәшәп торорға бурыслы. Был – инә ҡоралайҙарҙың гоманлы сағындағы иң гуманлы ҡануны. Әҙәмдәр ҙә ошо ҡанун буйынса йәшәһә ине. Төҙтәкәләр ҙә, ҡоралайҙарҙан күреп микән, бер мәл “Бөтә яҡшы нәмә балаларға!” тигән девиз менән йәшәп ҡараны ҡарауға. Әммә был һүҙҙәр ҡоро лозунг булыуҙан уҙманы, сөнки әҙәмдәрҙең күп кенә ата-әсәләре “яҡшы нәмә”не үҙҙәренең ҡулына эләктерер өсөн тупылдатып балалар тапты. “Яҡшы нәмәләр” иһә, балаларға тәғәйенләнһә лә, башҡа, кәйефсафа ҡороу маҡсатында сарыф ителде. Балаларҙың һаны артҡан һайын, ҡарауһыҙ ҡалған етемдәр, балалар йорттары күбәйҙе...

Уның ҡарауы, йәйоҙоно ситтә йөрөп, йәш ҡоралайҙар үҙҙәре менән донъя гиҙеүсе өлкәндәрҙән йәшәргә, иң мөһиме – йыртҡыс хайуандарҙан һаҡланырға өйрәнә, тормош мәктәбе үтә. Ҡайһы саҡта улар аяныслы хәлдәргә тарып ҡуя. Ни тиһәң дә, бүреләрҙең башын яра тиберлек Таштояҡ ҡартаталары үҙҙәренең тыуған биләмәһендә заттарының яңы ағзаларының имен-аман донъяға килеүен тәьмин итеп йөрөй шул. Үткән йәйҙә шулай йәйләү ҡыҙырып йөрөгәндәрендә ҡоралайҙар, һаҡһыҙлыҡ күрһәтеп, һунарсыларҙың башмаҡтай эттәренә осрап, саҡ-саҡ үлемдән ҡалды. Ыржайҙарҙан да хәтәрерәк ине уларҙың һунар эттәре. Дөрөҫөрәге, уларҙы өләсәләре Һөтләкәй әжәл тырнағынан алып ҡалды. Йыртҡыстарҙан елдең түбән яғына, тау осраһа, тау үренә табан ҡасырға кәрәклеген шунда аңланы Тертелдәк. Әгәр ҙә ҡоралайҙар тау үренә табан ынтылһа, уны бер йыртҡыс йәнлек тә, иң йүгерек һаналған һунар эттәре лә ҡыуып етә алмай. Ни өсөн тигәндә, илектәрҙең артҡы тояҡтары оҙон, алғылары ҡыҫҡараҡ булыуы тау үренә табан атылған уҡтай осорға мөмкинлек бирә. Һөтләкәй уларҙы тау үренә әйҙүкләп, бурҙайҙарҙың ауыҙынан йолоп ҡалды.

Йәйләүҙә йөрөүсе йәш ҡоралайҙар ара-тирә тыуып үҫкән биләмәләренең сигенә барып сыҡҡанда, ҡартаталарының баш осондағы үткер мөгөҙөнә күҙ һалып та китер булды. Бының да үҙенә күрә әтнәкәһе бар. Әгәр ҙә Таштояҡтың һөңгө-мөгөҙҙәре урынында юҡ икән, был хәл шуға ишара: өйөргә әйләнеп ҡайтырға була, бәрәстәр донъяға яралған. Тиҙҙән ер өҫтө ҡар менән ҡапланасаҡ һәм уларҙың заты тағы ла бер өйөр булып донъя гиҙеп йөрөйәсәк. Ҡышлаҡҡа ҡайтыу ҙа үҙенә күрә оло байрам. Барыһынан бигерәк донъяға яралған сыбар бәрәстәрҙе күргәндән һуң тыуған ашҡыныуҙар, уларҙың тәүге яһаған аҙымдарына ҡыуанып һикерәндәүҙәр. Өйөрҙәге ата-әсәләре лә йәйләүҙән ҡайтыусы бәрәстәрен һағынып

өлгөрә был саҡта. Бындай тойғонан хатта донъяла иң ҡырысы һәм уҫалы булып тойолған ҡартаталары Таштояҡ та азат түгел. Ул хатта был саҡта тәртип боҙоусы кескәй тоҡомдаштарына яза бирерлек хәлдә түгел. Был мәлдә туҡал ҡалған Таштояҡтың иң йыуаш көндәре башлана. Тап шул саҡта бәрәстәргә, үҫмерҙәргә шашынып алырға ла форсат тыуа. Был шашыныуҙарға йәйге танышыуҙарҙан һуң ҡауышыуҙар, мөхәббәт уйындары ялғана. Әммә ергә ҡырпаҡ ҡар төшөп, өйөр башының яңы мөгөҙҙәре үҫеп сыҡҡас, өйөрҙә тағы ла әүәлгесә тәртип урынлаша. Ҡоралайҙар тағы ла, һалдаттар ише, бер рәткә теҙелеп йөрөй башлай.

***

Һөтләкәй менән Тертелдәктең – өләсәй менән ейәнсәрҙең ҡараштары осрашыуға тағы ла бер секунд ваҡыт үтте. Шул тиклем оҙон, көтөп түҙемең бөтөрлөк, түҙеп үҙәгең өҙөлөрлөк ваҡыт арауығы. Шул мөҙҙәт эсенә әллә күпме наҙ, яҡтылыҡ, йылылыҡ, миһырбанлыҡ, эскерһеҙлек, илаһилыҡ, туғанлыҡ хисе һыя. Ҡайһы бер тере йән эйәләре, ғүмер буйы йәшәп тә, был тойғоларҙы кисереү генә түгел, былар хаҡында уйлау ғына түгел, ғөмүмән, бындай төшөнсәләрҙең барлығын да белмәйҙер. Туғанлыҡ, ҡан тартыу көсө аң менән аңлай һәм аңлатып бирә торған төшөнсәләр түгел шул. Гүйә, ошо мәлдә Һөтләкәй менән Тертелдәк тәбиғәттең башланғысы һәм дауамы булып, бер йәнгә ойошто кеүек.

Бындай ҡараш йүгертеүҙәр, ялан-йолан ҡарауҙар, тертелдәүҙәр уларҙың ҡанында. Тертелдәү буйынса барыһын да уҙҙырғаны өсөн дә өләсәһе уға Тертелдәк исемен биргәйне бит. Бәрәстәр, йәш һәм үҫмер ҡоралайҙар, ниндәй генә хәлгә ҡалғанда ла, өлкәндәрҙең хәрәкәттәрен ҡабатлап, уларҙың эҙенә баҫып, хәүеф килеп тыуған урындан сығырға, йыртҡыстар тырнағынан ҡотолорға тейеш. Әгәр ҙә улар өлкәндәрҙән күҙ яҙҙырып, уларҙың хәрәкәтен ҡабатламай, саҡ ҡына үҙаллы хәрәкәт иттеме, ыржайҙар был хәлде тиҙ арала күреп ҡалып, йәш ҡоралайҙы өйөрҙән айырырға, ситкәрәк ҡайырырға тырышасаҡ. Өйөрөнән айырылған йәш илек күҙ асып йомған арала бүреләрҙең ҡорбанына әүерелә. Йәш кәзә тәүҙә самаһыҙ әүҙемлек күрһәтеп сәбәләнә, урынһыҙға ҡапыл туҡталып ҡала, ҡайһы яҡҡа ҡасырға белмәй, тыбызыҡлап үрһәләнә һәм ошо рәүешле үҙен уратып алған ыржайҙарҙың аҙау тештәре араһына үҙе үк һикереп тиерлек барып инә. Шунан башлана ла инде ыржайҙарҙың ҡан туйы. Ул туйҙың нисек барыуына һәм тамамланыуына ҡорбан булыусы йәнлек шаһит була алмай шул.

Бер, ике, өс!

Кәзәкәйҙәр берҙәм һулыш алып, берҙәм ынтылыш менән Таштояҡ һикергән яҡҡа табан ырғыны. Барыһы ла тәүге һикереш яһағандан һуң барып төшәр урындарының ниндәй булырын да абайламаны, күҙҙәрен йомоп һыуға сумған әҙәм ише, аҙағы ни менән барып бөтөрөн белмәгән яҡҡа ҡуҙғалды. Был халәт уларҙың өйөр башлығына сикһеҙ ышаныуҙарынан килә торғандыр. Күрәләтә ут эсенә, ыржайҙарҙың аҙау тешенә алып барып индермәҫ әле Таштояҡ. Әлбиттә, илектәрҙең һәр ҡайһыһының тәүге һикереш алған майҙансығы ҡарҙан әрселгән ҡаты ер булғанға күрә, улар был мөмкинлекте трамплин итеп файҙаланып, хәтһеҙ генә арауыҡҡа ырғый алды. Ҡасыуҙың уңышлы тамамланыуы ла тәүге һикерешкә бәйле. Ҡоралайҙар ниндәй генә арауыҡҡа һикермәһен, һәр ҡайһыһының да барып төшкән урындары тәрән көрт эсе ине. Көрт бауыр аҫтынан, тәрән булһа ла, ҡарҙың йомшаҡлығы уларҙың файҙаһына ғына. Икенсе һикерештәре тәүгеһенән ҡайтышыраҡ тойолһа ла, ыржайҙар әле генә ҡоралайҙар ҡатып ҡалған асыҡ урынға килеп сыҡҡанда, йәнлектәр был урындан утыҙ-ҡырҡ аҙымға алыҫлашып өлгөргәйне инде. Был арауыҡ ҡоралайҙар өсөн ике-өс һикерем араны ғына тәшкил итһә лә, ыржайҙарға был араны үтер өсөн был йәнлектәргә ҡарағанда ике тапҡыр күберәк ваҡыт кәрәгәсәк. Күкрәктәре ҡеүәтле булһа ла, аяҡтары ҡыҫҡа

шул бүреләрҙең. Шуға күрә улар, ҡоралайҙар өйөрөнөң төп йүнәлешенең артынан китеүҙе мәғәнәһеҙлеккә һанап, сабып барған ыңғайҙарында бар диҡҡәтен иң артта ҡалыусы илеккә йә өйөрҙән бер яҡҡараҡ айырылып барғанына йүнәлтеп, төп көстәрен шуға тоҫмаллап өлгөрә. Өйөр артынан сабыусы ыржайҙарҙың төп өҫтөнлөгө лә шунда: уларҙы бынан һуң өйөр бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай, улар бер йоҙроҡҡа тупланып, үҙ-ара аңлашып, тик яңғыҙ ҡорбан артынан саба, бер илекте ҡыуалай. Сабып барған килеш бер-береһен ял иттереп алырға ла өлгөрә ыржайҙар. Тәүҙә береһе алға ныҡ ынтылып, бар көсөн йүгереүгә сарыф итеп, ҡорбанын албырғата ла, ситкәрәк сығып, сабыуын яйлатып, арттан килеүсе ыржайға юл бирә, уныһы бер аҙҙан өсөнсөһөн алға үткәрә. Был арала тәүге бүре тынын рәткә һалып, ҡабат яҫҡынырға әҙерләнә.

Өс, дүрт, биш!

Икенсе һикереш яһағандан һуң Тертелдәк Һөтләкәй өләсәһенең өсөнсө һикереш яһап талпынғандан ҡалған әҙер эҙенә төштө, шундуҡ үҙе лә өсөнсө һикерештә яһаны. Әллә саманы онотто Тертелдәк, әллә өләсәһенең әҙер эҙенә баҫып һикереүе сәбәпсе булдымы быға – ул үҙен хәтһеҙ генә ваҡыт бейек һауала аҫылынып торғандай хис итте. Шул ваҡыт арауығында Тертелдәк хәтһеҙ ара алыҫлашып өлгөргән ҡартатаһы Таштояҡтың һыртын, уның артынан ынтылған Һөтләкәй өләсәһенең дүртенсегә һикергәнен, үҙҙәренең артынан яҫҡынған ыржайҙарҙы күреп өлгөрҙө. Секундтың ниндәйҙер өлөшөндә иң алдан сабып килгән һоро ҡарт ыржайҙың күҙ ҡарашы менән осрашты Тертелдәк. Ниндәйҙер кисерештәргә бирелеп торорлоҡмо ни был мөҙҙәттә?

Был көсөргәнешле мәл бик оҙаҡ тойолдо Тертелдәккә. Ул һауала аҫылынып торған ваҡыт эсендә өләсәһенең дүртенсе һикереш яһап, бушап ҡалған эҙҙәренә Тертелдәктән алда игеҙәге Тырт-Мырт килеп төштө. Хистәргә бирелһәң, артыҡ шашынып һикерәндәһәң, шул хәлгә ҡалаһың инде. Был турала күпме иҫкәртте уны йәйләүгә сыҡҡанда өләсәһе Һөтләкәй. Тырт-Мырттың һыртына килеп төшкән Тертелдәк, игеҙәгенә мәшәҡәт яһамаҫ өсөн, ситкә һикерҙе. Тырт-Мырт саманан тыш көсөргәнеш яһап, артабанғы һикереш яһап, өләсәләре Һөтләкәй артынан китте. Тертелдәк иһә өйөрҙән ситкә күсеп тороп ҡалды. Һәр бер секунд ғүмерҙе хәл итер саҡта аңшайып тороу үлемгә тиң. Бер аҙ боролош яһап, Тырт-Мырт артынан сабырға ине ниәте, әммә ҡаршыһында үҫеп ултырған ҡайын ағасы уға былдай мөмкинлекте бирмәне. Ул ҡайынды уратып үтергә самаланы, әммә артабан да теҙелеп киткән ағастар уның ҡасыу йүнәлешен бер аҙ ситкә борҙо. Тертелдәк, өйөрҙән айырылып, ҡайынлыҡтың икенсе яғынан сабып бара башланы. Өләсәһенең әҙер эҙенә баҫып ҡасыу түгел шул бында. Етмәһә, йәненең тертелдәүе, йөрәгенең өлпөлдәүе тынын ҡурып бара. Ыржайҙар унан иллеләп аҙым артта ҡалып саба. Әммә улар күмәк, ә Тертелдәк самаһыҙ һикерәндәүе арҡаһында – яңғыҙы...

***

Берәүҙәр ҡаса. Икенселәр баҫтыра. Берәүҙәр ҡасыу юлы менән ғүмерен һаҡларға теләй. Икенселәр ҡаҫҡандарҙы баҫтырып тотоп, ғүмерен һуҙырға теләй. Йүгермәйһең икән – йәшәмәйһең...

Ыржайҙарға шул ғына кәрәк ине лә. Тәүҙә улар ырғандап ҡасып барыусы ҡыр кәзәләренең иң артынан эйәргән Тырт-Мыртты үҙҙәренең ҡорбаны итеп һайлағайны. Өйөр башы Тимертырнаҡ был хаҡта башҡаларға аңғартып өлгөргәйне: тәүҙә был мәғлүмәтте ул янында сабып барыусы инә бүрегә – көсөктәренең әсәһе Һортойға еткерҙе. Һортой, үҙ нәүбәтендә, сабып барышлай, тәүҙә бер яғына, аҙаҡ икенсе яғына боролоп, яндауынан сабып килеүсе ике йәшлек Йүгерек менән Һәүереккә бышырҙаны. Ыржайҙар лөғәтендә һүҙ атҡарҙы. Ырылдап. Фарман тиҙ

арала бар өйөргә таралды. Һәүереккә иһә өйөр башының махсус фарманын өҫтәлмә рәүештә айырып еткерҙе: ҡорбанды ҡыуып етеп барғанда, Һәүерек атаһы Тимертырнаҡҡа йә әсәһе Һортойға яҡыныраҡ булырға тейеш.

Тимертырнаҡ менән Һортой игеҙәк көсөктәре Һәүерек менән Йүгеректе тәүге тапҡыр ғына ауға алып сыҡмайҙар. Улар йәше тулыр-тулмаҫтан ошо юлда. Һәр бер ау, һәр бер һунар – көсөктәр өсөн айырым бер һабаҡ, дәрес. Атай менән әсәй улдары Йүгеректең уңыштары өсөн ҡыуанһа ла, Һәүеректең мәнһеҙлеге өсөн уларҙың аҙау тештәре һыҙлай. Хәйер, уның ана шулай, йолҡош аттар кеүек, Һәүерек исем-ҡушаматы алыуы ла башҡа ыржайҙарға оҡшамаған сифатынан – ығышлығынан килә. Ҡорсаңғы. Бына был һунарҙа ата менән әсә Һәүеректе ныҡлап һынап ҡарамаҡсы. Һынауҙы ул үтә алырмы-юҡмы? Үтә алмаһа...

Ҡоралайҙарҙы ҡыуа төшкәндә барыһы ла көйлө һымаҡ ине. Әммә башта уҡ тәғәйенләп ҡуйған ҡорбандары көтмәгәндә икенсе бер ҡыр кәзәһе менән алмашыныр тип кем уйлаһын инде? Быны ыржайҙар яҡшыға юрамай, бик ауыр кисерә. Һәр хәлдә, башта уҡ билдәләнгән ҡорбандан диҡҡәтте икенсегә күсереү еңел түгел. Иң арттан эйәргән Тырт-Мырттың илерткес итләс һынына ҡарап, уның боғаҙын аҡтарғандан һуң тәмләп эсер ҡанының ҡайнарлығын да тел осонда тойоп-татып та өлгөргәйне Тимертырнаҡ. Инде шул ниәтен бойомға ашырыу ғына ҡалғайны. Әммә, уйламағанда-көтмәгәндә, Тырт-Мырттың ҡаршыһында ғына тап шундай уҡ икенсе бер кәзә һауаға ырғылды Һәм мөғжизәнең мөғжизәһе булды: бер мәлгә генә һауала аҫылып тороусы ҡоралай туп-тура Тимертырнаҡтың күҙҙәренә тултырып ҡараны. Барыһын да аңланы ошо ҡараштан күпте күргән, күпте кисергән ыржай өйөрө башлығы. Тертелдәп кенә торған икенсе шундай уҡ йән, моғайын, игеҙәгелер әле, уның ҡорбанын нисек боғаҙынан алыуы, ҡайнар ҡанына ләззәтләнеүенә бәйле ниәттәрен белеп ҡалғандай, үҙенең дәғүәһен һауаға аҫылынып тороп белдерә. Йолҡош! Быны аңлауҙан өйөр башлығының эсендәге икенсе сифаттағы бүреләр тағы ла ажарыраҡ итеп олорға тотондо. Асығыу менән асыу бергә ҡушылғанда ғына сыға бындай олоу. Ана ниндәй дәғүә белдерә уға тертелдәк кенә мәхлүк йән! Ә бит тап шуның өсөн дә Тертелдәк үҙенең ҡандаш игеҙәген, башҡа тоҡомдаштарын ҡотҡарыр өсөн ыржайҙар өйөрөн үҙенең артынан эйәртеп, бөтөнләй икенсе яҡҡа борҙо. Өҫтөнлөктө үҙенең яғына ауҙарҙы. һәр хәлдә, ыржайҙар башлығы Тертелдәктең өйөрҙән ҡайырылыуын шулай баһалап өлгөрҙө.

Тимертырнаҡ өйөрҙән ҡайырылған Тертелдәк артынан ыржайҙарҙы әйҙәне. Тырт-Мырттың һыны һаман да өйөр башының күҙ алдынан китмәй торҙо. Ҡанығыуы шул тиклем булғандыр. Тертелдәк менән Тырт-Мырт һуйған да ҡаплағандай оҡшаш. Ошо ла булышлыҡ итә, күрәһең. Ауыҙына ҡапҡан ҡалъяны йолҡа тартып алдылармы ни! Был һәмәйеү Тимертырнаҡты оторо ярһытты ғына. Ул, ҡаршыһына осраған тәрән ҡар ҡорғандарын ҡатҡыл күкрәге менән ярып, тағы ла шәберәк алға бара башланы. Асыуына ҡаратырышлығы ла ҡушылды. Диңгеҙ ярына һуҡҡан көслө тулҡындар, цунами менән көрәшеүгә тиң ине ыржайҙарҙың ошолай хәрәкәт итеүе. Ошо тулҡындар ғына булмаһа, улар әллә ҡасан уҡ атылған уҡтай барып етеп, үҙһүҙле ҡыр кәзәһен ҡармап та алған булырҙар ине. Исемен дә һорап тормаҫтар, ҡабып та ҡуйырҙар ине. Өйөргә тигеҙ итеп бүлгәндә бер ҡабымлыҡ ҡына ит киҫәге, ә үҙе ниндәй ыржайҙар менән етәкселек итеп маташа. Тьфү! Әммә ошо рәүешле Тертелдәккә нәфрәтләнеп, ни тиклем нығыраҡ ынтылып, шундайын көсөргәнеш һалыуҙан да ни фәтеүә? Бындай көсөргәнеш уларҙы тәрән көрт аҫтына тағы ла нығыраҡ батыра ла, киреһенсә, Тертелдәк менән уларҙың араһы торған һайын алыҫлаша ғына төшә. Көсөргәнеш көрт аҫтына тарта. Ихтыярһыҙлыҡ булған урында уҫаллыҡ алға сыға. Тап

шуның һымаҡ. Уҫаллыҡ иһә ҡанды ҡайната, аңды томалай һәм хәлде тиҙ ала. Уҫаллыҡ был осраҡта аяҡҡа тышау ғына. Ыржайҙар мәгәр башҡа төрлө була ла алмай. Был саҡта хатта ҡайнар ҡан эсеү, татлы ит ашап кинәнеү ниәте лә бойомға ашмаҫ хыял булып күренә башлай. Ыржай һынлы ыржай өсөн аҙау тешкә килеп эләккән табышты ауыҙҙан ысҡындырыуҙан да ҙурыраҡ күңел ҡайтыуы юҡ һымаҡ. Етмәһә, улар аҙна-ун көн йүнле ризыҡ ҡапҡаны юҡ.

Әммә... Ашарға, нисек булһа ла тамаҡ туйҙырырға ынтылыу хисе һәр ҡаршылыҡты тупаҫ көс менән емереп, аҙау теш менән ҡайырып өйрәнгән ыржайҙарҙы ла хәйләгә барырға мәжбүр итә. Ваҡытлыса төлкө булып торорға ла тура килә уларға. Төлкөләрҙе хәйлә тоҡсайы булғаны өсөн күралмай ыржайҙар. Әммә уларҙың хәйләкәрлеге бына ошондай саҡта иҫтәренә төшә. Төлкөләккә күҙ ҙә йомола. Кем белә лә кем күрә төлкө халәтендәге ыржайҙарҙы. Маҡсат ысулды аҡлай, тиҙәр. Ҡоралайҙарҙы нисек итеп баҫтырып тотоу мөһим түгел, тамаҡ туйҙырыу мөһимерәк. Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә. Күпте күргән, күпте кисергән өйөр башлығы хәҙер инде бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: ғәҙел йүгереп ярышыу һәм ҡасыу-баҫтырыу бәйгеһендә улар ҡоралайҙарҙан күпкә ҡалыша. Ыржайҙарҙың өс-дүрт һикергән араны бер һикереүҙә үтеүсе илектәрҙең артынан туп-тура ғына доҡойоу – бер ҡатлылыҡҡа тиң ахмаҡлыҡ. Шуның өсөн дә иң дөрөҫ юл – ҡасыусының булмышына ҡурҡыу һалып, ҡотон алыу. Быны өсөн ҡоралай албырғап ҡалырға һәм дөрөҫ булмаған хәрәкәттәр яһарға, сәбәләнергә тейеш. Ошо ниәт тормошҡа ашһа, ҡорбан, ҡайһы яҡҡа ҡасырға белмәйенсә, икеләнеү ҡулсаһында ҡаласаҡ та үҙенән-үҙе ыржайҙарҙың ауыҙына килеп ауасаҡ.

Ғәҙәттән тыш фиҙакәрлек, саманан артыҡ көсөргәнеш һалмаһаң, ит ҡаба алмаҫһың, тигән хәҡиҡәтте лә яҡшы аңлай Тимертырнаҡ. Бына хәҙер ул ана шундай көсөргәнеште һалырға, килеп тыуған хәлде үҙгәртергә тейеш. Ул үҙҙәренән алыҫая барыусы Тертелдәктең сираттағы үҙәккә инеп юғалғанын көтөп кенә барҙы ла, башҡаларға юлды дауам итергә бойороп, үҙе ултыртылған ҡарағайлыҡҡа йәһәт кенә боролоп инде. Ағаслыҡтың ситенә ел һырынты өйгән, ә инде эске яҡта ҡарағай ылыҫтары ышығында ҡарҙың тәрәнлеге ыржайҙың тубығы тиклем дә булмаҫ. Әгәр ҙә ниәте бойомға ашһа, ул ошо ҡарағайҙар араһынан сабып барып, ҡоралайҙың ҡаршыһына сығып өлгөрөргә тейеш. Әгәр ҙә ул ошоно эшләмәһә, Тертелдәк бер аҙҙан үргә табан артылып, бөтөнләйгә эҙ яҙҙырасаҡ.

Тимертырнаҡтың артынан ҡар саңы ғына борҡоно. Ҡарағайҙарҙың ҡар йәбешеүҙән ергә табан һәлмәкләнеп аҫылынған ботаҡтарына ара-тирә уның һырты ҡағылыуҙан тигеҙ рәт булып теҙелгән ағастар араһында ҡар яуып үткәндәй тойолдо. Тимертырнаҡ, елдәй елеп, ҡарағайлыҡтың осона тиклем сабып барып та етте. Урманлыҡ бөткән урында артабан тау үре башлана. Әгәр ҙә Тертелдәк үргә артыла башлаған булһа, артабан уны эҙәрлекләү – мәғәнәһеҙлек. Тимертырнаҡ үр башланған тарафҡа табан ике тапҡыр ынтылып ырғыны, өсөнсөгә үрәпсегәнендә бынан бер минут самаһы элек илекте һуңғы тапҡыр күҙҙән юғалтҡан үҙәккә күҙ ташлап өлгөрҙө. Йәненә йүгереп йылы инеп китте Тимертырнаҡтың. Ыржайҙар ҙа шатлана белә микән? Ҡоралай, бер ни булмағандай, ул баҫып торған үр башланған тарафҡа менеп килә. Унан күпкә артта ҡалышып, ыржайҙар ҡар ярып ығыша.

Хәҙер инде Тимертырнаҡҡа тап ошо ерҙә ҡорбанын көтәүелләргә генә ҡала. Килеп күренеүе менән өҫтөнә ырғыр өсөн хәл йыйырға, тын алырға ла форсат бар. Әммә көтөү ғазапҡа тиң. Секундтар – минуттай, минуттар сәғәттәй тойола былдай саҡта. Тимертырнаҡ, күкрәгенән сығарған тынын мөмкин тиклем ҡар аҫтына ебәрергә тырышып, үҙенсә йәһәт кенә әүәләп алған ҡар өңөнә инеп боҫто. Ҡарһаланып ҡасып килгән илектең тынын ул хәҙер тойоп аласаҡ та. Әммә

күптән инде танауына бәрелер тын һаман да тойолманы. Туҡта, әгәр ҙә теге Тертелдәк ул боҫҡан ергә килмәйенсә, икенсе яҡтан тау үренә һыпыртһа? Тимертырнаҡ асырғанып тағы ла һауаға һикерҙе. Тойомлауы дөрөҫкә сыҡты: теге хәстрүш, ысынлап та, саҡ ҡына ситкәрәк тартылып, үргә икенсе урындан ынтылмаҡсы. Тағы ла бер көсөргәнеш талап итеlә өйөр башлығынан. Ул үргә табан ҡапыл ырғыны ла, күкрәгенә һуғылған ҡар ҡорғанына эләгә-сәсәй, асырғана-асырғана, Тертелдәктән саҡ ҡына алғараҡ сығып, уны тау түбәненә табан кире ҡайырырға яҫҡынды. Уның ниәтен белгән һымаҡ, Тертелдәк тә ҡапыл туҡталып, ҡатып ҡалды. Ошо секундтар Тимертырнаҡ файҙаһына ине. Өйөр башлығы аҡтыҡ көсөн туплап тағы  бер ынтылды ла, Тертелдәктең күҙенә салыныр урынға барып еткәс: “Күрмәһәң, күр, бына мин булам!” тигән һымағыраҡ, шулай уҡ хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Маҡсатына өлгәште. Албырғатты. Ҡорбаны кинәт боролоп, килгән юлына табан ҡуҙғалды. Үҙенең әле генә үткән эҙҙәренә баҫып бер-ике һикергәс, артынан ҡыуа килеүсе башҡа ыржайҙарҙы күреп ҡалғас, тағы ла ҡырын яҡҡа тартылды. Уның был йүнәлешенә алдан уҡ әҙер торған Тимертырнаҡ йәнә бер көсөргәнеш яһап, Тертелдәкте тағы ла килгән  яғына боролорға мәжбүр итте.

Тертелдәк өс яҡтан ҡамалды. Әлегә уның өсөн берҙән-бер асыҡ ҡалған дүртенсе тараф әле генә өйөр башлығы Тимертырнаҡ елдәй елеп үткән ағаслыҡҡа барып терәлә. Әгәр ҙә Тертелдәк шунда, тик шунда барып етһә, әжәлдән ысҡынасаҡ. Өйөр башлығы тау түбәнендә ҡар ҡорғандары менән айҡашҡан ыржайҙарға ҡараш ташланы. Көсөктәренең әсәһе Һортойҙо бер ҡарауҙан таныны. Олоған тауыш сығарып ырылдап ҡуйҙы. Тимертырнаҡтан өс йәшкә өлкән инә ыржай уның тик бүреләр генә алыҫ арауыҡтан аңлаша ала торған лөғәтен  йәһәт төшөндө. Ул, көсөгө Һәүеректе эйәртеп, шундуҡ ағаслыҡҡа йомолдо. Ҡалған ыржайҙар иһә ҡамауҙа ырғандаған Тертелдәкте ян-яҡтан урауға алды.

Ҡалған ваҡиғаларҙы Тимертырнаҡ баҫҡан урынынан ғына ҡымшанмай күҙәтте. Үҙе ҡорған тоҙаҡҡа ҡоралайҙың нисек барып ҡапҡанын рәхәтләнеп ҡарарға ярата ул. Режиссер һымаҡ. Уйлағаны раҫҡа сыҡты. Әгәр ҙә Тертелдәк, ыржайҙарҙың ҡорған мәкерен һиҙеп, ҡапыл кирегә боролоп был яҡҡа табан яҫҡынырға уйлаһа, һаҡлыҡ өсөн дә өйөр башы ошо урында ҡалырға тейеш. Был – беренсенән, икенсенән,  ыржайҙар ҡоралайҙы йығып боғаҙлаған хәлдә лә, ул килеп етеп, итенән  ауыҙ итеп ҡарамайынса, ризыҡҡа берәү ҙә йоғонмаясаҡ. Был – Тимернаҡтың үҙ өйөрөндә урынлаштырған тәртибе. Ҡануны. Уны боҙорға берәү ҙә баҙнат итмәй.

Әммә аҫта барған ваҡиғалар ҡапыл ғына икенсе һүрәтләнеш алды. Өйөр башлығының ҡорған сценарийы буйынса тамамланманы һунар. Ҡайҙан килеп сыҡты һуң тағы ла бер ҡоралай?

***

Үрһәләнеп сәбәләнгән Тертелдәк буталып бөттө. Ҡайһы яҡта ыржайҙар, ҡайһы яҡҡа ҡотолоу юлы киткәнен дә белмәй ул хәҙер. Тегеләй барһа ла – ыржайҙар, былай йүгерһә лә – ыржайҙар. Шул рәүешле урталыҡта тыбызыҡлаған сағында күҙенә салынған ағаслыҡты ул ҡотолоу юлы тип ҡабул итте. Тап шул ағаслыҡтың арьяғына ҡасҡан тоҡомдаштарын да иҫенә төшөрҙө. Шул яҡҡа табан ынтылды ла. Әммә инде ағаслыҡҡа барып еттем тигәнендә, ҡаршыһына килеп сыҡҡан ике ыржай уны туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Ҡарт инә бүре Һортой менән Һәүерек ине улар. Тертелдәк килгән яғына кирегә боролорға итте лә, тамам тоҙаҡтың эсенә килеп инеүен аңлап, Һортой, менән Һәүеректең янынан йүгереп үтмәксе булды. Һортой уға ынтыла биребеләк ҡуйғас, туҡталды, улы Һәүереккә юл бирҙе. Һунар эстафетаһын тапшырҙы. Һунар ҡомарына

тамам бирелгәйне, ҡорбанына ҡаныҡҡайны Һәүерек. Ул Тертелдәкте бер-ике һикереүҙә ҡыуып етте лә уның боғаҙына ырғырға әҙерләнде. Әммә Тертелдәк ситкә ырғып өлгөрҙө. Һәүерек уның артынан уҡ ташланырға иткәйне, яңы ғына Тертелдәк баҫып торған урынға икенсе бер ҡоралай килеп төштө. Ҡайҙан уның алдына килеп сыҡты һуң икенсе ҡоралай? Әллә күҙенә күренәме? Улай тиһәң, ағаслыҡ араһынан ҡапыл атылып килеп сыҡҡан Һөтлөкәйҙе ыржайҙарҙың барыһы ла күрҙе. Һортой уның улының һунарына ҡамасауларға яҫҡынғанын күреп, ситкәрәк ҡайырырға ла маташты. Һөтлөкәй уның башы осонан һикереп үтеп, Һәүеректең алдына килеп төштө. Ҡан туйы башланды. Тертелдәк кенә ятҡан өләсәһен күреп өлгөрмәне. Үҙенең нисек итеп ыржайҙарҙың ауыҙынан ҡотола алыуының сәбәбен дә аңламаны. Өләсәһененең ғүмер эстафетаһын ошо рәүешле итеп ейәнсәренә тапшырғанын да белмәне. Ул ағаслыҡ аша сығып, күптән инде үр башына сыҡҡан тоҡомдаштарына барып ҡушылды.

***

Ҡан туйы оҙаҡҡа һуҙылманы. Хатта Һөтлөкәйҙең ҡайнар ҡанын да эсеп өлгөрмәне Тимертырнаҡ. Барыһына шаһит булған инә бүре Һортой ҡанһырап ятҡан Һөтлөкәй янына яҡын да килмәне. Уның аяҡтарын ниҙер бығауланы. Шул саҡ ҡапыл мылтыҡ шартлауы һәм һунарсыларҙың һай-һайтлап саңғыла үрҙән төшөп килеүе ыржайҙарҙы ҡорбанын ҡалдырып китергә мәжбүр итте. Һөтлөкәйҙең үләкһәһен яҡындағы ауыл эттәре ашап кинәнде.

Төҙтәкәләрҙең ниәте бик етди ине. Улар ыржайҙарҙы ялан еренә сыҡҡансы саңғыла ҡыуып йөрөттө, тигеҙгә сыҡҡас, уларҙың артынан һыбайлылар төштө. Төҙтәкәләр уларҙы икешәрләп ҡыуҙы. Тәүҙә берәүҙәренең аттары арый, уларҙы икенселәр алмаштыра. Бүре ҡыуыу эстафетаһының һуңғы сиратына эләккән аталы-уллы Мырҙағәле менән Айтуған Аласовтар дүртенсе көн тигәндә тамам хәлдән тайған ыржайҙарҙы ҡурсаулыҡ сигендә ҡыуып етте. Йәше етмештән уҙған атай кеше, улына үҙенең һунарсы оҫталығын өйрәтергә теләп, үҙе ҡыуып еткән бүрене Айтуғандың һуғып алыуын теләп, атының башын ситкә борҙо. Бүре һуғыу эстафетаһын ул улы Айтуғанға тапшырҙы. Ун етеһе тулған Айтуған, шулай итеп, үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр бүре алды. Тик теле ауыҙынан сығып, хәлһеҙләнгән бүрене инде ҡыуып еттем тигәнендә,.. икенсе ҡарт бүренең ҡайҙандыр килеп сығып, йәшерәгенә ҡасырға мөмкинлек биреүенең сәбәбен генә аңлай алманы. Көсөгө Һәүерек урынына суҡмар аҫтына ятыусы инә бүре Һортой ине.

– Атай, ә ҡарт инә бүре нишләп үҙе теләп суҡмар аҫтына йомолдо ул? – тип һораны егет Һортойҙоң тиреһен һыҙырған саҡта.

– Белмәйем, ә ниңә мин үҙем һуға торған бүрене һинән һуҡтырҙым һуң, улай булғас? – Атай кеше улының һорауына һорау менән яуап бирҙе.

Аталы-уллы Аласовтар дүрт көн буйына әллә нисә атты арытып, һунар ҡомарына бирелеп, бер генә нәмәне иҫенән сығарған икән. Улар, баҡтиһәң, ҡурсаулыҡ эсендә бүрене һуғып алған! Ҡурсаулыҡ һаҡсылары погонлы төҙтәкәләр менән Мырҙағәленең йортона таңнамаҙҙан килеп, акт төҙөнө. Аңлатманы Мырҙағәле яҙҙы, актҡа ла үҙе ҡул ҡуйҙы. Барыһын да үҙ өҫтөнә алды. “Һунарға яңғыҙым сыҡтым” тип яҙҙы ул тәртип һаҡсылары талап иткән аңлатмаға. “Айтуғанға әле йәшәргә лә йәшәргә, ниңә биографияһын боҙорға, уға әле алдағы йылда институтҡа инергә”,– тип уйланы атай кеше.

Ә был саҡта Айтуған татлы төштәр күреп йоҡлай ине.



**Фәрзәнә**
**АҠБУЛАТОВА**

# МИҢӘ ПАРИЖДАН АЛЫП ҠАЙТ…

## ХИКӘЙӘ

Атаһы Һеләүһендең арҡаһынан ҡаҡты.

– Һеләүһен улым, мин һиңә, һрансуз яуына китмә, тороп ҡал, тип әйтә алмайым. Яҙмыш йөрөтә әҙәм балаһын… Йәнә лә, ата һүҙе түгел был, – Сәмерхан ҡарт, хис-тойғоһон тышҡа сығармаҫҡа тырышып, туҡталыбыраҡ торҙо, тамағын ҡырып алған булды, шунан һүҙен дауам итте. – Хәбибйән ағайың менән икегеҙ ҙә имен-аман әйләнеп ҡайтырһығыҙ, тип өмөт итәм. Тик нығытып әйтеп ҡуяйым: иллә-алла, ағайың менән бер-берегеҙгә терәк булығыҙ.

Сәмерхан ҡарт хәҙер өлкән улына табан боролдо.

– Ҡустың менән бер һүҙле булдың, ныҡ яҡланың, барһын, тинең.

– Атай, һин үҙең дә…

Сәмерхан ҡарт ҡулын ғына һелтәне, күңеле нескәргәнен һиҙҙермәҫ өсөн турайғырҙың ялын һыйпаштырҙы.

– Беҙ бит бөтәбеҙ ҙә яугирҙар затынан, атай! Ата-бабаларҙың даны тураһында һин еткерҙең, беҙҙе батырлыҡҡа рухландырҙың, ҡыйыу булып үҫеүебеҙҙе теләнең! Беҙ боронғолар аманатына тоғро! – Бабаларының батырлыҡтары менән ғорурланған, үҙе лә шулар кеүек булырға хыялланған Һеләүһен ярһып әйтте был һүҙҙәрен.

– Әсәйең килә, улым.

«Их, бына әсәйемде йыуатырлыҡ һүҙҙе нисек табырға?..»

– Хәбибйән улымды яуға йыйына тип ишеткәс, матур төш күргәйнем. Яҡшыға юраным. – Кәримә апай танауын тартып алды. – Ә инде, Һеләүһен ағаһынан ҡалмай, тигәс… Төштәрем дә боларыбыраҡ тора. Берүк хәйерлегә була күрһен. Бына, улым, камзулыңа эс яҡтан бетеү тектем. Был көмөш тәңкәлә көслө доға

*Фәрзәнә Аҡбулатова (1960) Хәйбулла районы Үрнәк ауылында тыуған. Мәскәүҙә М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетын тамамлай. Башҡортостандың Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты. Радиожурналистикала, балалар әҙәбиәтендә емешле эшләй, проза китаптары авторы.*

сүкеп яҙылған. Шуны йөрөткән ҡартатаң да, атаң да бөтөн һуғыш-ороштарҙан имен йөрөп ҡайтҡан, Һеләүһенем.

Еңгәһе өндәшмәй, күҙенән субырлап йәше генә аға. Хәбибйән ағаһының йәш ярымлыҡ улы,  бер нәмә лә аңламай, һаман атаһына ынтыла.

– Сеү, Таңатар балам, атаңа оронсоҡлама…

Мәһинур еңгәһе бәпәйен ҡосағына нығыраҡ ҡыҫа. Тегенеһе орсоҡтай өйөрөлә. Һис кенә тотоп алып булмай.

– Ҡулсыр, бы һынным атаһына оҡшамаҫ!..

Хәбибйән ағаһына оҡшай был һүҙ, ул ҡысҡырып көлөп ебәрә лә улын өҫкә сөйә, унан күкрәгенә ҡыҫа. Йөҙө етдиләнә төшә:

– Мәһинурым, йәнкәйем, әйт: алыҫ яҡтарҙан, баҫҡынсыларҙы аяҡ аҫтына һалып тапап, еңеү тыуын күтәргәндән һуң… – Йәнә мут ҡына йылмая. – Уйла әле, еңеүсенән нимә көтәһең? Нимә алып ҡайтайым һиңә Париждан, кәләш?

– Атаһы, ул халыҡтың нимәһе ҡыҙыҡтырһын? – Мәһинур ирен арҡаһынан һыпырған булды. – Аллаһы Тәғәлә миңә иң ҙур бүләкте биргән дә инде. Ғүмерлек бүләк. Имен-аман ҡайт! Шул ғына.

– Ай, әйткән һүҙең!.. Амин! - Хәбибйән ҡәнәғәт көлдө. – Тик еңеүсенең хаҡы барлығын онотма. Ул үҙ табышын алырға тейеш.

– Шулаймы? – Мәһинур йылмайғандай итте. – Улайһа, миңә Париждан… Беләһеңме, нимә алып ҡайт…

Мәһинурҙың ҡарашы уйсанланды, шул килеш Хәбибйәнгә бер килке ҡарап торҙо ла, йәһәт кенә үрелеп, хәләленең ҡолағына ниҙер бышылданы.

Һеләүһен еңгәһе әйткәнде ишетмәне, тик шуны асыҡ күрҙе: бер заман ағаһы артҡа янтайыбыраҡ китте. «Һе, ағайҙың күҙен даһрайтырлыҡ нимә әйтте икән еңгәм?» Хәбибйән ҡатынына ҡараған килеш тора бирҙе. Мәһинур йомшаҡ ҡына итеп көлдө.

– Алып ҡайтырһыңмы?

– Туҡта, ә нишләп?..

Мәһинур, иренең һүҙен бүлдереп, йәнә ниҙер шыбырланы.

– Кәләш… Кәләш, бер һүҙһеҙ! – Хәбибйән ҡатынын ҡосағына алды. – Кәләшкенәм минең! Алып ҡайтырмын.

Ағаһының ҡатынын ҡосағына алыуын ҡарап тороу килешмәй. Был әҙәпһеҙлек. Егет тиҙ генә сығып китте. Ә шулай ҙа нимә алып ҡайтырға ҡушты һуң еңгәһе? «Ағайымдың иҫ-аҡылын китәрерлек нимә булырға тейеш? Ипләп кенә еңгәйҙең үҙенән белешергәме? Ағайҙан һорап ҡарарғамы? Юҡ, серҙе асмаҫ».

Яуға китеүселәрҙе оҙатырға халыҡ йыйылған. Йоланы тотоп, ауылдың иң өлкән кешеһе Баянғол ҡартҡа һүҙ бирҙеләр. Ул һүҙ һөйләп торманы, тик үтенесен еткерҙе:

– Бағышай улым, әйҙә әле, үҙебеҙҙең үлемһеҙ батырҙарыбыҙға бағышланған берәй көй зыңлат!

Бағышай, йәғни уның Хәбибйән ағаһы, думбыраһын ҡулына ала: батырҙар тураһындағы бағышын башлай. Моңло уның ағаһы Хәбибйән. Ә бит «бағышай» исеменә бик һирәктәр лайыҡ. Хәбибйән – бөтөн ырыуға билгеле бағышай! Һеләүһендең йөрәге ғорурлыҡ менән тулыша. Ул да ҡулындағы ҡурайын йәтешләп тота. Сөнки оҙаҡламай ағаһы уны үҙенә ярҙамға саҡырасаҡ. Туғандарҙы ситтәнерәк күҙәтеп торған Сәмиәрҙең шул мәлдә ирене тартышып ҡуйҙы, сырайы ҡараңғыланды: «Ҡупырсыҡтар! Бында ғына үҙегеҙҙе донъя кендеге итеп хис итәһегеҙ… Йәҙрә шартлаған ергә барып ингәс, йыр-көйҙөң нимә икәнен хәтерегеҙҙән юясаҡһығыҙ әле! Ниңә атайым да шуларға иҫе китеп ҡарап тора? Тапҡан!»

Уның нимә уйлағанын һиҙгәндәй, атаһы Әлтәф Сәмиәргә ҡарап алды. Юҡ,

тегенеһенә лә, быныһына ла һоҡланмай ул. Башында мең төрлө уй болғаныша. Улын һуғышҡа ебәрмәй ҙә әмәле юҡ. Мәсеттә «Батша Манифесын» уҡып ишеттергәндән һуң, Хәбибйәндең атаһы Сәмерхан беренсе булып алға сыҡҡайны. Ул башҡорттоң данлы үткән юлын телгә алып, әле лә уяулыҡҡа, ил алдында яуаплылыҡҡа саҡырҙы. Хатта ике улын изге яуға әҙерләйәсәген әйтте. «Йә, ағайнә алдында ниәтеңде һин дә белгерт», – тип Әлтәфкә боролдо. Йәмәғәт ҡашында уға ла һүҙ әйтергә тура килде.

– Әҙерлән. Һиңә һынау килде. Әгәр ҙә ризалашмаһаң, уҡ-янды миңә алырға тура киләсәк, – бына шулай тине ҡайтҡас атаһы улы Сәмиәргә. – Ана, Сәмерхандың ике улы яуға китергә теләк белдергән. Беҙҙең зат ситтә ятып ҡалырға тейеш түгел!

Ҡанлы-утлы бәрелешкә атлыҡмаһа ла, Сәмиәр атаһына ҡарыша алмай. Атаһы әйтте – бөттө. Бына шулай ғәскәргә яҙылырға тура килде. Юҡ, Сәмиәр ҡурҡаҡтарҙан түгел. Ләкин һрансуз уға янамай бит. Атаһы ғүмер буйы Сәмерхандар тоҡомо менән ярышып көн итте. Баш тартһа, атаһы уны ғүмерҙә лә ғәфү итәсәк түгел. Шуныһы бар.

Урыҫ әрмеһенә ярҙамға барыусы башҡорттар араһында иң йәше булған Һеләүһен ифрат та тулҡынланыу кисерә ине. Башында ҡайнаған һорауҙарын ағаһына ла, атаһына ла биреп бөтөрлөк түгел. Дошманды Рәсәйҙән тиҙерәк ҡыуып сығарыу теләге көслө. Ләкин еңеү өсөн бер теләк кенә етмәй. Француз утлы ҡоралы менән ҡеүәтле, тимер-томоро менән хәтәр. Уларҙың ут-ялҡынлы тубына ҡаршы башҡорттоң аты атлығасаҡ. Йәҙрәгә ҡаршы һыбайлының йылғырлығы, тәүәккәллеге уҡталасаҡ. Дарыға ҡаршы уларҙың яугир ҡаны, яугир хәтере торасаҡ. Бәрәбәрме был көрәш? Ләкин эстәге тәүәккәллек өсөн әлегә бер ниндәй кәртә юҡ. Әләксәндер батша бына бит тап уларға ла мөрәжәғәт итә. Күп ер баҫып алған, үҙенең хәрби ҡеүәтен туҡтауһыҙ үҫтерергә ынтылған урыҫ хакимлығы французлар алдында баҙап ҡалды... Хөр йәшәгән французларға нимәгә кәрәк былдағы һалҡын, ҡырыҫ ерҙәр? Ниндәй уңайлыҡ табырға итә икән? Һәр бер һалдаты баҫып алыу теләге менән янамы? Әллә улар фарман үтәүселәр генәме? Наполеон көслө хужа, уның әрмеһендә төрлө ил халыҡтары тупланған, тиҙәр. Ҡарасәле, Наполеон күпме ил яуларға өлгөргән! Уйланырлыҡ. Һағайтырлыҡ. Тотош донъяны ялмап-яулап алырға ынтылыш борон-борондан килә. Ләкин, ни ҡөҙрәттәндер, бер йыһангирҙың да был хыялы бойомға ашҡаны юҡ әле. Бында Аллаһы Тәғәләгә генә билгеле сер яталыр. Французларҙы ҡыйратып, уларҙы үҙ өңдәренә индереп тығасаҡтарына шикләнмәй Һеләүһен. Бына был, исмаһам, халҡы өсөн һөйөнөслө, иң оло, иң ҡиммәтле бүләк буласаҡ... Бүләк тигәндән, Хәбибйән ағаһы Маһинурына алып ҡайтасаҡ йәдкәр тураһында әлегәсә ауыҙ асып һүҙ әйткәне юҡ. Сымыры кеше. Моғайын, Парижда ғына әйтер.

***

Французлар ҡаты һөжүм итте. Бындай утлы мәхшәрҙән миңрәп ҡалырға була. Эйе, уларҙың үҙҙәренә, еңеүҙәренә ышанысы сикһеҙ. Ялмап киләләр. Шулай уҡ сигенеү ҙә Рәсәй әрмеһе өсөн күп фәһем бирҙе. Ваҡыт бик ҡыҙыҡ икән. Уны кем нисек файҙаланып өлгөрә – күп осраҡ шунан тора. Битараф ул һиңә ваҡыт, шуға уны үҙ яғыңа «ауҙарыр» өсөн йылғырлыҡ кәрәк. Юғиһә, һәғәт эсендә генә ул һинең дошманыңа әйләнә лә ҡуя. Ваҡыт бизмәнен ике көс тә үҙ яғына ауҙарырға тырыша... Ваҡыт тәүҙә французларға хеҙмәт итте. Әйҙә алға барҙылар, әйҙә барҙылар тегеләр... Тик үҙҙәре иҫәп тотҡан ваҡытҡа маҡсаттарына ирешә алманылар, хәҙер ваҡыт Рәсәй яғына «йөҙөн борҙо» ла ҡуйҙы. Француз өсөн Рәсәй киңлектәрендә ризыҡ табыу, йылыныу ауыр мәсьәләгә әйләнә башлау менән,

унының эсендәге еңеү ярһыулығы ла һүрелә, кәмей барҙы. Ваҡыт хәҙер Рәсәй әрмеһенә булыша ине.

Бородинолағы ҡанлы алыш Һеләүһенде бына шундай уйҙарға тарытты. Ваҡыт урыҫ ғәскәренә йөҙө менән боролдо, әгәр ҙә шулай әйтергә яраһа. Наполеондың да һалдаттары элекке һымаҡ кәперәймәй. Йөрәк ҡатып киткәндәй – һәр һөжүм, һәр яуланған аҙым ҡорбан талап итте. Башҡорттар ҙа ҙур юғалтыу кисерҙе. Ҡайғы-шатлыҡ, еңеү-юғалтыу бергә буталған, уҡмашҡан…

Үрәдник чинында Хәбибйән ағаһы, уға еңел түгел. Егермең тулыр-тулмаҫтан сикә сәсең салланһынсәле. Ағаһы үҙенең тиҫтерҙәренән олораҡ күренә. Һөйләшеүе, донъяны аңлауы-аңлатыуы менән дә. Уның менән ер-һыу күргән ир-егеттәр ҙә кәңәш итә. Һеләүһен үҙе лә ағаһына оҡшарға тырыша. Шуға, иңгә-иң терәшеп, күпме дошмандар менән айҡашты. Уның ҡылысы күпме илбаҫарҙың башын ҡыйып ырғытты. Иң тоғро атын – Турайғырын юғалтыуын ауыр кисерҙе Һеләүһен. Тыумыштан өйрәтелгән тиерһең: йәҙрә шартлауынан да, ут гөрһөлдәүенән дә ҡурҡмай ине. Ә бына яңыһын өйрәтеүе анһат булманы. Яңы бейек ат холҡо менән башҡорт атынан айырыла шул. Әлхәмдүлилләһ, хәҙер туп тауышына күнеп килә.

Үрәдник Хәбибйән бригадирҙың фарманын еткерҙе: «Йәһәт кенә йыйналырға!» Бына-бына һөжүмгә күсергә тейештәр. Хәбибйән ағаһының һүҙе яугирҙары йөрәгенә үтеп инә. Еңеү менән йәшәргә тейешлегенә инанған әҙәм генә ҡул аҫтындағыларын шулай рухландыра белә. Ул – ысын бағышай, кәрәк фекерен һүҙ аша ғына түгел, йыр менән дә әйтеп бирә.

– Ә бит замандар булған! Беҙҙең төрки бабаларыбыҙҙың ҡылысынан бер яуыз да ҡотола алмаған! Төркиҙәрме дошманға баш эйгән! Аллам һаҡлаһын! Улар осҡан уҡтан шәберәк, һеләүһендән йылғырыраҡ!..

Һеләүһенгә Хәбибйән ағаһы аҙаҡҡы һүҙҙәрен уға төбәгәндәй тойолдо. Егеттең булмышын ғорурлыҡ тойғоһо биләне, үҙе лә һиҙмәҫтән башын күтәреп, турайыбыраҡ ултырҙы. Ағаһы уны хуплап баш ҡағалыр кеүек, хатта. Һөйләгән сағында башын уңға ла, һулға ла бороп, яуҙаштарына диҡҡәт менән текләп алырға яратҡан Хәбибйән ағаһы уны ғына түгел, һәр кемде күрә, хатта кемдең нимә тураһында уйлағанын да һиҙә.

– Бабаларыбыҙҙың үлемһеҙ ораны яңғыраған Аурупа илдәре буйлап беҙ ҙә уҙырбыҙ! Тарих ҡабатлана. Мин әйтте тиерһегеҙ, урыҫ әрмеһе беҙгә таянды, таяныр ҙа!

– Өлкән илдәрҙе яулаясағыбыҙҙы полк бағышайы ҡалай матур әйтеп бирҙе, – тине бер башҡорт.

Уның эргәһендә ултырған Сәмиәр икенсе төрлөрәк уйҙа. Рәсәй – уртаҡ Ватан, ләкин Сәмиәрҙең ана шул Ватандан да ҡиммәтерәк нәмәһе бар. Үҙе ҡорған донъяһы, ғаиләһе. Ҡайҙалыр кафырҙар ерендә ятып ҡалғыһы килмәй уның. Хәбибйәндәр һымаҡ, әллә ниндәй илһөйәрлек тойғоһо, ҡаһарманлыҡ хисе менән янмаһа ла, эйәрҙе. Шулай кәрәк ине. Һынатманы. Бүтәндәр күргәнде күрҙе. Бүтәндәр һымаҡ уҡ алышты. Һуғыш юлы уны ла күпкә өйрәтте. Хәҙер тыуған яҡтарына имен-аман ҡайтып төшһә, ҡайһы берәүҙәр менән нисегерәк һөйләшергә, нисегерәк ауыҙҙарын ябырға ла белә ул. Тик әйләнеп ҡайтырға яҙһын. Иҫән ҡайтыу тураһында уйлау яҙыҡ түгел, ҡысҡырып әйтмәһәләр ҙә, бүтәндәр ҙә шул хаҡта уйлай. Ләкин кемдәргәлер билгеһеҙ яугир булып ҡырҙа, бына ситят тарафтарҙа ятып ҡалырға тура киләсәк…

Ағаһының телмәрен ауыҙ асып тыңлаған Һеләүһен күкрәк тәңгәлендәге көмөш тәңкәһен һыпырып ҡуйҙы. Һәр яу алдынан егет тәңкәһен һыйпап ала.

Төркиҙәр. Булған бит уларҙың да донъяны дер һелкеткән мәлдәре. Ҙур ерҙәр хужаһы, иркенлектә ирәүәнләгәндәр. Халыҡтар ҙа ерҙә алмаш-тилмәш хакимлыҡ итә. Ни сәбәптән көслө ҡәүемдәр тарҡала, бүлгесләнә, йотола? Ни өсөн улар урынына икенсе халыҡтар килә? Был – бер Алла ғына белә торған хикмәт... Ваҡланмаған, тарҡалмаған булһасы төркиҙәр! Хәҙер кем хакимлығында ғына көн итмәй уларҙың вариҫтары. Хәйер, төркиҙәр ҙә төрлө. Ҡайһы берәүҙәре – ысын һуғышсы. Икенселәре сауҙа менән көн итеүҙе хуп күрә. Берәүҙәргә – буйһоноу, башҡаларына буйһондороу хас. Бер ғаилә эсендә генә лә нисәмә төрлө бала, нисәмә холоҡ, ҡәүемдәр тураһында әйтергә түгел. Уның ҡартатаһы ла, ат тураһында һүҙ сыҡһа, ҡалҡып ултырыр, күҙҙәре ут булып яныр ине. Ҡанда был хәтер, ҡанда! Башҡорттар үҙ оһоллоғон, яугирлығын юғалтмаған. Ләкин һуғышсанлыҡ – туп-тура ут эсенә барып инеү тигән һүҙ түгел. Һәр алышта йылғырлыҡ, хәйләкәрлек, дошман көтмәгән аҙымды яһай белеү кәрәк. Был – ваҡытлы шөғөл, тип оҫталыҡты үҫтермәһәң, таһыллыҡты арттырмаһаң, алыш серҙәрен өйрәнеүҙе өҙлөкһөҙ дауам итмәһәң, камиллыҡ кәмей, йөрәк һүрелә. Үҙ заманың менән һин дә үҫ. Французлар артиллерияһы гөрһөлдәүендә шундай уйҙар тыуа күңелдә.

Рәсәй әрмеһе үҙе һөжүм итеүсегә әйләнде, дошманын еренән аяуһыҙ ҡыуа. Урыҫ ҡалалары артта ҡала бара. Эҙәрлекләүгә дусар ителгән Наполеон әрмеһе, ҡамауға ҡалмаҫ өсөн, ҡыҙыу-ҡыҙыу сигенә. Уны шулай уҡ аслыҡ та, партизан менән крәҫтиәндең һөжүме лә ҡурҡыта. Ә алға барыусылар өсөн көнбайыш офоғо торған һайын киңәйә генә. Наполеон ашыға. Рәсәйҙең сигенән кире сыҡһа, гүйә, уны ҡосаҡ йәйеп ҡаршылайҙар, көтәләр, гүйә, язанан ҡотола. Юҡ, беҙ Рәсәй сигендә туҡталмаясаҡбыҙ, ти ҡайһы бер офицерҙар. Артабан Ярман иленә үтергәме, әллә Рәсәй сигендә туҡталырғамы – был турала юғарыла фекер алышыу, хатта бәхәстәр бара икән, һәм барыһы ла батшаның фарманын көтә. Һаман да ошондай тиҙлекте тотҡанда, шик юҡ, батша Рәсәй сиген үтеп, ары китеү теләге менән янасаҡ. Уңыш бит урыҫ әрмеһе яғында.

Ағаһының һүҙе менән эше айырылғаны юҡ. Бына шуға ла иптәштәре уға ышана. Ләкин уның ялҡынлы һүҙе генә тәьҫир итмәй «ағайнәгә», Хәбибйән – полкта берҙән-бер бағышай, боронғо бабаларыбыҙҙың ҡаһарманлығын данлаған йырҙарҙы уның кеүек башҡарған берәү ҙә юҡ. Бағышлауҙарҙы бихисап ағаһының. Хәтерле-зиһенле бала булараҡ, бәләкәйҙән ҡарттарҙы тыңлап, бөтәһен дә эсендә һеңдереп барған. Шуға ла ҡарттар уға «бағышай» тигән оло исемде үҙҙәре биргән. Хәбибйән ҡулына думбыраһын алды. Йәтешләп ултырҙы.

– Ағайнә, был бағыш беҙҙе яңы алышҡа рухландырһын, – ул тамаҡ ҡырып алды ла думбыраһын сиртергә кереште. Моңло тауыш тулҡын булып алыҫҡа таралды.

*Парижды ла алырбыҙ,*
*Аурупаны яуларбыҙ,*
*Әммә ысын бәхетте*
*Тик Уралда табырбыҙ,*
*Үҙебеҙҙең Ватанға*
*Батыр булып ҡайтырбыҙ...*

Төркиҙәрҙе тарихын юйып, батырлыҡтарын кәмһетеп күрһәтергә тырышһалар ҙа, Аллаға шөкөр, ҡайҙа ла тереклекте данлап үткән улар, ти Хәбибйән ағаһы. Шуға ла улар сикһеҙ ерҙәр биләгән. Йырҙарында ла сағыла. Иркенлек, ауҡанлыҡ әле лә уларҙың тәбиғәтендә. Үҙҙәренең алдынғы ҡарашлы булыуҙары менән маһайып, бүтән халыҡтарға түбәнһетеп ҡараған аурупалылар «мәҙәниәтлектәр»ен баҫып алған илдәрендә «бик яҡшы күрһәткәндәр» – улар үткән ерҙә

ҡалған харабалар ғына ҡалған. Улар үткән ерҙә янғын дөрләгән. Эйе, тап улар – бер урында һөрһөгәндәр – саф ерҙәргә һәләкәт алып килгән… Байлыҡ ҡыҙыҡтырған уларҙы, анһат юл менән үҙләштереләсәк байлыҡ, тап ошо тәкәбберҙәр бүтән халыҡтарҙы ҡоллоҡҡа әүерелдереү хыялы менән ауыҙ һыуын ҡороҡҡан. Бына бит әле лә дошман ҡалдырған ярымемерек ҡала-ауылдар буйлап үтәләр. Ер-һыу иңрәй. Урман яна, басыу яна, йорттар яна...

Ә ағаһының яңы сығарған бағышы төрки-башҡорт тарихын бәйән итә. Ул шундай матур итеп һөйләй, бөтәһе лә күҙ алдында асыҡ төҫмөрләнә, ата-баба ынтылышы һинекенә әүерелә… Ауыр юл. Был – ысын ирҙең юлы. Ат һәм ир. Толпарың менән бер йәнгә әүереләһең. Һин арығанда арғымаҡ алып бара, арғымаҡ арығанда – һин уны алға әйҙәйһең. Һеҙ – бер-берегеҙгә көс-ҡеүәт. Улай ғына ла түгел, һин дошманды еңер өсөн алған ҡоралың менән дә бер бөтөнгә әйләнәһең. Уҡҡа, суҡмарға, ҡылысҡа әүереләһең. Шул камиллыҡҡа өлгәшмәйенсә, дошманды нисек еңмәкһең? Ай-һай, башҡорт атының сыҙамлығы! Күпме иптәштәрҙе үлемдән алып сыҡты ул!

Тыуған яҡ, арҡагөн, йәғни ғаилә, бала-сағаны, төрлө хәлдәрҙе иҫкә алғас, күңел йомшарып, тынысланып кителә. Тыуған яҡ тураһындағы хәтирә – күңел шифаһы. Тик ул һаман алыҫлаша бара...

– Ҡустым, оло ҡайғыға тарыған ҡарт ише, нишләп ҡаш йыйырып, маңлай сырыштырып ултыраһың? Хәҙер илап ебәрәһең бит! Оло хәсрәт баҫтымы был йәш башты?

Ауылдашы Иштуған ағаһының тауышынан тертләгән Һеләүһен башын күтәрҙе. Ана, мыйығын һыпыра-һыпыра көлөп тора ул.

– Юҡ та,– егет, ниндәйҙер йөктән арынырға иткәндәй, башын ныҡ итеп сайҡап ҡуйҙы. Иштуған ағайҙы аптыратырлыҡ шулай шөкәтһеҙ ҡиәфәткә индеме икән ни? Уға уңайһыҙ булып китте.

Иштуған ағай ҙа шаяртып алырға ярата.

– Сеңләп ҡалған кәләшең юҡ, ҡустым. Бына беҙ генә…

– Ағай, һинең ауыҙ гел йырыҡ.

– Шулаймы, һа-һа-һа!

– Еңгәй иҫкә төшәлер.

– Еңгәң иҫкә төшһә, киреһенсә, ауыҙ асылмай. Мыжыҡ та баһа еңгәң! Ҡолаҡ итен сәйнәп, быт-быт-бытылдап тик йөрөй торғайны, туҡтатып булмай, бер башлаһа. Бытбылдығым… Бына әле йылдан ашыу ҡолаҡ итен сәйнәгәне юҡ. Мәйтәм, үҙен бында алып килергә кәрәк булған икән бисәкәйҙең. Сәрелдек тауышын ишетеү менән, бөтөн француз сатай-ботай ҡасып бөтөр ине. Береһе сыҙамаҫ ине.

– Ул тиклем телдәр бисәне ҡайҙан таптың һуң, ағай?

– Ә быныһын, ҡустым, атай-әсәйҙән һорарға кәрәк булған. Тик улар икеһе лә хәҙер – ысын донъяла. Еңгәң уларҙың бүләге булды. – Шунан Иштуған ағай ҡәнәғәт тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы. – Ярай, ҡалай булһа ла – үҙемдеке. Бында, минең янда йөрөһә, мәйтәм… Эй, сымыры үҙе. Шәп уның бишбармағы!..

– Яратаһың, ағай!

– Уныһы ниткән һүҙ була! – Иштуған ағай уңайһыҙланып уҡ китте. – Яратам тип, ҡуй, һин бигерәк килешмәгәнде…

Уларҙы тыңлап торған Сәмиәр ҡыҫылмайынса түҙмәне.

– Яратмағас нишләп тораһың?

– Хәйер, анау тиклем баламдың әсәһе – үҙ бәғерем… – Иштуған ағай күҙҙәрен селт-селт йомдо. «Яратам» тип халыҡ алдында әйтеү юҡ бит инде ул!

Һеләүһен ярҙамға килде.

– Тормош ҡороуҙы яратыуға ғына ҡайтарып булмай, Сәмиәр ағай. Кешенең бурысы бар был донъяла. Ғаилә, бала-сағалы булыу – ул бурыс…

Сәмиәр бүлдерҙе.

– «Бурыс» тигәне нисек? Йә әле, аңлат беҙ аңраларға, Һеләүһен ҡусты!

Инде һүҙгә Хәбибйән ағаһы ҡушылды.

– Сәмиәр, һин бала-саға түгел. Ул бурысты үҙең аңлатырға тейеш ҡустыларға.

– Ә шулай ҙа? – тип еңмешләнде тегеһе.

– Бына, мәҫәлән, мин һуғыштан әйләнеп ҡайта алмаһам, минең ҡатынды кем ҡарарға, баламды кем кеше итергә тейеш? Кем минең улыма атаһының ысын батыр булғанын, ниндәй ҡаһарманлыҡтар ҡылғанын һөйләргә тейеш? Кем уны һөнәргә, донъя көтөргә өйрәтергә тейеш? Беҙҙең башҡортта был – ҡусты бурысы.

– Һай-й-й, донъя! Алда нимә көтә беҙҙе, бер Алла ғына белә. Һәммәбеҙгә лә имен-аман ҡайтып етергә яҙһын, – тине Иштуған ағай. – Ҡанасәле, Хәбибйән ҡустым, думбыраңды бер сиртеп ал, әлегә бағышай бурысыңды онотма. Йөрәктә ут тоҡандырған берәй бағышлауҙы ишеттер. Башҡорттоң данлы юлы тураһындағы бағыш уятһын беҙҙең күңелде! Быуындарға көс-ҡеүәт өҫтәһен. Булған бит беҙҙең данлы ата-бабалар. Һай-й-й, булған шул!..

***

Сәмиәрҙе дүрт иптәше менән разведкаға ебәрҙеләр, дошман тылына үтеп инер өсөн бер нисә көн туҡтауһыҙ алға барҙылар. Арманһыҙ булдылар. Ул төндө ҡарауылда Сәмиәр торҙо. Их, арытылған ине шул. Ойоп киткәнен һиҙмәне лә. Уянғанда һуң ине. Хатта тын да ала алмай ҡатты: уның күҙ алдында иптәштәрен француз һалдаттары юҡ итте. Ә ул юлһыҙ-ниһеҙ сапты ла сапты. Был мәлдә уның артынан пуля ла ҡыуып етә алмаҫ ине. Әжәлдән ҡотола алды, ләкин бер үҙенең генә ҡайта алыуы һағайтты ҡай берәүҙәрҙе. Хәбибйән нисек кенә һорау алманы ла ниндәй генә һүҙҙәр әйтмәне. Сәмиәрҙе һатлыҡта ғәйепләрлек дәлиле юҡ ине барыбер. Шулай ҙа көйҙөргөс ҡарашы Сәмиәрҙе һаман эҙәрлекләне. «Һинең арҡала иң яҡшылар арабыҙҙан китте, һин һаттың» тигәнде уҡыны был күҙҙәрҙән. Юҡ, Сәмиәр һатманы береһен дә. Уяулығын ғына юғалтты. Кемгә еңел ҡәһәрле яу юлында? Унда отоу ҙа, отолоу ҙа бер булып симәлгән!

Йөрәк, әлбиттә, һыҡраны. Ойоп китмәгән булһа, дуҫтары ла, бәлки, иҫән булырҙар ине. Хәҙер үкенеп тә нимә эшләйһең! Һуғыш ниндәй генә хәлдәргә тарытмай. Ул бит берәүҙе лә һатманы! Сәмиәр ошоға хәтлем дошмандар менән арыҫландай алышманымы ни? Күпме яуыз баҫҡынсы уның ҡылысы, уның һөңгөһө аша үтте. Һин, Хәбибйән, хитлашма, барыбер минең ҡойроҡҡа баҫа алмаясаҡһың.

Бына үрәдник башҡорттарына ашыҡмай ғына нимәлер аңлата. Сәмиәр уянып киткәндәй булды. Ҡолаҡ һалды.

– Эйе, ата-бабаларыбыҙ донъяға асыҡ ҡараш менән йәшәгән, дошманына ҡаршы киң күкрәк менән барған. Берәүгә лә тынғылыҡ бирмәгән улар, дауыл, зил-зилә ҡуптарғандар. Төркиҙәр һәр саҡ хәрәкәттә булған, улар шулай сафланған, шулай пакланған. Ә бер урында һерһегән халыҡ былдай сафлыҡтан мәхрүм, уларҙың күңеле керләнә, тутыға һәм ағыулана башлай. Улар ошо ағыу менән бүтәндәрҙе тонсоҡтороу тураһында ғына хыяллана. Төркиҙәр шундай ағыулы йыландарҙы юҡ иткәндәр. Өҙәңгегә аяғын терәгән башҡорт менән дә ел генә ярыша ала. Беҙ бына шундай ҡаһарман бабаларыбыҙҙың вариҫтары. Беҙ бөгөн дә улар саҡырыуына тоғробоҙ, ағайнә!

Сәмиәрҙең эргәһенә белеше, полктың писары Иван Петрович килеп ултырҙы.

Был хәйләкәр ҡарашлы урыҫ һине үҙе һатып ебәрерлек башҡортса яҡшы һөйләшә, үҙе илгәҙәк кеше ул. Артыҡ лауылдаҡлығы, ҡысҡырып көлөүе менән генә ҡай саҡ йәнде көйҙөрөп алыуын иҫәпкә алмағанда, насар кеше түгел. Сәмиәр уның менән күптән таныш. Атаһы Андреевка тигән ауылға алыш-бирешкә барғанда Сәмиәрҙе үҙе менән ҡуша ала торғайны, Мишариндарға төшөп йөрөнөләр. Ә Иван Петрович шулар затынан. Сәмиәрҙе бында үҙе килеп тапты.

– Матур һөйләй ҡәһәрең, ә! Һандуғас кеүек һайрай.

Ысынлап маҡтаймы, әллә эсе көтөрләйме бының? Сәмиәр уға ҡарап алды, тик ләм-мим өндәшмәне.

– Батшаны бер әрләгән, тип ишеттем бит әле. Башҡорттоң иркен ҡыҫа, имеш.

– Була инде ундай һөйләшеүҙәр, – тип тешен ҡыҫып әйтеп ҡуйҙы Сәмиәр. – Ябай урыҫ һалдаты ла батшаны һүгеп ала йәне көйгәндә. Беҙ бит бында байрамға йыйылмаған. Һуҡранһаң, кемделер әрләһәң, үҙеңә арыуыраҡ булып киткәндәй.

– Бөгөн кәйефең юҡ, Сәмиәр. Ярай, мин киттем.

Мишаринға Хәбибйәндең «бер урында һөрһөгәндәр» тигәне оҡшаманы. Был башҡорттоң телен ҡыҫҡартырға тура килмәгәйе. Ә бит милләттәштәре уға ышана. Урядниктың улар араһында дәрәжәһе ҙур. Һәм, Европаға үтеп ингән һайын, абруйы үҫә бара. Әйе, Хәбибйән бәйҙән ысҡына бара, аҡыл әйәһеме ни, әллә кем булып ҡылана башланы.

***

Днепрға етәрәк Салтановканан әллә ни алыҫ булмаған бер ерҙә башҡорттарға яҡташтары менән осрашыу насип булды. Тиктормаҫ, тынғыһыҙ Иштуған ағай ишетте әле был хәбәрҙе. Кем ашалыр, йәнәһе, бер башҡорт хәбәр ебәргән. «Яҡташтарым, башҡорттарым булһа, килеп китергә сара табығыҙ!» Ауырый, зәғиф, шуға үҙе килә алмай, тинеләр. Салтановка тирәһендә ҡасандыр төркиҙәр төйәкләнгән булғандыр. Төрки ҡәбиләләренең ерҙәре иркен булған, тип уйланы Һеләүһен. Аурупаға барған һайын төрки атамалары тороп ҡалған күпме ер-һыу тапты улар. Тарихтың төбөнә төшөрлөк түгел, иҫ киткес.

Тынғыһыҙ Хәбибйән ағаһы түҙмәне: Иштуғанды, Сәмиәрҙе һәм ҡустыһын алып, юлға сыҡты. Иртәме-кисме ҡуҙғалырға торалар, өлгөрөргә кәрәк. Башҡорт иленән шул тиклем алыҫта йәшәгән был әҙәм менән күрешеү үҙе ғәжәп хәл буласаҡ. Бейек ағас йортҡа алып барҙы уларҙы юлдашы. Йорт хужаһы, ысынлап та, Байғусҡар атлы башҡорт булып сыҡты. Аҡһай-аҡһай ҡунаҡтарын ҡаршы алырға сыҡты. Күҙ йәштәрен һөрткәс, ултырып доға ҡылдылар. Шунан ғына ҡырҙа көн итеүсе ағайҙың тарихы әрме менән бәйле икәне мәғлүм булды.

Был табын башҡорто бер байҙың урынына хеҙмәткә китә. Егерме биш йылдан һуң тыуған яҡтарына ҡайта. Тик шатлығы хәсрәт менән алмашына. Туған-тыумасаһы ҡалмаған, булған ерҙәрен бер урыҫ байы талап алған. Уны әрмегә ебәргән байҙарҙан ярҙам урынына кәмһетеү һүҙҙәре генә ишетә, йәғни рәхмәт урынына ғәҙелһеҙлек менән тап итешә. Ҡыҙыу ҡанлы башҡорт күп уйлап тормай, үс итеп байҙың ҡыҙын урлап ҡаса. Хеҙмәттә сағында Николай Бунин тигән бик һәйбәт иптәше була. Тегенең ҡасандыр үҙенә саҡырғанын иҫендә тотоп, эҙ яҙлыҡтырыу маҡсатынан, шул тарафҡа юллана. Бында бер нисә мосолман ғаиләһе лә йәшәй. Һөнәрле кеше ҡайҙа ла хур булмай. Матур, етеш тормош көтә, ләкин балалары бер-бер артлы үлеп тора. Ҡатыны ла һаулыҡҡа мандымай. Бисәһе үлеп ҡалғандан һуң, тамам өмөтһеҙләккә төшә. Байғусҡар инде ҡайтыуға өмөтләнмәй, аяҡтары йөрөмәй тиерлек. Бер генә йыуанысы бар. Әйе, уның берҙән-бер ҡыҙы. Балаҡайы, Миңъямалы, өсөн бөтөн хафалары. Йүгереп йөрөп аш хәстәрләгән ҡыҙына ҡарап, уның күҙҙәре йәшкәҙәне. Һиҙҙермәҫкә кәрәк.

Бына бит Хоҙайҙың ҡөҙрәте: башҡорт ирҙәре – унының өй түрендә. Башҡорттоң һайлам ир-егеттәре ултыра! Аҫылдары. Ҡурай уйнайҙар, башҡорт йырын йырлайҙар. Мәҡәл-әйтемдәре менән телмәргә йән өрәләр. Бай шул башҡорттоң күңел донъяһы, вай, хайран ҡалырлыҡ бай!

– Шыпа ашамайһығыҙ. Йәгеҙ инде, тотоғоҙ туҫтаҡтарығыҙҙы, һыуый һурпа, бер уртлағыҙ! Ялы һоғондорам! Бир, һурпа өҫтәйем!

Ул йүгереп китерҙәй булып талпына. Аяҡтары һыҙлауы ла баҫылғандай. Ҡурайҙы алып өрөп ҡарай. Ҡасандыр үҙе лә ҡурай тартып булаша ине. Һа-ай, күптән инде, күптән ҡулына алғаны юҡ.

*Үтә ғүмер, үтә ғүмер,*
*Әйтерһең дә, янып бөтөр үле күмер.*
*Оса осҡон, оса осҡон,*
*Тоҡанырмы икән унан яңы ғүмер?*

Уға ҡеүәт биреп, Хәбибйән думбыраһын сиртте.

– Бағышайҙың мәшһүре һин! – тине Байғусҡар. – Даның алыҫтарға таралыр. Кем улы, кем кейәүе? Бындай затҡа ҡыҙ биреү дәрәжә икәнен мин яҡшы аңлайым.

Сәмиәр бағышайға һөҙөп ҡарап алды. Иптәштәре араһында Хәбибйән шикелле абруй яулай алмауы эсен бошора. Ҡайҙа барһа ла, Хәбибйәнде үҙ итеп торалар. Һөйләшмәҫ борон уҡ үҙенә ихтирам яулап ала. Ниндәй ҡөҙрәттер? Бына был ҡарт та уны маҡтап ултыра. Йәнәһе, бындай кейәү – бәхет… Ситтән генә тел осон белешә.

– Хәбибйәндең шәп кәләше бар. Ҡандай кешеләрҙең балаһын алды ул, – ти һалды Сәмиәр.

– Баһадир улым да бар! – тине ғорурлыҡ менән йәш ата.

– Тик атҡа атландырып өлгөрмәне, – тине Сәмиәр.

– Ҡайтып төшкәндең иртәгәһендә үк, ауылдаш!

–Ҡайны бәхете кейәүҙән, ҡәнәғәттер ул, – тип ҡуйҙы Байғусҡар.

«Ҡайныһы ҡәнәғәттер», имеш. Ҡәнәғәт булмаймы һуң? Сәмиәр ризаһыҙ ғына тамаҡ ҡырҙы. Ғәлиәкбәр хәҙрәттең ҡыҙын Сәмиәрҙең ҡустыһына һоратҡайнылар бит. Ризалашманы ҡарт. Ә Хәбибйәнгә бирҙе. Тигеҙ түгел донъя. Ҡәнәғәт булмай тағы. Ҡәнәғәт. Ғәлиәкбәрҙең кейәүе күптән түгел миҙал алды. Инде ҡайныһының ауыҙ һыуы ҡорор. Эйе, тигеҙ түгел донъя-а-а!..

– Илебеҙгә бағышты әйт! Тыуған еребеҙ, Күк Уралыбыҙ, Ил ағалары тураһында! – ти Байғусҡар, Хәбибйәнгә ҡарап.

«Әйт-әйт! Әйттер, бағышай!»

Сәмиәр иһә, табындағыларҙың бағышайҙы ауыҙ асып тыңлағандарын күреп, түҙмәне, сығып китте.

Бер мәл Иштуған ағаһы думбыраһын ситкә һалған Хәбибйәнгә эйеленкерәп бышылданы:

– Байғусҡар ҡорҙаштың ни өсөн һинең турала һорашҡанын беләһеңме?

– Бөтәбеҙ тураһында һораша түгелме? Сәмиәр ҡайҙа булды?

– Ҡалдырсәле Сәмиәрҙе. Ҡайҙа булһын, бәүелен бушатыр ҙа инер. Тыңла мине.

– Йә, ағай.

Иштуған ағай мәғәнәле итеп тамағын ҡырҙы.

– Еткән ҡыҙы бар. Минъямалым, тип атаһы әллә нисә рәт ысҡындырҙы.

– Шулаймы, ағай? Әләйһәң, ҡайҙа миңең ҡусты? – Хәбибйән дәртле тауыш менән өндәште. – Нишләп боҫоп ҡына ултыра. Аңғартыр кәрәк! Шып-шым бит.

Яйын табып, Һеләүһен ҡустыһын янына саҡырҙы.

– Ҡайҙа улай оҙаҡланың! Ҡустым, ҡара әле, ағайҙың шәп ҡыҙы бар! Үҙе егәрле, үҙе… – Ул «ҡандай һылыу» тимәксе ине, ҡустыһы алдында әҙәпһеҙлек күреп, икенсерәк ослап ҡуйҙы. – Орсоҡ һымаҡ өйөрөлә, етеҙ. Миңъямал атлы.

Ҡустыһы ихлас баш ҡаҡты.

– Эйе, ағай.

Хәбибйән уның яурынынан ҡағып алды.

– Һаман башыңа барып етмәйме ни? Арыу башҡорт кейәүе эҙләй атаһы. Әллә, мәйтәм, ҡустым… – Хәбибйән мут ҡараш ташланы. – Бында мин – атай ҡарт урынында… Һин буйҙаҡ. Ниәтләйекме?

Ҡыҙ бала, әлбиттә, ҡырҙараҡ ултырған ағайҙарҙың уның тураһында һүҙ алып барғанын башына ла индермәне. Башҡорт яғынан оло ағайҙар килгән, яуға китеп баралар. Уларҙы аталары кеүек ололап хөрмәтләне. Ауырыу атаһының терелеүе бөгөн уның өсөн бөткөһөҙ ҡыуаныс ине.

– Һыу һораған булып, янына барып кил. – Хәбибйән һаман ҡустыһын ҡотортто. – Хәҙер үк атаһы менән һөйләшәм. Бата уҡытабыҙ.

– Һин нимә, ағай! – Һеләүһендең оялышынан сикәһе ҡыҙа. – Шундай саҡта… Яу барғанда… Нисек итеп һыу һорап…

Үҙе аш хәстәрләүсе яғына ҡарағанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Күҙҙәрендә осҡон ҡабынғандай. Быны күргән ағаһы мыйыҡ аҫтынан йылмайҙы.

– Ҡыҙҙар шикеле оялып киттең. Улайтма. Тураһын әйтеп һора, ҡустым. Ваҡыт юҡ. Ризамы, түгелме икәнен күңелең менән тойорһоң. Йә, ярай, беҙ арыраҡ, аттар яғында булырбыҙ.

Ағаһы шулай тине лә утлыҡсаға табан атланы. Йөрәге күкрәгенә һыймай типкән Һеләүһен бер талай аңҡы-тиңке баҫып торҙо, шунан ҡыйыуһыҙ ғына аҙымдар менән усаҡ яғына йүнәлде.

– Һылыу, һыуһап кителгәнсе… Әллә нишләп… – Тауышы ҡалтырағанын тойоп, һүҙен әйтеп бөтә алмайынса туҡтап ҡалды.

Миңъямал бер күтәрелеп ҡараны, йәһәт кенә башын баҫып һыу тәпәненә үрелде.

– Хәҙер, ағай.

Ижауҙы алғанда егеттең ҡулы ҡалтырай ине. Нимәләр әйтергә итте. Теле көрмәлде.

– Ағай, һеҙ быңдай тыныслыҡта нисә көн торорһоғоҙ икән?

Яуапты ишеткәс, Миңъямал тултырып ҡарап алды.

– Һранцуздар ныҡ ҡоралы, туптары күп…

Уның ниҙәр әйтергә теләгәне аңлашыла. Эйе, башҡорттарҙа туп юҡ. Ләкин улар һуғыш алымдарын яҡшы белә.

– Уныһы шулай. Ҡурҡма, һылыу. Беҙ был яҡтарға еңеүселәр булып ҡайтып төшөрбөҙ.

Был юлы тауышта ҡәтғилек тә, көс тә бар ине. Ҡыҙ ҙа яуап итеп күҙ һирпеп алды. «Мин һеҙгә ышанам…» Ихлас, саф ҡараш эскә татлы тулҡын булып үтте. Егеттең ауыҙынан күптән әйтергә теләгән һүҙ ысҡынды.

– Һылыу, бер генә һорауым бар, – йәнә йөрәге дер-дерт итте. Бик ҡыйыу булып килеп баҫҡайны ла баһа. Туҡта, һин бит яугир. Тәүәккәлерәк бул! – Әгәр ҙә мин һине әйттерһәм,.. кәләш булып килерһеңме?

Миңъямалдың ҡулындағы ижауы төшөп китте. Егет йәһәт кенә эйелеп һауытты ҡулына алды, тегеләй-былай өйөрөлттө.

– Беҙҙең ваҡыт бик ҡыҫҡа бит. Һин яуабыңды бир, һылыу. Һранцуздарҙы еңеп ҡайтышлай, мин һине үҙем менән алып ҡайтып китермен.

Ҡыҙҙың башы эйелде, өндәшмәне. Һеләүһен, тулҡынланыуын баҫырға тырышып, өҫтәне:

– Беҙҙең муллабыҙ ҙа үҙебеҙ менән.

Ҡараштар осрашты. Күҙен селт-селт йомғослаған ҡыҙ күндәм генә башын баҫты. Был күндәмлек ризалыҡты аңлатҡандай тойолдо. Тирә-йүн балҡып, мең нур менән тулышты. Инде егеттең йөрәге жыу итеп китте. Хатта ул ҡояштың йөрәге нисек итеп дөп-дөп типкәнен ишетте… Ҡыҙ ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән әйтте:

– Атам рөхсәте…

– Һуң, беҙҙең кеүек батырҙарға рөхсәт булмаһа, ул ҡалай…

Миңъямал йылмайҙы. Һеләүһен шулай тине:

– Ағайым һөйләшәсәк. Беҙ, бәлки, әле үк бата уҡытып өлгөрөрбөҙ. Ағайым… – Ул хатта ағаһының бында үҙе ебәргәнен әйтергә иткәйне, ләкин артыҡ булыр тип тыйылды.

Ҡыҙ ҙа унын менән оҙаҡ һөйләшеүҙән уңайһыҙланды шикелле, боролдо ла соланға инеп китте.

Һеләүһен Хәбибйән ағаһына табан атланы.

– Ағай!.. – Бүтән бер нәмә лә өндәшмәһә лә, эш айышы аңлашыла ине. Хәбибйән ҡәнәғәт йылмайҙы.

– Ярар, ҡустым, ҡалғаны минең эш! – тип китә башланы.

– Эй, һин ҡайҙа?

Ағаһы боролоп ҡараны, ләкин өндәшмәне. Яуап булмаһа ла, Һеләүһен аңланы: Байғусҡар ағай менән һөйләшергә ниәтләй. Әгәр ҙә бөтәһе лә көйлө генә барһа, дошмандарҙы ҡыйратып ҡайтышлай унын инде үҙ ғаиләһе буласаҡ… Егет күңелен шатлыҡ та, борсолоу ҙа бергә солғап алды. Ауылдаштары, туғантыумасаһын шаҡ ҡатырыр көнө алда… Ах, ниндәй гүзәл, нәфис унын буласаҡ кәләше… Берәүгә лә оҡшамаған.

Татлы уйҙарға сумған егет Сәмиәрҙең эргәһенә килеп баҫҡанын да һиҙмәне.

– Эй, нишләп ҡатып ҡалдың?

Егет һиҫкәнде. Ауылдашы унын ниҙәр, кем тураһында уйлағанын белгән һымаҡ булып китте. Ни әйтергә белмәгән егет:

– Минме? – тип һораған булды.

Сәмиәр ағай тирә-яғын байҡаштырҙы.

– Һе… яныңда тағы берәйһе бармы әллә? Ҡайҙа Хәбибйән? Нимә бер урында тапанаһың? – Яуап биргәнде көтмәй, йәнә һорау бирҙе: – Ә ҡайҙа хужа үҙе? Хәбибйән! Сапҡын килеп еткән бит!

Шунда ғына Һеләүһен Сәмиәрҙең йөҙө бик етди икәнен аңғарҙы.

– Сапҡын килде, тием, ҡысҡыр Хәбибйәнгә! Йәһәт бул, ғәскәр ҡуҙғала. Бойороҡ шулай.

Эсте нимәлер һыҙып үтте. Уғаса булмай, ишектән Миңъямал килеп сыҡты. Инде ҡаушауын да онотҡан Һеләүһен ҡыҙға табан атланы.

– Һылыу, беҙгә юлға.

Ҡыҙ керпектәрен ҡағып алды, ишетелер-ишетелмәҫ кенә тамағын ҡырҙы.

– Хәйерле булһын, – тауышы үҙгәрҙе Миңъямалдың. Эске һағышты тойҙо Һеләүһен.

– Эйе шул, хәйерле булһын, – Һеләүһен ҡапыл түш кеҫәһенән көмөш тәңкәне тартып сығарҙы. – Мә, һаҡла. Был – бетеү. Мине көт, йәме… – тине эске ярһыу менән.

Соланда көңгөрләшкән тауыштар ишетелде, улар сыҡҡансы берәй яуап бирерме Миңъямал?

– Көтөрмөн, – тине ҡыҙ һәм тултырып ҡарап алды. – Юлдан күҙемде алмай көтөрмөн.

Шунан икеһе ике яҡҡа тартылды. Ишек асылды, ирҙәр күренде. Байғусҡарҙы

ҡултыҡлап алғандар. Күрәһең, үҙ аяғында оҙатып ҡалғыһы килгәндер.

– Ҡайҙа, күҙ һалайым бер, – тине Байғусҡар.

Ағаһы ымлағас, Һеләүһен ҡыҙҙың атаһына табан атланы.

– Ярар… Сөбхәналлаһ, – тине ата кеше, күҙен селт-селт йомғолап. Күңеле нескәрҙе шикелле, бүтән һүҙ ҡата алманы: ҡул ғына һелтәне. Хәйер, нимә әйтере, ниҙәр теләре былай ҙа аңлашыла ине.

– Беҙ ҡуҙғалдыҡ. Инде ҡалған яу юлын имен-аман үтергә яҙһын, – тине Хәбибйән.

Күмәкләшеп доға ҡылдылар.

– Ҡайтышлай туҡралабыҙ. Никахы ла, оҙатыуы ла бергә булыр, Аллаһ бойорһа, – тине тыныс, ышаныслы тауыш менән Иштуған ағай. – Әбдрәхмән хәҙрәт, беҙҙең полк муллаһы, үҙе киләсәк.

***

Ҡыҙыҡһынып, яңы ер-һыу менән танышҡан Һеләүһенгә донъя бынан ары икенсе төҫ менән баҡты. Ҡайҙа ғына йүнәлһә лә, ҡайҙа ғына талпынһа ла, ҡайҙа ғына уҡталһа ла, уға хәҙер Миңъямалдың күҙҙәре төбәлгәйне. Шуға күрә тирә-йүн тағы ла яҡтыраҡ, йылыраҡ, наҙлыраҡ тойолдо. Ҡандай матур донъяла ни өсөн үлтереш-ҡырылыш барғанын, ысынлап та, аңлауы ҡыйын. Хозурлыҡ, иркенлек бөтәһенә лә етә, йәшә лә ҡыуан ғына! Йәшә лә шөкөр ит. Юҡ бит, нәфсе тигәнең туя белмәй. Ана шул нәфсе арҡаһында ни саҡлы ғүмер ҡыйылды, ни саҡлы ҡырылды. Мөхәббәт етмәй донъяға. Мөхәббәт. Әллә мөхәббәтте лә нәфсе кимереп, йотоп ҡуямы икән? Хәйер, баҫҡынсыға ни бысағыма мөхәббәт? Быны Наполеон батшаның үҙенән һорарға ине. Халҡының көнитмеше һәйбәт, тиҙәр. Әллә Францияның азатлығын быуып, халҡын ҡол итергә теләүселәр бармы икән? Һәр хәлдә, Рәсәй ундай хөр илгә янарға ҡыймаҫ ине… Көс донъяла хакимлыҡ итә. Көс. Наполеондың яугирҙәры ла Аурупаның төрлө илдәренән йыйылған икән. Әсиргә эләккәндәрен үҙ күҙе менән күрҙе. Ғүмерҙә лә ишетмәгән халыҡтар менән тап булышты. Инде бер нәмә лә ғәжәпләндермәй, һәр халыҡтың үҙ иманы, үҙ ғәҙәте. Ҡалай төрлө-төрлө итеп яратҡан Аллаһы Тәғәлә ер йөҙөндәгеләрҙе! Бер атанан, бер Әҙәм бабанан таралып та, шулай ныҡ айырымланып була икән.

Күпме юл үтелде. Француздар менән нисәмә тапҡыр йөҙгә-йөҙ килештеләр, күҙгә-күҙ текләштеләр. Бәрелештеләр, айҡаштылар. Ҡылысҡа ҡылыс сарпылып сыңланы. Дуҫтар яу яланында ятып ҡалды. Бергә сығып киткән иптәштәр һаман һирәгәйә барҙы. Уны ла, ағаһын да үлем араланы. Ауыр юл Һеләүһенде лә олоғайтты.

Йәҙрәләр шартлағанда һиҫкәндерә ине тәүҙә. Быныһы булмаһа, икенсеһе баш түбәһен кәйпелтеп алып китер һымаҡ. Ҡурҡыу тойғоһо һиҙҙермәй генә бөттө. Раҫ: әҙәм балаһы бөтәһенә лә күнә. Төтөн, дары, ҡан, яра, ыңғырашыу менән ялмаған донъяла берҙән-бер көндө һыҙылып ҡына ҡояш нуры үтеп инде. Бер нур. Шул нур донъяны яҡтыртырға етте. Күңел донъяһын. Миңъямалы – буласаҡ кәләше менән уйламаған ерҙә тап итештеләр.

***

Күҙәтселек итергә киткән биш кеше араһынан Сәмиәрҙең генә әйләнеп ҡайтыуы Хәбибйәнде сығырынан сығарғайны. Бына тигән дүрт батырҙы юғалтты улар. Яу башынан бергә үткән дуҫтарҙы. Тамаҡҡа төйөр тығыла. Бала-сағалары йәтим ҡалды. Хәҙер улар тураһында хәстәрләргә кәрәк. Сәмиәрҙең алҡымынан алғайны инде, тегене Мишарин ғына ҡотҡарҙы. Писарҙың командирҙарға һүҙе үтә.

Бына әле лә Иван Петрович Сәмиәр янына килеп ултырҙы.

– Дошмандарҙы ҡыуабыҙ, ә! Бында ниндәй боевой дух? Наполеонды ботонан аҫып ҡуйғас, нимә эшләмәксе дуҫтарың? Әллә Европала тороп ҡалырғамы ниәттәре? Унда тормош яҡшы!

Теге дүрт күҙәтсе өсөн Сәмиәрҙең яуап тотҡанын иҫкә алмай... Онотоуын онотмаған, әлбиттә. Нимә өмөт итә был кеше Сәмиәрҙән?

– Аурупа? Париж? Һе. – Сәмиәр ауыҙын ҡыйшайтты. – Улар рәхәт тормошто аңлаймы икән? Һөйләгәндәре ҡорал да яу…

Иван һағайҙы.

– Стоп. Ниндәй яу?

– Һуң… Башҡорттоң ҡанында инде ул. Үткән замандан.

– Һин, давай, ситкә тартма. Ниндәй үткән?

– Беҙҙең тәүарих бик боронғо бит. Төркиҙәр тарихы оҙон. Ә ул телдән-телгә күсә килә.

– Төркиҙәр! Һаман шуны һөйләп кинәнес табалармы?!

Сәмиәр аҫтан һөҙөп ҡарап алды.

– Телегеҙҙе аңлап бөтмәйем…

– Аңлайһың. Туп-тура һорайым. Имеш-мимештәр ишетелеп ҡала. Улар бында еңеү яулағандан һуң, ҡайтып, Рәсәйҙә бола ҡуптарырға уйламайҙармы?

Сәмиәрҙең йөҙө ағарып китте. Бындай һүҙҙең нимәгә алып барғанын ул яҡшы аңлай.

– Һеҙ нимә… – Шунан ҡапыл туҡтап ҡалды. Бәй, дошманды еңеү өсөн анһат ҡына юл табыла түгелме? Кем кемгә нығыраҡ файҙа килтерер икән, һынап ҡарарға була был әҙәмде.

– Шулай ҙа ҡайһы бер нәмәләр уйға һалмай ҡалмай, әфәнде. Хәбибйән азатлыҡ тураһында күп лығырлай. Башҡорттарҙың ер иркенлеген, батша кешеләренең ҡыҫырыҡлауын иҫкә ала. Шундайыраҡ кәйеф...

– Францияның элек-электән азатлыҡ идеяһы менән һаташыуы сер түгел. Ундай сир тиҙ йоғоусан, – тип ҡуйҙы Мишарин.

Сәмиәр тағы уға һөҙөп ҡарап алды. Тик өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

– Телеңде йоттоңмо әллә?

– Мине тыуған яғым нығыраҡ борсой, Францияның әллә ниндәй хазинаһын вәғәҙә итмәгәйҙәре, – Сәмиәр тешен ҡыҫып яуап бирҙе.

– Улай аҡайма. Мин бит былай ғына. Беҙҙең өсөн Рәсәйҙең тыныслығы мөһимерәк. Шулай бит!

Сәмиәр ҡараңғы сырай менән ултыра бирҙе. Хәбибйәндәге аҡыл, таһыллыҡтың үҙендә булмауы эсен бошора, унproblems шулай. Бөгөн дә, Сәмиәргә эсең тар, тип ҡысҡырыуы ныҡ зитҡа тейҙе. Кемгәләр кейем кәрәк булды ла… Бына шулай яуыз командирға әйләнде ауылдашы. Тыуған илгә ҡайтҡас барыбер әллә кем булып йөрөй алмаҫ алыуын, телен ҡыҫҡартыу сараһы табылыр.

– Әле юл оҙон. Кем иҫән ҡайта, кем юҡ, белеп булмай. Шулай ҙа башҡорттар молодец! Бына бит, Рәсәйгә тоғролоҡтарын ҡалай фиҙакәр үтәйҙәр. Эйе, мин ҡаршы түгел. – Писарь һаһылдап көлдө. – Төрлө фекер булыуы ихтимал, ләкин илһөйәрлек тойғоһо һәммәгеҙҙә бар. Хәбибйән дә Рәсәйгә батырлыҡтар ҡылып, әллә кем булып ҡайтырға хыялланалыр. Ну, һуғыш бит, иртәгә кем бар, кем юҡ, әйтеп булмай.

Мишарин иртәгәһен алышҡа Хәбибйән атының иң алдан осҡанын күрҙе.

– Был әҙәмде үлем алмай, – тип ирекһеҙҙән әйтеп ҡуйҙы Иван Петрович. – Был әҙәм француздан ҡурҡынысыраҡ. Эйе, был башҡорт дошмандан да ҡурҡынысыраҡ була бара.

***

Улар еңеүсе сифатында Париждың үҙенә инәсәктәр, тиҙәр, ысын булһа. Бәреп инерҙәрме, йырлап барып инерҙәрме? Шуныһы бәхәсһеҙ: улар – еңеүсе! Улар алдында бөтәһе лә баш һаласаҡ. «Парижға яҡынлашабыҙ!» Был һүҙ полкты йәшен тиҙлегендә урап үтте. Кәйефтәр күтәрелде. Сәмиәр ҙә доға ҡылды: «Тыуған ерҙәргә имен-аман ғына әйләнеп ҡайтырға насип булһын!» Ана, ҡырҙараҡ ағалы-ҡустылы ниҙер һөйләшә, уның ҡолағы ҡорт итеп ҡалды.

– Һеләүһен, ауыҙың йырылған. Ниндәй хыялдарға бирелдең?

Һеләүһен һүҙҙе икенсегә борорға тырышты.

– Һинеке нығыраҡ йырылған, ағай. Еңгәйгә алып ҡайтасаҡ бүләгеңә яҡынлашаһың бит, – тип шаяртты.

Хәбибйән йылмайҙы, ләкин яуап ҡайтарманы.

– Нисә ылау кәрәк булыр икән, ағай? – тип Һеләүһен һаман ныҡышты. Хәбибйән, башын артҡа ташлап, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Хәлем етмәһә ни, ҡусты ярҙам итешер әле! Ә, юҡ, еңгәңә тейеш бүләккә нишләп көсөм етмәһен ти инде! Уға тигән хазинаны мин күтәрә алам, ҡустым! Көс бар!

Быны ишеткән Сәмиәрҙең йөрәге дарҫлап тибергә кереште. Туҡта! Ниндәй хазина тейәп ҡайтып халыҡты шаҡ ҡатырырға итә был ҡупырыҡ әҙәм? Ауыҙ асып, аңшайып ҡалырға ярамай. Сәмиәр ҙә буш ҡул менән ҡайтмаясаҡ. Иллә-алла, Хәбибәйәндекенән кәм булмаҫҡа тейеш! Бүтәндәрҙең төшөнә лә инмәгән ниндәй трофей икән? «Хазина!..» Хәбибйәндең рәхәтләнеп көлгәне ишетелде. Әһ-һә, ҡустыһына эс серен асмаҡсы... Сәмиәр үңәсен һуҙҙы. Тик шул мәл эргәһендә ултырғандар ҡаты геүләшергә керешмәһенме! Серҙе ишетмәй ҡалғанына йәне көйҙө Сәмиәрҙең. Һеләүһен ҡабатлап төпсөнмәҫме икән? Тегенеһе бүтән һорау бирмәне. Тик Һеләүһендең ағаһына ғәжәп итеп текләп торғанын күреп, Сәмиәр серҙең тәрәнлеген, ҙурлығын аңланы. Мейеһенә ҡан бәрҙе. Улар затын көнсөл, ҡара эслеләр тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ҡыҙыуыраҡ кеше шул уның атаһы. Уйламай һөйләй торған ғәҙәте бар. Шул арҡала йыш ҡына кешеләр менән араһын боҙҙо. Ә Сәмиәр атаһы һымаҡ түгел. Ауыҙын үлсәп асыуҙың яҡшыраҡ икәнен бәләкәйҙән белә. Ҡайһы бер туғандары уны ғәмһеҙлектә, аҫтыртынлыҡта, булдыҡһыҙлыҡта, тағы әллә ниҙәрҙә ғәйепләһә лә, ул бирешмәне. Барыбер үҙенсә эшләне. Атаһының ғына һүҙен ҡыя алманы. Был файҙаһыҙ һуғыштан нисек тә иҫән ҡайтырға ине? Уның ҡарауы, аман-һау ҡайтып төшһә, Сәмиәрҙе маҡтап атаһының ауыҙ һыуы ҡороясаҡ. Бына шулай үҙгәрә заман. Тик һушты алырлыҡ эштәр атҡарырға ине. Хәбибйән көнләшеп үлерлек булһын. Ниндәй хазина тураһында серләштеләр? Иван Петрович иҫкә килеп төштө. Ул һағыҙаҡ бер ҙә бушҡа ғына төпсөшмәйҙер бит? Шул әҙәмде файҙаланып булмаҫмы?

Иван Мишарин, русофил булараҡ, Рәсәйҙәге барлыҡ ваҡ халыҡтар ҙа урыҫ мәҙәниәтен өйрәнергә, уны үҙенеке тип ҡабул итергә тейеш, тип һанай. Рәсәй һалдаты менән ҡуша оҙон юл үтеп тә, һаман үҙҙәрен «айырым донъя» итеп тойған башҡорттарға ошо теләкте нисек тә һеңдерергә тырышты.

Ҡайҙан башҡортта быңдай тәүәккәллек? Яу юлдарын улар шулай үткән. Бөгөн дә шулай. Үҙҙәренең башлыҡтарына буйһона беләләр. Улар үҙҙәренең араларынан иң ғәҙелдәрен, батырҙарын «илбаҡты» тип атайҙар. Дөрөҫ, халыҡтың төрлөһө бар.

Эйе, халыҡта ла төрлөһө була. Бына Сәмиәрҙең Хәбибйәнде үҙ итмәүен, ярат-мауын ул шундуҡ һиҙҙе. Дошманлыҡтары нимәнән башланғандыр? Ләкин ошо айырымлыҡтан файҙа күрергә була.

– Уландар, драгундар, кавалеристар ҡылыс менән дә шәп эш итә. Башҡорттар тураһында һүҙ ҙә юҡ. Ҡылыс-һөңгө – улар өсөн шулай уҡ шәп ҡорал. Ана шул

башҡортҡа тегеләрҙең заман ҡоралын бир әле… – тине ул командирға.

– Бәй, уларҙың да ҡайһы берҙәренә утлы ҡорал тотторҙоҡ! Бик аҙҙарына, әлегә мөмкинлегебеҙ шулай.

– Юҡ, һеҙ мине аңламанығыҙ. Бөгөн Хәбибйән Күскилдинға мылтыҡ тотторҙоғоҙ. Ә ҡалғандары ошо теләк менән янһа? Күҙ алдына килтерәһегеҙме, нимә буласаҡ?

– Башҡорттар һуғыша белә. Тоғролар.

– Башҡорттар тарихын һеҙ аҙ беләһегеҙ, тиергә йөрьәт итәм. Кисерегеҙ мине, ғали йәнәптәре. Азатлыҡ тигәндә тоғролоҡтарын онотоп ҡуймағайҙары… Хәбибйән дә, Уралына әйләнеп ҡайтҡас, ҡоралын һалып, мал көтөүе артынан сабыр, тип уйлайһығыҙмы?

– Һаҡлыҡ саралары кәрәклеген беҙҙең инҡар иткәнебеҙ юҡ.

– Унын һөйләгән һүҙҙәре ҡыйыулана бара… Эйе, башҡорттарҙы ирекҡә саҡырыу бар унын тын алышында. Ҡай берәүҙәр менән Рәсәйгә ҡайтҡас, көрәшкәнсе, бында, сит яҡта, иҫәп-хисапты өҙөү яҡшыраҡ түгелме? Башҡорттар бында һалдат ролендә. Улар хәрби яуаплылыҡта.

– Яуаплылыҡ! Үҙ өҫтөгөҙгә яуаплылыҡ алығыҙ, улай булғас. Тик, ҡарағыҙ уны!

– Китергә рөхсәт итегеҙ, ғали йәнәптәре!

Париж Һеләүһен күҙаллағандан да бөйөгөрәк һәм ғәжәберәк ине. Был – бөтөнләй икенсе донъя. Ҡыҙыҡ та, таң ҡалдырғыс та, сәйер ҙә, ҡай саҡ аңлайышһыҙ ҙа,– ҡыҫҡаһы, ят матурлыҡ. Хәйер, был тойғоно барыһы ла кисергәндер. Һоҡланыу, аптырау, ҡыҙығыу, унан үҙендең рухи, күңел тамырыңды тапмауҙан тыуған яҡты юҡһынып, сит донъянанан дүрелеү. Ҡаршы сығып айҡашыр дошман ҡалмағас, тыуған ергә тартылыу тойғоһо көсәйҙе. Юл берәү генә: Рәсәйгә, Уралға, башҡорт иленә.

Башҡорт яугирҙары Париж баҡсаларының береһендә тирмә, ҡыуыш ҡороп урынлашҡайны. Был иркенлек, йәғни тәбиғәткә яҡынлыҡ улар күңеленә хуш килде. Ауыр юлдан рәхәтләнеп ял итеү форсаты тейҙе. Ауырығандар аяҡҡа баҫты, хәлһеҙҙәр көс тупланы. Сөнки ҡайтыр юл оҙон ине. Берҙән-бер көндө уларҙы баҡсанан алыҫ түгел һарайға саҡырҙылар. Рәсәйҙең алдынғы һалдаттарын, яугирҙарын французлар үҙҙәре хөрмәтләйәсәк икән. Сәйер халыҡ… Мишарин исемлекте атаны. Хәбибйән дә ҡустыһы менән исемлекккә ингән. Саҡыралар, тимәк, барырға кәрәк.

Тыштан ҡарағанда иҫ китәрлек булмаһа ла, эстән ҙур замок булып сыҡты. Сәмиәр хәҙер бейек колонналарға, һырлап эшләнгән төрлө һындарға аптырап ҡарамай. Күҙ тиҙ өйрәнә. Ләкин төрлө алтын-көмөш һауыттар иҫен китәрҙе. Ул үҙен быға са бай тип уйлай ине… Бындағы байҙарҙың самаһыҙ бай булыуы, алтын-көмөш эсендә йөҙөүе шаҡ ҡатырҙы. Аурупа халҡы ныҡ-ныҡ айырыла. Тиңлек, тигеҙлек тураһында улар күп һөйләргә ярата, тиҙәр. Тик үҙҙәре нисек аңлай икән был матур һүҙҙәрҙе, ниндәй мәғәнәлә? Берәүҙәре самаһыҙ бай һәм икенселәре ҡот оскос хәйерсе – бындай айырымлыҡ башҡорт араһында юҡ. Сәмиәрҙе ҡалын таш диуарҙар ҡыҙыҡтырмай. Ул үҙенең иркен донъяһын һағынды, йәйләүен. Ризыҡтарын нисек кенә матур биҙәмәһендәр, бишбармаҡҡа етмәй. «Хәбибйән ниндәй хазина тураһында хыяллана? Йәүһәр-яҡуттары бүтән төрләмө? Юҡ, ул аҫылташ баһалай белгән әҙәм түгел. Тик шуныһы асыҡ: Хәбибйән белмәй эшләмәй торған...»

Бында казактар, башҡорттар оҙон өҫтәл артына, бер табынға йыйылды. Тостар әйтелде, Рәсәй тураһында яҡты, ялҡынлы һүҙҙәр урғылды. Императорға, державаға маҡтау һүҙҙәре яңғыраны.

Францияның буласаҡ ҡағаны Наполеон Маренго-Ола, Әүстрия әрмеһен ҡыйратҡандан һуң, үҙенә бирелгән себешкә өҫтәлдә булған бөтөн ризыҡты ҡушып ашаны. Бөйөк ҡағандың был сәйерлеге, йәғни еңеү шатлығынан иҫереп ашаған

ашамлыҡтары иң шәп ризыҡ булды ла китте. Уны бүтәндәр ҙә «үҙ итте». Бынан ары «Маренго» батша ризығы тип йөрөтөлдө. Ә бөгөн Наполеондыҡы түгел, уны еңеүселәрҙең ризығы тип тәҡдим итteләр. Йә Алла, кемдәр уларға тамаҡ бешереп ашата! Француз! Кем уларға ярарға тырышып ярамһаҡланып йылмая! Француз! Ата-бабаһының төшөнә лә инмәгән хәл. «Пейзан», тип арымай ҡабатлай эргәһендә торған аяҡсы. Ярай, тәржемәсе табылды. Тәбиғәтте яратҡанын, ауыл кешеһе икәнен әйтә икән, баҡтиһәң. Бындағы башҡорттар барыһы ла ауыл кешеһе, тик уларға һис яғы менән дә тартмаған…

Мишарин Сәмиәр янына килеп ултырҙы. Сәмиәр һораулы ҡарашын унан алманы.

– Эш бар, – тине Иван Петрович серле генә. – Мин бында була алмайым. Ошо аяҡсы, йәғни ошо француз һинең ҡарамаҡта! – ул аҙаҡҡы һүҙенә, нишләптер баҫым яһаны. – Һурпа бирәсәктәр. Һеҙҙең ризыҡты.

Аяҡсы, тиһәләр ҙә, ҡупшы кейенгән… Ҡупшылыҡты ярата, тиҙәр шул французлар тураһында. Ҡупырсыҡтар һыуыҡ Рәсәйҙә нимә юғалтҡандарҙыр… Эйе, әҙәм заты үҙ әжәлен эҙләп ҡайҙа ғына сығып китмәй.

– Хәбибйәнгә килеп етеү менән, ошо аяҡсыға ишара яһарһың.

Сәмиәр йөрәген шул саҡ шом ялманы, Иван уға тишерҙәй итеп ҡарап алды. Унан йылмайҙы.

Байрам гөрләп дауам итте, йыр-моң, теләктәр яңғыраны. Шундай тантанала кемдәрҙер Хәбибйәндең йәнен ҡыйырға уйлай. Сәмиәр яҡташының һәләкәтен теләмәй. Ә бына уны һрансуз илендә ҡарауыл итеп бөтөнләйгә торғоҙоп ҡалдырһалар, чинынан төшөрһәләр һәм Сәмиәрҙе үрләтһәләр – риза… Командирҙары Поздневтың көслө тауышы, гүйә, айнытып ебәрҙе:

– Башҡорттарым, ҡайҙа сал Урал моңо?

Башҡорттар күтәреп алды.

– Әйҙәгеҙ, казактарға үҙебеҙҙең бағышты ишеттерәйек.

– Данлы бабаларыбыҙ тураһындағы һүҙҙе еткерәйек. Үрҙник!

– Мин – халҡыбыҙҙың бағышайы Хәбибйән. Үрҙниклыҡ үткән заманда ҡаласаҡ. Ә был исем менән үлгәнсе айырылмам, Алла бирһә, – тине Хәбибйән. Ул ҡулына думбыраһын алды.

Ситтәрәк ултырған, бөтәһен дә энә күҙәүенән үткәреүсе, полктарҙың, һалдаттарҙың именлеге, әрме именлеге өсөн яуаплы бер кеше бөтәһен дә диҡҡәт менән күҙәтә. Поздневтың, Сәмиәрҙең һәм башҡа күптәрҙең ым-хәрәкәтенә тиклем иғтибарҙан ситтә ҡалмай уның. Моң ҡоралы насар түгел, ләкин башҡорт ҡулында ут ҡоралын да уйната белә. Иң алдынғы, мәҙәниәтле, һәйбәт ҡоралланған французды еңгән шул әҙәм, Рәсәйгә ҡайтҡас, ҡоралын, хәрби оҫталығын бүтән яҡҡа йүнәлтмәҫме лә үҙен урыҫҡа ҡаршы ҡуймаҫмы? Уларҙың һәр береһендә әҙер һуғышсы ҡаны ҡайнай. Тимәк, ҙур мәсьәләләр тыуҙырыуҙары ла ихтимал. Оҙаҡҡа һуҙылған мәсьәләләр... Улар икенсе дин кешеләре – быны иҫәптән сығарырға ярамай. Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай.

– Йәгеҙ, туғандар! – тине Хәбибйән ярһыу тауыш менән. – Нишләп тымып ҡалдығыҙ? Ҡушылығыҙ миңә.

Йыр бөтөүгә, йәнә Хәбибйәндең көслө, дәртле тауышы яңғыраны:

– Рәхмәт, агайнә! Был – дөйөм еңеү! Халҡыбыҙ күп быуаттар беҙҙең батырлыҡты данлап һөйләр!

Ҡайһы бер яугирҙарҙың күҙҙәре йәшкәҙәне.

– Думбыра сиртеп әйтәйек! Илде, ерҙе һөйөү беҙҙең ҡандан!

Алтын ялатылған туҫтаҡты көмөш батмусҡа ҡуйған аяҡсы Хәбибйән эргәһенә килеп баҫты. Сәмиәргә мәғәнәле генә ҡарап алды. Тегенеһе күҙҙәрен йомғосланы, шунан баш ҡаҡты. Ирекһеҙҙән өҫтәл мөйөшөндәге таш һынды ла һыпырып алды...

– Туҡтағыҙ әле, – тине Хәбибйән. – Тәүҙә ҡурай моңо яңғыраһын. Батырҙар тураһында әйтелде. Хәҙер Тыуған ергә, Күк Уралға бағышланған көйҙө ишеттерер мәл. Еребеҙ, Илебеҙ – беҙҙең өсөн иң ғәзизе. Бөтөнөбөҙ күңелебеҙ менән тик уға тартылабыҙ. – Ул үҙенә тотторған тусҭаҡты өҫтәлгә ҡуйҙы. – Һеләүһен ҡустым, ал ҡурайыңды!

Ағаһы шулай тигәндән һуң, Һеләүһен ҡурайына үрелде. «Урал» көйө, ҡаршылыҡтар йырып, сикһеҙ киңлеккә таралды. Көй тымыуға Хәбибйән ҡустыһын ҡосаҡлап алды.

– Ай, афарин! Һиңә етеүсе юҡ! Мә, ҡустым, ауыҙыңды сылат!

Шулай тине лә алдындағы туҫтаҡты ике ҡуллап ҡустыһына һуҙҙы. Сәмиәрҙең йөрәге жыу итеп китте. Ул сайҡалып китте хатта. Ярҙам эҙләгәндәй, тирә-яҡты байҡаштырҙы. Үҙгәртергә хәлдән килмәҫ нәмәләр була. Ауылда тороп ҡалған ике улын күҙ алдына килтерҙе, башын услап тотто. Иренен сылатып алғандан һуң, Һеләүһен йәнә ҡурайын ҡулына алды. Ярһып уйнаны. Күҙҙәренән йәш аҡты. Яҡташтарының күҙ алдынан бөйөк тарих, бөйөк шәхестәр үтте. Ә егеттең тынғыһыҙ йәне һөйгәне менән осрашыуға атлыға ине. Кәләшен ата йортона алып ҡайтасағы ап-асыҡ күҙ алдына баҫты. Бына Миңъямалы – туй күлдәгендә. Башына кәләше туй еләнен бөркәнгән. Йолаһы шулай: уның йөҙөн кейәү йортона аяҡ баҫҡанға тиклем һис кем күрергә тейеш түгел. Бына әсәһе, еңгәһе киленде аттан төшөргәндәрен көтә. Бына Маһинур еңгәһе кәләшенең аяҡ аҫтына яҫтыҡ һала. Алһыу сәскәләр сигелгән аҡ мендәр… Һеләүһендең бар ярһыуы, бар хисе гүзәл ҡыҙҙың исеме, яҡты һыны менән бәйле ине.

Тирмәгә ҡайтып инеү менән, Һеләүһендең эсе ныҡлап ауырта башланы. Ул тәүҙә түҙҙе. Башы әйләнеп, ҡоҫа башлағас ҡына, хәленең ауырлығын бөтәһе лә аңланы. Ярамаған ризыҡ ашанымы, улайһа ниңә бүтәндәр ауырымай? Аптырауға ҡалдылар. Иштуған ағай килеп күҙ һалыу менән ултыра төштө.

– Ағыулағандар…

Был хәбәр йәшен тиҙлегендә бөтәһен дә урап үтте. Кем ағыулаған? Ни өсөн? Яуап юҡ ине. Хәбибйән ҡустыһын ҡосағына алды. Үҙ йәнен бирерҙәй булһа ла, әмәлен тапманы ул. Бер нисә сәғәттән Һеләүһен тын алыуҙан туҡтаны. Хәбибйән ҡустыһының йәнһеҙ кәүҙәһен ҡосаҡлаған килеш ултыра бирҙе.

– Ҡустым, беҙ һинең менән оҙон юлды үттек. Баҫҡынсының пуләһе һине урап уҙҙы. Нишләп хәҙер улай?..

Ауыр һуғыш юлы үтеп, нисәмә тапҡыр үлем ҡармауына эләгеп тә бер тамсы күҙ йәше сығармаған Хәбибйән бөгөн тауыш-тынһыҙ үкһене. Яратҡан ҡустыһының еңеүҙән һуң шулай фажиғәле үлеп ҡалыуы тетрәтте. Үҙенә тигән туҫтаҡты Һеләүһенгә һуҙғанын иҫенә төшөрҙө. Ҡустыһы уның үлемен үҙенә алды. Бүтәндәр ҙә бер һорауға яуап эҙләне: кем Хәбибйәнде ағыуларға итте? Ни өсөн?

Мулла тейешле йоланы атҡарғанда ла, ул һаман ҡустыһы менән һөйләшә ине.

– Беҙ еңеү менән ҡайтабыҙ. Һин еңеү менән ҡайтаһың. Сөнки һин шәһит киттең. Һин шәһит киттең…

Ситтәрәк торған Сәмиәрҙе ҡалтырау алды. Ысынлап та, гонаһ ҡылынды. Теләһә лә, теләмәһә лә – ярҙам итте зобаниҙарға. Уйламаған кеше яңғылыштан харап ителде. Сәмиәр һис кенә лә Һеләүһендең үлемен теләмәне. Теләмәне!

Әллә Мишариндың эшен бөтөрөргәме? Шул саҡ үҙ уйынан үҙе ҡурҡты. Бер яңылыштыңмы – һинең дә әжәлең етәсәк. Тыуған яғыңды, ҡәҙерле кешеләреңде күреүҙән мәхрүм булып, сит яҡтың ҡорттарына тамаҡ булып, ошонда ятып ҡаласаҡһың. «Уҫалланып ҡайта башҡорттар был яуҙан, уҫалланып». Туҡта, ниңә әле Иван Петровичтың һүҙе иҫкә килеп төштө?

Сәмиәр атылып килеп ингән командир Поздневҡа ҡараны. Был әҙәм Хәбибйәнде яҡын күрә шул. Нисек хөрмәт итә. Иҫән ҡайтып еткәс, миңә кил,

ниндәй һорау булһа ла, миңә мөрәжәғәт ит, минең ярҙамым тейәсәк, имеш.

– Был – беҙҙең уртаҡ еңеү. Бөйөк армия ҡыйралырға тейеш ине! – тине Позднев егетте ерләгәндә. – Наполеон һымаҡтар Рәсәйҙе быуаттар буйы төштәрендә генә күрәсәк. Эйе, һеҙҙең кеүек бөркөттәр булғанда, берәү ҙә империяға янай алмаç.

***

Хәбибйән әйткән һүҙендә торҙо: Байғусҡарҙың өйөнә һуғылдылар. Уларҙы күреү менән, түшәктә ятҡан Байғусҡар урынынан ҡалҡынды. Ҡарашы менән Һеләүһенде эҙләне. Тапманы. Башын эйеп баçып торған яҡташтарына күҙ йүгерткәндән һуң, бөтәһен дә аңланы. Ишетелер-ишетелмәç кенә ыңғырашты.

– Оҙаҡлай алмайбыҙ, көс еткәнсә малыңды тейәп, һеҙҙе лә алып ҡайтып китәбеҙ, – тине Хәбибйән.

– Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тигән халыҡ. Олтан булырлыҡ та хәл ҡалманы, – тип үҙ хәлен аңғартты Байғусҡар.

– Нисек кенә тиһәң дә, ағай, алып ҡайтып китәбеҙ. Бында ҡалдырып булмай, – тине Хәбибйән.

– Һуң хәҙер… Ҡыҙ баланы ла ситкә ебәреү юҡ. Ясин сығыр кеше кәрәк…

Әбдрәхмән мулла һүҙгә ҡушылды.

– Теге мәл һөйләшкән һүҙ үҙ көсөндә ҡала түгелме ни, Байғусҡар ағай? Әһ-һә! Ҡала. Әләйгәс, һеҙ Һеләүһен мәрүмдең ғаиләһе булып иçәпләнәһегеҙ. Ә ғаилә – Аллаһы Тәғәләнән аманат.

– Аңлап бөтмәнем, хәҙрәт.

– Был аманат хәҙер ағаһына күсте. Хаҡ Тәғәлә алдында ул яуаплы. Мин бында шуны үтәр өсөн килдем. – Әбдрәхман хәҙрәт Хәбибйәнгә боролдо. – Йола буйынса, һин Байғусҡар ҡыҙының вәлиенә, бағыусыһына әйләндең. Хәҙер никах уҡыласаҡ. Йә, бармы һинең һорауың?

Хәбибйән хәҙрәттең асыҡ, үткер тауышынан ҡаушап ҡалды.

Әбдрәхмән мулла һүҙҙе дауам итте.

– Һиңә донъяны ҡараштырып, аҙмы-күпме ҡалырға тура килер. Хәлде үҙең күреп тораһың. Беҙ ҡайтып, яҡындарыңа аңлатырбыҙ. Иçән-һау ҡайтып килеүең менән һөйөнсөләрбеҙ. Бына шул. Тағы ла кемдең ниндәй һорауы бар? Ҡабатлайым: кемдең ниндәй һорауы бар?

Бына шулай Хәбибйән менән Миңъямалға никах уҡылды. Был турала ишеткән Сәмиәр төрлө тойғолар кисерҙе. Йәш кәләш көнләшерлек матур ине. Кемгә яҙған тиген, ә… Икенсе яҡтан ҡарағанда, «ирем хазина алып ҡайта» тип ауыҙ һыуы ҡороп көткән Маһинур ниҙәр эшләр икән? Нимә-нимә, ә иренән быңдай аҙымды көтмәй бит инде ул! Хәбибйәндең Парижҙан алған хазинаһын Сәмиәр эҙләп тә ҡарағайны. Таба алманы. Күрәһең, ул нәмә Хәбибйәндең йәш кәләшенә насип әйберҙер. Һемәйҙе Маһинур. Йәл дә хатта.

***

Тыуған ауылына әйләнеп ҡайтҡас, Сәмиәр серен үҙенең ҡатыны менән уртаҡлашты. Иренең һәр ниәтен алдан аңлап торған бисә шундуҡ Маһинур янына барып килергә булып китте.

– Йөрөмәһен әллә кем булып. Миҙаллы батырҙың ҡатынымын, тип ҡупырая ине.

Сәмиәр уның ҡайтыуын саҡ көтөп алды.

– Йә, ни хәлле тегеләр? – тип һораны, түҙемлеген юйып. – Ҡарғап ташламанымы ирен?

– Эй-й, аңламаçһың ул хәйләкәр бисәне. «Һин нишләп бушты һөйләйһең?» тине лә – вәссәләм.

Хәбибйәненең бисә алғанына ышанмаймы, әллә теге оло хазинаға өмөт итәме?

– Төпсөшөргә ине. Хазина тураһында, тием.

– Йомоҡ бит. Бүтән бер нәмә лә әйтмәне. «Уны бирәү ҙә урлай алмай» тине. Эйе! Урлай алмаҫ хазина була тиме ни?

– Һе! – тине тамам аптырауға ҡалған Сәмиәр.

***

Хәбибйән бер айҙан, Байғусҡар ҡайныһын ерләгәс кенә, кәләше менән ҡайтып төштө.

– Улым, – тип әсәһе сеңләп илап ебәрҙе. – Бәпесем, ниңә оҙаҡ көттөрҙөң? Ниңә тороп ҡалдың? Сәсте ағарттың бит. Һеләүһен ҡайғыһы әҙ инеме ни? Килен кибеткә тип кенә сыҡҡайны. Ул да күпме өҙгөләнде. Барығыҙ, кем бар, әйтегеҙ киленгә!

Әсәһен ҡосаҡлап, Хәбибйән хәленән килгәнсе йыуатты. Бына ҡаршыһына атылып Маһинуры килеп баҫты. Ул бисәһен күкрәгенә ҡыҫты. Күҙгә күҙ текәлде. Күп нәмәне уҡыны был ҡараштан Хәбибйән.

– Мин һиңә бөтәһен дә аңлатырмын, Маһинурым. Бөтәһен дә. – тине әкрен генә.

– Килен төшөрәләр. Әҙерләнегеҙ.

Был һүҙҙәрҙән йыйылған халыҡ йәнә «гөж» итеп ҡалды.

Кәримә апай Хәбибйән улына ризаһыҙ ғына ҡараны.

– Һеләүһендең күҙе төшкән ҡыҙ, тинеләр тиеүҙен. Уның шулаймы-түгелме икәнлеген кем белә! Был донъяның кеме генә юҡ. Йылға ташҡанда бөтөн ҡый өҫкә ҡалҡып сыға.

Хәбибйәндең йөҙө үҙгәрҙе. Ул әлегә әсәһенә ләм-мим өндәшмәне. Маһинур быны аңланы. Бөтөн кисерештәрен йәшергән ҡатын шулай тине:

– Бейем, килененде төшөрәләр.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң, Кәримә апай асҡан ауыҙын кире япты. Маһинур йүгереп барып яҫтыҡ алып килде, килен баҫаһы урынға яҫтыҡты һалды. Апаҡ ерлеккә эре алһыу сәскәләр төшкәйне. Туй күлдәген кейгән ҡыҙ баланың йөҙөн ул әле күреп өлгөрмәне. Йола буйынса башына елән бөркәнгәйне кәләш. Бына Миңъямалды сәскәле яҫтыҡҡа баҫтырҙылар. Бейем һаман һүҙ ҡатмағанға күрә, Маһинур өндәште.

– Төклө аяғың менән!

Фатиха һүҙен ишеткәс, Миңъямал бөркәнсеген асып, кеҫәһенән ниҙер алды. Берсә Кәримә апайға, берсә Маһинурға ҡарап торҙо. Шунан ҡулын Маһинурға табан һуҙҙы, усын яҙҙы. Усында Һеләүһендең көмөш тәңкәһе емелдәй ине. Инде Кәримә апай яулыҡ осо менән ауыҙын ҡапланы.

– Үт, балам, үт, килен…

Байрам табынына халыҡ күп йыйылды. Өлкән өйгә – ирҙәрҙе, кесеһенә ҡатындарҙы ултырттылар. Хәбибйәндең ике йөҙлөлөгөн, алдаҡсы булыуын фашлау теләге менән янған Сәмиәр тәүгеләрҙән булып килде. Тантаналы тауыш менән һүҙ башланы:

– Һеләүһен мәрхүм һиңә хазинаңды алып ҡайтышырға тейеш ине, ауылдаш. Үҙең генә тейәп ҡайттың инде… Ни саҡлы ғына эҙләһәк тә табырлыҡ түгел. Нығ йыйғанһың.

– Хазина уҡ түгел инде…

– Атаҡ-атаҡ, хазина уҡ түгел, тип хәҙер танаһыңмы? Ошо тиклем халыҡ алдында? Уны бит һиңә Маһинурың алып ҡайтырға ҡушҡайны. Йәш кәләште күргәс, Маһинурҙың йомошо иҫеңә лә инеп сыҡманы. Оноттоң! Ә Һеләүһен ҡустың, үҙең беләһең… – Сәмиәр, танауын тартҡан кеше булып, Хәбибйәнгә һөҙөп ҡарап алды. – Алдашырға була, аҡланырға була хәҙер…

Хәбибйәндең ике сикәһе лә янды, күҙҙәрендә уҫал ут тоҡанғандай булды.

– Халҡыбыҙҙың батыр улы Һеләүһен ҡустым менән беҙ бергә эҙләнек ул хазинаны, Сәмиәр! Еңгәһенә тигән иң матур бүләкте ҡуша эҙләне. Саҡырығыҙ бында Таңатарҙың әсәһен!

Маһинур килеп ингәс, Хәбибйән уға ҡарап эйелде, ниндәйҙер эске наҙлы тауыш менән һораны:

– Кәләш, һин Париждан бүләк алып ҡайтырға ҡушҡайның, шулай бит!

Маһинур баш ҡаҡты. Хәбибйән тирә-йүнгә күҙ йүгертте.

– Кәләш, иҫкә төшөр. Нимә тип әйткәйнең?

Ҡатыны, йәмәғәт алдында оялып, яуап бирмәне. Иренә йылмайып ҡарап алды ла башын баҫты.

– Туғандар, ағайнә! Бына ниҙәр әйтеп оҙатты зирәк ҡатыным: «Мин ул халыҡтың күңелен аңлағым килә. Нишләп беҙҙең ерҙе баҫымсаҡлайҙар? Нимә көһәй ят батша? Аңлауы ҡыйын. Ләкин көйө-моңо аша мин ул һранцуздың күңелен аңлармын». Йыр алып ҡайт! Һүҙмә-һүҙ әйттем, йәмәғәт. Ул минең башҡа уйылып яҙылған.

Быны ишеткән Сәмиәр артҡа ҡайҡайып китте. Ҡунаҡтар ҙа гөжләште. Был гөжләшеү – аптырау ҙа, ҡәнәғәтлек тә, һоҡланыу ҙа ине. Хәбибйән ҡунаҡтарына күҙ йүгертте. Иренен ҡымтыны. Уйсанланды. Шунан ҡурайҙы ҡулына алды.

– Эйе, ҡустым менән күркәм урындарҙы барып күрҙек, музыканттар менән таныштыҡ. Моңдарын икәүләп оттоҡ. Сөнки был хазинаға көсөбөҙ етер һымаҡ тойолдо. Ҡустым күп моң өйрәтте. Ул йырҙарын да отоп алғайны. Йәш кешенең хәтере, үҙегеҙ беләһегеҙ, – Хәбибйән тамағына тығылған төйөрҙө йотто. – Мин ишеттерәсәк көйө еңеү тураһында. Беҙҙән еңелгәндәрҙең үҙ еңеүҙәренә бағышланған көй ул. Тик был юлы үҙҙәренә түгел, ә беҙгә арнаны уны һрансуздар. Һәм уны ҡустым тәү мәртәбә беҙгә Париждың үҙендә уйнап ишеттерҙе. Уралдың ҡырлы ҡурайында…

Хәбибйән ҡурайҙы әйләндереп ҡарап сыҡты, ипләп кенә һыпырҙы. Тамағын ҡырҙы. Табындағыларға күҙ йүгерткәндән һуң, үлемһеҙ моң ҡоралын ирененә терәне. Өй эсен быға ишетелмәгән ят, әммә дәртле көй тултырҙы. Был моң эсендә шаянлыҡ менән уйсанлыҡ, еңеллек менән етдилек бергә ҡушылды. Был көй аша күпме быуаттар Европала көн иткән халыҡтың ғәме, ынтылышы урғылды. Ул күңелде берсә осорҙо, берсә һағыш менән күмде. Берсә һалҡын һыу бөрктө, берсә ялҡын елпене. Башҡорт ҡурайы был көйҙө еңелеүсенең еңеүсе халыҡҡа үҙенсәлекле сәләме, уның улдарын таныуы һәм һоҡланыуы итеп яңғыратты. Эйе, был тойғо-хисте күпте кисергән йөрәге аша үткәреп, Хәбибйән үҙ халҡына еткерҙе. Хаҡы бар, ул – ЕҢЕҮСЕ. Еңеүсе булып әйләнеп ҡайтты һәм ул, ысынлап та, бөйөк ине.

Кесе өйҙә үҙенең байрам кейемендә – ҡыҙыл күлдәк, көмөш тәңкәле елән, башына ҡыҙыл мәрйендән тегелгән емелдәк ҡашмау кейгән, байрам кейемендә бер һылыу ҡатын ултыра. Иренән оло бүләк ҡайтарттыра алған ҡатындың ғорур һыны бүтәндәрҙән ҡырҡа айырылды – йөҙөндә әрнеү ҙә, һағыныу ҙа берҙәй сағылды, ә шулай ҙа эстән нур менән балҡый ине ул. Был нур бүлмәне, тирә-йүндәгеләрҙе лә яҡтыртты. Эйе, ғорур ҡатын бөтә булмышы менән шәм ине. Ошо нурлы шәмде алыҫ тарафтан килеп еткән моң иркәләне. Берсә ҡыуаныс булып, берсә ғәфү үтенеү булып яңғыраны. Иренең Париждан ҡайтҡан бүләге шул тиклем ҙур ине, ахыр, ул, өйгә, ишегалдына һыймайынса, киң урман-далаға таралды. Бер мәшһүр халыҡтың күңелен асып биргән мәшһүр моң ине был. Быны аңлаған, быны баһалаған башҡорт ҡатынының йөҙөндә ҡыуаныс та, уйсанлыҡ та, һағыш та, һөйөү ҙә, үкенес тә, сабырлыҡ та – бөтәһе берҙәй сағылды. Һәм көй уйнаусы быны тойҙо. Тағы ла бирелеберәк уйнаны ул ҡурайында. Бөйөк халыҡтың бөйөк бер көйөн үҙәктәргә үтерлек итеп уйнаны. Ысын яугир, ысын фидаил, ысын бағышай… Шулай ҙа емелдәк мәрйен ҡашмаулы башын ҡырынырак һалып, уйсан күҙҙәрен уйсан күҙҙәрен эске тәрәнлеккә һәм тышҡы сикһеҙлеккә төбәп ошо көйҙө ТЫҢЛАУСЫ ҡатын тағы ла бөйөгөрәк ине был мәлдә.



**Спартак**
**ИЛЬЯСОВ**

# СӨКӘК

## хикәйә

Тормош иптәшем күңелһеҙләнеп оҙатып ҡалды. Инде алтынсы тиҫтәне ҡыуһам да, үҙемдең дә йөрәгем семтеп-семтеп ала. Әммә ваҡыт тигәнең көтөп тормай.

– Йә, гүзәлем, оҙаҡҡа түгел бит. Бер ай үтер ҙә китер. Иң мөһиме – иҫәнлектә-һаулыҡта осрашырға Аллаһы Тәғәлә насип итһен, – тип ҡулын еңелсә генә ҡыҫып, вагон купема кереп ултырҙым.

Бына поезд һыҙғыртты. Шыуғандай, тауышһыҙ ғына ҡуҙғалып киттек, тәҙрә аша бер-беребеҙгә ҡул болғайбыҙ. Перронда тороп ҡалды. Тик ҡыҙыл яулығы ғына уны башҡа кешеләрҙән айырып, ана тора ҡатының, тип күрһәткәндәй. Боролмала бөтәһе лә юғалды.

Күңелемде ғәмһеҙ бушлыҡ, яңғыҙлыҡ тойғоһо солғап алды. Тормош ағышында нисә тапҡыр айырылышып, нисәмә осрашыу бәхетен кисергәнем бар. Айырылышыу хисе әсерәк. Ауыр айырылышыуҙан һуң ун йыл күңел бушлығын кисерергә лә тура килде. Тормош бит. Йә дәүләт ғауғалары, йә үҙ тәҡдирең... Тыуған ерҙең киң яландарын, ваҡыраҡ тауҙар, шырлыҡтар араһында ятҡан туғайҙарын күҙәтеп килә торғас, поезд Урал армыттары араһына боролдо. Юлаусыларым, нигеҙҙә, йәштәр, бөтәһе лә поезд үткән ҡалаларға йә уҡырға, йә эшкә баралар. Араларынан береһе, күрәһең, хоҡуҡи белем алыу өлкәһендә уҡыйҙыр. Диплом яҙыр өсөн архив материалдарынан бер ваҡиғаны нигеҙ итеп алып, шул ваҡиғаны төрлө йүнәлештә өйрәнеүен иптәштәренә һөйләй. Һөйләгән ваҡиғаһы миңә бик таныш кеүек тойолдо. Шуға күрә лә иғтибарҙы йүнәлтеп тыңлай башланым һәм һөйләнелгән ваҡиғаларҙы бөтә нескәлегенә тиклем тағы ла иҫкә төшөрҙөм. Сөнки уны хәтерләү мине утыҙ йыл элек булған ваҡиғаларға алып ҡайтты. Бер юлы йәшлек осорона ла.

*Спартак Ильясов (1941) Учалы районының Ҡорама ауылында тыуған. Урта мәктәптән һуң «Поляковка» совхозында, комсомолдың район комитетында эшләй, Совет Армияһында хеҙмәт итә. К. А. Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһын тамамлай. «Барын-Табын хәтере», «Яраһаҙ яралары», «Ҡолой контон» исемле китаптар авторы.*

Ниңәлер шул ваҡиға миңә тыныс йоҡо бирмәне. Иртә менән баш ҡалаға килеп еттек. Йәш юлдаштарым төшөргә йыйынғас, кисә кис һөйләгән егеттән диплом ваҡиғаларындағы кешеләрҙең, ә иң мөһиме, баланың артабанғы яҙмышын һораным. Дипломсы баланың артабанғы яҙмышын белмәй икән. «Архив материалдарын артабан өйрәнмәнегеҙме?» – тип тә һораным. «Юҡ, ул баланың артабанғы яҙмышы билдәле түгел», – тип ҡыҙыҡһыныуҙы һүндергәнсе һыу һипте. Был ваҡиғаларҙың артабанғы ағышын мин дә белмәй инем. Был студент архив материалдарында минең һәм минең иптәштәрҙең тикшереп тапшырған эшенә тап булғандыр, тигән фекергә килдем. Юлым артабан Ҡаф тауҙары яғына дауам итте.

Шулай итеп, мин шифаханаға китеп барам. Юлда төрлө кешеләр осрай, уларҙы ла күҙәтәм. Күберәк «Ҡаф тауҙары яғында булып уҙған ваҡиғаларҙан һуң кешеләрҙең ҡараштары ил уртаһында йәшәгәндәргә үҙгәрмәнеме икән?» тигән уйға яуап эҙләйем. Юлда һәр ваҡыт кешеләр тиҙ дуҫлаша, тәртипһеҙҙәргә ҡарағанда инсафлылар, ярҙамсылдар һәм фекерҙәштәр күберәк осрай.

Минең купеға Һамар ҡалаһы тирәһендә утыҙ йәштәр самаһындағы ир кереп урынлашты. Оҙон ғына буйлы. Асҡаҡ. Ҡара сәсле, ҡара күҙле. Поезд барған ҡала, етер еребеҙ булғас, бер-беребеҙгә «Ҡайҙа бараһың?» тигәнерәк һорауҙар бирмәнек. Ул сисенде. Еңелсә кейемдәрен кейҙе. Исем-шәрифтәребеҙҙе әйтеп таныштыҡ. Әммә, ятыр ваҡыт етеп килгәнгә, икебеҙ ҙә йоҡларға әҙерләнәбеҙ. Юлдашым урыҫ телендә һөйләшә. Миңә ул йә христиан сыуаш, йә мари кешеһе булып тойолдо. Башындағы фуражкаһын сискәс, ул муҡсайынан башҡорт тирмәһе өлгөһөндә сит-ситтәре нағышлап тегелгән сигеүле теүәтәй алып кейҙе. Үҙе әҙ һөйләшә. Һорауҙарҙы үҙенә нимәлер кәрәк булғанда ғына бирә. Кешегә мөғәләмәһе бик йомшаҡ, инсафлы, тыйнаҡ. Юлдашым кергәнсе киске сәйҙе эсеп өлгөргәйнем, шуға ла уға ҡушылманым. Сәйгә ултырыр алдынан ул тубығына таҫтамал йәйҙе лә доға уҡый башланы. Уҡып бөткәс, «Аллаһу әкбәр» тине лә ашарға ултырҙы. Үҙ урыныма ятҡан инем. Һәр саҡ урыҫ телендә генә һөйләшкән был кешенең ислам тәғлимәтле булыуы аптыратты. Иғтибар менән уны күҙәтә башланым. Алдындағы ризыҡтарға иғтибары ла, уның һәр валсығына мөнәсәбе лә, ултырышы ла мосолманса. Һәр тарафты диҡҡәт менән тыңлап, яй ғына аш ҡабул итә. Минең биргән һорауҙарыма, ашаған еренән туҡтап, асыҡ һәм ҡыҫҡа ғына яуап бирә.

Артабан беҙ һөйләшмәнек. Әммә мин уны бер күҙем менән булһа ла күҙәтә инем. Ашап бөткәс, ул яйлап, һис ҡабаланмай доға уҡыны. Өҫтәлен тейешенсә таҙартты. Сығып бер аҙ елләп керҙе. Унан һуң муҡсаһынан Ҡөрьән-Кәримде сығарып уҡый башланы. Уның йөҙ-сырайынан маңлай һырҙарының бер йыйырсыҡланып, бер ҡәҙимге һырҙарына ҡайтып үҙгәреүенә ҡарап, сүрәләрҙе аңлап, уларҙы зиһене менән йотоп уҡығанлығы күренеп тора.

Был күренеш оҙаҡ ҡына дауам итте. Поезд тәгәрмәстәре бер туҡтауһыҙ туҡылдап, йоҡоға бәүелтһә лә, аң, ҡыҙыҡһыныуымды туҡтатмайынса, һыңар күҙгә күҙәтергә ҡушҡан. Бына ул ашауынан туҡтаны, өҫ кейемдәрен сисеп элде. Бер аҙ торғас, ул бит-ҡулдарын, аяҡтарын ғөсөлләндереп, тәһрәтле булып керҙе лә ентекләп һөртөндө. Иҙәнгә газеталар йәйҙе. Өҫтөнә йоҡа намаҙлыҡ түшәп, төнгө йәстеү намаҙына баҫты. Намаҙлыҡҡа баҫыр алдынан, ул өҫтәлендә ятҡан ҙур сәғәтенә ҡарап, торошон билдәләп алды. Уның һәр саҡ ҙур сәғәтенә ҡарап торошон үҙгәртеүен һуңынан төшөндөм: компас аша ҡибла йүнәлешен билдәләгән икән. Йәстеүҙән һуң ҡаты йоҡоға талғанмын. Әллә мейе туҡтауһыҙ туҡылдауға арып, әллә таң һарыһы күҙ ҡабаҡтарын яҡтыртыуына уянып күҙҙе асҡанда, Ибраһим тағы ла намаҙлыҡ өҫтөндә тора. Сабаһ йәки, ҡайһы бер

мосолмандарыбыҙ әйтмешләй, зухр намаҙын уҡый ине. Шулай биш намаҙҙы ла еренә еткереп уҡып көн үтте. Тәүлек ашыу килгәс, беҙ тейешле ҡалаға етеп, мин үҙ шифаханама барып урынлаштым. Әллә милицияның перронда һыҙғыртҡыс һыҙғыртып кемделер, күрәһең, азатлыҡ даулаусыларҙы, баҫтырыу шау-шыуы аҫтында иғтибарҙы юғалтып, беҙ Ибраһим менән хушлаша алманыҡ. Ығы-зығылы халыҡ араһында бер-беребеҙҙе юғалттыҡ. Ҡалала, ғөмүмән халыҡта Ҡаф тауҙары араһында йәшәүселәр холҡо, үҙһүҙлелек, ҡыҙыулыҡ, намыҫлылыҡ, тоғролоҡ һиҙелә. Бында уйнап һөйләшһәң дә, уйлап һөйләшергә кәрәк. Урындағы халыҡтың ғөрөф-ҡылыҡтары үҙенсәлекле, бер тин урынына биш тин һурырға әҙерҙәр. Төрлө телдә һөйләшәләр. Хатта бер-береһен аңламайҙар, әммә тәбиғи булмыштары күп яҡтан оҡшаш. Уңайлы урынлашып, тирә-йүнгә күҙ һалып керәйем тип торғанда, ҡапыл ишек асылып китте лә, бүлмәмә Ибраһим килеп керҙе.

– Ба, вот тебе встреча! – Беҙ ихлас ҡосаҡлашып, тағы ла күрештек.

Ул сисенеп, ул-был итеүгә, ашарға саҡырҙылар. Ашау өҫтәлдәребеҙ ҙә бергәлер, тип уйлаһам да, улай булмай сыҡты. Ибраһимды дини кешеләр ризығы бирелгән бүлмәгә ултырттылар. Нимә ашайҙарҙыр, миңә билдәһеҙ. Әммә беҙҙең өҫтәлдәге тәғәмдәр юҡтыр, уныһы билдәле.

Артабанғы көндәр дауаланыуҙар һәм башҡа саралар менән үтте лә үтте. Яйлап яҡынданыраҡ танышырға бер ҙә форсат сыҡмаған кеүек.

Көндәр үтә торҙо. Кис ҡайтҡас, шәхси мөнәсәбәттәрҙе асыҡламай ғына урыҫ телендә һөйләшәбеҙ ҙә, уның йәстеүен үткәреүе менән йоҡоға талам. Ибраһимдың бейергә сыҡмауы, йәш ҡатын-ҡыҙға яҡын да килмәүе мине һағайта башланы. Бер һөйләшкәндә ул ғаиләһе юҡлығын, яңғыҙ йәшәүен белдергәйне.

Һәр кем сит ерҙә үҙенә йә рухташ, йә диндәш кеше менән яҡынлаша. Миңә лә үҙ ҡорҙашым тура килде. Ул алтай милләтенән, Талтан исемле.

Талтан менән дөйөм ҡыҙыҡһынған һүҙҙәребеҙ күп. Мин унан Алтай тауҙарын, халҡының ғөрөф-ғәҙәтен һорайым. Ә ул минән Урал тауҙары һәм башҡорттар менән ҡыҙыҡһына.

Шулай бер көн Ибраһим менән минең бүлмәгә, ҡулына ҙур һауытлы йөҙөм шарабы тотоп, Талтан килеп керҙе. Ер-һыу атамалары, ғөрөф-ғәҙәт буйынса фекер алышыу башланғас, беҙгә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән Ибраһим да ҡушылды. Хәҙер мин белә инем: Ибраһим уғыр ҙа, сыуаш та түгел, йә башҡорт, йә татар кешеһе. Әммә урыҫ мөхитендә үҫкәс, улар телен үҙләштереп, үҙ иткән һәм нисектер, кемдеңдер йоғонтоһо аҫтында үҙ диненә ҡайтҡан.

Талтан алтайҙарҙың туй йолаһын һөйләй башланы ла, ҡыҙыҡһынып, башҡорттарҙың сөннәтләме, әллә түгелме икәнлеген белергә һорау бирҙе.

– Эйе, беҙ сөннәтле. Бына ялға китер алдынан ғына иң кесе ейәнемде сөннәткә ултырттыҡ, – тинем.

– Ә нисә йәштә ине? – тип һорай Талтан.

– Беҙ ете һанын тотабыҙ. Ете йәшкә тиклем сөннәтле булырға кәрәк. Ә беҙҙең сабыйыбыҙ бәләкәй генә ине…

Шул һүҙҙәрҙе әйтеүем булды, Ибраһим ниндәйҙер өн сығарҙы. Унан ике ҡулы менән яңаҡтары аша башын тотто ла тороп сығып китте. Талтан уның был ҡылығын аңламаны, һис бер ни булмағандай, үҙ хәбәрен сурыта бирҙе. Насар һүҙ ҙә һөйләмәнек шикелле, ни бары йола тураһында гәпләштек. Әммә мин уны күрҙем. «Баланы сөннәтләгәндә сабый бәләкәй генә ине» тигән һүҙҙәремдән һуң Ибраһимдың ҡапыл йөҙө боҙолдо. Маңлайын йыйырып, миңә ут ҡарашын ташланы. Үҙем дә һиҙмәҫтән, тәндән сыбыҡ тимерҙәр сәнсеп, өҫтән аҫҡа китте. Ибраһимдың был ҡарашында сирҡаныу һәм ҡурҡыу бар ине. Үлеме алдынан ғына кешенең шулай ҡото алыналыр. Уның был ҡылығы мине тамам аптырауға

ҡалдырҙы. Талтан менән артабан әңгәмәләшеүҙең тәме китте. Шуға ла мин: «Барыр ерем бар», – тип Талтандан ғәфү үтенеп, ҡорҙо йомғаҡланым. Бүлмәлә йәм тапмағас, баҡсаға сыҡтым. Таҙа, күркәм баҡсала тар юл менән китеп бара инем, ағас аҫтындағы ултырғыста Ибраһимды алыҫтан уҡ күрҙем. Ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып, башын юғары күтәреп, күңеле менән ҡайҙалыр йыһанда йөҙә ине. Мине күргәс, урын бирҙе. Янына ултырғас, мин Ибраһимдан:

– Әллә мин һиңә ҡарата берәй оҡшамаған һүҙ әйттемме? Миңә асыуландыңмы? Ниңә ҡорҙо ташлап сығып киттең? – тип һораным.

Ибраһимдың үҙен нисектер сәйер тотоуын күреп торһам да, сәбәбен аңламай инем. Шулай ҙа Ибраһимдың йәшлеген аңлап, шулай булғас, йәштәрсә шуҡлығы ла барҙыр, тигән уй менән:

– Йыраҡҡа килгәнһең. Дауаға ла һирәк һәм дөйөм алымдарына ғына йөрөйһөң, – тинем.

– Бүре үҙ ояһы янында һарыҡ йыҡмай, – тип көлөмһөрәне күршем.

– Бүре өсөн һарыҡ ҡайҙа ла бер инде, – тип ҡуйҙым.

– Тик мин тешһеҙ бүре. Бер ваҡытта ла һарыҡ йығып ашай алмайым. Тешемде көсөк ваҡытымда уҡ бысып алғандар.

Ысын мәғәнәһенә төшөнә алманым. Шулай тине лә уйға батты. Әҙерәк ултыра биргәс:

– Ағай, һеҙ минән байтаҡҡа оло... Донъяны күп күргәнһегеҙ. Бына кеше ғүмере буйына үҙе йәшәгән ерҙә, бөтә кеше менән бергә йәшәһә лә, ысынбарлыҡта улар менән дөйөм маҡсатта, дөйөм теләктә йәшәү мөмкинселеге булмай. Һәр саҡ, һәр ерҙә үҙең күренеп йөрөһәң дә, күңелеңдә, мөмкинселегеңдә күрһәтмәй, йәшереп йәшәп буламы? – тип һораны.

– Юҡ, әлбиттә. Кешеләр менән ике йөҙләнеп йәшәп булмай. Иртәме-һуңмы ул асылырға тейеш. Үҙенең эске фиғелен күрһәтергә тейештер, – тип һығымта яһаным.

– Шулайын шулай. Әммә төрлө осраҡтар була бит. Бына мин, мәҫәлән, асыла алмайым. Мөмкинселегем булһа, теләр инем. Һеҙ минән ике тапҡыр ниңә кис йәштәр янына бейергә сыҡмауымды һоранығыҙ. Ә мин һеҙгә яуап бирә алманым. Шулай ҙа һеҙ минең ҡайҙан, кем икәнемде белмәйһегеҙ. Әммә кеше ҡасан да асылырға тейеш! Һеҙ дөрөҫ әйтәһегеҙ. – Шунан, беҙҙең яндан үтеп барған өс йәш ҡатын-ҡыҙға ҡарап:– Нишләйем һуң?! Бүре булһам да, оянан йыраҡ булһам да, «ашай» алмайым, тешем юҡ, – тип уфтанғандай итте Ибраһим.

Ә мин һаман да хәбәрҙең асылына төшөнә алмайым. Ибраһим йыраҡта, киң даръялай яланда күренеп ултырған Биштауға оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы.

– Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙемдең ҡайҙан, кем балаһы булыуымды ла, ата-әсәйемдең исем-шәрифтәрен дә белмәйем. Кем булғандыр улар? Милләттәрен дә белмәйем. Икеһе ике даръяныҡымы, бер шишмә башыныҡымы – билдәһеҙ. Күп йөрөнөм мин эҙләнеп. Ҡутармаған архивтарым, һөйләшмәгән кешеләрем ҡалманы шикелле. Шулай ҙа һеҙҙә, Башҡортостанда, медицина архивтарында шуны таптым: мине, яңы тыуған баланы, етмеште уҙған ике ҡарсыҡ шәфҡәт туташтарына биреп ебәргән... Ибраһим тип пәйғәмбәр исемен яҙырға һорағандар. Исемемде шул ике ҡарсыҡ ҡушҡан. Ләкин миңә уларҙың кем булыуы билдәһеҙ. Ғөмүмән, ул ҡағыҙ медицина яҙмаһы һәм булған хәл-әхүәлде яҙған протокол киҫәге ине. Ә ундай сетерекле яҙмаларҙы милиция алып китә лә кире ҡайтармай. Үҙ эштәренә ҡушып архивтарына ебәрәләрҙер, тигән фекер әйттеләр. Ә Эске эштәр архивтарына кереү, ай-һай. Артабан ҡайҙа булғанмындыр, белмәйем. Хәтерләйем, ул йортта беҙ барыбыҙ ҙа бер йәштәр самаһында булғанбыҙ,

күрәһең. Беҙҙе йәберләүсе ҙур балалар булманы. Күрәһең, ҡайһы беребеҙ атай-инәйҙәрен белеп, аңлап, күреп, шунан һуң ғына был йортҡа эләккәндәрҙер. Ҡайһы берәүҙәре атай-инәйҙәрен һағынып илай, тәрбиәсе апайҙарынан уларҙы саҡырып килтереүҙәрен һорай ине. Ә беҙ, бер төркөм бала, атай-инәйҙең кем булыуын, уларҙан ниндәй йылы еҫ килгәнен төшөнмәһәк тә, беҙ ҙә уларҙы таптыра торған инек. Нисектер йылы, яҡын кешем булыуын бик теләй инем. Тәрбиәсе булғандыр. Бер апайҙың еҫен мин иң яҡын кешем, күрәһең, әсәйем еҫе кеүек аңлағанмындыр. Әммә мин уның әсә түгеллеген белә инем. Шулай ҙа ул апай кейгән халатын элгескә элһә, йә булмаһа яулығын һалып торһа, аңдып торам да, тиҙ генә барып яулығына йә кейеменә танауымды терәп еҫкәйем-еҫкәйем дә, күреп ҡалмаһындар тип, йүгереп ҡаса инем. Унан берәй мөйөшкә ултырам да шул еҫте тағы ла иҫкә төшөрәм. Әммә оло апайҙар беҙҙе нимә менәндер әүрәтеп, иғтибарҙы икенсегә борһалар, ата-инәйҙәрҙе онотабыҙ ҙа ҡуябыҙ. Ә тегеләр онотмайҙар, илайҙар ҙа илайҙар. Беҙ әле беребеҙ ҙә уҡымайбыҙ. Күңелгә ниҙер етмәгән кеүек булһа ла, өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ булды. Бер-беребеҙҙең әйберенә тейеү ҡәтғи тыйыла ине. Урлашыуҙың ни икәнен дә белмәнек. Әммә был йортто ҡалдырып китергә ваҡыт етте. Бөтә әйберҙәребеҙҙе йыйнаттылар ҙа, автобусҡа ултыртып, беҙҙе ҡайҙалыр алып киттеләр. Элек бер ваҡытта ла автобусҡа ултырмағас, был ваҡиға айырыуса хәтерҙә ҡалған.

«Ура, ура! Автобуста китәбеҙ!» – тип беҙ йүгерешеп кереп ултырҙыҡ. Әммә бынан, өйрәнгән йортобоҙҙан, мәңгегә китеүебеҙҙе аңламай инек. Беҙҙе тәрбиәләгән апайҙар, күҙҙәренән йәш тәгәрәтеп, берәм-берәм автобусҡа кереп, һәр беребеҙҙең башынан ҡосаҡлап хушлаштылар. Шунда ғына мин аңлай төштөм: апайҙар менән хушлашыуыбыҙҙы, башҡаса бында килмәйәсәгебеҙҙе. Мине яратҡан апай башымдан килеп ҡосаҡлағас, мин уның шул тиклем үҙ, шул тиклем яҡын еҫен еҫкәнем. Уның менән мәңгелеккә айырылышыуымды һиҙмәһәм дә, иланым да ебәрҙем. Ниңәлер: «Беҙ ҡасан ҡайтабыҙ?» – тип һораным. Әле юлға сыҡмаҫ борон уҡ мин уны һағынғайным. Дөрөҫөрәге, уның үҙенән дә, башымды һыйпаған йомшаҡ ҡулынан да, бөтә зиһенемә яҡын еҫенән дә айырылғым килмәй ине. Бына автобус бипылданы. Апай башын эйеп, минең ҡолағыма: «Ибраһим, һин сит балалар йортона китәһең. Унда барғас, бер ваҡытта ла балалар алдында шыр яланғас сисенмә. Мунсала ла, һыу төшкәндә лә... Юғиһә, үҙеңдән көлөрҙәр... Берүк онотма», – тип ҡат-ҡат иҫкәртте. Уның тауышында ҡушыу ҙа, үтенеү ҙә бар ине. Шулай ҙа, аңлағанымса, әйткән һүҙҙәрен башыма һалып ҡуйҙым.

Икенсе ергә барғас, унда тормош бөтөнләй башҡаса булып сыҡты. Көндәлек тормоштоң байтаҡ өлөшө үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереүгә күсте. Ятҡан урыныңды йыйыу, иҙән һепереү, саң һөртөү, йыуыу, йыуыныу һәм башҡалар. Ҡыҫҡаһы, үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереүгә өйрәттеләр. Бында үҙ-ара мөнәсәбәт тә башҡаса. Ҙурҙар, көслөләр хаким! Көслөләр бойора, кәрәк икән, йомошҡа ебәрә, хатта тәмәке төпсөгө сүпләтә. Тормошта шулай етемлекте, бушлыҡты ғына түгел, ғәҙелһеҙлекте, хакимлыҡты, бурыслылыҡты һәм һәр ваҡыт буйһоноулы, яуаплы булыуҙы белдек. Бына шул биш төшөнсә кешене артабанғы тормошонда ғүмере буйы оҙатып йөрөй. Кеше ғүмере, нигеҙҙә, шул биш төшөнсә араһына ишелгән. Береһенән дә ҡотолоп булмай. Әммә кеше ғүмере буйы шул төшөнсәләрҙән ҡотолорға ынтыла... Азат булырға... Шуларҙан башҡа тағы ла һәр кем татымаған ғәриплелек тойғоһо бар. Уның емеше – үҙеңдең башҡаларҙан түбәнлегеңде аңлау. Быныһы иң ауыры...

Ибраһим күктә йөҙгән аҡ болоттарға ҡарап тынып ҡалды. Мин дә өндәшмәйем,

һөйләшһәк, аҙағы нисек булырын да белмәйем. Сөнки Ибраһимдың күңел етемлегенең сәбәбен һис төшөнә алмайым. Ҡарап торһаң, Ибраһим һап-һау, таҙа, урта көрлөктә, ауырыуға оҡшамаған. Өҫтө бөхтә, таҙа.

– Минең һиҙемләүем буйынса, ниндәйҙер бер ауыр яраң бар, шәт. Тик ул әллә тән, әллә йән яраһы, – тим.

– Дөрөҫ һиҙемләйһең, ағай, дөрөҫ! Миндә төҙәлмәҫлек тән яраһы бар. Шул яра үҙе һыҙламаһа ла, иҫ белеп йәшәй башлағандан алып – ауыр, тәрән, төҙәлмәҫлек йәнем яраһы. Детдомда йәшәгәнемә икенсе йыл тигәндә, бер ваҡытта ла сисенеп йөрөмәһәм дә, ҡайҙандыр белеп ҡалып, малайҙар миңә «Сөкәк» тигән ҡушамат таҡтылар. Шул ҡушаматты мин балалар йортонда һигеҙ йыл йөрөттөм. Күпме ғәрлек, түбәнһетеү күрҙем... Мунсала ла, һыу төшкәндә лә, эҫе көндәрҙә урамда йөрөгәндә лә еңел кейемемде малайҙар түбәнгә тарталар ҙа шарҡылдап көлөшәләр. Шул тиклем ауыр була торғайны. Ә минең холҡомда ҡапма-ҡаршылыҡлы тормош алымдары ла, эске хистәр ҙә барҙыр. Балалар йортонда һәр саҡ ике төшөнсә, ике тәрбиәүи алым һуғыша. Тәрбиәселәр дөрөҫлөккә, хеҙмәткә, тәртипкә өйрәтәләр. Әммә бер кем тарафынан уҡытылмаған алымдар ҡайһы ваҡыт тәрбиәселәрҙең барлыҡ тәрбиәһен еңә лә ҡуя. Ҙурҙарҙың бәләкәйҙәрҙе ҡыйырһытыуы, үҙ-ара ваҡ-төйәкте урлау, бер-береңдең танауын емереү, ҡушаматтар тағып түбәнһетеү. Унда берәү ҙә һиңә «көслө», «батыр» йә «бөркөт» тип исем таҡмай. Иң ауыр ҡушамат – ағзаларыңа ҡағылышлыһы. Йә «һаңғырау», йә «һуҡыр», йә... йә... «сөкәк»... Унан һуң, кис булһа – көслөнөкө замана. Көслөгә хеҙмәт итә башлайһың. Көслөләр сығып китһә, яйлап үҙең көслө урынына ҡалаһың. Бына шулай килә тәртип, уҡытылмаған күсәгилешлек. Ғөмүмән, ғаиләлә үҫкән бала менән балалар йортонда үҫкәндәр холоҡтары, тормоштағы алымдары менән ҡырҡа айырмалы. Дәүләт йә сәйәси йәмғиәт тарафынан ҡыйырһытылмаһа ла, тирә-йүн, үҙ мөхитендә йәберһетелеп үҫкән кешеләр бөтә тирә-йүнгә, ғөмүм кешелеккә үсле булалар. Улар өсөн бер кеше лә яҡшы түгел. Бөтәһе лә насар, ундайҙар яҡшы сифаттарҙың ниндәй икәнен дә белмәйҙәр, аңламайҙар ҙа.

Улар бөтә кешелеккә үсле түгелдәр. Ә үҙ мөхите тарафынан ҡыйырһытылып үҫкәндәр башҡаса. Ниңә мин һәр ваҡыт ғәйепле, тип уйлайҙар. Ни өсөн тик мин? Ниңә башҡалар түгел? Мине йәберләүселәр был йорттан сығып китһәләр, күрһәтер инем мин ҡуштандарына, тигән өмөт эстә йөрөй. Ололар сығып киткәс, иң көслөһө булып мин ҡалдым. Хәҙер миңә берәү ҙә «сөкәк» тип әйтә алмай ине. Әйтеп ҡараһын! Хәҙер үк тешен ҡанатҡансы тондорам. Эйе, өҫтөңдә хакимдар торһа ла, әгәр зиһенеңдә егеп, ул хакимға кәрәк урында өҫтөнлөгөңдө күрһәтә алһаң, ул һағая, һиңә иғтибарлы була башлай. Башыңды күтәрергә мөмкинселек тыуа. Нахаҡтан бәлә һалып рәнйетһәләр, үҙ-үҙеңде тыйыу, сабыр булыу ауыр. Балалар йортонда уҡығанда бер уҡытыусы апай дәрес ваҡытында уҡытыусылар бүлмәһенән онотолоп ҡалған китабын килтерергә ҡушты. Кластан сығып, күрше биналағы уҡытыусылар бүлмәһенә йүгерҙем. Минең йүгереп барғанды дәрескә ҡыңғырау биреүсе апай күрҙе. Мин бүлмәгә керешләй унан беҙ «Батя» тип йөрөгән Виктор килеп сыҡты. Бармағын тештәренә ҡыҫтырып: «Ни гу-гу!» – тип минең эскә йоҙроғо менән төрттө лә һуңлап килгән ҡиәфәттә уҡыған класына кереп китте. Мин ҡушылған ерҙән география китабын алып, дәрескә ашыҡтым. Бынан һуң тағы ла ике сәғәт башҡа фәндәр уҡыныҡ. Һуңғы дәрес бөтөр алдынан класҡа мәктәп директоры менән урынбаҫары, бая мин география китабын килтереп тотторған уҡытыусыбыҙ һәм... милиционер килеп керҙе.

Дәрес туҡтаны. Милиционерға ниңәлер мине күрһәттеләр. Ул туп-тура яныма

килде лә, партанан тороп, ҡаршыға, ҡара таҡта алдына, баҫырға ҡушты. Кеҫәңә ҡулыңды тыҡма, тип тә бойорҙо. Бөтәһенең күҙе алдында минең портфелде, китап-дәфтәр араларын ентекләп ҡараны. Бында юҡ, тип портфелде өҫтәлгә ҡуйҙы ла, бишмәтте систереп, һәр йөйөн ентекләп тикшерҙе. Унан һуң салбар кеҫәләрен, эсенә үк ҡулын тығып, уның эске яғын, балаҡтарҙы ҡапшап сыҡты. Барса класс шаҡ ҡатты. Барыһы ла аптырашып, ҡурҡып ултыра. Мин үҙемде яҡлап ниҙер әйтер хәлдә түгел инем. Милиционер: «Айда пойдем на допрос, воришка», – тип ҡолағымдан тотоп кластан алып сығып китте. Шул саҡта ғына мин ҡысҡырып илап ебәрҙем. Класс бинаһынан сыҡҡас, мин китап алған уҡытыусылар бүлмәһенә керетте лә һорау ала башланы. «Ун мең һум аҡсаны ҡайһы сумканан алдың!» – тип екерҙе. Мин ун мең күләмендәге аҡсаны түгел, ғөмүмән, үҙ ғүмеремдә өс тәңкәнән артыҡ аҡса тотҡаным да, күргәнем дә юҡ ине. «Ҡайһы сумканан алдың?» – Екереп, өҫтәл өҫтөндә торған биш сумкаға күрһәтте. Өндәшмәйем. Өҫтәүенә, ҡотом осҡан. Үҙем һығылып-һығылып илайым. Милиционер йәнә ҡолағымды ныҡ бороп: «Әйт, тиҙерәк әйт, юғиһә, хәҙер эт менән есҡәтәм. Аҡсаны йәшергән ереңде әйт», – тип бышылданы. Шул ваҡыт мәктәп директоры, бер төркөм уҡытыусылар килеп керҙе. Директор минең яныма килеп, ҡолағыма: «Аҡсаларҙы йәшергән ереңде әйт. Алып бирһәк, милиционер ҡайта ла китә. Әйҙә, икәү барайыҡ», – тип ҡулымдан етәкләп үк алды. «Ҡайҙа? Бер ниндәй аҡса алғаным да, күргәнем дә юҡ». – Һулҡылдап-һулҡылдап тағы ла илап ебәрҙем.

Оҙаҡ һорау алдылар. Ул көндө мине үҙебеҙҙең дөйөм йоҡо бүлмәһенә кереткәнеләр. Төнгө тәрбиәсе апайҙар бүлмәһенә урын йәйеп, шунда уҡ аш ашатып, йоҡларға һалдылар. Бер апай төнө буйы минең янда ултырҙы. Туалетҡа барғанда ла эйәреп барып, ҡарауыллап торҙо. Икенсе көнө мине иртәнге физзарядкаға сығарманылар. Ашарға бүлмәгә генә килтерҙеләр. Ярты сәғәттән һуң ике милиционер килде. Төрлө ҡиәфәткә кереп, төрлө алымдар ҡулланып, минән оҙаҡ һорау алдылар. Ун меңде урлау түгел, мин ул ваҡытта ун меңде яҙа белгәнменме икән?

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: осона сыға алманылар, буғай. Әммә бөтә мәктәп миңә ҡушамат таҡты – «Сөкәк бур». Миңә бөтәһе лә, ҡайһы бер уҡытыусылар ҙа ҡараштарын үҙгәрттеләр. Мин ҡыуылыу сигенә еткән мөртәт фиғелендә ҡалдым. Дуҫтарым да ситләште. Бөтәһе лә үсекләй, йә төртә, йә тибеп ҡаса. Башҡаса түҙер әмәл ҡалманы. Ҡастым. Ҡасаҡ булып, ике ай тормоштоң әсе һыуын эстем. Ябыҡтым, керләндем, бетләнем. Ниһайәт, бер вокзалда мине тоттолар. Шул вокзалда уҡ, ҡайҙандыр белеп, милиция тағы ла минән һорау алды. Урлаған аҡсаға гулять итеп йөрөйһөңмө, тип бет тулы, туҙып бөткән кейемдәремде тентене. Иҫемә төшөрөп, минән алда уҡытыусылар бүлмәһенән Виктор Акиньшиндың сығыуын һөйләнем. Ул ваҡытта Батя-Виктор унынсыла, мин алтынсы класта уҡый инем. Балалар йортона ҡасан хәбәр ебәреп, мине килеп алғансы тағы ла өс-дүрт көн үтте.

Мине алып ҡайтҡан машинаны, ниңәлер, бөтә уҡытыусылар ҙа ҡаршы алды. Элек тә миңә иғтибарлы булғандары арҡамдан һөйҙө. Унан һуң бөтә мәктәпте теҙеп, минең ғәйепһеҙ булыуымды әйттеләр. Ғәфү үтенделәрме-юҡмы, уныһын хәтерләмәйем. Был хәлдән һуң минең «бур» ҡушаматымды башҡаса әйтмәнеләр. Әммә тәүгеһенән ҡотолорға сәбәп юҡ ине.

...Ибраһим тағы ла һөйләүенән туҡтап ҡалды. Бер ни тиклем ваҡыт беҙ шулай ултырҙыҡ. Ул беҙҙең алдан ҡултыҡлашып үтеп барған ике ҡыҙға ҡараны ла:

– Бына, ағай, бирге ҡыҙға бөтә йәнемде бирер инем... Әгәр мин уға тормош юлдашы була алһам... Көнө-төнө эшләр инем. Уға тормошта бер етешһеҙлек тә күрһәтмәҫкә тырышыр инем. Тик ул минең был теләгемде белмәй. Белмәүе лә

хәйерле. Минең – уға, уның миңә булған мөнәсәбәте тәрән булған һайын, ғазабы икеләтә ауыр һәм һулҡылдап һыҙлар ине...

– Ниңә улай тиһең, Ибраһим? Йәш, көслө, матур егетһең. Ауырымайһың да шикелле. Ағзаларың теүәл. Нимәгә төшөнкөлөккә биреләһең? – тип һорайым.

– Әйткән һүҙең хаҡ кеүек тә ул, ағай... – Ҡапыл ул миңә боролдо ла: – Һеҙ уҡытыусымы? – тип һораны.

– Юҡ, мин ҡырҡ йыл тәфтишсе булдым.

– Шулайҙыр. Мин кисерештәремде һеҙ поезда уҡ уҡып килгән кеүек инегеҙ. Әммә төп сәбәбенә төшөнә алмайһығыҙ. Кәрәкмәй ҙә, – тине.

Ул тағы ла түбәндәрәк ятҡан ҡалаға, унан алыҫ уҡ күренмәгән Биштауға ҡарашын төбәп тынып ҡалды. Беҙҙең алдан төрлө музыка ҡоралында уйнап, туптуп булып йәштәр үтәләр ҙә үтәләр.

– Балалар йортон тамамлағас, мин, хәрби училищела уҡып, хәрби булып китермен, тип өмөтләндем. Был тирәлә береһе белмәһә, икенсеһе ишетеп, минең хәлемдә әҙме-күпме хәбәрҙар ине. Хәрби булһам, йыраҡҡа китермен, унда мине берәү ҙә белмәҫ, тип уйланым. Ләкин тәүге комиссияла уҡ мине, аптырап йә көлөмһөрәп, браковать иттеләр. Йәнәһе, унда һап-һау кешеләр кәрәк. Бөтә ағзалары эшләгән... Ә минең бер ерем дә һыҙламай. Ҡыҫҡаһы, училищеға комиссия үтә алманым. Әммә армияға алдылар. Комиссия үтә алдым. Яланғас уҡ сисенмәнем. Һис бер еремә зарланманым. Ике йыл хеҙмәт осоронда иптәштәрем минең хәлде төшөнмәне. Уларға һиҙҙерманем. Ике йыл хеҙмәттән һуң, мине берәү ҙә көтөп тормаһа ла, ҡайтыр өйөм булмағас, дөйөм ятаҡҡа кире ҡайттым. Ярҙам иттеләр. Унда тағы ла бер йыл эшләгәс, юллама бирҙеләр. Биш йыл уҡыным. Инженер-электронщикмын. Эшләйем. Матди яҡтан тәьминәтлемен. Икенсе курста уҡығанда иптәш егеттәр мине пединститут кисәһенә алып барҙы. Әлегә тиклем мин ҡыҙҙарға һис иғтибар итмәй инем. Улар минең өсөн, гүйә, шул уҡ малайҙар. Ҡыҫҡаһы, мин ҡыҙҙарҙы күҙем менән ҡарап, икенсе енес кешеләре тип белһәм дә, уларҙы тоя белмәй инем. Улар миндә егеттәргә булған тойғоно ғына уята ине. Күңел тартылманы. Ҡыҫҡаһы, мин уларҙы кеше тип кенә аңланым. Бейейҙәр, көлөшәләр. Ситтәрәк тора инем, мине бер ҡыҙ бейергә саҡырҙы. Үҙ ғүмеремдә бер ҡыҙҙы ла шул рәүешле ҡосаҡлап тигәндәй бейегәнем юҡ ине.

Музыка тулҡынында бәүеләбеҙ. Ҡыҙыҡайҙың нәзәкәтләп үрелгән сәс өлпәттәре өйөрөлгән саҡта битемә тейеп ҡала ла ҡытыҡлау аралаш еңел генә йомшаҡ йылы елдең һыйпап үтеүенә оҡшаш хис тыуҙыра. Ундай хисте бер ваҡытта ла тойғаным юҡ ине. Өҫтәүенә, унан миңә донъяла татыған иң ҡәҙерле еҫ килә. Бындай яҡын еҫте ҡайҙа тойҙом һуң әле, тип иң алда аптырап ҡалдым. Уға өҫтәп, сәсенә, ҡолаҡтарына, маңлайына, бите уртаһында урынлашҡан бик килешле танауына ҡарайым. Туҡта-туҡта... Тәүләп тойҙоммо был еҫте? Әллә бик бала саҡтан уҡ миңә һеңешеп ҡалған күңелем заруратымы? Әллә мин үҙ ғүмеремдә күрмәгән әсәйемдең еҫеме? Һәм ул еҫ иҫемә төштө. Был еҫ мине башымдан һөйөп, миңә тормошта иң кәрәкле кәңәштәр биреп, күҙ йәштәрен ағыҙып, балалар йортонан оҙатып ҡалған апайҙың еҫе ине. Ниңәлер ул ваҡытта мин был еҫте үҙем ғүмерҙә күрмәгән әсәйемдең еҫе тип ҡабул иткәйнем. Шул осорҙан алып ул еҫте мин әлегә тиклем эҙләнем. Әйтерһең дә, шул еҫ ҡайҙандыр килеп сығыр ҙа, минең бөтә ауырлыҡтарым, бөтә күңелем һыҙлауҙары бөтөр ҙә ҡуйыр, мин башҡалар кеүек күңел тигеҙлегенә ҡайтырмын төҫлө тойола. Ләкин мин атайымды ла, әсәйемде лә белмәгәс, уларҙың еҫтәрен түгел, үҙҙәрен дә күңелем алдына килтерә алмайым. Бына хәҙер ҙә. Миңә утыҙ беренсе йәш булһа ла...

Ибраһим тағы ла туҡтап ҡалды. Сәғәтенә ҡарап, процедура барлығын, ләкин

уны һуңыраҡ та алып булғанлығын белдергәс, мин унан ваҡиғаның артабанғы үҫешен һораным. Ул миңә ҡарап көлөмһөрәне лә дауам итте.

– Шул көндән башлап мин ул ҡыҙыҡайҙы үҙ иттем. Өс йыл дуҫлашып, көн һайын тиерлек осрашып йөрөнөк. Тормошҡа дөйөм ҡараш, дөйөм фекер тупланыҡ. Ләкин мин Ғәлиәне бер тапҡыр ҙа ҡосаҡламаным. Бер тапҡыр ҙа үпмәнем. Ҡосаҡларға ла, үбергә лә теләгем юҡ ине.

Иптәштәр өйләнешеп бөттө. Күбеһенең туйында бергә булдыҡ. Беҙгә лә тиҙ арала шул ваҡиғаны тормошҡа ашырыуҙы теләнеләр. Ә мин ул ваҡиға яҡынайған һайын ҡыҙыҡайҙан ситләшә инем. Башта ул мине ҡыйыуһыҙ, хатта мәмәй итеп баһаланы, буғай. Ваҡыт үтеү менән ул, күрәһең, миңә яраҡлашырға теләпме икән, холҡо ла ҡырҡа үҙгәрҙе. Көндәрҙән бер көн ул мине бүлмәһенә саҡырҙы. Иптәштәренең бер-ике көнгә ҡайтып китеүен һөйләне. Мин ул-был хәлде белмәгәс, алдан әҙерләнгән фекерем юҡ ине. Ултырҙыҡ, сәй эстек, ниҙер ашаныҡ. Шараптан ауыҙ иттек. Ғәлиә музыка һалды. Тойғом булмаһа ла, уны ҡосаҡлап, яй ғына оҙаҡ өйөрөлдөк. Ҡыҙ барлыҡ яҡтан бик тә, бик тә камил ине. Ул миңә һырыға. Уны ғәйепләп булмай. Тәбиғәт шулай ҡушҡан бит. Уның һөйөлгөһө килә. Тик мин үҙемде ни тиклем көсләһәм дә, зиһенемде һалып тырышһам да, ҡыҙға яҡын килеп ҡосаҡларға, үбергә, башҡаһына ла бөтөнләйгә мөмкинлегем юҡ. Былай оҙаҡ өйөрөлөү ялҡытты. Уны ла, мине лә. Мине ҡурҡыу, шом баҫты: алдағы минуттар мине донъяла иң ҡәҙерле Ғәлиәмдән айырасаҡ. Сөнки ул минән төңөләсәк. Әлбиттә, иң тәүҙә ул аңламаҫ. Әммә бөгөнгө кис уның минән йыраҡлашыуға төп сәбәпсе буласаҡ. Бер ниндәй нигеҙле сәбәп юҡ сығып ҡына ҡайтып китергә. Бер ниндәй. Исмаһам, сит кешеләрҙең ҡайтыуын тикшереп йөрөгән ятаҡ ҡараусы ла ишекте шаҡымай. Кергәндә күренмәҫкә тырышып кергәйнем. Сәғәт инде өсөнсө яртыны күрһәтә. Көтмәгәндә Ғәлиә ятырға тәҡдим итте.

– Хәҙер бик кисәү, ятырға урын бар, иртәнсәк ҡайтырһың, – тине. Күңелемдә ҡурҡытҡан, иң теләмәгән һүҙе шул булғандыр. Егет булып быңдай аулаҡта ҡыҙ янына ятмау – үҙе үк һинең йә сикле, йә бөтөнләй яраҡһыҙ булыуыңды күрһәтәсәк. Был ғазаплы төн миңә кәрәкмәй ине. Барлыҡ батырлығымды йыйып, мин уның янына килдем. Уға тартылыу хисем булмаһа ла, үҙ-үҙемде еңеп, иркәләп, наҙлаған кеүек булып, уға: «Ғәлиә! Миңә ҡайтырға кәрәк. Төнгө поезд менән ағайым килә», – тип алданым. Үҙем уны иркәләгән кеүекмен. Ә үҙем ул хисте кисермәйем. Минең бер ниндәй ҙә ағайым юҡ, булғаны ла юҡ, бәлки, булһа ла белмәйемдер. Үҙемде үҙем ышандырам. Хатта ҡыуанғандай кеүекмен. Имеш, минең ағайым бар. Ғәлиәне бер үҙен ҡалдырып, төн уртаһында уның янынан киттем. Сығып киттем дә ул китеүен. Ләкин... Ләкин миңә бик ауыр булды. Ниңә Аллаһы Тәғәлә ауырлыҡтарҙы, һыҙланыуҙарҙы тик миңә биргән? Ниңә, ниңә мин башҡа кешеләр кеүек йәшәй алмайым? Һәм йәшәй ҙә алмаясаҡмын...

– Ниңә, Ибраһим, улай күңел төшөнкөлөгөнә биреләһең?

Ибраһим өндәшмәй. Бер аҙ ултырғас, ул:

– Ашарға ваҡыт етте, ағай, барайыҡ, – тип урынынан торҙо.

Бер-ике көн беҙ Ибраһимдың хәтирәләренә ҡағылманыҡ. Беләм: Ибраһим көнөнә биш тапҡыр мәсеткә йөрөй. Әммә ул бөгөн йәстеү намаҙына барманы. Өйҙә, бүлмәлә генә уҡыны. Ғәҙәттә, йоҡларға ятҡас, күҙен йома ла һис бер һүҙ өндәшмәй, ята-ята йоҡлап китә ине. Ә бөгөн күҙҙәре асыҡ. Йоҡламай. Уйланып ята. Хәйер, элек тә, күҙе йомоҡ хәлдә лә ул йоҡламай ята торғайны. Мине лә йоҡо алмай.

– Ибраһим, Ғәлиә менән артабанғы яҙмышығыҙ нисек булды? – тип дуҫтарса һораным.

– Нисек булһын инде, ағай. Яйлап һүнде. Һүнә инде. Усаҡҡа яғыулыҡ өҫтәп тормаһаң, һүнә бит. Ә мин яғыулыҡ һалып тора алманым... Миңә утыҙ, уға егерме алтынсы йәш. Беҙ танышҡанда уға егерме ине. Дүрт йыл мин уны ҡосаҡламаным да, үпмәнем дә. Дүрт йыл буйы мин уның йәш ғүмерен урлап йөрөнөм. Ә хәҙер килеп мин унан баш тартырға мәжбүрмен. Үҙем теләп түгел – яҙмыш ҡушҡанға. Уға яҡшылыҡ теләп. Мин бергә йәшәргә ҡарар итһәм дә, беҙ барыбер айырылышыр инек. Ғәлиә менән минең осрашыуҙар тағы ярты йыл самаһы дауам итте. Ниһайәт, ул минең хәлде төшөндө, буғай. Һуңғы осрашыуыбыҙҙа ул иланы ла иланы. Ул икенсе кешене табыр, уға ҡамасауламайым, тип ул ҡаланан ҡырға китергә булдым. Эске тойғо, тартым көсө бер нәмә икән ул! Ә йөрәк? Ә хис? Ул бөтөнләйгә башҡа. Башҡа төшөнсә, башҡа һиҙемләү. Ғәлиә интегә-интегә хәҙер минең юҡлыҡҡа өйрәнәлер. Өйрәнергә, икенсене яратырға тейеш, ә мин – юҡ. Сөнки икенсене ярата алмайым. Бигерәк тә Ғәлиәнең миңә: «Ибраһим, минең әсәй булғым килә. Йомро ғына башлы етеҙ малайҙы, күбәләктәй осоп йөрөгән ҡыҙыҡайҙы һөйгөм килә... Ә һин – уларҙың атаһы...» – тип күҙемә ҡарағанын һис онота алмайым. Минең дә нәҡ шундай хисем бар ине. Әммә тәҡдирем улай ҡушманы.

Ибраһим, һөйләүенән туҡтап, бер аҙ ята биргәс:

– Йөрөй торғас, милиция архивтарына керергә рөхсәт алдым. Тыуған йылымды беләм бит инде. Башҡа төҫмөрләүҙәрҙе лә ҡушып, шул йылдарҙы эҙләй торғас, миңә ҡағылышлы тикшереү ҡағыҙҙарына юлыҡтым. Мине, бер көнлөк тә булмаған, әсә һөтөн, әсә имсәген бер тапҡыр ҙа татымаған, бер тапҡыр ҙа кесе ярау эшләмәгән баланы, больницаға тапшырырға мәжбүр булғандар. Больницаға килгәндә үк мин ағзаһыҙ булғанмын. Әсәйем ҡырҡып алған ағзамды. Мине әсәйем Шәһиҙә исемле әбейенең өйөнә ҡалдырып киткән булған. Әлбиттә, ул язаһын алғандыр. Тейешлеһен... Күп уйландым мин үтеп барған ғүмерем тураһында. Шуға инандым. Һәр кем – ғүмере осорондамы, ахырындамы – үҙ әжерен ала. Аллаһы Тәғәлә уға үҙ хөкөмөн сығара. Ел сәскәндәр дауыл ура. Боҙоҡлоҡтан башы сыҡмаған йәки уйламаған аҙымдар яһаған әҙәмдәрҙең ғүмере аяныслы. Әгәр ҙә ул маҡсатлы йә еңел аҡыллылыҡ менән башҡаларҙың ғүмерен ҡыйһа йәки ғәрип итһә, ул йәмғиәт һәм Аллаһы Тәғәлә алдында юйылмаҫлыҡ гонаһлы! Гонаһ эшләгәндән һуң, ул иманһыҙ кеше игелек ҡылып маташһа ла, элек ҡылған насарлыҡтары уны юҡҡа сығара. Тапҡан малы ла хәләл ризыҡ булып йоҡмай. Уларҙың ғәмәле ел туҙҙырған саң кеүек.

Ибраһим тағы ла уйланып ята бирҙе. Унан һуң ниңәлер күтәренкерәк тауыш менән:

– Әммә мин әсәйемде белмәйем. Белергә теләгем юҡ ине, – тине. – Исемде миңә Шәһиҙә ҡартинәйем яҙҙырған. Сөнки ул мине, сөннәтле тыуып, күктән килгән бала, тип уйлап, Ибраһим пәйғәмбәрҙең исемен яҙҙырған. Ана шулай мин сабый сағымда пәйғәмбәр шәүләһендә, ҙурая төшкәс, ҡәҙимге сөкәк булып йәшәргә мәжбүрмен.

Әммә хәҙер минең күңелем һыҙланыуҙарҙан бер ни тиклем еңеләйҙе. Минең бер хеҙмәттәшем бар. Минең кеүек үк инженер. Дингә һығына. Ә атаһы шул олоҫтоң имамы. Күрәһең, имамдың ғилемлеге дин өлкәһендә тәрәндер. Бөтә тирә-йүн муллалары уға тартыла, уға кәңәшкә килә. Тормошта өмөттәрен юғалтҡандар, ауыр ҡайғылылар уның менән һөйләшкәндән һуң еңеллек таба, тигән даны сыҡҡан.

Дуҫым мине аят ашына саҡырҙы. Күрәһең, минең күңелем ғазаптарын ул күреп йөрөгән һәм был турала атаһына ла һөйләгәндер. Шул табында имамдың халыҡҡа һөйләгән вәғәздәре күңелемә һеңде. Уның донъяға, тереклеккә ҡарашы,

һәр эште, һәр ғәмәлеңдә яйлап, уйлап, һөҙөмтәһе кешегә, ғәмгә файҙалы, маҡсатҡа йүнәлешле булыуын, теләгән тәрән итеп күңелеңә һалыу кәрәклеген өйрәтте. «Бисмиллаһир-рахманир-рахим! Мәрхәмәтле, шәфҡәтле Аллаһ исеменән, тип уға мөрәжәғәт итеп башлау уңышҡа юл асыр». Был – дөрөҫ. Һәр эшеңдә төптән уйлап, теләп башҡарһаң, һөҙөмтәһе була. Быға мин күп тапҡыр инанғаным бар. Ғәлиәскәр бабай менән һәр осрашҡан һайын, ул тормоштоң асылын, мәғәнәһен миңә киңерәк асты. «Аҡыл яңылышырға, ихтыяр зәғифләнергә, ә кеше булмышы, йәғни тәбиғәте ауырлыҡтар алдында көсһөҙ ҡалып, икенсе «тоҡан» яҡҡа алып китеүе бар. Шуға ла: «Иһдинәс сиратал мүстәҡим. Сиратал ләҙинә әнғәмтә ғәләйһим – мине тура юлға, үҙең һөйгән, үҙең ниғмәттәр биргән кешеләр юлына төшөр», – ауыр ваҡытта шулай уйларға, әйтергә кәрәк, тине. Кешенең был донъяға килеүе һәм йәшәүе – игелек. Йәшәүҙең игелек булыуын аңлаһаң, бәхет. Тағы ла, тағы ла йәшәгең килер. Бәхетле тормош тураһында уйлап йөрөү аҙ. Уны тормошҡа ашырыу – бәхет, тип өйрәтте.

Уйлай торғас, инандым. Көндәлек ғүмер ҙә, ҡылған ғәмәлең дә, үҙе бер тәртиптә һуҙылған сылбыр кеүек, бер-береһе менән бәйле икән. Сынйырҙың бер ҡулсаһы өҙөлһә, ул юҡҡа сыға. Әле генә бөтә тормош ауырлыҡтарын тағып һөйрәр сылбыр юҡҡа сыға. Тормошта ла нәҡ тә шулай... – Ибраһим тағы ла туҡтап ҡалды. Бер ни тиклем ултырғас, фекерен үҫтерә бирҙе.

– Һәр кешенең күңелендә үҙ тәғлимәте булырға тейеш. Күңелендә үҙ Аллаһы йөрөргә тейеш, тип әйтеүем. Бына шул инаныуым да мине намаҙға баҫтырҙы. Ул, ғәрип булһаң, күңел һыҙланыуынан арындыра. Дини тәғлимәтле булһаң, йәшәүе еңелерәк. Исмаһам, һин үҙ-үҙеңә баһа биреп, үҙеңдең кем икәнлегеңде аңлайһың. Минең былдай ғәриплегем, бәлки, башҡалар ҡабатламаһын өсөн иҫкәрмәлер. Шул яҙмышта мине күрһәтеп, кешеләргә кире миҫал килтерәләр. Уны кемдер ҡабатламауын иҫкәртәләр.

Ғәлиәскәр бабай мине мәсеткә йөрөтә башланы. Уйлана белгән кешегә мәсеттәге вәғәздәр, ислам тәғлимәтенең асылы барлыҡ нәмәгә лә ҡарашымды үҙгәртте. Минән берәү ҙә көлмәне, үткәндәрем өсөн тәнҡитләмәне. Намаҙлыҡҡа Ғәлиәскәр бабай артынан үҙем баҫтым. Үҙ инаныуым һөҙөмтәһендә... Намаҙға баҫҡас, мин балалар йортонда өйрәнгән ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы – ғәҙеллек, тупаҫлыҡты, кеше ихтыярына хакимлыҡты – түҙемлек, сабырлыҡ менән кисерергә, дөрөҫ, тура һүҙ, асыҡ миҫал, тәртип, сафлыҡ менән еңеп булыуын да төшөндөм. Киреһен эшләһәң, көрәшкә, туранан-тура һүҙ йәки ғәйрәт һуғышына керәһең. Сабыр булыу нәфсене лә тыйырға өйрәтә. Ҡыҫҡаһы, Аллаһы Тәғәлә үҙе тыйғандарҙан тыйыла белергә өйрәтә түгелме?

Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тиҙәр. Дөрөҫ. Ул ситкә төшә алмай. Уға башҡа сара юҡ. Ләкин ул төшөп тә, ятып сереһә, унан бер кемгә лә файҙа булмай. Бөтә эттәхиәт шунда. Һин алма булһаң да, кеше йәки йәмғиәт өсөн файҙалы булырға тейешһең. Ғәлиә мине уны ташлағаным өсөн, әйҙә, яманлаһын. Әммә мин уны әсә итә алмағас, нәфсемдә тыйҙым. Әгәр мин, үҙ-үҙемдә тыймай, уның менән туй эшләгән булһам, уның тормошон, киләсәген боҙор инем. Эске тәғлимәтем миңә үҙ-үҙемдә еңергә бойорҙо. Быны ла мин Ғәлиәскәр бабай вәғәздәренән төшөндөм. Әммә тормошта бит бер нәмә лә хәрәкәтһеҙ ҡала алмай. Тутыға, серей, ваҡлана, ҡартая. Бер ғәмдең дә үҙен йәш көйөнсә ғүмер буйы тота алырлыҡ һәләтлеге юҡ. Минең дә, Ғәлиәнең дә. Ул да бит алма кеүек. Кемгәлер ризыҡ булырға тейеш бит. Мин күрмәгән, белмәгән әсәйемә, мине ғәрип яһап, тормоштоң бөтә матурлығынан мәхрүм иткән кешегә, намаҙға баҫҡанға тиклем яһилға ҡараған кеүек ҡарай инем. Әммә Ғәлиәскәр бабай мине шуға инандырҙы. Асыуланғанда, хатта нәфрәтләнгәндә лә, нәфрәтен еңә алғанды Алла

һөйә, тине. Төптән уйлап ҡараһаң, ниңә мине тыуҙырғанды күрә алмаҫҡа тейешмен? Тәбиғәттә ниндәй генә һында, фиғелдә булыуыма ҡарамаҫтан, мин булмаҫ инем бит, йәнем булмаҫ ине. Шуға ла әсәләргә асыулы булыу үҙе гонаһ икән. Йә, Хоҙайым, мине тыуҙырған әсәйем мине ғәфү итһен инде... Ғәйепле уйҙарым өсөн...

Ибраһим урынынан тороп ултырҙы. Ҡайнатырға сәй ҡуйҙы. Мин уға, фекер ебе сыуалмаһын тип, өндәшмәнем. Сәй эскәндә бәйән дауам итте.

– Ислам тәғлимәтенән, диндән башҡа имам булыуы мөмкин түгел. Имамдың үҙ мөриттәре, халҡы бар. Фекерен һөйләргә мөнбәре, аш алдында тыңлаусылары... Донъялыҡта кеше үҙе теләгән, йә аңлы рәүештә үҙ алдына ҡуйған маҡсатын үтәргә йәки үтәмәҫкә Аллаһы Тәғәлә юлды үҙе күрһәтә икән. Һәм уны башҡарырға мөмкинселекте лә бер нисә тапҡыр үҙе бирә икән. Быға мин ышандым, сөнки минең менән ошондай хәл булды.

Ғәлиәне аңым менән мәжбүри ташлап йөрөгән ваҡыт ине. Көнө-төнө уны уйлайым. Ул да мине уйлай. Беләм. Илай ҙа илайҙыр. Тормоштоң йәме китте. Эштә кешеләр һәм хеҙмәт менән үҙемде албырғатам. Ҡайтырға кейенә башлау менән, бөтә уйымды Ғәлиә һыны солғап ала. Барлыҡ нәмәгә ҡул һелтәп, янына елер инем... Ул йыраҡ. Уның янынан ситкә китеүҙе лә миңә ниндәйҙер эске көс, эске инаныу мәжбүр итте. Әммә йоҙаҡ торған буш, һалҡын өйгә яңғыҙ ҡайтыу ғазап уттарының ялҡынын йөҙләтә арттыра. Минең башыма йыш ҡына шундай уйҙар керә башланы. Мин был донъяла ниңә йәшәйем? Кем өсөн? Маҡсатым нимә? Үҙемә үҙем яуап таба алмайым. Ғаилә ҡороп булмай. Яратҡаным менән донъя ҡороуҙан мәхрүммен. Балаларым да булмай. Ауыр саҡта таянырға ата-әсәм, туғандарым юҡ. Миңә матди яҡты ҡалынайтыуҙан да файҙа юҡ. Вариҫым юҡ, донъяның ҡыҙыҡлығынан шулай ваз кисеп йөрөнөм. Кәрәкмәй миңә был тормош. Ниңә көнөн дә, төнөн дә ғазап кисеп йәшәргә? Минең кемгә кәрәгем бар? Китергә кәрәк был донъянан, тип уйлап йөрөйөм. Тик ул ниәтте ниндәй алым менән ҡасан башҡарырға? Күңелемә кереп, мине тынысландырыр әҙәм юҡ. Ниһайәт, көнөн билдәләнем. Алымын да әҙерләнем. Ул кисте мине баҡыйлыҡҡа китеү аҙымынан ниҙер туҡтатты. Үҙенән-үҙе. Туҡта, иртәгә тағы эшкә барып киләйем әле, тигән ниәт туҡтатты. Һәм шул көнө хеҙмәттәшем аят ашына саҡырҙы. Шунда мин Ғәлиәскәр бабайҙы осраттым. Уның менән иң алда танышлыҡ мөнәсәбәтендә, унан һуң фекерҙәш үк булып киттек. Тормошта мин маҡсатҡа эйә булдым. Ә ул үҙ-үҙеңә хужа булыу тигән һүҙ. Ғөмүмән, һәр йән эйәһе нимәгәлер хужа булырға тейеш. Бүре – ояһына, үрмәксе – ауына, ир – ғаиләһенә, ҡатын-ҡыҙ өй эсенә хужа. Ғаилә балаһы – атай-инәһе тапҡан малға көтөүсе. Ул мал – байлыҡ, киләсәктә уға буласаҡ. Ә мин үҙемдән ҡалырҙай мал тапһам, кемгә ҡаласаҡ? Әлегә тиклем был һорауға яуап бирә алмай инем. Хәҙер мин беләм. Был һорауға яуапты ла Ғәлиәскәр хәҙрәт фекеренән алдым. Минең хәләл хеҙмәтем менән табылған малды мин үҙем тәрбиәләнгән етемдәр йортона ниәтләйәсәкмен. Ул күберәк булған, һайын етемдәр нығыраҡ ҡыуанасаҡ. Тормошҡа минең маҡсатым тыуҙы. Ул бар. Мин хәҙер шуның менән бәхетлемен. Ысынлап та, Ғәлиәскәр бабай әйтмешләй, кешенең йәшәүе – үҙе игелек. Ә йәшәүҙең игелек булыуын аңлау – үҙе бер ҙур бәхет икән дә! Әммә мал һанына, кимәленә тыйнаҡ булыу, күңел сафлығын һаҡлауына ла ышанам. Үҙ яҙмышыңа үҙең хужа була белмәһәң, һөҙөмтәһен әйтеүе ауыр. Дингә инаныуың һәр насар аҙымдан һаҡлай. Әгәр асылына төшөнә алып, уны тормошоңда ҡулланһаң, боҙоҡлоҡтан тик шул Аллаһы Тәғәлә өйрәткән юл ғына ҡурсалай ала. Бына шундай йүнәлеш алды ҡапыл минең фекерҙәрем. Хәҙер инде икеле уйҙарымдан да кире ҡайттым.

Ибраһим туҡтаны. Мин дә ризалаштым. Башҡаса өндәшмәнем. Сөнки был әсе яҙмыштың алғы өлөшөн мин Ибраһимдан яҡшыраҡ белә инем. Утыҙ-утыҙ

биш йыл элек тәфтишсе булып эшләгәндә был эште тикшереүҙә ҡатнашырға тура килгәйне. Ул ваҡытта был ваҡиға беҙҙең төбәк халҡының йөрәген ҡалтыратҡайны. Шул бала, шул сабый бит Ибраһим! Әммә мин уға был ҡиссаның башын һөйләмәҫкә ниәтләнем. Ә һеҙгә һөйләргә кәрәктер...

***

Бала күрер көнө етеүен һиҙгән һайын, Гөлзарҙың күңелен тотош шом баҫа. Әллә ҡайҙан килгән ел, ҡара пәрҙәне осороп килтереп, бөтә көн яҡтылығын баҫыр кеүек тоя. Шул ҡара пәрҙә уны һурып эсенә керетер ҙә тәнен йомарлап тонсоҡторор кеүек. Эсендәге йән эйәһенең көндәр үткән һайын ныҕыраҡ тибешеүе, аҫтан эсе буйлап төртөп-төртөп алыуы ла Гөлзарға ҡара шаршауҙың өҫтөнә осоп төшөр көнөн тиҙләткәнен иҫкәртә. Эсенең ауыртыуынан ҡурҡмай ул. Әйҙә, әллә ни тиклем һыҙлаһын, хатта эсе ярылып, үҙе көтмәгән, күрергә теләмәгән йән эйәһе буғырҙап-буғырҙап, ҡанға болғанып төшөп ҡалыуын да бик-бик теләй. Әммә юҡ. Ул йән эйәһе эсенә сат йәбешкән дә һис кенә лә төшөп ҡалырға теләмәй. Гөлзарҙың иҫәбе буйынса, хәҙер ете ай тулып килә. Нишләп был аҡҡан ваҡытты туҡтатып булмай әле? Аллаһы Тәғәлә уға бер ярҙам ҡулын һуҙмаҫ микән ни? Көттө ул ваҡыттың туҡтауын. Хатта, шул ниәт менән өҫтәл өҫтөндә һәр ваҡыт саҡ-саҡ ҡына тыҡылдап ултырған бәләкәй генә зыңғыр сәғәтте лә мендәр аҫтына тығып ҡуйҙы. Үҙе шул мендәргә башын һалып иланы ла иланы. Унан һуң рәхәт төшлө йоҡоға сумды. Төшөндә ул Ҡасымды күрҙе. Имеш, ул Гөлзарҙың өйөнә ҡулына күгәрсен күҙе сәскәләрен тотоп, уны ҡотларға килгән. «Гөлзар, барлыҡ насарлыҡтарҙы ла онотайыҡ, бергә йәшәйек. Мин һине анау зәңгәр күл уртаһындағы йәшел утрауға алып барырмын», – тип әйтә икән, тигән һүҙҙәренә ул төшөндә йылмая ине. Тик ғүмеренең һуңғы йылы эсендә әллә беренсе, әллә һуңғы йылмайыуы булды. Татлы йоҡонан уны эсендәге тулғағы уятты. Күҙен асҡанда өйөнөң бәләкәй генә тәҙрәләре аша ҡояш нурҙарын күрҙе. Тағы ла ҡояш сыҡҡан, тағы ла көн башланған. Ваҡытты туҡтатыу өсөн, эсендәге йән эйәһе яҡты көндө күрмәүе өсөн күпме һораны, ялбарҙы ул Аллаһы Тәғәләнән. Тик ниңәлер ишетмәй уны Аллаһы! Әллә ишетергә теләмәне, әллә был тәҡдир уны ысынлап та осоп етеп килгән а-а-анау ҡара пәрҙә эсенә йомарлап ураны. Ҡояш нурҙарының яңынан төшөүен, уның ҡаршы тауҙар артынан килеп сығыуын ул һис теләмәй. Сыҡма, сыҡма инде, ҡояш! Һин сыҡмай туҡтаһаң, ҡәбәхәт Ҡасымдың, мин теләмәһәм дә, көсләп ебәргән тамсыһынан ялғаған «тулғаҡ» та булмаҫ ине. «Аҡ һәм ҡыҙыл раузалар үҫкән гөл-баҡсалы йортомда йәшәтермен... Ул йорт бик ҙур... Һеҙҙең яҡтың Иҙеле ҡойған даръя һыуы ярында тора. Унда аҡҡоштар йөҙә», – тип матур киләсәк һәм әллә ниҙәр вәғәҙә иткәйне. Ул төндә Гөлзар шул оло даръялағы аҡҡоштар менән бергә йөҙҙө. Бер ни тиклем еүеш, сирҡандырғыс, ныҡ уҡ булмаған һыҙлауҙы баҫып, күҙҙәрен асты. Асты ла эргәһендә ятҡан аҡ һәм ҡыҙыл раузалар үҫкән йорт хужаһын һәрмәне. Әммә ҡулы йорт хужаһын тойманы. Юҡ ине ул урынында. Түбәндәге еңелсә ауыртыуҙы арттырмаҫ өсөн, ғөсәлләнеү бүлмәһе яғына күҙ һалды. Һыу шаулауын тыңланы. Әммә бер ерҙә лә һыу шаулап аҡмай. Бүлмәлә тып-тыныс. Ҡасымдың кисә кис сисеп элгән бишмәтен күрергә кейем һаҡлағысты асып ҡараны. Ләкин уның әйберҙәре урынында юҡ. Өҫтәлдә ултырып ҡалған ҡалдыҡ шарап, бер аҙ емешеләк тә Гөлзарға раузалы йорт хужаһы тураһында бер ни һөйләй алманы. Шулай тәүге төнөнөң тәүге ләззәте уны сафлыҡ зөфәфлегенән мәхрүм итте. Ләкин ул мәхрүмлегенең мәңгелеккә булыуын әле аңы менән төшөнә алманы. Мендәр аҫтындағы сәғәт туҡтаһа ла, ҡояштың туҡтамауына, уның көн һайын шул уҡ ерҙән, Үркәс тауҙың сатамаҡайынан, сығыуына эсе әсене. Тимәк, эсендәге йән

эйәһе, ҡояш ҡағиҙәһенә эйәреп, ваҡыты етеү менән тыуасаҡ. Тыуасаҡ та Гөлзарҙы киләсәгенән яҙҙырасаҡ. Шул ауыр уйҙарынан ҡотола алмай, урынында ята бирҙе. Эсендә теләмәгән ҡыбырлау иң алда беленер-беленмәҫ булһа ла, көндәр үтеү менән яйлап көсәйә төштө. Нимәләр генә эшләмәне Гөлзар был теләмәгән тибешкәктән ҡотолор өсөн. Иң тәүҙә ул, әле эсендәге яралғының барлығын бигүк һиҙмәгән осорҙа, унан ҡотолоу юлдарын һорап, күрше ауылдағы ҡарт инәйҙәргә мөрәжәғәт итеп ҡараны. Уны ҡаранылар. Арҡаһын да, эсен дә әмәлләп, төрлөсә имләнеләр. Тик һис баҫманылар, ауыртыу килтермәнеләр. Ләкин береһе лә йән эйәһенән ҡотолоу юлын өйрәтмәне. «Сабыр бул, балам, сабыр бул», – тигән дөйөм тынысландырыу менән сикләнделәр. Был тәҡдимдәргә риза булмаған Гөлзар күрше урыҫ ауылындағы насрани ҡарсыҡтарға мөрәжәғәт итте. Улары ла Гөлзарҙы сабырлыҡҡа өндәмәне. Тейешле әжерен алғас, төрлөһө төрлө һол тәҡдим итте. Береһе – ауыр ағасты көн һайын күтәрергә өйрәтте, икенсеһе – бейек ярҙан йомшаҡ балсыҡ өҫтөнә һәр төн өсәр-дүртәр тапҡыр һикерергә кәңәш бирҙе, өсөнсөһө насрани диненең ниндәйҙер псалмаларын уҡығандан һуң, бик эҫе мунсала хәле бөткәнсе сабынып, бик һалҡын һыу менән ҡойонорға, йә көнө буйы ауыр эш эшләргә ҡушты. Эҫе һәм һыуыҡ ҡойоноуҙарҙан һуң, иҫергәнсе араҡы эсергә тәҡдим итте. Араҡыны шарап менән алмашлап эсеү теләккә ирешеүҙе тиҙләтәсәк, тип белдерҙе. Барыһын да эшләне Гөлзар. Тик ниңәлер береһе лә теләккә килтермәне. Әйтерһең дә, тулаҡ эскә сатырман йәбешкән. Йәбешкәндер, моғайын. Юғиһә, Гөлзарҙың был тиклем һелкенеүҙәренән, сүллек эҫеһе кисереүҙәренән тулаҡ тәнен йәбешкән еренән ысҡындырыр ине. Ә ҡояш көн һайын сыҡты ла байыны, сыҡты ла байыны. Уның башынан: «Эстәге был төйнәктең барлығын тиҙҙән бөтә кеше һиҙә башлаясаҡ. Әгәр уны һиҙһәләр, уйнаштан ауырлы булыуым бөтә халыҡҡа фаш буласаҡ. Киләсәктә мине яратҡан кешем дә, теләп тапҡан сабыйым да булмаясаҡ. Мәңгегә, мәңгегә мин бәхетһеҙ! Ә уға эсемдәге шул ҡәһәр һуҡҡыр тулаҡ ғәйепләме? Ниңә төшмәй ул? Ниңә мине бөтә ғазаптарҙан ҡотолдороп, минән айырылып, үҙ юлы менән китмәй?» тигән уй үтте.

***

Гөлзар был ғазаплы көндәрҙе кисергәндә ауылда ата-инәһенән мираҫ булып ҡалған бәләкәй генә өйҙә яңғыҙ ғүмер кисерә ине. Нишләптер, уның ағай-апайҙары ла булманы. Атаһы күптән инде фажиғәле рәүештә донъя ҡуйһа ла, инәһе менән ул оҙаҡ ҡына бергә донъя көттө. Илдәге үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә, ауыл тирәһендә элекке дәүләттәге кеүек күмәк көс менән эшләү алымы бөтөрөлгәс, хеҙмәт етештереү көстәре шәхсиәткә күсте. Гөлзар кеүектәр яңы, сит хужаға ялланып эшләргә мәжбүр булдылар. Ҡалаға китер ине, инәһе ҡарт. Уны ташлап, эш эҙләп сығып китеп булмай. Инәһенең алған пенсияһы ла – икеһенең тормошонда төп матди сығанаҡ. Киләсәге тураһында уйланһа ла, аңы билдәһеҙлектә үтеп, зиһене алдағы тормошҡа асыҡ ҡына юл таба алманы. Инәһенең был фани донъяны тыныс ҡына ташлап, баҡыйлыҡҡа китеүенә лә ике йыл ваҡыт үтте. Эшләгән урынында яңы тәкәббер хужалар бер ҙә ыратып эш хаҡы түләмәүҙәре уны инәһенең ҡалалағы апаһына килтерҙе. Ҡалала эш табырмын, унда, бәлки, эшләп тә, уҡып та булыр, тигән өмөт ҡанатландырҙы. Инәһенең апайы – әбейе уны үҙ фатирында йылы ҡабул итте. Көн һайын ул ҡала буйлап күңеленә ятышлы эш эҙләне. Әлегә эшкә кереү бәхете уға йылмайманы. Әммә һәр ваҡыт кистәрен әбейе менән үткәреүҙән талсығып, өй янында даңҡ та доңҡ һуғып йәштәр бейешкән ергә сыҡты. Тәүге кис сығыуҙа уҡ уны йәшел күҙле, ялбыр сәсле йәш кеше бейергә саҡырҙы. Гөлзарҙың ҡолағына ул кис буйы һәр төрлө

көләмәстәр, хатта енси йөкмәткеле көлкөлө мәҙәктәр һөйләне. Был кистең унең тормошона ҡапыл икенсе төҫ керетеүенә Гөлзар хатта ҡыуанды. Осрашыу икенсе һәм өсөнсө көндө лә дауам итте. Гөлзарҙың ҡалаға эшкә китеүен белеп, уны оло юлға тиклем сумкаһын күтәрешеп оҙатырға килгән ауылдашы һәм тиҫтере Айбулат менән үҙенең исемен, урыҫ теленә ярaҡташтырып, Ҡасым тигән бынау ир менән сағыштыра ла, яңы танышы уға күпкә асыҡ, күңелле, үҙе үткер, өҫтәүенә, аҡсалы кеше булып тойола. Ул барлыҡ донъяның ауырлыҡтарын теле менән еп-еңел хәл итә лә ҡуя. Ә Айбулат башҡаса. Күп һүҙле лә, вәғәҙәсел дә түгел. Һәр мәсьәләнең, һорауҙың сиселешен бер нисә төҫтә һәм тармаҡта фекерләй. Үҙе инанған дөрөҫ юл тапһа, шуға йомола. Ләкин бит ул Айбулат бер нәмә лә вәғәҙә итмәй. Өҫтәүенә, әле һалынып ятҡан өйө лә юҡ. Киләсәк яҙмыш өсөн уртаҡ тел тапһаҡ, йорт һалғансы әлегә һиндә йәшәп торорбоҙ, тигән фекер еткерә. Сөнки Айбулаттың оло, өйләнгән ағаһы бар. Әле күмәкләп уға йорт төҙөйҙәр. Айбулатҡа өй һалыу сираты – унан һуң ғына, әҙерәк мал-тыуар үрсеткәс, күкрәк күтәргәс кенә етәсәк. Айбулаттың фекерен Гөлзар төптән зиһененә һалып уйламаны. Ярай, әйҙә әле һин йорт төҙөү сиратын көтөп ауылда йөрөй бир. Ә мин ҡала ҡаласын, тәмле емештәрен татый торайым, тигәнерәк фекер йөрөттө. Әммә был фекеренең дөрөҫмө, түгелме икәнлегенә баһа бирә алманы.

Күңелле, етеҙ ир ул көндө тағы ла ҡыйыуыраҡ, үткерерәк ине. Ауылдағы оло ҡарт инәйҙәрҙең һәр ваҡыт: «Тәүфиҡлы бул, сабыр бул! Билдәһеҙгә билең тотторма. Сабырлыҡтың төбө һары алтын!» – тигән нотоғон һәр саҡ күңелендә тотһа ла, зиһене уларҙың мәғәнәһен аңламаны.

Ә өнөндә йылғыр егет уны сәстәренән, битенән һыйпаны, һаҡ ҡына йомшаҡ итеп ҡыҫты, һыйпаны ла ҡыҫты, хатта ҡаштарын төҙәтә башланы. Бындай иркәләүҙе үҙ ғүмерендә күрмәгән Гөлзар өсөн был кис бигерәк ләззәтле ине. Шуға ла ул Ҡасымдың үҙ бүлмәһенә саҡырыу тәҡдименә ҡаршы тора алманы. Бүлмәгә кергәс, улар аҡ һәм ҡыҙыл раузалар үҫкән гөл баҡсаһында өйөрөлөргә керештеләр...

***

Күңеленә хуш килерлек эш таба алмай, өҫтәүенә, Ҡасым менән осрашҡандан һуң алған тәрән, ғүмерҙә лә һис бөтәшмәҫ күңел яраһы алған Гөлзар ҡарт әбейен ташлап, бер йөк әрнеү тейәп ауылына, буш торған йортона, кире ҡайтты.

Йоҙаҡ торған буш йортҡа ир-атҡа ғына түгел, ҡатын-ҡыҙға ла яңғыҙлап килеп кереүе еңел түгел, сирҡандыра. Шундай хистә ҡайтып керҙе ул өйөнә. Һалҡынлыҡтан өшөп, яңғыҙлыҡтан һырҡырап, өмөтһөҙлөктән күңеле һыҙлап. Ҡараңғы өйҙә саҡ-саҡ ләүләп янған усаҡ алдында һулҡылдап-һулҡылдап иланы ла иланы.

Ауылға ҡайтҡан көндәрендә эсендәге йән эйәһе хәҙерге кеүек беленмәй ине. Ул һәр кис эсе бошоп, шомланып, ялбарыр өсөн өй артындағы ҡар ҡаплаған баҡсаға сыға. Баҡса ашаһындағы үркәс тауға һәр кис ҡояш килеп ҡуна ла туҡтай. Ян-яҡты барлап күҙәтеп, бер аҙ ампайып торғандан һуң, тауҙар үркәсендә үҫкән ҡарағастар артына теләр-теләмәҫ кенә яйлап шыуышып, йә алһыу, йә шәмәхә төҫ йотоп, һеңә башлай. Гөлзарҙың эсендәге тулағын яҡты көнгә сығармау теләге шул тиклем көслө – әйтерһең дә, уның күренеүе йә күренмәүе шул ҡояшҡа бәйле. Һәр көн ҡояш батҡан һайын уны мәңгелеккә тау артына оҙатҡыһы һәм ваҡытты шулай туҡтатҡыһы килә. Ваҡыт туҡтаһа, тулаҡ та үҫеүҙән туҡтар. Тимәк, ул юҡҡа сыға. Тимәк, Гөлзар тулаҡтан еңел генә ҡотола ла ҡуя. Ваҡыттың үҫешмәүе тулаҡтың да үҫешмәүенә килтерә. Юҡ була ул тулаҡ, юҡ була! Ә нисек юҡ була? Унынының сәбәбен Гөлзар уйлап еткерә алмай. Барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең ихтыярында һәм тик уның ғына хөкөмөндә!

Йәшәү мөрхәте матди яҡтан бик ҡыҫылғас, Гөлзар элек эшләгән хужаһына эш һәм аҡса һорап барырға мәжбүр булды. Бөгөн был ауылда һис бер кемдең киләсәге билдәле түгел. Бигерәк тә ҡурсалар, ярҙамлашыр өсөн таянысың һәм йәмғиәтең булмаһа. Махсус һөнәрһеҙ кешегә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙға, тәьминәтле хеҙмәт бәхете тәтемәү ихтималлығы бик ҙур... Хужа Гөлзарҙан ун-ун биш йәшкә оло таныш булмаған ҡатынды саҡырҙы ла шуны тыңларға ҡушты. Әммә эшкә алыу-алмау тураһында бер һүҙ өндәшмәне. Күрәһең, улар был мәсьәлә буйынса бер-береһе менән яҡшы аңлашалар.

Эш биреүсе яңы хужа ҡатын ҡәтғи күренә. Төп хужаның әллә ҡушыуын, әллә бойороғон тыңлап та бөтмәҫтән, Гөлзарға эйәрергә күрһәтеп, аҫтан ғына ҡул һелтәне лә сығыу яғына атланы. Күктән теләгән теләк ерҙә, йәнәш кенә йөрөй икән дә. Ҡырыҫ, аҙ һүҙле хужа ҡатын Гөлзарға ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ауыр эштәр күрһәтте. Йыуан-йыуан бүкәнле утындарҙы ярыу, ун ике литрлыҡ биҙрәләр менән ҡойонан һыу ташып малдарҙы эсереү, күбәләй өйөлгән керҙе ҡул менән йыуыу... Көн аша мунса яғыу, тағы ҡырҡмаһы ҡырҡ эштәрҙе ентекләп өйрәтте. Аҙаҡтан руссалап: «Смотри, девка, лентяем будешь, вылетишь без копейки. Никаких договоров письменно не будет. Проверять буду каждый час», – тине лә ҙур йорттоң бәләкәй ишегенән эскә керҙе. Утын ярырғамы, һыу ташырғамы, тип икеләнеп торған Гөлзарға ишекте асып: «Обедать будешь вечером, после труда», – тип кире ишекте япты. Гөлзар асыҡһа ла, тамаҡ тураһында уйламаны. Уға, иң мөһиме, ауыр эш бирҙеләр. Хәҙер ул ҡойонан бынауылай ҙур биҙрәләр менән мал-тыуар эсә торған кәмәне тултырғансы һыу ташыясаҡ. Сыҡмай ғына ҡараһын тулаҡ! Ауыр эштән һуң йәбешкән еренән тулаҡ «ҡулдарын» ысҡындыра башлаһа, әлбиттә, Гөлзарҙың эсе бик ныҡ, бик ныҡ һыҙлар. Һыҙлаһын әйҙә. Шул һыҙлау Гөлзарҙы киләсәген ябырға осоп килгән ҡара пәрҙәнән ҡотолдорор кеүек. Йыуан ҡарағасты өңөп эшләгән ҙур кәмәгә әллә нисә тиҫтә баш мал өсөн урамдағы ҡоҙоҡтан ике биҙрә менән һыу ташыны ла ташыны. Әллә ун бишенсе, әллә егерменсе тапҡыр һыуға юлланыуында эсенең түбәнге яғы ул көткәндәгесә әсетеп, һулҡылдай-һулҡылдай һыҙлай башланы. Гөлзар был һыҙлауға тешен ҡыҫып түҙҙе. Һыҙлаһын ғына. Шул теләген бойомға ашырыр өсөн ҙур биҙрәләрен алып тағы ла һыуға китте. Эсе әсетеп-әсетеп һыҙланы. Ул килгәндә хужа ҡатын тулған ағас кәмәгә ҡарап башын һелкте лә, Гөлзарға бер ни өндәшмәйенсә, бармағы менән төртөп, өйөлөп ятҡан түмәрҙәргә күрһәтте. Көндөң ҡалған өлөшөндә кискә тиклем түмәр ярҙы. Утынды ул ауыр эш тип ярманы. Үҙе теләп ярҙы, өмөтө эшләтте Гөлзарҙы.

Кискә тартым ул әғәлегә килгәнсе арығайны. Шул тиклем асыҡты. Эсе, әллә асығыуҙан, әллә ауыр эштән, ауырта. Әйтерһең дә, унда суйын туп ята. Үҙе ауыр, аҫҡа тарта, үҙе һалҡын. Һулҡ-һулҡ итеп һыҙлауы бер баҫыла, бер тағы ла йөрөп киткән сәғәт кеүек туҡтауһыҙ һулҡылдай башлай.

Ашарға саҡырманылар. Хужа ҡатын кереп-сығып йөрөгән бәләкәй ишектән үҙе керҙе. Танауына шунда уҡ тәмле аш еҫе бәрелде. Был йорт ике ҡатлы икән. Өҫкө ҡаттан баҫҡыс буйлап уға таныш булмаған икенсе ҡатын төштө лә Гөлзарға ҡулы менән ситтә, мөйөштә торған бәләкәй өҫтәлгә күрһәтте. Был ҡатын да Гөлзар менән һөйләшеүҙән ваз кискән. Үҙе ҡаҙандан һурпа, икенсегә төйөлгән бәрәңге өҫтөнә туралған ит һалып килтерҙе. Әммә Гөлзарҙың был өйҙә ашағыһы килмәне. Өйөнә ҡайтып, иркенләп, ауыҙына ҡапҡан һәр ҡалағын иҫәпләгәндәй ҡарап тороусыһыҙ ашарға теләне. Икенсе һауытҡа һалдырып алып, ҡайтырға ниәтләне. Үҙен һораныусы хәйерсе хәленә төшөргөһө килмәне. Ғәрләнде. Күңелендә бик түбәнселлек тойғоһо кисерҙе. Әммә өйгә ҡайтып ял итеү, аулаҡта тамаҡ туйҙырыу тойғоһо һораныусы хисен еңде. Бирелгән ашты өйгә алып

ҡайтырға рөхсәт һораны. Уның ҙур, ауыр эше был биш-алты ҡалаҡлыҡ тәғәмдән хаҡы буйынса күпкә артыҡ булһа ла, ашты ул байҙыҡы тип иҫәпләне. Хәләл ризығы уның үҙенеке булыуына зиһене төшөнмәй ине. Шулай ҙа һөйләшмәҫ ҡатын һурпаһын, бәрәңге иҙмәһен ваҡ иттәре менән ҡушып, өҫтөнә өс-дүрт киҫәк икмәк һалды ла һауытты Гөлзарға шыуҙырҙы.

Ҡараңғыла көрт баҫҡан тар ғына һуҡмаҡтан бата-сума атлап саҡ етте өйөнә. Өйөндә бер аҙ еңеләйеү һиҙҙе. Бөгөнгө көндөң һөҙөмтәһен көттө. Ниһайәт, бәлки, теләк бойомға ашыр, был туп суйын тулаҡ мине ҡалдырыр, тигән өмөт тә еңеллек килтерҙеме? Хужа йортонан килгәнсе ашы һыуынып өлгөрҙө. Соланда ятҡан әҙ генә ҡалдыҡ утынды керетеп, мейесен яҡты. Һүрән генә мейес утынан өйгә йылылыҡ, танау ҡымыржытырлыҡ ялҡын еҫе таралды. Күмер һүрелеүен көтөп, мейес торбаһын баҫыуын хәтерләй. Башҡаһы нисектер башынан ел булып сығып, таралды ла ҡуйҙы. Бөгөн ул ҡояшты тау өҫтөндәге ҡарағастар артына оҙата алманы. Шуға ла эсе бошто. Тәңреһе алдында бөгөн үҙенсә ғибәҙәтен ҡылып, көндәлек ялбарыуын үтәмәгәс, ул үҙен ғәйепле тойҙо. Инәһенән ҡалған ҙур түшәккә нисек ятты, шулай иҙерәп йоҡоға талды. Төндә эсе әсетеп, сәнсеп һыҙлап алһа ла, арыуы, йоҡоһо уны баҫты. Таң менән тороп, ҡараңғыла уҡ ҡышҡы көндөң иртәнге етеһе ашҡас, эшенә китте.

Шулай көн артынан көн үтте. Бөгөн ул көнө буйы эйелеп ҡул менән ялғашта бер күбәләй кер йыуҙы. Кискә биле таш булып ҡатты. Эс ауырайҙы. Ҡапыл эстән бото буйлап йылы ғына еүешлек тамсылап һарҡа башланы. Был ғилләнән Гөлзар ҡурҡманы. Кешегә һиҙҙермәне. Мөмкин тиклем ғөсөлләнде лә өйөнә йүгерҙе. Үҙенең дөйөм хәленән ул тулаҡтың тыуыуын йә төшөүен һиҙә ине. Буласаҡ йән эйәһен ул тере икән тип күҙ алдына ла, зиһененә лә һала алманы. Уға ҡарата яратыу, ҡурсалау, әсәлек хисе элек тә, хәҙер ҙә, бына-бына ул донъяға килер алдынан да, тыуманы. Үҙен буласаҡ әсә тип уйына ла килтермәне. Ҡыуҙы ул хисен. Тулағына тулы нәфрәт хисендә булды. Уны бөтә аҡылы менән күрә алманы. Сөнки ул – Гөлзарҙың бөтә киләсәген тартып алып һоғонған Ҡасым. Ҡасым шәүләһе ул! Гөлзарҙы йоҙаҡҡа бикләүсе, сафлығын, бәхетен тартып алыусы. Шул тулаҡ Гөлзарҙың йәшәү мәғәнәһен бөтөрҙө. Тормошо маҡсатһыҙ тотош ҡараңғылыҡҡа сумды. Юҡ, ҡотолорға кәрәк был вәхшәттән! Юҡ, юҡ, ҡотолорға кәрәк... Юҡ итергә кәрәк уны һис шикһеҙ. Шулай инде нисәнсе тапҡыр ҡәтғи ҡарарға килде. Нисек етте шулай төндө үткәрҙе. Һаҡ ҡына тороп, иртә менән ҡараңғыла автобусҡа ултырып ҡалаға әбейенә китте. Ҡалала әбейенең фатирына етер саҡта уның күҙ алдары ҡараңғыланып, ҡоҫҡоһо килә башланы. Хәле бөттө. Икенсе ҡатҡа һөйәлә-таяна саҡ менеп етте. Асҡысын алып, асып керҙе. Әммә әбейе өйҙә юҡ ине. Көндөҙ уны тулғаҡ тота башланы. Түҙеп торғоһоҙ. Янында һис бер әҙәм юҡ. Кеше булмауы ла уның өсөн бик яҡшы. Әммә был тулаҡты, әгәр ул тере булып тыуһа, ҡайҙа итергә? Нисек итеп уны эҙһеҙ юғалтырға? Башын һыуға тығырғамы? Әммә был йән өшөткөс, сирҡандырғыс эшкә уның ҡулы бармаҫ төҫлө. Шулай ҙа үҙе ятҡан ергә биҙрә тултырып һыу, әбейенең боронғо еҙ тасын ҡуйҙы. Тыуҙырыу ҡағиҙәһен, алымдарын Гөлзар үҙе күрмәһә лә, ҡатын-ҡыҙҙың һалпы-һолпо хәбәренән ишетеп белә. Үҙе лә аңламаҫтан аҡылының әмеренә буйһоноп, әбейенең һандығынан сепрәк-сопраҡ, йод, аҡ еп һәм ҡайсыны эргәһенәрәк һалды. Йөрөрлөк әмәле ҡалманы. Тәне йә тартыша, йә ебәрә. Аҫҡа килеп төртөлөп, тупаҡ булып төйнәлгән йомғаҡ урынынан һис ҡуҙғалмай тик тора. Эстә ул әллә борғалана, әллә сығырға ынтыла. Тәне уттай яна. Көсәнә торғас, шыбыр тиргә батты, хәле бөттө. Бер-ике уртлам ғына һыу эсәһе килә. Әммә Гөлзар һыу һауыты янына барырлыҡ хәлдә түгел. Ә эсе, эскенәһе... Борола ла борола, йомарлана ла ҡыҫыла. Көсәнеү үҙенән-үҙе барлыҡҡа

килә. Һуңынан – әсетеү. Оҙ-а-а-аҡ әсетеү... Унан һуң – тағы ла сәнсеп-сәнсеп әсетеү. Тупаҫ һыҙлауҙан ҡайһылыр миҡдарҙа аңын да юғалта Гөлзар. Әммә ул көсәнеүҙән һуң тын алып, тәненә əҙ генә хәл кереткәс, арҡаһын ятаҡ арҡалығына терәй биреп, әҙ генә ҡалҡынып ыбыраҡ ярым ятыу, ярым ултырыу фиғеленә килде. Әҙ генә еңеллек тойғандай булды. Үҙе лә һиҙмәҫтән эстән шыбыр һыу китте. Алдан хәстәрләп маҡсатлы урын әҙерләмәгәс, ятыр аҫ лыҡы һыу булды. Һыу ғына ла түгел, ҡан аралаш һыу. Әммә әйбер еүешләнеүендә түгел ине уның иғтибары... Көсәндерә ине. Үҙенән-үҙе көсәндерә...

Шул минутта ул ҙур ҡара туптың үҙенең эсенән сығып килеүен күрҙе. Ярты яланғас хәлгә ул, тулғаҡ көсәйеп, еңелсә һүл аға башлағас килгәйне. Быныһы файҙаға булды. Ҡара баш, көсәнгәндән-көсәнеү һайын тәнде йыртып, ҙурайғандан-ҙурайҙы. Хәлһеҙ булып, Гөлзар башын артҡа һалды. Әммә нәүбәттәге тартышыу уны әсе итеп сәрелдәү аша ҡысҡырыуға килтерҙе. Һултыҡ-һултыҡ булып өңрәне лә көсәнде, ҡысҡырҙы ла көсәнде. Унан күпме ваҡыт ҡалыр аңын юғалтты. Һыҙлауға ыҙырғаланып ҡысҡырыуы мейеһенә шул тиклем тәрән яҙылған. Хәҙер уға ул ҡысҡырыу тоташ бер ыҙалыҡ ауазы булып, бөтә башында шаулай. Унан һуң нисектер еп-еңел булып ҡалды. Аҫтына ҡурҡып ҡына, ынтыла биреп ҡарағайны, ҡулдарын болғап, яп-яланғас Ҡасым ята. Үҙе ҡысҡыра, үҙе теге ваҡыттағы кеүек, шарап эсеп шайтан фиғеленә кергәс, үҙ телендә ниҙер йырлай ҙа йырлай. Йырлаймы ул, юҡмы, әммә Гөлзарҙың ҡолағына был тауыш Ҡасымдың ниҙер тураһында йырлаған зөфәфен юғалтҡан төн йыры кеүек ине. Хәҙер үк тороп, башын һыулы биҙрәгә тығып сәсәтер ине Гөлзар уны. Тик уның хәле лә, кәре лә юҡ. «Мине, мине мәңгелеккә һин бәхетһеҙлеккә дусар иттең, ләғнәт! Хәҙер мин дә һиңә шул уҡ мәңгелек бәхетһеҙлек бирәм. Һин булмаһаң, һинең шәүләңдән булһа ла үс алам!» Уның ҡулдары янында ятҡан ҙур ҡайсыны эләктереп алды ла иң тәүҙә үҙен шул бәдбәхет Ҡасым менән тоташтырып торған кендек эсәген уның эсе өҫтөнән киҫеп өҙҙө. Үс алыр, шул Ҡасымға ла мәңгелек яра, мәңгелек һыҙланыу килтерер өсөн һул ҡулы бармаҡтары әле ятҡылыҡтан да таҙарып сисенмәгән бәләкәй Ҡасымдың йән ерен һәрмәй ине. Бына ул ятҡылыҡ ярылары араһынан бәләкәй Ҡасымдың ике сантиметр оҙонлоғондай тире эсендәге йомшаҡ кимерсәкте тотоп алды ла, уны тарта биреп, ҡайсы асаһы араһына ҡыҫтырып, ҡатырға ҡағыҙ ҡырҡҡандағы еңел тауыш сығарып, кертелдәтеп киҫеп алды. Ҡырҡҡан саҡта тәүге тәбиғи ҡысҡырыуын, тәүге илауын да башҡармаған бәпес Ҡасымдың шул тиклем әсергәләнеп, сайылдап, һыҙланыуҙан ярһып-ярһып илап ебәреүе Гөлзар өсөн иң һөйөнөслө тауыш, иң ләззәтле ҡәнәғәтлек ауазын ишетеү булды.

Был кескенә, кескенә ағзаны ниңә үҙ тәненән айырып киҫеп алыуын Гөлзар әле аңламай ҙа, ҡылған ғәмәленә ниндәйҙер баһа бирерлек хәлдә лә түгел. Уның бөтә теләге: үҙен мәңгелеккә мәсхәрәләүсегә үҙе кеүек үк яза биреү... Ул – Ҡасымға ла мәңгелеккә күңел һәм тән яраһы әселеген татытыу, уға үҙенеке кеүек үк һыҙланыу һәм әрнеү хистәрен тойҙороу. Ана ята ул Гөлзарҙың алдында бәләкәй, бик бәләкәй яуыз Ҡасым. Ҡайсы асаһы араһына йәбешкән ҡанлы бәләкәй генә был ит киҫәген ҡайҙа итергә икән, тип ҡулында тотоп торҙо ла, ҡәтғи ниәт, менән үҙенән әле сығып бөтмәгән ятҡылыҡ араһына тыҡты.

Тормош ҡанундары буйынса, ир менән ҡатын һәр осраҡта ла үҙ-ара булған хәл-әхүәлде сер итеп тотоу бурысын йөкмәһәләр ҙә, әгәр хәҙер Ҡасым шәүлә булып түгел, үҙе килеп сыҡһа, Гөлзар бөтә ғәләмгә уның ҡылған ғәмәлен ҡысҡырырға көс табыр кеүек. Янында һис бер кеше булмаһа ла, ул ҡысҡырырға, Ҡасымдың исемен ҡәһәрләргә тырышып ҡараны. Ләкин тауышы сыҡманы. Гөлзарҙың ыңғырашыуын һыҙланыуҙан ярһып-ярһып илаған бәләкәс Ҡасымдың тауышы баҫты.

Гөлзар, үҙен көслөтергә үҙе үк шарт тыуҙырыуын һәм уның һөҙөмтәһе алдында ятыуын үкенсесле һыҙланыу һәм сирҡаныу аша хәҙер аңлай, буғай.

Ә, бәлки... Ә, бәлки... Ниндәй генә ауыр осраҡ булмаһын, уға әсә булырға кәрәктер, тигән уй ҙа башынан йәшен сатҡыһылай булып үтте. Әммә шунда уҡ Ҡасымдың нәҙек муйыны, алға сыға биреп торған ҙур теше күҙ алдына килде лә был изге уйын ҡәтғи рәүештә кире ҡаҡты. Ул кисте ниңәлер нимәһе менәндер оҡшай биргән Ҡасым – хәҙер Гөлзар өсөн нәфрәт сығанағы. Гөлзарҙың бөтә аҡылы егерме ике йыл уны тәрбиәләгән, әхлаҡи ҡанундарҙы ҡырҡа рәүештә бөгөн инҡар итергә ҡарар иткәндер. Яҙмышҡа буйһоноу, тәбиғәт ҡушҡанды үтәү уны үҙ юлына саҡыра. Әммә уны үтәргә Гөлзарҙың хәҙер көсөнән килмәй. Уның алдында – ҡанға батҡан, мәңгелеккә енси ағзаһыҙ ҡалған йән эйәһе. Бер ҡараһаң – үҙ сабыйы, бер ҡараһаң – ҡәбәхәт ҙур тешле Ҡасым ята. Эйе, Ҡасымдан, бик булмаһа, уның тоҡомонан үс алдым, тип ҡәнәғәтләнеү тапһа ла, Гөлзарҙың күңелен элеккеге кеүек шом, ҡара пәрҙә баҫа башланы. Тере йәндең ағзаһын киҫеп алыу үҙе бик ҙур, бик ҙур енәйәт түгелме, тигән фекер йүгерҙе башына. Дәүләт ҡануниәте буйынса ла ул ғәфү итерлек эш түгел бит, тигән шомло уй башына килеп, ятҡан еренән торорға булды. Әммә ятҡан ере, эске күлдәктәре еүеш һәм ҡанлы ине. Ә бала ваҡ-төйәк сепрәк араһынан туҡтамайынса ескә генә, сибек тауышы менән ҡарлыҡҡансы иланы ла иланы. Хәҙер инде үҙенең киләсәк тормошон ситлек эсендә күреп, уның ҡобараһы осто. «Тиҙ генә, тиҙ генә өҫ-башты йыуырға ла, бер нәмәгә лә ҡарамай, был өйҙән сығып олағырға. Һәм мәңгегә. Һәм тиҙерәк. Әбейе килеп кергәнгә тиклем...»

Шул уйҙарын тормошҡа ашырыр өсөн, ашығып, бик ашығып йыуынырға кереште. Уға был ғәмәлдәрҙе эшләргә ҡала фатиры шарттары ярҙам итте. Гөлзарға бер төркөм милиционерҙарҙың, уны тотоп, зинданға ябыр өсөн, машинаға тейәлеүҙәре күҙ алдына килде. Һыуһағайны, эсе өҙөлөп асыҡҡайны ул. Йүгереп йөрөп йыуынған арала һалҡын булһа ла сәй яһап һемерҙе. Ике-өс телләм икмәк ҡапты. Хәҙер Гөлзарҙың барлыҡ хәрәкәте тиҙерәккә ҡоролдо. Тиҙерәк, тиҙерәк! Юғиһә, хәҙер бер өйөр милиция килеп керә лә Гөлзарҙың ҡулдарына бығау һала. Үҙенең ҡотолғоһоҙ яҙмышы ҡосағына үҙ-үҙен кереткәнен хәҙерге көндәлек аҡылы менән түгел, бөтә булмышы, бөтә зиһене менән ҡапыл аңланы. Аңланы, һәм үҙ яҙмышы үҙенә ҡот осҡос ғәрәсәт булып, бөтә аңын томаланы. Ул хәҙер бәпестең киләсәк яҙмышы, әле генә ҡылған енәйәте тураһында түгел, ә әлегә азатлығы бар булыуы, әле төрмәлә түгеллеге өсөн һөйөндө. Әммә ул азатлыҡтың сикләнгәнлеге, бына-бына уның бөтәсәге – Гөлзарҙың иң ҡурҡҡан һәм ҡобараһы осоп киткән сиккә еткергән тойғоһо. Тимәк, уның холҡо, тәбиғәте шулай. Уға был донъяла иң-иң ҡәҙерлеһе – азатлыҡ! Юҡҡа ғына уның һәр саҡ бейек тауҙарға менгеһе, хатта күктә йөҙгән болоттарҙың ситенә аяғын һәлберәтеп ултырып, өҫтән бөтә ғәләмгә ҡарап осоп йөрөгөһө килмәне. Аң кергәне бирле уны шул тойғо оҙатып йөрөнө. Һәр саҡ өҫкә-өҫкә менәһе килде, әммә уның тормошҡа ашыуы насип булманы. Аллаһы Тәғәлә ҡушмаһа, тормошта бер нәмә лә насип булмай. Донъялағы барлыҡ нәмә – яҡшы һәм яман ғәмәлдәрҙең бөтәһе лә, хатта көн менән төндөң алмашыныуы ла, ҡояштың яҡтылыҡ, йылылыҡ биреүе, ә айҙың нәҙәкәтлек таратыуы – бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә ихтыяры менән бар ителгән. Әммә ул һәр ваҡыт эштәрҙең хәйерлеһе менән риза, ә яман ғәмәлгә бер ваҡытта ла ризалығы юҡ. Шуға күрә лә һәр аңлы йән яманлыҡ менән насарлыҡты айыра белергә бурыслы. Бигерәк тә кеше ағзалығын һәм ағзаһын боҙоуҙы, әхлаҡһыҙлыҡ һәм енәйәт эшенән йыраҡ тороуҙы үҙе аңларға тейеш. Әммә Раббың һәр кемдең тәҡдиренә яраҡлы яҙмышын бар итә. Унан, тәҡдиреңдән ҡасып ҡотолоу сараһы юҡ! Яман тәҡдирҙе алдан иҫкәртеү өсөн ул

алдан иманға саҡыра. Иман юлының башын күрһәтә. Иман юлынан киткәнгә лә, ул юл менән китмәгәнгә лә Раббы ул шәхсән үҙе теләп алған тәҡдирҙә, үҙе теләгәнде, ихтыяр иткәнде яралтып бар итер. Һәм донъяла шулай була ла. Ни сәсһәң, шуны урыһың.

Ваҡыт – тәҡдир емеше. Тәҡдир ҙә – ваҡыт балаһы. Ул көтөп тормай. Бала сәсәп-сәсәп, ҡарлығып илауҙан көсһөҙ генә безелдәгән ауаз менән шыңшыуға күптәнән күскән ине инде. Гөлзар йыуынып бөттө. Үҙенә ҡағылған барлыҡ әйберҙәрҙе йыйҙы. Уның аңы әбейе танырлыҡ һис бер нәмәне ҡалдырмауҙы өйрәтте. Шул ваҡытта ишек аръяғында күтәрмәнән менгән аяҡ тауыштары, шыбыр-шыбыр һөйләшкән тауыштар ишетелде. «Килделәр. Бөттө баш... Өлгөрмәнем», – тигән уйҙар тәнен сәнсеп үтте. Яҡтылыҡта аслыҡтан, һыҙланыуҙан һаман да безелдәп ятҡан бәләкәй Ҡасымдың битенә, уға ҡарамай ғына, сепрәк япты ла, сумкаһын тотоп, сығыу ишегенә ҡолаҡ һалды. Тышта күрше ишектең ябылыуы менән һөйләшеүҙәр ҙә тынды. Шул тыныслыҡты ҡулланып, ул тиҙ генә ишекте асты ла, уны ябып, бикләп тә тормаҫтан, тышҡа, ыреклеккә, ҡараңғылыҡҡа һәм һалҡынлыҡҡа ынтылды. Гөлзар сығып киткәндән һуң нисә сәғәт үткәс, Шәһиҙә әбейҙең өйөнә ҡайтып кереүен берәү ҙә әйтеп бирә алмаҫ. Әммә был ваҡытта тыуғандан алып ауыҙына бер тамсы ла һөт таммаған, өҫтәүенә, ауыр яралы сабый, илай-илай ҡарлығып, тәкәте бөтөп, ҡанға туҙып ята. Шәһиҙә әбей ҡаланың икенсе осондағы әхирәтенә күршеһе Гөлбаныу менән аят ашына саҡырылған ине. Оҙаҡлап киттеләр ике күрше ҡунаҡта. Хужабикә әхирәте уларҙы, ашҡа саҡырылған ҡунаҡтар таралғас та, тағы ла алып ҡалды. Үткәндәрен, йәшлектәрен, бабайҙарын хәтерләнеләр. Шулай көн үтте. Ниңә ашығырға? Килеп көтөп торорлоҡ кешеһе юҡ. Ишек бикле. Уға һис бер кем кермәҫ. Берәүҙә лә асҡыс юҡ. Шәһиҙә ҡарсыҡ ҡасандыр үҙенең бер туған һеңлеһенең ҡыҙы Гөлзар уға килеп йәшәгәнендә ишек асҡыстарының бер ҡушын уға биргәнен дә хәтерләмәй. Гөлзар ул асҡыстарҙы алды ла, әбейенең күҙе алдында борғандамай, үҙ муҡсаһына һалды ла ҡуйҙы. Донъя хәлен белеп булмай, бәлки, кәрәге булыр, тип уйлағайны. Әйтерһең дә, үтә күргән. Кәрәк булды бит асҡыс Гөлзарға. Әгәр асҡыс булмаһа, ни эшләр ине ул? Тулғаҡ тота башлаһа, ҡайһылыр мөйөшкә барыбер йығылыр ине. Уның ыңғырашыуын ишеткән үткенселәр «Ашығыс ярҙам»ды саҡырырҙар ине. Ул саҡта Гөлзар бәләкәй Ҡасымды тыуымханала табыр ине. Ул осраҡта, теләйме ул, теләмәйме, балаһын үҙе аҫрарға мәжбүр булыр ине. Бына бит асҡыстың ҡөҙрәте. Аллаһы Тәғәләнең тәҡдиренә сәбәп бар. Гөлзарҙың үҙе енәйәт тип иҫәпләгән ғәмәленең ҡылынмышының төбөндә шул асҡыс ята икән дә баһа... Был ғилләнең шулай килеп сығыуын, бәлки, аҙаҡ аңлар...

Әммә әле әбейе ҡараңғыла бармағы менән ишектәге асҡыс соҡорон һәрмәй. Уның ҡолағына ҡайҙандыр, әллә күршенән, әллә урамдан, үҙәген өҙөп, көсһөҙ генә тонок тауыш сығарып, үкһеп-сырылдап илаған йәш сабыйҙың тауышы ишетелә. Шул тауышҡа аптырап, ул ишектәге асҡыс соҡорон тиҙ генә таба алманы.

Ниһайәт, асҡыс үҙ урынын табып, ишек асылып китте. Шәһиҙә әбей фатирына керҙе лә ут яҡтыртты. Бала тауышы, әйтерһең дә, уның өйөнән сыға. Юҡ, ул тауыш урамдан киләлер. Аяғын да сисмәй, тәҙрәгә барып, урамға ҡараны. Әммә урамда ул кешеләрҙең өйөлөшөп торғанын да, бала тауышы сығарырлыҡ башҡа сәбәп тә күрмәне. Ҡапыл уның ҡолағына был көсһөҙ тауыш уның йоҡо бүлмәһенән килә кеүек тойолдо. Тын да алмай, торған ерендә шаҡ ҡатып, тыңлай башланы. Ысынлап та, ҡарлыҡҡан бала тауышы уның йоҡо бүлмәһенән килә ине. Ҡото осто Шәһиҙә әбейҙең. Берәй бур балаһы менән кереп, мине үлтерергә аңдып ятамы? Әллә өй эйәһеме? Бәлки, уның балаһы илайҙыр? Маңлайына

һалҡын тир бәреп сыҡты. Бөтә быуыны хәлһеҙләнде. Ана йығылам, бына йығылам тигәндә, үҙ-үҙендә көс табып, күршеһенә ҡысҡыра башланы. Әммә тауышы сыҡмай. Нисек етте шулай һәрмәнеп тышҡа сыҡты ла, йән асыуы менән ҡысҡырып, күршеһенең ишеген ҡаға башланы. Уға ишек астылар. Әммә Шәһиҙә әбей хәбәр һөйләрлек хәлдә түгел ине. Өйҙә бур, мине үлтерергә көтә, тип саҡ-саҡ әйтә алды.

Әхирәтенең ҡапыл былдай хәлдә килеп кереүен күргән Гөлбаныу ҡарсыҡ та шаҡ ҡатты. Уның да быуындары ҡалтыраны, хәле бөттө. Шулай ҙа Гөлбаныу, Шәһиҙә күршеһен диванға ултыртып, хәлдең асылын һорарға кереште. «Өйҙә минең йоҡо бүлмәһендә балалы бурҙар йәшеренеп, минең килгәнде көтөп ултыралар. Минән аҡса талап итмәкселәр инде», – тине Шәһиҙә ҡарсыҡ. Күршеһенең был хәбәренә ышанырғамы-юҡмы тип уйлап, Гөлбаныу ҡарсыҡ үҙе, Шәһиҙәнең фатирына башын тығып булһа ла, ниндәйҙер тауыш ишетмәксе булды. Шулай эшләне лә. Һаҡ ҡына баҫып, икәүләп Шәһиҙә ҡарсыҡтың фатирына керҙеләр ҙә туҡтанылар. Тыңланылар. Әммә һис бер тауыш-тын юҡ. Бер-ике минуттай ваҡыт үткәндер. Ҡапыл төптән, Шәһиҙә ҡарсыҡтың йоҡо бүлмәһенән, көсәнеп һыҡтырағандай ауаз ишетелде. Туҡтағандай булды ла тағы бызылдай башланы.

«Был баланы тыйыусы кеше юҡ. Ул бер үҙе шикелле», – тине Гөлбаныу. Тағы тыңланылар. Бала бер көсәнә, бер туҡтай. Унан һуң тағы ла сырылдай башлай. Башҡа һис бер тауыш юҡ. Уны бәүеткән дә, тауыш биреп һәпелдәткән дә әҙәм беленмәй. Күрәһең, Гөлбаныу Шәһиҙәгә ҡарағанда батырыраҡ та, тәүәккәллерәк тә булып сыҡты. Ул яй ғына йоҡо бүлмәһенә атланы. Әхирәтенең камзул салғыйына тотоноп, Шәһиҙә лә уға эйәрҙе. Бер-ике аҙым атлайҙар ҙа туҡтайҙар. Тыңлайҙар. Ә бала бер туҡтағандай, бер башлағандай булып һаман зырылдай. Тауышына ҡарағанда, бала яңғыҙ кеүек. Был һиҙемләү ике әбейгә лә тәүәккәллек өҫтәне. Гөлбаныу тағы ла ике-өс аҙым атлап, башын йоҡо бүлмәһенә тығайым ғына тигәндә, уны Шәһиҙә туҡтатты. «Һаҡ бул. Башыңа эстән бәреп ебәрмәһендәр», – тине. Был иҫкәртеүҙән һуң Гөлбаныу ишек ҡорғандарын һул ҡулы менән йыраҡтаныраҡ һыпырҙы ла көтә бирҙе. Шул саҡта бала эстә тағы ла бызылдап, был юлы инде көсһөҙ генә, ҡарлыҡҡан тауыш сығарып, әллә шыңшый, әллә илай башланы. Ҡапыл Гөлбаныуҙың йәш ваҡыттағы әсәлек хисе әллә ҡайҙан бәреп килеп сыҡты ла, бер ниндәй ҡурҡынысҡа ла, ишеккә лә, хатта һағалап торған үлемгә лә ҡарамай, уны аяҡтары йоҡо бүлмәһенә атлатты. Гөлбаныуҙың был аҙымына нимә тип әйтергә белмәй торған Шәһиҙәгә лә батырлыҡ килде. Баланың, әллә янына кеше килеүен һиҙеп, асырғаланып сәрелдәп ебәреүе Шәһиҙә ҡарсыҡтың да йөрәген күкрәге эсендә болғалап, тамағына килеп тығылдырғайны. Уны шул сәрелдәү ҡарһаландырҙы. Шунда уҡ ул да йоҡо бүлмәһенә үтте. Унда Шәһиҙә йоҡлай торған ятаҡ янында ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып, ни эшләргә лә белмәй Гөлбаныу тора. Ә ятаҡта йыртыҡ сепрәктәр араһында саҡ-саҡ тауыш биреп, ҡулдарын болғап, сеп-сей, ҡанға батҡан ҡыпҡыҙыл ит киҫәге ята.

Шулай күренде ике ҡарсыҡҡа был йән эйәһе ярым ҡараңғылыҡта. Ҡайҙандыр килеп кергән был сабыйҙың ҡурсалаусыһы ла булырға тейеш, тип тиҙ генә икәүләп өйҙөң мөйөш-ҡыйышын тикшереп сыҡтылар. Әммә өйҙә, тере ит киҫәгенән башҡа, һис бер әҙәм булманы. Ни әйтергә белмәй аптырап, икеһе ике урындыҡҡа ултырып, доға уҡып, «Аллаһы әкбәр» әйттеләр. Был ваҡиғаға, Гөлбаныуға ҡарағанда, Шәһиҙә нығыраҡ шаңҡығайны. Нимә тип әйтергә лә белмәне. Хәйер, Гөлбаныу ҙа шундай хәлдә ине. Ул арала бала тағы ла сырылдай башланы. Тәҙрә ҡорғандарын асып, ут яҡтыртҡас, бүлмә ап-асыҡ булып китте. Өй

хужаһы булараҡ, бала янына иң тәүҙә Шәһиҙә әбей килде. Килде лә уның фиғелен, өҫ-башын күҙәтеп, бер ни тиклем ваҡыт күҙәтеп торҙо. Унан һуң бала уралған сепрәк-сапраҡты бармаҡ осо менән тотоп аса башланы.

Әллә ҡул тейеүен һиҙеп, әллә ҡан аралаш еүешлектең тәнгенәһенә ҡатҡан ерен тартып айырыуҙан әсетеп һыҙланғаны өсөнмө, бала ҡапыл тибешеп, йән өҙгөс тауыш менән сәрелдәп илап ебәрҙе. Ике бото араһындағы ҡанлы сепрәкте тартҡас, бала тағы ла йән әсергәнеп сарылданы. Шул саҡта Шәһиҙә әбей был сей ит киҫәген инәнән тыумалай сифатта күреп, иҫе китте.

– Гөлбаныу, Гөлбаныу! – Саҡ тауыш сығарып, күрше әхирәтен саҡыра алды. – Кил әле, кил. Күктәнме, әллә ер өҫтөнөң берәй ғәффәтле йә зәхмәтле мөйөшөнән ебәрелгән йән эйәһе микән был? Ҡара әле, ҡара, Гөлбаныу, был сабый фиғелле йән эйәһенең ғәүрәт ере тоташ шеш һәм ҡанға уҡмашҡан бит. Кем сабыйы булһа ла, уны ғөсөлләндерер кәрәк, Гөлбаныу. Һин ҙур ялғашҡа ла, бәләкәйенә лә йылы һыу әҙерләй күрсе. Ә мин ғөсөл әйберҙәрен табайым, – тип баланың өҫтөн яба бирҙе лә үҙе ашығып кәрәк-яраҡ әҙерләргә керешә. Әйберҙәр әҙер булғас, Шәһиҙә менән Гөлбаныу ҡарсыҡ кире бала ятҡан бүлмәгә керҙеләр. Сабый хәҙер илай ҙа алмай шикелле. Илауы әллә безелдәү, әллә көсһөҙ генә ғырылдау ауазы. Ниңәлер уның бер аяғы ҡыбырламаған да кеүек. Ә һул аяғы тибешкәнгә оҡшаш хәрәкәттәр яһай. Ике бот араһы шеш һәм ҡатҡан ҡан. Нимә тип тә уйлай алманылар Гөлбаныу менән Шәһиҙә ҡарсыҡ. Улар ҡунаҡҡа ишекте бикләп бергә киттеләр. Бергә ҡайттылар. Шәһиҙә ҡарсыҡ берәүгә лә фатирының асҡысын биргәне юҡ. Ситтән килергә уға сәләм ебәргән кеше лә булманы. Ағай-энеләренән, туған-тыумасалары араһынан килер кеше юҡ кеүек. Бергәләп дуҫ-иштәрен дә, әхирәттәрен дә барлап сыҡтылар. Әммә хәтерҙә исемен әйтергә тел осонда торған лайыҡ кеше лә булманы. Баланы бик һаҡлыҡ менән күтәреп, ялғаш бүлмәһенә алып сыҡтылар ҙа, Шәһиҙә ҡарсыҡ уны башы менән күкрәк тирәһенә терәп, ике ҡулы менән аҫтан тотоп, йылы һыулы ялғаш өҫтөнә ҡуйҙы. Гөлбаныу баланың яралы ерен ебетеп йыумаҡсы булғайны ла, яҡындан күргәненә ҡото осоп ҡысҡырып ебәрҙе: – Шәһиҙә! Шәһиҙә, тим! Был бала – Аллаһы Тәғәлә тарафынан һинең менән минең аша ергә ебәрелгән бала пәйғәмбәр! Ул беҙгә күктән ата-инәһеҙ ебәрелгән! Күрәһеңме, ул сөннәтле. Пәйғәмбәрҙәр ергә сөннәтле булып киләләр! Ул әле генә, яңы ғына яралған. Уға кеше ҡулы әле теймәгән. Әнә, күрәһеңме кендек осон? Кендек әллә киҫелгән, әллә өҙөлгән. Кендеклек осондағы ҡан да ҡатмаған. Унда һаман да кипмәгән ҡан, ирегән һүл йәбешкән.

Шәһиҙә ҡарсыҡ ни эшләргә лә белмәй, ҡурҡыуынан ҡулдары ҡалтыраны. Ә Гөлбаныу, ялғаш ситенә артын терәп, доға уҡый башланы. Шәһиҙә, ҡулында баланы тотоп торорлоҡ хәле ҡалмағас, уны ялғаШ төбөнә һалынған йылы һыуға һаҡ ҡына төшөрҙө. Икеһе лә кире ҙур бүлмәгә сығып, диванға ултырып, доға уҡый башланылар. Тәүләп тағы ла Гөлбаныу телгә килде: «Был бала, әхирәткәйем, ябай яҙмышлы бала түгел. Был – пәйғәмбәр бала! Күрәһең, Аллаһы Тәғәлә ололарҙы үҙ ғәмәлдәренә, үҙҙәренә үк лайыҡ булырға саҡыра икән, балаларға ла күҙәтеү, саҡырыу, өйрәтеү кәрәктер. Уның тарафынан, балаларға ла төбәп, үҙ пәйғәмбәре ебәрелмәнеме икән? Юғиһә, хәҙер йәш быуында иман һәм әхлаҡ тигән төшөнсәләр һайыҡты». Шәһиҙә ҡарсыҡ уны өндәшмәй генә тыңланы. Әммә аҡылы ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Шулай ҙа был ваҡиға уның зиһенен тулыһынса томалап, Гөлбаныу әхирәтенең фекеренә ҡушылырға әҙерләнде.

Әллә дөрөҫмө икән? Минең дә бит оло инәйемдең һәм оло әбейҙәрҙең, бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә донъяға сөннәтле булып яралған, тигәне хәтеремдә. Хатта шул риүәйәтте һөйләгәндә инәйемдең: «Һуңғы пәйғәмбәребеҙ ҙә донъяға шулай

ярлыҡағанмы?» – тигән һорауына Аҡбикә, оло инәйем: «Эйе, һуңғы пәйғәмбәребеҙ ҙә был донъяға сөннәтле килеш килгән», – тигәйне. Шул һүҙҙәр Шәһиҙә ҡарсыҡтың хәтеренә төшөп, уның ҡотон алды. Нисек итеп пәйғәмбәр балаға йоғанырмын икән? Уны тоторға ярармы? Уға тотонмаһаң, әле сабый ғына булған пәйғәмбәрҙең рухы йәберләнмәҫме? Юҡ. Сабыйға ярҙам ҡулы һуҙмау гонаһ булыр. Киләсәктә, киреһенсә, бала пәйғәмбәргә изгелек ҡылмау касафат йә зәхмәт килтереүе мөмкин. Иң сауаплы эш – Аллаһы Тәғәләне бөйөкләй белеү, уға инаныу, ул ебәргән пәйғәмбәрҙәргә, тәғлиматенә тоғро хеҙмәт итеү...

Әллә был йән эйәһе беҙҙең күҙҙе томалаған берәй фәрештә микән? Әллә иблис микән? Улай булғас, ул ниңә беҙгә, Гөлбаныу әхирәт менән миңә, күренә икән? Юҡҡа беҙҙең ҡаршыға пәйҙә булмағандыр ул. Аят табынында Хәлиҙә абыстай: «Алдығыҙҙа күк ҡабағындай йоҡа ҡанатлы бәхет фәрештәләре осор», – тип юҡҡа ғына һынамыш фекер әйтмәгәндер.

Ҡайҙан килеп керҙе һуң әле ул йән эйәһе? Берәйһе үҙ алымын табып ишекте асып, ҡалдырып киттеме? Әллә башҡа төрлө ғилләме? Әллә Гөлзарҙың эшеме был, тигән уй ҙа башына килде. Сөнки башҡа зат-зәүер – ир-ат... Улары ла ситтә. Юҡ, юҡ! Гөлзар ауырлы түгел ине лә баһа! Һәм ул был нәмәне эшләмәҫ. Миңә әйтер ине. Әммә был уйҙарын үҙенән дә, Гөлбаныуҙан да йәшерҙе.

Әллә Гөлбаныу дөрөҫ әйтә микән? Бына шундай икеләнеүҙәрҙән һуң ҡәтғи ҡарарға килеп, ялғашта һай ғына йылы һыуҙа тыныслыҡ табып, бәлки, ғүмерендә был донъяла тәүге тапҡыр йоҡоға талған сабый янына килде. Шәһиҙә әхирәтенең бала яҙмышына ҡағылышлы ниндәйҙер бер ҡәтғи ҡарарға килеүен төҫмөрләгән Гөлбаныу уның артынан шәүлә кеүек шым ғына эйәрҙе. Баяғы хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, Шәһиҙә баланы тотто. Ике оло аҡ инәй уны ҙур һаҡлыҡ менән, яй ғына, һәр ерен ентекләп ғөсөлләндерҙеләр, шул ваҡытта икеһе лә баланың сөннәтле еренә иғтибар иттеләр. Ете-һигеҙ тиҫтә йыл эсендә кешенең бөтә ғәүрәт ерен дә, ғиффәт ерен дә күргән был ике оло кешегә сабыйҙың сөннәт ҡылынмышы һис ғәҙәти түгел икәнлеге күренеп тора. Сабый ғиффәтенең был ерен, ни тиклем һаҡлыҡ менән йыумаһындар, ҡан ҡатҡан ере ҡубып та төшмәне, йыуылып та асылманы. Йылылыҡтан, йомшаҡ аҡ сепрәккә төрнәлеүгә, бәлки, рәхәтлек табып, әллә нисә сәғәттәр буйы ҡарлыҡҡансы илаған сабый тынғандай булды. Әммә ул аҫҡы ирендәрен ҡабырға һәм имергә тырыша ине. «Гөлбаныу, мә аҡса. Һин тиҙ генә кибеткә барып, балаға имеҙгес, эсерергә һөт һәм биләүестәр алып ҡайт», – тине Шәһиҙә. Гөлбаныу киткәс, ул тағы ла уйға батты. Ҡапыл уның зиһененә был баланың киләсәк яҙмышы, киләсәк яҙмышы ғына түгел, бөгөнгө киләсәге күҙ алдына баҫты. Был бала бит минең өйгә килеп кергән. Аллаһы Тәғәлә үҙе кереткән. Ләкин бит көндәлек тормош та бар. Көндәлек тормошһоҙ көн юҡ. Ә беҙ – шул көндө күҙәтеүселәр, ә, бәлки, хужалары ла. Унан һуң... Донъяла килеү бар, китеү бар. Ашау, эсеү бар. Ашау-эсеү булғас, уның ҡалдыҡтарынан ҡотолоу ҙа бар. Ә нисек ҡотолор был сабый, әгәр хәҙер беҙ уға һөт эсерһәк? Сөннәтле ере бит шеш. Үҙе яралы, ҡан ҡатҡан. Һыҡыра һарҡыу өсөн юлы кәрәк. Ә ул юҡ. Һыҡыра аҡмағас, эсе тула бит. Юҡ, был тирәлә беҙ көсһөҙ. Гөлбаныу килеү менән, дауаханаға хәбәр итергә кәрәк. Унан һуң... Унан һуң, киләсәктә нисек итеп бала пәйғәмбәр менән бергә йәшәп була? Юҡ! Пәйғәмбәр менән йәшәргә ҡурҡам мин. Шунан һуң... Ул ай үҫәһен көн үҫер. Йыл үҫәһен ай үҫер. Пәйғәмбәрҙәргә хас алдан тормош асыҡлыҡтары, төрлө ғилләле ваҡиғалар башланһа? Унан һуң... Уға хәҙер үк хәжәт итергә кәрәк бит. Ә мин уны хәжәт иттерә алмайым. Был – гонаһ, ҙур гонаһ! Ризыҡ тәғәмен бирербеҙ ҙә ул...

Шәһиҙә ҡарсыҡ сабый пәйғәмбәр хаҡында Гөлбаныу килгәнсе дауаханаға

хәбәр итеү тураһында ҡырҡа фекергә килгәйне. Баланың үҙ иренен үҙе имергә маташыуын күргән Шәһиҙә ҡарсыҡ, үҙҙәре йәш ваҡыттағы алымды ҡулланып, йомшаҡ икмәкте балға бутап, уны ауыҙында сәйнәп иҙеп, сепрәккә төрөп, имеҙлекте баланың ауыҙына ҡаптырҙы.

Сабый шунда уҡ тыныслыҡ тапты. Ул, туймаҫтай булып, төймәләй генә сепрәкте супылдатып һурырға кереште.

Гөлбаныу бала биләргә биләүес, һымыраҡ һәм һөт килтерҙе. Икәүләп онотола башлаған һолдарын яңыртып, кескәй пәйғәмбәрҙе биләнеләр, һөт имеҙҙеләр. Шул арала Шәһиҙә әхирәтенә был сабыйҙың бөгөнгө һәм яҡын киләсәге яҙмышын үҙенсә һүрәтләне. Икеһе бер һүҙгә, бер ҡарарға килеп, хәҙер үк «Ашығыс ярҙам»ға шылтыратырға булдылар.

Телефон трубкаһынан булған хәл-әхүәлде урыҫса әҙ-мәҙ һупалаған Гөлбаныу аңлатты. Әммә «03»-тәге туташтар тәүҙә Гөлбаныуға ышанманылар. Хәлде тағы ла берәүҙең аңлатыуын һоранылар. Сөнки Гөлбаныуҙың ситтән, әллә күктәнфәләнйортҡа бала килеүен, ул баланың сөннәтле булып тыуып, киләсәктә пәйғәмбәр булыуын раҫлаған һүҙҙәренә ышаныу шәфҡәт туташтарына ауыр ине. Шул уҡ һүҙҙәрҙе Шәһиҙә ҡарсыҡ та ҡабатлағас, әллә шикләнеп, әллә шөбһәләнеп, оҙаҡ та көттөрмәй килделәр шәфҡәт туташтары. Килделәр. Баланы ентекләп ҡаранылар. Бүлмәләрҙе лә тикшергән рәүешле күҙ йөрөтөп сыҡтылар. Үҙҙәре килтергән аҡ сепрәктәргә баланы төрөп, дауаханаға алып киттеләр.

Береһе, башлыҡҡа оҡшағаны, ҡалып, бөтә булған хәл-әхүәлде ҡағыҙға ентекле итеп яҙҙы. Шәһиҙә менән Гөлбаныу ҡарсыҡтан имза алды. Сығыр алдынан ул: «Иртәгә, ихтимал, һеҙҙе милиция саҡыртыр. Йә үҙҙәре килерҙәр. Өйҙә булығыҙ», – тип иҫкәртте.

***

Шифаханалағы көндәр үтеп, ҡайтыр ваҡыт етә башлағас, беҙ кистәрен сәйханаға барып ултыра торғайныҡ. Һуңғы көндәрҙә Ибраһим миңә бик ныҡ эйәләште. Әллә ағай, әллә атай рәүешле итеп күрә башланы. Асылды. Эс-бауырын асып һөйләй башланы. Донъяның төрлө өлкәһендә лә үҙенсәлекле фекер йөрөтә.

– Ә шулай ҙа, – ти ул, – был донъяға хасил булған һәр үҫемлек, һәр бөжәк, йән эйәһе йәшәргә тип килгән. Аңға эйә булғаны ла, булмағаны ла йәшәү шартына ҡулайлаша. Үҫемлектәр донъяһы күршеһе менән яҡтылыҡ, еүеш ер һуты бүлешә. Күберәк йоторға өлгәшһә, йәнәштәгеһен баҫа. Уға үҫергә лә, тамыр йәйергә лә ирек бирмәй. Йән эйәләрендә был алым күпкә ҡатмарлы. Ул, йәнһеҙҙәр донъяһындағы кеүек, бер-береһенә ҡамасаулау менән генә сикләнмәй. Бер-береһе менән туҡланыу, вәхшәтлек алымдарын ҡулланыу – һәр береһенең аңлы йәки аңһыҙ алымы һөҙөмтәһе. Йыртҡыстың, суртандың, үрмәксенең – аңһыҙ маҡсат. Йәшәр өсөн ашарға кәрәк. Кешенең һәр маҡсаты аңлы. Сөнки ул аңлы йән эйәһе. Ҡылған эше маҡсатына ярашлы. Әммә аңлыларҙың да маҡсаты ике төрлө була. Вәхшәтлек, боҙоҡлоҡ маҡсаты бар. Уға ҡаршы кешелектең үҙе яралҡан изгелек ҡанунына нигеҙләнгән маҡсат та бар. Иманлылар маҡсаты кешене кеше итеп ҡалдыра. Иманһыҙы үҙ юлы менән үҙ тәҡдирен ҡаршылай. Күп бәхетһеҙлектәр, кәмһетеүҙәр татып, хатта баҡыйлыҡҡа китеү сигенә еткәс, мин маҡсатлы булдым.

Маҡсатһыҙ икәнһең, иманлы тормош юҡ! Ул маҡсатты миңә ғүмере буйы аҡыл, ғилем туплаған, тәжрибә йыйған, ислам диненән иман эскән Ғәлиәскәр бабай мине дин юлына төшөрөп ҡайтарып бирҙе. Ҙур рәхмәт аҡһаҡалға!

**Зифа**
**ҠАДИРОВА**

# *ҺАҒЫНЫРҺЫҢ – МИН БУЛМАМ*

**ПОВЕСТЬ**

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

...Сөмбөл йәшеллеккә күмелеп ултырған Сәмәрҡәнд ҡалаһына килеп төштө. Халыҡ ташҡынына эйәреп, ҙур бинаға табан атланы. Ишектән инеүгә, кемдер уның еңенән тартты. Был кешенең ағаһы икәнен танып, Сөмбөл шатлығынан илап ебәрҙе.

– Ағай, килмәһәгеҙ, аҙашырмын тип бик ҡурҡҡайным, рәхмәт, ярай ҙа килгәнһегеҙ.

Ағаһы һеңлеһен ҡосаҡлап, маңлайынан үбеп алды.

– Үҫкәнем, хуш килдегеҙ, бына был ханым – минең ҡатыным Ғәлимә апайың. Таныш булығыҙ, – тип сибәр бер ханымды күрһәтте.

– Ниндәй матур апай, һаумыһығыҙ!

– Һин дә бик сибәр, үҫкәнем. Бир улыңды, үҙем күтәрәйем, һин арығанһыңдыр, – тип ханым уның ҡулынан баланы алды.

– Арыным, күңелем бутала. Самолетта ҡолағым ярыла тип торам, – тине Сөмбөл.

– Әйҙәгеҙ, өйгә ҡайтабыҙ, ә һинең әйберҙәрең ҡайҙа һуң?

Сөмбөл, оялып:

– Минең бер әйберем дә юҡ, бына, бала кейемдәре генә, – тип башын аҫҡа эйҙе.

– Ҡайғырма, үҫкәнем, барыһы ла булыр. Әйҙә, ултыр, – тип бик яҡшы машинаға ултыртып, үҙҙәренә алып ҡайттылар.

Улар килеп туҡтаған өйҙө Сөмбөлдөң киноларҙа ғына күргәне бар. Иҫ китмәле матур, ҙур, әйтерһең, сәскәләр араһына төҙөлгән хан һарайы. Ағаһы менән апаһы барлыҡ бүлмәләрҙе күрһәтеп сыҡты.

– Ә бына быныһын һеҙҙең өсөн әҙерләнек, – тип матур итеп биҙәлгән бүлмәгә алып инделәр. – Был бүлмә хәҙер һеҙҙеке. Быныһы – бала йоҡлай торған урын. Оҡшаймы?

– Апай, был бит ҡурсаҡ бүлмәһе кеүек, үҙе иркен, үҙе яҡты. Яҡшылыҡтарығыҙҙы нисек кенә ҡайтарып бөтөрөрмөн?

---

*Дауамы. Башы 2-се һанда.

– Һинең килеүең бик яҡшы булды әле. Шундай ҙур өйҙә икәү генә йәшәйбеҙ.

– Миңә тиҙ арала берәй эш табырға кәрәк. Өҫтөмә кейерлек кейемем дә юҡ. Был ҡиәфәтем менән өйөгөҙҙө йәмһеҙләп кенә йөрөрмөн.

– Эй, эскерһеҙ сабыйым, беҙ һине батша ҡыҙы кеүек кейендерербеҙ, юҡҡа борсолма.

Тормош шундай, күрәһең: тегендә – ҡыш, бында – йәй, унда – кәрәкһеҙ, бында – таныҡ. Балаһыҙ интеккән ғаиләгә һөйөнөс, йән йылыһы, өй йәме булды улар. Сөмбөл юлдан һуң улы менән рәхәтләнеп мунса инде, унан сығыуына, Ғәлимә апаһы яңы эске кейемдәр, матур халат бирҙе.

– Иҫке кейемдәреңдең бында кәрәге юҡ, элекке тормошоңдо иҫкә төшөрөп тормаһындар, – тине апаһы.

Бына шулай итеп, Сөмбөлдөң сит ерҙәрҙәге яңы тормошо башланды. Туғандары ҡунаҡтан ҡунаҡҡа йөрөттө. Апаһы ҙур магазиндарға алып барҙы, затлы кейемдәр һатып алды, Сөмбөлдө зауыҡ менән кейенергә, сәсен матур итеп өйөп ҡуйырға өйрәтте.

Ағаһы менән апаһы ҡалала билдәле, хөрмәт ҡаҙанған табиптар икән. Ағаһы юғары уҡыу йортонда ла уҡыта, клиникала ла эшләй. Апаһы – ҡатын-ҡыҙ табибы. Йәштәре иллегә етеп килһә лә, бик йәш күренәләр һәм икеһе лә бик сибәрҙәр. Сөмбөл менән Азаматты бик яраттылар. Бер көндө үҙ-ара һөйләшеп ултырғанда, апаһы:

– Сөмбөл үҫкәнем, һинең берәй хыялың бармы? – тип һорап ҡуйҙы.

– Эйе, һеҙҙең кеүек яҡшы табип, яҡшы кеше булғым килә, тик һуңдыр инде, бала менән нисек уҡыйһың?

– Һин бала тураһында борсолма, әгәр теләгең бар икән, беҙ һине быйыл уҡ уҡырға индерәбеҙ. Беҙҙән бөгөн генә берәү документтарын алып китте, уның урынына индереп ебәрергә була. Уҡыу таныҡлығыңды алып килдеңме? Ҡайҙа, билдәләреңде ҡарайым әле. Бик һәйбәт бит был, бер генә «дүрт»лең. Былай булғас, мин һине үҙебеҙҙең институтҡа уҡырға индерәм.

– Ағай, институт минең өсөн түгел, унда бит оҙаҡ уҡырға кәрәк. Мин биш-алты йыл буйы һеҙҙең елкәлә ултыра алмайым. Миңә училище ла ярай, – тине Сөмбөл.

– Юҡ инде, үҫкәнем, бындай билдәләр менән... Беҙ бит апайың менән икебеҙ ҙә табиптар – ярҙам итербеҙ, практикаһын апайың янында үтерһең. Тырыш, Сөмбөл, һинең менән әсәйең ғорурланһын, һине һанламағандар үкенһен, барыһына үс итеп, хөрмәткә лайыҡ кеше булырға тырыш. Ә улыңды ҡарарға кеше табырбыҙ. Үҙең күрҙең, беҙҙең бында күпме ярҙамсыл туғандарыбыҙ бар. Унан һуң, апайың менән мин нимә өсөн? Беҙҙең үҙебеҙҙән дә артмаҫ әле ул, – тип ҡаршы төштө ағаһы.

Улар Азаматты ҡурсаҡ кеүек кейендерҙе. Сөмбөлдөң дә өҫтө бөтөн, тамағы туҡ. Бәхет өсөн тағы ни кәрәк?

Яңы йыл алдынан Сөмбөл уҡырға йөрөй башланы. Беренсе көн уҡырға килгәс, уның янына таҙа кәүҙәле, ҡап-ҡара бер егет килеп ултырҙы. Үҙен Исмаил тип таныштырҙы. Исмаил иран егете икән. Уның телен аңлауы бик ауыр, шулай ҙа үҙ-ара аңлаштылар, бер-береһенә ярҙам иттеләр. Студент халҡы – арыу-талыу белмәй торған күңелле халыҡ:төрлө кисәләр үткәрҙеләр, йәштәр йыйындарына йөрөнөләр, тик Сөмбөл генә уларға ҡушылманы, дәрестәре бөтөүгә, тиҙерәк өйгә, улы янына ашыҡты. Төндәр буйы дәрес әҙерләй. Ағаһы менән апаһы бөтә буш ваҡыттарын Азаматҡа бағышланылар, Сөмбөлгә дәрес әҙерләргә ҡамасауламаһын тип, бала карауатын үҙ бүлмәләренә күсерҙеләр. Улар Азаматты ярата туя алманы, уны үҙ балаларын ҡарағандай, хыялланып, нимәгәлер өмөтләнеп һөйҙөләр.

Нисек кенә ауыр булмаһын, беренсе уҡыу йылы аҙағына яҡынлашты. Сөмбөл һуңғы һынауҙарын бирҙе. Шатлығынан балҡып, йүгерә-йүгерә улы, туғандары янына ашыҡты. Өйгә инеүгә, Ғәлимә апаһын ҡосаҡлап алды.

– Апайым, йәнем, бөгөн көн ниндәй матур! Мин хәҙер әсәйемә уҡырға инеүем тураһында яҙа алам.

– Быға тиклем уҡырға инеүең тураһында хәбәр итмәгән инеңме ни?

– Юҡ, әгәр уҡый алмаһам, ҡыуып сығарһалар, тип ҡурҡтым, хәҙер имтихандарым бөткәс, ҡурҡмайынса яҙа алам. Әсәйем һөйөнөсөнән илар инде. Апай, һин мине үҙ янында иҙән йыуыусы итеп булһа ла эшкә ал әле. Оят миңә, икәүләшеп һеҙҙең елкәлә ултырабыҙ, каникулда булһа ла өйҙә ятмайым инде.

– Сөмбөл, үҫкәнем, үҙем шунда эшләп, күпме кешене һөйөндөрөп, күпме балаға ғүмер бирһәм дә, Хоҙай беҙгә бала насип итмәне, һеҙ беҙгә икегеҙ ҙә бик ҡәҙерле, һине лә, улыңды ла бик яратабыҙ. Беҙҙең бер нәмәгә мохтажлығыбыҙ юҡ. Һин әле йәш, аҡса эшләргә өлгөрөрһөң, һиңә уҡырға кәрәк. Һин үҙ балабыҙ кеүек. Уңыштарыңа шатланабыҙ. Ағайың һинән бик ҡәнәғәт. Әгәр һине уҡытып сығара алһаҡ, тимәк, беҙ юҡҡа йәшәмәгәнбеҙ тигән һүҙ. Бөгөн кис һинең уҡыуың бөтөүҙе байрам итербеҙ, ағайың ҡайтһын да, ҡайҙа барырға теләһәң, шунда барып күңел асырбыҙ.

Сөмбөл:

– Һин мине бик иркәләйһең, апай, ялҡауланып бөтәм бит, – тип йылмайҙы.

– Тормош арбаһына егелергә өлгөрөрһөң, – тип апаһы Сөмбөлдө арҡаһынан һөйҙө.

Азамат инде атлап йөрөй, тештәре лә сыҡты, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе лә әйтә башланы. Әле генә Сөмбөлдөң килеп ҡосаҡлауы булды, улы, «мәм-мәм» тип, ҡулын әсәһенең күкрәгенә тығып та ебәрҙе.

– Эй, оятһыҙ малай, һин ҙур бит инде.

Бер килеп эләккәс, бала әсәһен ысҡындырманы, башын күлдәк иҙеүенә тығырға тырышты. Сөмбөл улының ҡыланышынан эсе ҡатып көлдө, унан иҙәнгә тәгәрәп китте. Бала уға ҡарап тәгәрәне, көлдө, тағы әсәһенең иҙеүенә үрелде. Сөмбөлгә бөгөн шундай рәхәт ине, уның гел көлгөһө-шаярғыһы ғына килеп торҙо.

Сөмбөл баҡсаға сығып ултырҙы. Уның билдән уҙып төшкән тулҡын-тулҡын сәстәре ҡояшта ялтырай ине. Сәстәренең шундай оҙон булып үҫә алыуына үҙе лә аптырай, ул бит һәр ваҡыт малайҙар кеүек ҡыҫҡа сәс менән йөрөнө, ә хәҙер күр инде: оҙон ауыр сәстәр, оҙаҡлап киптерергә кәрәк. Шулай ҙа уға аҡ ҡалпаҡ менән былай сәс йөрөтөү бик оҡшай.

– Сәстәрең бигерәк матур үҫте, – тине ағаһы, уның янына ултырып.

– Һеҙҙә йылы, һыу йомшаҡ. Бында бит бөтә нәмә яҡшы үҫә, бына минең сәс тә үҫә, үҙем генә үҫмәйем.

– Үҙең дә үҫтең, Сөмбөл, үҫтең, һиҙмәйһең генә. Кеше егерме биш йәшкә тиклем үҫә. Һиңә беҙҙең климат бик килеште, буйға хайран үҫтең.

– Шулаймы, ағай, үҫтемме? – тип һөйөнөп йылмайҙы Сөмбөл.

– Һин бөгөн бик шат, бәхетле күренәһең.

– Эйе, ағай, көлгөм, йырлағым ғына килеп тора. Миңә бөгөн шундай рәхәт, ағайым, – тип уны ҡыҫып ҡосаҡлап алды. – Әгәр теге ваҡытта һин беҙгә ҡайтмаған булһаң, мин хәҙер ҡайҙа булыр инем икән? Йәшәргә көсөм ҡалмаған ине бит.

– Онот барыһын да. Әйҙә, иң матур күлдәгеңде кей, ҡунаҡҡа барабыҙ, – тип ағаһы өйгә инеп китте.

Сөмбөлдөң карауатында сейә төҫөндәге, еңһеҙ, яғаһы баҫтырып тегелгән иҫ киткес матур күлдәк ята ине. Күлдәк янында бейек үксәле босоножкалар тора.

Ул, ашыға-ашыға күлдәкте кейеп, көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты. Йә Раббым, ниндәй матур күлдәк! Әгәр хәҙер уны Булат күрһә, ни тиер ине икән?! Ул, Булат янына сығырға йыйынғандай, көҙгө тирәһендә бөтөрөлдө, сәстәрен матур итеп өйҙө, иренenә беленер-беленмәҫ кенә иннек һөрттө. Көҙгөнән уға нескә билле, уртаса буйлы егерме йәшлек сибәр ҡатын ҡарап тора ине. Ул, тулҡынланып, үҙ бүлмәһенән сыҡты.

Икенсе ҡаттан төшөп килеүсе Сөмбөлдө күреп, апаһы менән ағаһы телһеҙ ҡалды. Сөмбөл улар ҡаршыһына килеп баҫты.

– Килешәме? – тип йылмайҙы, биттәрен соҡорайтып. – Бик ҙур рәхмәт һеҙгә. Был күлдәк шундай матур.

– Һуҡырҙар ғына күрмәҫ был матурлыҡты, – тине апаһы, һаман да һоҡланып ҡарап.

– Бына, үҫкәнем, уҡыу йылын уңышлы тамамлауың менән ҡотлап, минән һиңә бәләкәй генә бүләк, – тип ағаһы кеҫәһенән бер тартма сығарҙы ла, тартманан алып, Сөмбөлдөң ҡолағына алтын алҡалар таҡты.

– Бына хәҙер үҙеңде иң бай солтанға кейәүгә бирергә лә була, ләкин беҙ һине, уҡыуың бөтмәйенсә, бер кемгә бирмәйәсәкбеҙ.

– Рәхмәт, ағай, шундай матур! Әйҙәгеҙ, бергәләп фотоға төшәбеҙ, әсәйемә лә ебәрермен.

Был яҡта фотоға төшөрөүселәр аҙым һайын, шуларҙың береһе янына туҡтап, фотоға төштөләр.

Улар ағаһының дуҫы, профессор Хәлиловтарға ҡунаҡҡа килде. Хужа үҙе сығып ҡаршы алды. Баланы күреп:

– Дуҫым, үҙеңә оҡшаған, – тип йылмайҙы. – Ғәлимә ханым, һеҙ һәр ваҡыт сибәр, хәлдәрегеҙ нисек? Әйҙәгеҙ, уҙығыҙ. Ә был ниндәй йөҙөк ҡашы? – тип Сөмбөлгә текәлде.

– Һинең уҡыусың бит, танымайһыңмы әллә? Бөгөн генә һиңә имтихан тапшырып ҡайтты, – тип көлдө ағаһы.

Сөмбөл, оялып, ни тиергә лә белмәйенсә, үҙенең фамилияһын атаны.

– Мөғжизә! – тине профессор һуҙып ҡына. – Уҙығыҙ, уҙ.

Үҙе баштан-аяҡ Сөмбөлдө күҙҙән кисерҙе. Институтта бик тыйнаҡ, ябай кейенгәнгә, күҙгә бик салынмаған икән. Ә бөгөн... Былай булғас, малайҙарҙың башы бөттө. Бына ҡайҙа ул матурлыҡ.

Мәжлестә йәштәр ҙә бик күп ине. Сөмбөл бер кемгә яҡын барманы, гел апаһы, улы менән булырға тырышты. Егеттәр иһә бөтә яҡлап уны күҙәтте, хәлдәренән килһә, үҙҙәре янына тындары менән һурып алырҙар ине. Шуны һиҙепме, Сөмбөл ололар араһынан бер аҙым да ситкә тайпылманы, тыйнаҡ ҡына апаһы янында ултырҙы. Ҡайтырға сыҡҡас, ағаһы:

– Нисек, ҡунаҡта оҡшанымы? – тип ҡыҙыҡһынды.

– Башҡа бындай ергә бармайым. Үҙемде кеше тәрилкәһенә төшкән тараҡан кеүек хис иттем. Ҡайһы яҡҡа ғына боролһам да, был тараҡан нишләр икән, тигәндәй ҡарап торалар.

Ағаһы һеңлеһенең һүҙҙәренән ҡысҡырып көлдө.

– Һин әйтһәң әйтәһең инде! Улар бит һиңә барыһы ла ғашиҡ булды. Бисара егеттәрҙең нисек күҙәтеп тороуҙарын күрҙем. Бәлки, һин дә берәйһенә ғашиҡ булырһың?

– Кәрәкмәй миңә мөхәббәт, мин уның асыһын етерлек татыным, йәнем һаман да әрней. Әсе әрем ул мөхәббәт тигәндәре, ишеткем дә килмәй.

Машинала ауыр тынлыҡ урынлашты. Сөмбөл тәҙрәгә ҡарап барыуын дауам итте. Бер аҙҙан әкрен генә әллә уларға, әллә үҙ-үҙенә:

– Күпме өрһәң дә, көлгә ут ҡапмай, мин яндым шул инде, ваҡытынан алда яндым, көлгә ҡалып яндым, – тип ҡуйҙы.

Ағаһы менән апаһы Сөмбөлдөң күңелендә ниндәй ауыр хәтирәләр уяныуын аңланы. Был хаҡта башҡа бер ҡасан һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа булдылар. Ҡайһы бер яралар йылдар буйы төҙәлә, әле төҙәлгәс тә тәрән эҙе ҡала.

Сөмбөл йәйге каникулын апаһы янында клиникала үткәрҙе, медицинала беренсе аҙымын яһаны. Бер нәмә лә еңел генә бирелмәне: тәүге операцияны күреүгә, аңын юғалтып, иҙәнгә йығылды. Апаһы ипләп кенә аңына килтерҙе, ярҙам көткән ауырыу янында табип аңын юғалтып йығылһа ни булаһын ғүмер буйы иҫтә ҡалырлыҡ итеп аңлатты. Икенсе юлы Сөмбөл һәр төрлө ҡурҡыныс хәлдәргә әҙер ине, апаһының операция яһауын ҡарап торҙо, апаһы эш ыңғайы күрһәтеп аңлата барҙы. Һәр нәмәне үҙ күҙе менән күреп өйрәнеү уҡыуҙа ла ярҙам итте.

Сөмбөл тырышып уҡыны, иптәштәренән үҙенең тыйнаҡлығы, тәбиғилеге менән айырылып торҙо. Егеттәр уның янына килергә ҡурҡты, сөнки ул уларға ҡарата ҡәтғи һәм ҡаты ине. Ярҙам һорап килеүселәргә һәр ваҡыт ярҙам итте, һәр нәмәне ентекләп аңлатты, ләкин үҙенә ҡарата хисле ҡараштар һиҙһә, ҡырт боролдо ла китеп барҙы. Уның янында, бер ни күрмәгәндәй, шәүлә кеүек тағылып, оҙон буйлы сибәр Исмаил йөрөнө. Исмаил бик аҡыллы, бик башлы егет ине. Беренсе килгән көндән үк Сөмбөлгә хәленән килгәнсә булышты. Улар һәр ваҡыт йәнәшә ултырҙы, бергә китапханаға йөрөнөләр, ашханала бергә ашанылар. Сөмбөл уны ысын иптәш, яҡшы дуҫ  тип ҡабул итте. Исмаил да Сөмбөлдө яҡын дуҫы итеп күрҙе, шуға Сөмбөл уның янында үҙен тыныс тойҙо.

Яңы йыл етергә ике аҙна ҡалғанда, Сөмбөл, ансамбль уйнағанын ишетеп, институттың зур залына инде. Сәхнәлә йыр-бейеү яратҡан студенттар Яңы йылға әҙерләнә ине. Сөмбөл уларҙың уйнағанын ишек төбөндә генә тыңлап торҙо, үҙенең дә ошо сәхнәгә сығып йырлап ҡарағыһы килде.

– Йырларға килдеңме, бейергәме? – тип һорап ҡуйҙы көтмәгәндә берәү.

– Мин йырларға яратам, – тип әйткәнен үҙе лә һиҙмәйенсә ҡалды Сөмбөл.

– Һин ҡайһы яҡтан? Һөйләшеүең башҡортса.

– Башҡортостандан, – тип йылмайҙы Сөмбөл.

– Ә мин Татарстан егете, Ғосман булам.

Улар араһындағы танышлыҡ шулай башланды.

– Әйҙә, Сөмбөл, йырлап күрһәт әле. Мин бит ошо ансамблдең етәксеһе. Әйҙә, – тип Сөмбөлдө өҫтөрәп тигәндәй сәхнәгә алып менде лә микрофон бирҙе. Ҡыҙҙың ҡулына утлы күмер тотторҙоларму ни, микрофонды ҡайҙа ҡуйырға белмәне.

– Ярай улайһа, микрофонһыҙ ғына йырла. Оялма, бында бит һин үҙең генә, бына был яҡҡа ҡарап йырла.

Сөмбөл тәрән һулыш алып, үҙенең көслө, иркен, матур тауышы менән залды яңғыратып йырлап ебәрҙе. Ул, бер мөйөшкә ҡарап, онотолоп, йыр аша эсендәге һағыш-моңдарын бушатты. Сәхнә артындағылар, уның моңло тауышын ишетеп, кем йырлағанын ҡарарға сыҡтылар. Сөмбөл боролоп ҡарағас, ҡурҡып китте. Ҡайҙан сыҡты был халыҡ тигәндәй, аптырап Ғосманға ҡараны.

– Гүзәлем, быға тиклем ҡайҙа йөрөнөң һин? Һинең урының бит зур сәхнәлә. Башҡортостанда ғына үҫә шул моңло ҡыҙҙар. Бөгөндән һине, Сөмбөл, ансамблдең солисы итеп алабыҙ. Йырла, йәлләмә Хоҙай биргән тауышыңды. Мин һинән йондоҙ яһайым.

– Мин микрофон менән йырлай белмәйем, унан һуң, әҙерләнергә ваҡыт та бик аҙ ҡалды.

–Ҡурҡма, өйрәтербеҙ.

Яңы йылға Сөмбөл ансамбль менән йырларға дүрт-биш йыр өйрәнде. Концертты утыҙынсы декабргә билдәләнеләр. Әнүәр ағаһының илле йәшлек юбилейы яҡынлаша ине. Сөмбөл ағаһы менән апаһына Яңы йыл кисәһенә саҡырыу ҡағыҙы алып ҡайтты.

– Килегеҙ, йәме, унан бергә ҡайтырбыҙ.

– Һин бөгөн бик серле, Сөмбөл, ни булды?

– Килгәс күрерһегеҙ.

Концерт күлдәгем юҡ, тигәс, берәүҙең туй күлдәген алып килделәр. Күлдәк Сөмбөлгә үлсәп теккән кеүек бик килешле булды, үҙе бик матур, ҡар бөртөгөләй ялтырап тора.

Сөмбөл шаршау ярығынан ғына ағаларын күҙәтте. Ағалары килгән, дуҫтары менән алдағы рәттәрҙең береһендә ултыралар. Сөмбөл тулҡынланды, биттәре ут булып янды. Ансамбль уйнап, залды йылытты, халыҡты йәнләндерҙе. Сөмбөлгә лә сират етте. Залда ла, сәхнәлә лә утты һүндерҙеләр, бары ай яҡтыһы кеүек аҙ ғына яҡтылыҡ ҡалдырҙылар. Шул саҡ, ай яҡтыһында тауҙар өҫтөнән осҡан ҡошто хәтерләтеп, матур моңло тауыш яңғыраны. Йырға әкрен генә гитара ҡылдары ҡушылды, сәхнәлә аҡ күлдәкле йырсы ҡыҙ күренде.

*Һәй, ҡошҡайым, һауаларҙа осҡанда,*
*Күрҙеңме Йүрүҙән менән Ирәмәлде?*
*Йүрүҙәнкәйҙә ямъғыр яуһа,*
*Ирәмәлдә ҡар ята.*
*Шул ике тау араһында*
*Минең тыуған илкәйем ята.*
*Мин дә осор инем*
*Һеҙҙең менән, ҡошҡайым,*
*Йүрүҙәндән хаттар килһә,*
*Ҡайт инде, тип, гөлкәйем.*

Йыр бөттө, залда ут ҡабынды, тынлыҡ һаҡланды. Сөмбөл: «Бөттөм», – тип уйлап Ғосманға ҡараны, шул саҡ кемдер ҡул саба башланы, зал уға ҡушылды.

– Алҡыштарығыҙ өсөн бик ҙур рәхмәт. Мин бөгөн ҙур сәхнәгә беренсе тапҡыр аяҡ баҫтым. Сығыуымдың сәбәбе – ошо көндәрҙә атайым урынына ҡалған ағайым, студенттарҙың яратҡан уҡытыусыһы, профессор Әнүәр Ибраһимовтың тыуған көнө. Уны ысын күңелемдән тыуған көнө менән ҡотлайым. Әнүәр ағай, Ғәлимә апай, бөтә йырҙарым һеҙгә!

Ағаһы менән апаһына көтөлмәгән бүләк булды, улар йәшләнгән күҙҙәрен һөрттө.

Сөмбөл уҡырға ла, йырларға ла, апаһы менән эшкә йөрөргә лә өлгөрҙө. Шулай итеп икенсе курс тамамланды. Иптәштәре ҡайһыһы ҡайҙа таралышып бөттө, тик Сөмбөл генә йәйҙе эштә, өйҙә үткәрҙе, буш ваҡыттарында улы янында булырға тырышты. Улын, теле асылыу менән, ағаһы менән апаһына «ҙур атай», «ҙур әсәй» тип әйтергә өйрәтте.

Ағаһы менән апаһының: «Бәлки, Сөмбөл кейәүгә сығыр ҙа баланы беҙгә ҡалдырыр», – тип өмөтләнеп йәшәүҙәрен башына ла килтермәне...

* * *

Арыҫлановтар ғаиләһендә лә тормош үҙгәрҙе. «Йәне теләгән – йылан ите ашаған, өйләнһәң өйлән инде», – тип Булатты өйләндерҙеләр, бик гөрләтмәй генә туй яһанылар.

Булаттың хыялы тормошҡа ашты: оҙон буйлы, сибәр ҡатыны менән

ҡултыҡлашып ҡайтты, етәкләшеп китте. Беренсе мәлдәрҙә Булат бәхетенән һөйөнөп осоп ҡына йөрөнө, ләкин тиҙ һүнде уның һөйөнөсө. Уға ниҙер етмәй кеүек тойолдо, күңеле ниҙер эҙләп аҡтарынды...

Сибәр Фәриҙә аҙ һөйләште, тыйнаҡ ҡына йылмайҙы, ҡайныһы менән ҡәйнәһенә Сөмбөл кеүек атай-әсәй тип өҙөлөп торманы, «Һеҙ» тип кенә өндәште. Әлфис яңы еңгәһенә бүре балаһы кеүек ҡараны. Булат был өйҙә Фәриҙәнең Сөмбөл урынын яулай алмауын һиҙҙе. Янып-көйөп тормош алып барған, тәмле аштар бешергән, һәр ғаилә ағзаһына хөрмәт менән ҡараған, илағыһы килһә лә йылмайып торған Сөмбөлдөң тап иреһе ине шул Фәриҙә. Атаһы, әллә Сөмбөлдө бик яратҡанға, Фәриҙәне бөтөнләй өнәмәне.

– Таш ҡурсаҡ, көлә лә белмәй. Сит кеше кеүек «Һеҙ» ти бит, колхоз рәйесе менән һөйләшәме ни. Атай тиһә, теле ҡорор тип ҡурҡалыр инде. Сөмбөл өйгә көлөп инһә, ҡояш сыҡҡандай була ине, ә был ҡайтһа, ҡар яуғандай өшөтә башлай, – тип Шәфҡәт ағай аҙна һайын туҙынды.

Булат ата-әсәһенең һалҡын ҡарашын күрмәй ҡалманы. Үҙе лә ҡайһы ваҡыт Әлфис янына, серле бүлмәгә инеп, элек бишек эленгән буш ҡаҙаҡҡа оҙаҡлап ҡарап тора ине. Фәриҙә:

– Шул бүлмәгә күсәйек, унда урын да иркенерәк, яҡтыраҡ та. Тәҙрә төбөндәге гөлдәр бик матур, – тип әйткән ине, Булат шунда уҡ:

– Ул Әлфис бүлмәһе, тейергә ярамай, – тип ҡаршы төштө.

– Әлфис беҙҙең урында йоҡлар, ниңә бер үҙенә шундай ҙур бүлмә? – тине Фәриҙә ҡоро ғына.

Уларҙың үҙ-ара һөйләшеүҙәрен ишеткән Шәфҡәт ағай түҙмәне:

– Килен кеше үҙ бүлмәһен үҙе биҙәргә тейеш. Әлфискә теймәгеҙ, – тине.

Гөлфиә апай ни әйтергә лә белмәй ҡаушап ҡалды. Фәриҙә менән ул уртаҡ тел таба алманы, килене былай насар ҙа түгел, үҙе бик сибәр ҙә, ләкин нимәлер етеп бөтмәй был балаға. Сөмбөл уның кеүек сибәр булмаһа ла, үҙенә тартып тороусы ниндәйҙер һөйкөмлө һөйәге бар ине шул. Сөмбөл менән Азаматты иҫенә төшөрөп: «Ҡайҙа йөрөйһөгөҙ икән, балаларым?»,– тип йыш ҡына илап та алды.

Сөмбөл киткәс, Байрас та ҡанаты һынған ҡошҡа оҡшап ҡалды, өйгә ҡайтмаҫ булды. Сөмбөлдө һағынып йөрәге әрнене. Бер көндө, үҙ-үҙенә урын таба алмайынса, Әлфис янына инде. Ул ингәндә энеһе йоҡларға йыйынған ине, ағаһын күреп:

– Кил, ағай, бына бында ят, бына был – апайымдың мендәре, еҫкәп ҡара әле, – тип уны үҙ янына саҡырҙы, юрғанын асты. – Ҡара, апай күлдәген онотоп ҡалдырған, кеҫәһендә – Азаматтың башлығы. Еҫкәп ҡара әле, апайымдың еҫе килә. Мин был күлдәкте, әсәйем йыумаһын тип, йәшереп кенә һаҡлайым. Фәриҙә апай күрһә, алып кейер, тип ҡурҡам. Ул бит апай менән Азамат тураһында бер ни ҙә белмәй. Миңә атай менән әсәйем, яңылыш ысҡындыра күрмә, тинеләр. Мин Сөмбөл апайымды шундай һағындым. Хәҙер был күлдәкте һәр ваҡыт янымa ҡуям,– тип күлдәкте рәтләп һуҙып һалды ла юрған менән ҡаплап ҡуйҙы. – Бына шулай, – тип башын мендәргә һалды.

Был күренеш Байрасты телһеҙ ҡалдырҙы, тамаҡ төбөнә төйөр ултырҙы.

«Йә, Хоҙайым, аҡылдан яҙҙыра был сабыйҙы. Ҡайҙа һин, Сөмбөл? Тиҙерәк әйләнеп ҡайтһаң ине...»

Байрас энеһен йыуатыр һүҙҙәр тапманы, уның башынан һыйпаны. Энеһенең ғазапланыуын күреп, ниндәй көслө Байрас та күҙ йәштәрен тыя алманы. Ҡасандыр Сөмбөл күҙ йәштәре түккән мендәр өҫтөнә уның да күҙ йәштәре тамды.

Байрас нисә тапҡыр, адрес һорап, Сөмбөлдөң әсәһе янына барҙы. Сания апай:

– Сөмбөлдөң адресын бирмәйем, һорама ла, – тип башын ғына һелкене. Аптырағас, әсәһе Сөмбөлгә Байрастың уны эҙләүе хаҡында хат яҙҙы. Сөмбөлдән: «Эҙләмәһен. Адресымды бирмә. Әсәй, башҡа миңә улар тураһында бер нәмә лә яҙма, ишеткем дә килмәй. Онотоға ирек бир, яраларыма тоҙ һалма», – тигән яуап килде.

Сания апай был хатты Байрасҡа уҡытты. Егет иһә:

– Мин көтәм әле, апай. Һине лә яңғыҙыңды ташламайым, – тип яйы сыҡкан һайын килеп йөрөнө.

Яңы йыл байрамына хат менән бергә Азаматтың ике фотоһы килде. Фотоның береһе Әлфискә тип аталған, артына «Тыуған көнөң менән, ағайым!» тип яҙылған. Хатта «Әлфискә – апаһынан» тигән тыуған көн бүләгенең картуф баҙында икәнлеге әйтелгән ине. Сөмбөл әсәһенән фото менән ошо хатты Әлфискә тапшырыуын үтенгән.

Сания апайҙы байрам менән ҡотларға тип, Байрас та килде. Уның күҙҙәренән үк Сөмбөл тураһында ниндәй ҙә булһа һүҙ ишеткеһе килгәне аңлашыла ине. Сания апай түҙмәне, хатты Байрасҡа һуҙҙы. Ул, фотоны күргәс, бик һөйөндө, тиҙерәк әсәләрен, Әлфисте шатландырырға ашыҡты.

Әлфистең тыуған көнөнә тип картуф баҙына йәшерелгән тартманы асыуға, бөтә өйгә алма эҫе таралды. Тартманан хат менән күлдәк сыҡҡас, Әлфистең шатлығы эсенә һыйманы. Апаһы уның тыуған көнөн онотмаған бит! Азаматтың фотоһын ҡулдан-ҡулға, илай-илай, үбә-үбә йөрөттөләр.

Яҙғы сәсеү ваҡыты етте. Байрас Сания апаһының йорт-ҡураһын ҡараштырып, картуфын ултыртышып китте. Әйткәнде лә көтмәйенсә, һәр эште үҙе белеп эшләне. Көҙөн иһә бесәнен, утынын әҙерләне, бөтә келәтте бойҙай менән тултырҙы.

Сания апай Сөмбөлдән тағы хат алды. Конверт эсендә хат менән Сөмбөлдөң фотоһо ла бар ине. Сания апай күҙҙәре талғансы ҡыҙының фотоһын ҡараны, ҡабат-ҡабат хатты уҡыны. Бындай шатлыҡты эстә йәшереп һаҡлап буламы ни – кис менән Байрас килеүгә, уның алдына Сөмбөлдөң хатын, фотоһын ҡуйҙы.

– Сөмбөл юғалмаҫ, Алла теләһә, уҡып бөтөрөүгә ҡайтыр, – тип һөйләнә-һөйләнә, сәй әҙерләй башланы.

Байрас фотонан күҙен ала алманы. Сөмбөл шундай матур, сейә төҫлө күлдәге ҡара сәсенә бик килешә, бәхетле булыуы йылмайыуынан һиҙелә ине.

«Уҡыған кеше янында наҙан шофер булып йөрөп булмаҫ»,– тип, Байрас шул уҡ көҙҙө Силәбе инженерҙар әҙерләү институтының ситтән тороп уҡыу бүлегенә уҡырға инде. Уҡыны ла, эшләне лә. Хәҙер инде Сөмбөлдөң тиҙ генә ҡайтмаясағы көн кеүек асыҡ ине. Ул уның ҡайҙа икәнлеген белһә лә, барманы. Сөмбөл ҡайтыуға, мин уға тиң булырға тейеш, тип сабыр ғына көтөргә булды.

Әлфистең сәскәләре көҙөн баҡса тултырып сәскә атты, ул бөтәһен апаһы ҡушҡанса эшләне. Баҡсаға Фәриҙәнең ҡулын да тыҡтырманы, үҙе ултыртты, үҙе алды. Апаһы ҡышын ҡайтһа, һыйлармын тип, алмаларҙы төрөп, тартмаға тултырҙы.

Булат та был баҡсаны бик ярата, буш ваҡыты булған һайын, ҡарт алмағас төбөндә ултыра ине. Һуңғы айҙарҙа ул гел моңһоу йөрөнө, бер көндө төшөндә улын күрҙе. Улы бейек ҡаяға менгән дә, төшә алмайынса, атай-әсәй тип үҙәк өҙҙөрөп илай, Булат нисек үрелһә лә, буйы етмәй, йыуата ла алмай.

«Улым, улым, илама»,– тип уянып китте.

Бына шунан бирле ул үҙ-үҙенә урын тапмай, эсе боша, улын һағына башланы. Фәриҙә бала табыр ҙа барыһы ла онотолор, тип үҙен тынысландырырға тырышты. Ләкин, ни эшләптер, Фәриҙә ауырға уҙманы.

– Фәриҙә, бала кәрәк беҙгә. Өйләнешкәнгә ике йыл бит, берәй малай алып

ҡайтып бирер инең, – тип Булат бер нисә тапҡыр әйтеп ҡараны.

Фәриҙә генә:

– Булыр әле, беҙ йәш бит, ҡайҙа ашығырға? Бүлмә бәләкәй генә, – тип еңелсә яуап менән ҡотолдо.

Фәриҙәнең кәүҙәһе төҙ, матур, ҡултыҡлашып барғанда уға бик күп егеттәр боролоп ҡарай. Булат быға хәҙер һөйөнмәне лә, көйөнмәне лә, ҡолағынан бала илаған тауыш китмәне. Әгәр атаһы хаҡлы булһа, барлыҡ ҡылған ғәмәлдәре үкенескә ҡалһа... Фәриҙәгә өйләнәм тип, улын, Сөмбөлдөң йәшлеген ҡорбан итте. Теләгенә иреште, уның ҡатынына күптәр ҡыҙығып ҡарай, бәлки, Булаттан көнләшәләрҙер ҙә, тик уның ғына иҫе китмәй. Һәр ҡайтҡан һайын, атаһының ни әйтергә теләгәнен күҙҙәренән күрә, үҙенең һүҙ башларға ҡыйыулығы етмәй. Шулай ҙа атаһы түҙмәне:

– Улым, нимә булды һиңә? Елкәләрең һалынып төшкән, башың түбән эйелгән, ҡәҙерле әйберен юғалтҡан кешеләй, ергә ҡарап йөрөйһөң. Инде теләгеңә ирештең, хыялдарың тормошҡа ашты, тағы нимә етмәй һуң? – тип һорап ҡуйҙы.

– Атай, йоҡларға ятһам, ҡолағыма бала илаған тауыш ишетелә, улымды бик һағынам. Һин хаҡлы булғанһың, ниҙәр юғалтҡанымды һуң аңланым...

* * *

Сөмбөл, йәй буйы апаһы янында эшләп, тәжрибә туплап, дүртенсе курсҡа килде. Уҡыуҙан һуң репетицияға йүгерҙе. Ул татар донъяһы йондоҙҙары – Илһам Шакиров, Әлфиә Афзалова йырҙарын бик яратып башҡарҙы. Башҡорт, татар концерттары килһә, берейһен ҡалдырмай уларға йөрөнө. Үҙе лә йыш ҡына концерттарҙа ҡатнашты, үҙенә күрә бәләкәй генә йондоҙға әйләнде. Уның репертуары байыны, микрофон менән йырларға өйрәнде, йылдар уның тауышына көслө тембр өҫтәне. Бишенсе курсты бөтөргәс, ансамбль Үзбәкстан буйлап гастролгә сығып китте. Сөмбөл, ауылға ҡайтырға юллыҡ, күстәнәстәр, бүләктәр алырлыҡ аҡса булыр тип, уларға ҡушылды. Ғосман уның фотоһын ҙурайтып, афиша яһатты, өҫтөнә ҙур хәрефтәр менән СӨМБӨЛ тип яҙҙырҙы. Төрлө мөйөшкә һибелгән татар, башҡорт халҡы уларҙың концерттарын һағынып көтөп алды. Сөмбөл йырлағанда, улар тыуған яҡтарына ҡайтып килгәндәй булды, яҡындарын һағынып иланы. Йырсы ҡыҙҙың даны йыраҡтарға таралды. Ташкент, Фирғәнә, Сәмәрҡәнд ҡалаларында уларға, тамашасылар һорауы буйынса, өҫтәмә концерттар бирергә тура килде. Сөмбөл сит ерҙәге татар менән башҡорттоң күплегенә аптыраны. «Мине бында әсе яҙмыш елдәре ташланы, былар нисек килеп эләккән?» – тип уйланы.

Улар ай буйы ил гиҙеп ҡайттылар. Аҡса Сөмбөл уйлағандан да күберәк йыйылды.

– Ғаилә кассаһына минең дә әҙерәк өлөшөм инһен, – тип йылмайып, эшләп алған аҡсаһын ағаһы алдына ҡуйҙы.

– Кәрәкмәй, үҫкәнем, үҙеңә булһын.

– Мин һеҙгә бурыслы, ағай, әгәр ҡылған яҡшылыҡтарығыҙҙы аҡса менән генә бәхилләтә алһам, күпме булһа ла түләр инем.

Ағаһы менән апаһы бер-берейһенә серле ҡарап ҡуйҙы.

– Сөмбөл, беҙ һинән бер нәмә һорамаҡсы инек.

– Һеҙ әллә ниндәй бөгөн, мин юҡта ниҙер булмағандыр бит? – тип тиҙерәк улын ҡулына алды Сөмбөл.

– Сөмбөл, һин әле йәш, тормошоң алда, кейәүгә сығырһың, тағы бала табырһың, бәлки, Азаматты беҙгә ҡалдырырһың? – тине ағаһы. Үҙе тирләп сыҡты, ҡулдарын ыуҙы, ҡайҙа ҡарарға белмәне. – Беҙ уны уҡытырбыҙ, ҙур кеше итербеҙ, бөтә йыйған байлығыбыҙ уға ҡалыр.

Буласаҡ табип был һүҙҙәрҙән аптырап ҡалһа ла, үҙен бик тиҙ ҡулға алды.

– Әйҙә, улым, йоҡларға кәрәк, – тип улын икенсе ҡатҡа үҙ бүлмәһенә алып менеп китте.

Ул бүлмәһенән төшкәндә, ағаһы менән апаһы һаман шул килеш уйға батып ултыра ине.

Сөмбөл һалмаҡ ҡына һүҙ башланы.

– Әгәр ҡылған яҡшылыҡтарығыҙ өсөн улымды һорайһығыҙ икән, башта минең йәнемде алығыҙ. Мин инде ике тапҡыр үлемдән ҡалған кеше, өсөнсөһөн күтәрә алмам. Мин һеҙгә ниҙәр кисергәнемде һөйләмәнем. Мине йәлләүегеҙҙе лә теләмәйем. Балам ҡарында саҡта ике тапҡыр үлем менән күҙгә-күҙ осраштым, мине ҡараусы ҡарт табип «яраларың төҙәлер, тик башҡа балаң ғына булмаç, берәй мөғжизә генә ярҙам итмәһә инде» тине.

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты, был ваҡытта өсөһөнә лә бик ауыр ине.

– Баламды һағынып һарғайырмын, ниңә кәрәк миңә ул диплом, үҙе яралы кеше кемгә ярҙам итә алһын? Тыуған яғыма ҡайтҡас, баламды һатып белем алдым, тиерменме? Уны бит олатай-өләсәләре көтә. Нисә йыл һеҙ минең өсөн атай ҙа, әсәй ҙә булдығыҙ, Азамат та һеҙгә ейәнегеҙ кеүектер, тип уйлайым. Мин һеҙҙең хәйер-фатиханан башҡа китергә йыйынмайым. Әгәр яҡшылыҡтарығыҙҙың башҡа баһаһы юҡ икән, миңә бер йотом ағыу етә, бирегеҙ ағыу, унан алырһығыҙ баламды, – тип һүҙен тамамланы Сөмбөл, ауыр һулап.

– Юҡ, балам, улай тимә, зинһар, кисер беҙҙе, кисер беҙ ҡарт йүләрҙәрҙе, – тип Ғәлимә апаһы Сөмбөл алдына килеп теҙләнде. Үҙе иланы, үҙе Сөмбөлдө ҡосаҡланы. – Һин беҙҙән китһәң, нисек йәшәрбеҙ?

Улар ҡосаҡлашып бик оҙаҡ иланылар, ағаһы ла күҙен аҫҡа йәшерҙе.

Ниһайәт, Сөмбөл телгә килде.

– Мин бит уны һеҙҙән бөтөнләйгә алып китмәйем. Әллә мине һеҙҙең ҡартлығығыҙ тураһында уйламай тиһегеҙме? Мин һеҙҙең алда бурыслы.

– Һин беҙҙең хаҡта уйлайһыңмы? Ысынлапмы?

– Мәктәпте бөтөргәс, мин уны бында уҡырға килтерермен. Уҡыр, эшләр, ҡартлыҡ көнөгөҙҙә янығыҙҙа булыр, тик яҡшы кеше генә булып үҫһен. Мин шулай уйлап йөрөй инем, ағай, һеҙ бөгөн мине шаҡ ҡатырҙығыҙ. Һеҙҙән былдай һүҙҙәр көтмәгән инем.

– Кисер беҙҙе, Сөмбөл, беҙ һәр ваҡыт һеҙҙе көтөп йәшәрбеҙ. Был һүҙҙәребеҙ менән рәнйеткән булһаҡ, зинһар, ғәфү ит, – тип ағаһы Сөмбөлдө ҡосаҡлап алды.

– Мин әйткән һүҙемдә торам, ағай, һеҙҙең ҡартлығығыҙ Азамат ҡулында булыр. Һеҙ уны бик иркәләйһегеҙ, беҙҙә уға иркәләүҙәр эләкмәç, ул ысын ир булып үҫергә тейеш, уның нәçеле бик яҡшы, сибәр кешеләр, – тип йылмайҙы.

Был һөйләшеү ике яҡҡа ла еңеллек килтерҙе, улар бер-береһенә тағы ла яҡынайҙы.

– Һин иç киткес яҡшы кеше, Сөмбөл, беҙ һеҙҙе бик һағынырбыҙ инде.

– Һағынһағыҙ, беҙгә йышыраҡ ҡунаҡҡа ҡайтырһығыҙ. Әле бит тағы ярты йыл бар, ә мин иртәгә китеүсе кеүек һөйләшәм. Әйтеүе генә еңел: өйгә ҡайтмағанға алты йыл. Мин бит хәҙер бөтөнләй икенсе кеше, киткәндә бала ғына инем...

– Ә хәҙер һин тирә-яҡтағы иң сибәр ҡатын, үҙең әле юғары белемле табип та. Сөмбөл, асыуланмаһаң, бер һорау бирәйем әле. Улыңдың атаһы, кире ҡайт, тип килһә, нишләрһең?

– Ул инде өйләнгән булырға тейеш. Нисек кенә булмаһын, кирегә юл юҡ. Миндә уның мәңгелек иҫтәлеге ҡалды, ул миңә шундай бала бүләк итте – мин уға үпкәләмәйем, үткәнемә үкенмәйем. Мин яңы тормош башларға йыйынам...

Улар шулай таң атҡансы һөйләшеп ултырҙы.

* * *

Сөмбөл әсәһенә үҙенең фотоларын, афишаларын ебәрҙе, һабантуйға матур күлдәк-яулыҡ һалды. Әлфисте лә онотманы, уға тип күлдәк ебәрҙе.

Посылканы алғас, әсәһенең шатлығы эсенә һыйманы. Сөмбөлдөң афишаһы шундай матур, һоҡланып туя алмаҫһың. Уның ҡыҙы шундай булғанғамы? «Был афишаны Байрасҡа ла күрһәтермен әле, ул меҫкен һаман Сөмбөлдө көтә бит...»

Байрас – баһадир инде хәҙер, нисә йыл көрәшеп, һабантуй батыры булды. Ундай сибәр егет тирә-яҡта юҡ, күп ҡыҙҙар уның тураһында хыялланалыр, ул ғына береһен дә күрмәй. Үҙен инженер итеп ҡуйҙылар, киләһе йылға уҡыуын бөтөрә. Бына бит ул мөхәббәт кешене нишләтә! Сөмбөл уҡый тип, уҡырға инде, Сөмбөл йырлаһа, мин көрәшәм тип, көрәшкә сыҡты – барыһы ла мөхәббәт хаҡына. Мөхәббәт уны үрҙәргә үрләтте. Улар бер-береһенән йыраҡ булһалар ҙа, икеһе лә был тормошта кәрәкле, уҡымышлы кешеләр булырға теләне.

Сания апай янына Байрас, күбеһенсә, Сөмбөлдөң хаттарын уҡырға килә ине. Уның ни әйтергә теләгәнен Сания апай ялбарыулы күҙ ҡарашынан уҡ аңлай. Бөгөн дә егет килеп инеүгә:

– Уф, Хоҙай биргән бит һиңә күҙҙәрҙе, йәнеңде сығарып һалырһың. Бына кил, ҡара, – тип көлөп, түр яҡтың ишеген асты. Сания апай Сөмбөлдөң афишаһын оло рамға ҡуйған ине. Байрас үҙенең ҙур кәүҙәһе, киң елкәләре менән бөтә ишекте ҡапланы. Ул бик оҙаҡ ҡына афишаға ҡарап торҙо, унан әкрен генә яҡын килеп, фотолағы Сөмбөлдөң ирендәрен, сәстәрен бармаҡтары менән һыйпап ҡараны, әйтерһең, ул һүрәтте түгел, Сөмбөлдө иркәләй ине. Байрас күҙҙәрен йомдо, ауыр итеп һулап ҡуйҙы. Сания апаһының ҡарап тороуын һиҙгәс, уңайһыҙланып, тышҡа уҡ сығып китте.

– Әйҙә, кер инде, сәй эсәйек, – тип Сания апай уның артынан сыҡты.

– Сания апай, әгәр Сөмбөл кейәүгә сыға ҡалһа, мин нисек йәшәрмен? Мин бит уны ғына көтөп, өмөтләнеп йәшәйем, башҡаса булыр тип уйларға ла ҡурҡам.

Сания апай, йылмайып:

– Бер йылдан ҡайтам, тигән, бына, хатын уҡы, шунһыҙ барыбер китмәҫһең, – тине.

Байрастың йөҙө яҡтырып китте, матур итеп көлөп ҡуйҙы. Уның күҙҙәре: «Һин генә минең хәлемде аңлайһың, Сания апай»,– ти ине кеүек.

* * *

Юғары уҡыу йорттарында уҡыуҙар тамамланды. Сөмбөлдөң сығарылыш кисәһе килеп етте. Диңгеҙ төҫөндәге туҡыманан бик матур оҙон күлдәк тектеләр. Уҡыуын тамамлауын ҡотлап, ағаһы менән апаһы алтын сылбыр һәм алтын беләҙек бүләк итте. Улар, дүртәүләшеп, кейенеп-яһанып, институттың ҙур залына киттеләр. Зал шығырым тулы ине. Ата-әсә балаларының шатлығын уртаҡлашырға тип килгән.

Кисәге студенттар бөгөн юғары белемле белгес исемен аласаҡ. Өс ҡыҙыл дипломдың икеһе Сөмбөл менән Исмаилға биреләсәк. Шатлыҡтан Сөмбөлдөң күҙҙәре йәшләнде, ул янында торған Исмаилға ҡарап йылмайҙы. Исмаил да йылмайҙы, уның бәләкәй ҡулдарын үҙ усына алды.

Бына ошо ҡыҙыл ҡатырға эсендә – алты йыл ғүмер. Был алты йылда ниҙәр генә булманы: һөйөнөстәр, көйөнөстәр, йоҡоһоҙ үткән төндәр, бәхетле мәлдәр...

Сөмбөл диплом алғанда әсәһен иҫкә төшөрҙө. Их, хәҙер әсәһе янында булһа, ҡыҙы өсөн нисек һөйөнөр ине! Уның бөтә донъяны яңғыратып: «Килегеҙ, күрегеҙ, мин юғалманым, ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡтым!» – тип ҡысҡырғыһы килде.

Диплом тапшырыу тантанаһынан һуң Сөмбөл ансамбль менән сығыш яһаны. Уҡытыусыларына рәхмәт йөҙөнән, уларға бағышлап иң матур йырҙарын башҡарҙы. Һуңғы йыры аҙағында кәрзин менән сәскәләр күтәреп сәхнәгә Исмаил менде. Сәскәләрҙе Сөмбөлдөң аяҡ аҫтына ҡуйҙы ла бер һүҙ әйтмәй төшөп китте. Ғәлимә апай артында ултырған берәү:

– Меҫкен, алты йыл Сөмбөлдө бөркөт кеүек һаҡланы. Кем өсөн һаҡланы? Хәҙер нишләр? – тип бышылданы.

Эйе, Исмаил менән Сөмбөлгә хушлашыр ваҡыт еткән ине.

Улар, икәү, дуҫтарынан айырылып, баҡса буйлап китте, тирә-яҡ сәскәгә күмелеп ултыра, төнгө һауала уларҙың хуш еҫе аңҡый, сихри бер донъя. Исмаил һүҙен нисек башлап ебәрергә белмәй аптыраны, Сөмбөл дә бөгөн һүҙһеҙ ине. Улар алты йыл буйы бергә йөрөнө, баҡһаң, уҡыуҙан башҡа бер ни тураһында һөйләшкәндәре булмаған икән. Исмаилдың алты йыл буйы күңел түрендә әйтелмәй һаҡланған һүҙҙәре бик күп, ул уны бөгөн әйтергә тейеш. Улар фонтан янындағы эскәмйәгә килеп ултырҙылар.

– Сөмбөл, һин үҙең аңлайһыңдыр, беҙ бөгөн мәңгегә айырылашабыҙ. Беҙ башҡа бер ҡасан осрашмаясаҡбыҙ. Рөхсәт итһәң, мин һиңә бик күп нәмәләр әйтер инем.

Сөмбөл, йылмайып, уның күҙҙәренә ҡараны.

– Әйт, Исмаил, әйт, йөрәгеңдә ҡалмаһын, барыһын әйт.

– Һин беренсе тапҡыр уҡырға килгән көнөңдө хәтерләйһеңме? Мин бер кем менән аралашмай инем. Һин килеп ингәс, аяҡтарым үҙенән-үҙе һинең янға килтереп ултыртты. Дин, шәриғәт буйынса, сит ҡатын-ҡыҙға ҡағылырға ярамай. Мин һине алты йыл үҙемдән, башҡаларҙан һаҡланым. Һиңә ғашиҡ булыусылар күп ине, һин уларҙы яҡын килтермәнең. Минән егеттәр «телһеҙ мүкләк, шәүлә» тип көлдөләр. Бәлки, һин дә шулай уйлағанһыңдыр. Әгәр күҙҙәремә ҡараһаң, һине нисек яратыуымды күрер инең. Ғашиҡ икәнлегемде белһәң, башҡаларҙы ҡыуған кеүек, мине лә кире ҡағырһың, дуҫлығыбыҙҙы өҙөрһөң тип, хистәремде тырышып йәшерҙем. Һин мине дуҫың тип һананың, ә минең һиңә ғашиҡ бер ир икәнлегемде башыңа ла килтермәнең. Һинең йәнәшәңдә булыу, һине башҡаларҙан яҡлау, һине яратыу минең өсөн ҙур бәхет ине. Көн етһә, тиҙерәк һинең яныңа ашығам, эйелгәндә сәстәрең битемә тейеп китһә, үҙемде утта янғандай хис итәм, һине шашып иркәләүҙән үҙемде көскә тыйып ҡалам. Һиңә берәйһе ҡағылһа, мин уны шунда уҡ туҡмап ташлаған булыр инем. Һин – минең фәрештәм... Кешеләр, был донъяға һыйыша алмай, һуғышалар, ниҙер бүлешәләр, ҡан ҡоялар. Әгәр минең илем бындай гөлбаҡса булһа, иртәләр шулай тыныс булһа, мин һиңә тәҡдим яһап ҡарар инем. Һине бәхетле итер өсөн мин әллә ниҙәр эшләргә әҙермен. Ҡыҙғаныс, мин һиңә бер ни бирә алмайым, илемдә һуғыш, ҡан, емерелгән ҡалалар. Йүнле больницалар юҡ. Һинең шикелле гүзәл заттар ундай тормошта йәшәргә тейеш түгел!

Сөмбөлдөң йөрәге һыҡрап ҡуйҙы, ул да уның кеүек ғазап сиккән, ә ҡыҙ уны аңламаған. Сөмбөл Исмаил ҡаршыһына килеп баҫты. Ҡуйы ҡара бөҙрә сәстәр, ҡуйы ҡара һаҡал, ҡуйы ҡара керпектәр һәм матур, асыҡ көрән күҙҙәр... Сөмбөл, Исмаилды мәңгегә иҫендә ҡалдырырға теләгәндәй, бик оҙаҡлап ҡарап торҙо.

Хушлашыу сәғәттәре яҡынлашҡандан-яҡынлашты. Икеһенең дә күҙҙәре йәшләнде, айырылышыр ваҡыт етеүен бөтә күңелдәре менән тойҙолар. Сөмбөл уның сәстәрен һыйпаны, тоҙло күҙ йәштәре ҡуйы һаҡал араһына инеп юғалды.

– Кәрәкмәй, ғазапланма, – тип Сөмбөл Исмаилдың башын күкрәгенә ҡыҫты.
– Ила, оялма. Мөхәббәт – ул ғазап. Мин уның уттарында бер яндым. Уның дауаһы – ваҡыт, – тине, уның битен ҡулдары менән тотоп, күҙҙәренә ҡараны. – Хоҙай

һине үҙе һаҡлаһын. Һуғыштар бөтөр, илдәр араһында юлдар асылыр, һин тағы килерһең. Ун йылдан һуң беренсе июль көндө беҙ һинең менән ошонда осрашырбыҙ, иҫеңдә тот. Мин һине көтөрмөн. Һин – минең иң яҡын дуҫым, – тип күҙҙәренән үпте.

Исмаилға ауыр ине. Улар бит каникулға түгел, ғүмерлеккә айырыла. Сөмбөлдөң устарын ҡайнар күҙ йәше яндырҙы.

– Минең бәләкәй генә кәнәри ҡошсоғом, Хоҙайҙан һиңә бәхет һорармын.

Баҡсала әкрен генә һыҙылып таң атты. Ҡоштар, таңды сәләмләп, уҙышмаҡтан йыр һуҙҙылар. Улар икеһе лә, ошо гөлбаҡсаны иҫтәрендә ҡалдырырға теләп, тирә-яҡты күҙәтте. Исмаилға был матурлыҡты, тыныслыҡты, Сөмбөлдө ташлап, емерек Иран харабаларына ҡайтыу бик ауыр ине.

Был баҡсаға ун йыл үткәс, һөйләшкән ваҡытҡа Сөмбөл килер. Өс көн, өс төн көтөр ул үҙенең дуҫын, ләкин ҡара бөркөтө генә килмәҫ. Һуғыш бөркөттәрҙе лә аямай шул.

*Бөркөттәр оса һауаларҙа,*  
*Оялары текә ҡаяларҙа.*  
*Дуҫҡайыма барып,*  
*Сәскә һалыр инем –*  
*Ҡәберҙәре ҡайҙарҙа?..*

Сөмбөл дә тыуған яҡтарына ҡайтырға йыйынды. Аэропортҡа ике оло сумаҙан, сумкалар менән килде. Апаһы юл буйы илап барҙы, Азамат уның күҙ йәштәрен һөрттө:

– Ҙур әсәй, илама, мин һиңә хат яҙырмын, – тип йыуатты.

Сөмбөл үҙенең алты йыл элек, бер нәмәһеҙ, шул баланы күтәреп килеүен иҫенә төшөрҙө. Ул ваҡытта ағалары үҙ ҡанаттары аҫтына һыйындырмаһа, яңғыҙ башы ҡайҙа барып төртөлгән булыр ине икән? Хоҙай уға йөҙө менән боролдо, етәр был балаға ғазапланырға, тип ҡыҙғанғандыр, күрәһең.

Август уртаһы. Бесән ваҡыты. Әсәһе бесәндәлер, моғайын.

Самолет уларҙы тыуған яҡҡа, Урал тауҙары аша Силәбе ҡалаһына, килтереп төшөрҙө. Ул автобус белешеп торманы, аэропорт янында тороусы таксиҙарҙың береһе менән ауылына ҡайтып китте. Тыуған ауылына яҡынайған һайын, ныҒыраҡ тулҡынланды, әсәһе нисек ҡаршылар, тип уйланды.

– Һеҙҙә ҡапҡа асып ҡаршылайҙар, ҡысҡыртып тауыш бирәйемме?– тине таксист.

– Кәрәкмәҫ, улар беҙҙе көтмәйҙәр, – тип Сөмбөл аҡсаһын түләне, машинанан сыҡты. Әйберҙәрҙе ҡапҡа төбөнә бушатҡас, таксист китеп барҙы.

Сөмбөл инергә ашыҡманы, тирә-яғына ҡараны, тыуған ауылы һауаһын һуланы. Азамат, әсәһенең итәгенә тотоноп, таныш булмаған ерҙе күҙәтте.

Киң эшләпәле берәү ишек алды уртаһында торған йөк машинаһынан һарай башына бесән ата ине. Ул кинәт артҡа боролоп ҡараны. Уларҙы күргәс, эшенән туҡтап ҡалды, бер аҙ ҡарап торҙо ла, һәнәген ҡаҙап, ергә һикерҙе һәм әкрен аҙымдар менән уларға табан килә башланы. Ул эшләпәһен һалғас ҡына, Сөмбөл, уны танып, телһеҙ ҡалды. «Байрас, һин бында ни эшләп йөрөйһөң?» – тиәһе килде, теле әйләнмәне, беренсе тапҡыр күргәндәй, ҡарап тик торҙо. Азамат, аптырап, бер әсәһенә, бер ҡаршыһында торған ҙур кәүҙәле ағайға ҡараны. Ағай өндәшмәй, уның әсәһенә ҡарап тора, ул әкрен генә күҙ ҡарашын Азаматҡа күсерҙе лә уның алдына сүгәләне:

– Азамат, ҡайттыңмы, кил миңә, – тип ҡулын һуҙҙы.

Азамат ҡаршы килмәне, ҡыҙыҡһыныулы күҙҙәре менән Байрасҡа ҡарап, көтмәгәндә:

– Һин минең атайыммы? – тине.
Сөмбөл улының һүҙҙәренән һиҫкәнеп китте:
– Улым.
Байрас уға әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне, «өндәшмә» тигәнде аңлатып, ҡулын күтәрҙе, бер ҡулы менән күкрәгенә баланы ҡыҫты.
– Эйе, улым, мин һинең атайың.
Сөмбөл был һүҙҙәрҙе ишетеп, баҫҡан урынында ҡатып ҡалды.
– Байрас!
Байрас, «Өндәшмә!» тигәндәй, ҡаты итеп Сөмбөлдөң ҡулын ҡыҫты.
– Мин һине шундай һағындым, улым, – тип баланы ҡулына алды. – Әсәйеңде үбеп алайыҡ әле, мин уны ла бик һағындым, – тине лә, Сөмбөлдө күкрәгенә ҡыҫып, маңлайынан үпте.
Азамат бер ҡулы менән әсәһен ҡосаҡланы ла матур итеп көлөп ебәрҙе. Ул ике яҡтан икеһен ҡосаҡлап, суп-суп үбеп алды.
– Атайым, мин һине бик һағындым. Ә был ҙур машина кемдеке? Минең машинаға ултырғым килә.
– Байрас, ни эшләйһең һин? Ул бит бала, улай ярамай, – тине Сөмбөл, күҙ йәштәренә төйөлөп.
– Ярай. Мин һеҙҙе алты йыл көттөм, – тине лә, боролоп, Азамат менән машинаға табан китте. – Сания апай, ҡунаҡтар ҡайтты!
– Был ҡыҙыу эш ваҡытында ниндәй ҡунаҡтар? – тип һөйләнә-һөйләнә, Сөмбөлдөң әсәһе килеп сыҡты.
Ҡапҡа төбөндә, сумаҙандар араһында әле һаман зиһенен йыя алмай баҫып торған Сөмбөл, әсәһен күргәс, илап ебәрҙе. Әллә аптырауҙан, әллә әсәһен бик һағыныуын аңлауҙан:
– Әсәй, әсәйем, – тип үкһене.
– Сөмбөл балаҡайым, һин түгелме һуң? – тип әсәһе ҡыҙын ҡосаҡлап алды. – Бала ҡайҙа?
– Ана, Байрас янында.
Әсәһе ейәненә табан йүгерҙе, ике арала ни эшләргә белмәне.
– Әйҙә, балам, ни эшләп һаман унда тораһың?
Байрас өндәшмәй генә сумаҙандарҙы ишек төбөнә килтереп ҡуйҙы.
– Һеҙ өйгә инегеҙ, мин бесәнде үҙем атып бөтөрөрмөн. Ә һин, улым, шунда ултырып тор, ана, рулен борғола.
Бер йөк бесәнде һарай башына нисек тултырып бөтөргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды, йөрәге, шатланып, «ул ҡайтты, ҡайтты» тип типте.
– Улым, эш бөттө. Әйҙә, икәү мунса инеп сығайыҡ, – тип Азаматты үҙе менән мунсаға алып китте. Йән тартмаһа, ҡан тарта – бала унан ситһенеп торманы, һөйөндө, көлдө. Уның көлөүҙәре әсәһенекенә, күҙҙәре атаһыныҡына оҡшаған ине.
– Атай, ә һин мине машинаға ултыртып йөрөтөрһөңмө? Минең ҙур машинала бер ҙә йөрөгәнем юҡ, – тине Азамат, Байрастың муйынынан ҡосаҡлап.
– Йөрөтәм, әлбиттә, иртәгә үк.
– Һин бөгөн кем менән йоҡлайһың?
– Һинең менән инде, улым.
Улар шулай һөйләшә-һөйләшә йыуынды.
Сания апай ҡыҙы менән ейәне ҡайтыу шатлығынан иланы ла, көлдө лә. Ашыға-ашыға өҫтәл әҙерләне. Сөмбөл әсәһенә булышып йөрөһә лә, уйҙары ҡапҡа төбөндә ине.
– Әсәй, миңә ни эшләргә? Ниңә балаға «мин һинең атайың» тине ул? Мин хәҙер нисек аңлатайым, башым да эшләмәй. Байрас бында ни эшләп йөрөй?

– Һин, балам, ныҡлап уйла, ундай егетте көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Байрас һине нисә йыл көттө, башта мин дә ҡаршы килдем, ә ул ана шулай үҙ өйөнә ҡайтҡан кеүек килә, бар эште үҙе белеп эшләй. Һинең хаттарҙы уҡып һөйөнә. Ул һине бик ярата, ҡыҙым, бәхетеңә ҡаршы килмә.

– Ни һөйләйһең һин, әсәй? Кеше ни тиер, улар бит бер туғандар.

– Кешеләрме? Бындай егет аҫылын кире ҡаҡһаң, йүләр тиерҙәр.

Азамат менән Байрас мунсанан ҡайттылар. Байрас ингәс, беҙ юҡта ни һөйләштегеҙ тигәндәй, Сөмбөлгә ҡарап ҡуйҙы. Сөмбөл нисектер ҡаушап ҡалған, үҙен сит кешеләр араһында кеүек тота ине. Улар бергәләшеп сәй эстеләр. Азамат:

– Мин атай менән йоҡлайым, – тигәс, Сөмбөл һиҫкәнеп китте. Ул ауыҙын асырға өлгөргәнсе, Байрас:

– Сания апай, беҙ улым менән теге бүлмәгә инеп ятайыҡ, – тип Азаматты үҙе менән алып инеп китте.

Сөмбөл, аптырап, ни әйтергә белмәй, әсәһенә ҡараны.

– Ҡурҡма, ҡыҙым, Байрас нишләгәнен яҡшы аңлай.

Ул кисте Сөмбөл әсәһе менән аш бүлмәһендә бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы, таң алдынан ғына йоҡларға яттылар. Иртән ул уянғанда, Азамат менән Байрас урындарында юҡ ине. Сөмбөл йүгереп ишек алдына сыҡты. Әсәһе, ҡыҙының ҡурҡынған йөҙөн күреп:

– Байрас Азаматты үҙе менән алып китте, оҙаҡламай ҡайтырҙар, – тип тынысландырырға ашыҡты.

Төшкө аш ваҡыты тирәләрендә ҡапҡа төбөнә өр-яңы ҡыҙыл «Жигули» машинаһы килеп туҡтаны. Машинанан ҡара костюм-салбар кейгән, зәңгәр күлдәгенә килешле галстук таҡҡан Байрас төштө. Ул был костюмда иҫ китмәле сибәр һәм дәрәжәле егет аҫылы ине. Был инде майканан йөрөгән оҙон сәсле ябай ғына шофер түгел ине шул. Яңы ғына мунсанан сыҡҡан Сөмбөл оҙон сәстәрен елдә киптереп маташа ине. Уларҙың күҙ ҡараштары осрашты. Азамат әсәһенә ашығаашыға үҙенең күргәндәрен һөйләй, тик улының һүҙҙәре генә Сөмбөлдөң башына кермәй. Байрас уға яҡыныраҡ килеп баҫты, ул уны ҡосаҡлап алыр кеүек ине, ләкин үҙенең хистәрен тыйып ҡала алды.

– Беҙгә икәүҙән-икәү генә һөйләшергә кәрәк. Мин эштән һуң ҡайтырмын, – тине лә боролоп сығып китте.

Кис баланы йоҡлатҡас, Байрас Сөмбөлдө йылға буйына саҡырҙы. Улар әкрен аҙымдар менән йылға буйына төштө. Сөмбөлдөң бала сағы ошо йылға буйында, әрәмәлектә үтте. Ҡышын малайҙар менән кәшәкә һуҡтылар, йәйен күлдәк итәге менән балыҡ һөҙҙөләр. Әрәмәлек киңәйеп киткән, йылға ғына элек нисек аҡһа, хәҙер ҙә тыныс ҡына, киске тынлыҡты боҙоп, сылтыр-сылтыр аға. Байрас әкрен генә Сөмбөлдөң сәс толомдарын ҡулына алды. Сөмбөл иһә ҡасандыр дуҫы, туғаны булған, ауыр саҡта һәр ваҡыт ярҙам иткән Байрас янында үҙен нисек торорға белмәне.

– Сөмбөл, һин киткәнсе үҙ хистәремде әйтергә өлгөрмәнем. Мин һиңә беренсе тапҡыр күргәндән бирле ғашиҡ. Һинең ағайымды яратыуыңдан көнләштем. Һин һәр ваҡыт миңә ҡарап йылмая инең, мине ошо йылмайыуың менән ниндәй ғазаптарға һалыуыңды аңламаның. Хәйер, мин һиңә әйтеп ҡараным, һин генә барыһын шаярыуға әйләндерҙең, – тип уны үҙенә табан борҙо.

Уның күҙҙәренең матурлығы боҙҙо түгел, ташты ла иретер ине... Сөмбөл үҙ уйҙарынан ҡурҡып ҡалды. Байрас, эйелеп, уның татлы йомшаҡ ирендәренән үбеп алды.

– Беләһеңме, ошо ирендәргә бер генә ҡағылһаң ине, тип күпме хыялландым

мин. Хәҙер инде был ирендәрҙе туйғансы үбәсәкмен, мин уларға бер кемде ҡағылдырмаясаҡмын.

Ул уны тағы үпте, иркәләне.

Сөмбөл инде ир-ат ҡулының ниндәй булыуын да онотҡан ине. Байрастың көслө ҡулдары, наҙлы ирендәре уның башын әйләндерҙе, күктәргә мендерҙе, һыуҙарға һалды. Ул хәҙер өлгөргән ҡатын, ул да иркәләүҙәргә һыуһаған икән бит. Байрас уны ебәрергә ашыҡманы, уның ҡалтырауын һиҙеп, көслө ҡулдары менән күкрәгенә ҡыҫты.

– Сөмбөл, минең ҡатыным, тормош юлдашым бул. Мин һине бер ҡасан рәнйетмәм, атай-әсәйем кеүек, татыу йәшәрбеҙ. Мин һине үлгәнсе яратырмын, – тип бышылданы. Уның ҡайнар һулышы Сөмбөлдөң битен, ҡолаҡтарын, сәстәрен яндырҙы. – Сөмбөл, бәлки, һин дә мине бер ваҡыт яратырһың. Мөхәббәтемде кире ҡаҡма, мин һине бик бәхетле итермен.

Сөмбөл үҙ-үҙен ҡулға алырға, тынысланырға тырышты.

– Байрас, мин быға әле әҙер түгел. Әллә өнөм, әллә төшөм – аңлай алмайым. Ҡайтҡан көнөмдән бирле һин мине үҙеңдең һүҙҙәрең менән ғәжәпләндерәһең. Былай булыр, тип башыма ла килтерә алманым, мин киткәнгә барығыҙ ҙа шатланғанһығыҙҙыр, тигән инем. Һине лә, күптән өйләнгәндер, тип уйланым. Һин мине ашыҡтыраһың, уйларға ла мөмкинлек бирмәйһең. Байрас, улай ярмай, һеҙ бит туғандар. Булат ни тиер? Һеҙҙең арағыҙға кергем килмәй, минең арҡала ике туғандың дошманлашыуын теләмәйем. Атайҙар ни тиер?

– Улар әйтәһен әйттеләр инде. Булат өйләнде, теләгәнә иреште. Ә атай беҙгә күптән үҙенең хәйер-фатихаһын бирҙе, атай-әсәй һине бик ярата, һағына, ҡайтыуыңды көтә, минең кеүек, – тине лә тағы Сөмбөлдө үбә башланы.

Улар был таңды һыу буйында бергә ҡаршыланылар. Иртән Сөмбөл әкрен генә улы янына инеп ятты, Байрас эшкә китте. Ул бөгөн бик бәхетле, буй етмәҫ хыялы тормошҡа ашты. Ул бөгөн беренсе тапҡыр үҙе яратҡан ирендәрҙе үпте.

Төштән һуң Байрас тәмле әйберҙәр күтәреп ҡайтты.

– Әйҙә, йыйын, атайҙарға ҡайтабыҙ, – тине, үҙе, ярҙам итегеҙ инде тигәндәй, Сания апайға ҡарап ҡуйҙы.

– Эйе шул, барып ҡайтығыҙ, ҡоҙаларҙың күңеле булыр, – Сания апай ҡаршы килмәне.

– Азамат, олатайҙарға барабыҙмы? Унда һине өләсәйең, ағайың көтә.

– Барабыҙ, барабыҙ. Әсәй, әйҙә, олатайҙарға барайыҡ инде!

Сөмбөл аптырап:

– Бөгөн үкме? – тине. Ул, Байрас тағы бер мөгөҙ сығармағайы тип ҡурҡа ине.

– Бөгөн, – тине Байрас, кире сигенергә урын ҡалдырмайынса.

– Ярай, йыйынайым, сығып тороғоҙ.

Байрас Азамат менән Сания апайҙы, Сөмбөл кире уйлағансы тип, тиҙерәк алып сығып китергә ашыҡты.

– Сания апай, булыш миңә. Сөмбөл ҡурҡа, ә минең бер көн дә көткөм килмәй. Хәйер-фатихаңды биреп ебәр, мин барыбер уға өйләнәм.

Сөмбөлдөң әсәһе йылмайып баш ҡаҡты. Ул риза ине.

Сөмбөл кейенеп сыҡҡас, Байрас һоҡланыуын йәшермәне:

– Азамат, әсәйең шундай сибәр. Әгәр күрһә, беҙҙең һуҡыр мулла ла ғашиҡ булыр.

Эйе, уның ҡаршыһында элекке ябыҡ, бәләкәй генә Сөмбөл түгел, уртаса кәүҙәле бик һөйкөмлө йәш ҡатын ине. Өҫтөнә кейгән зауыҡлы, ҡиммәтле кейемдәре, өйөлгән сәсе, бейек үксәле аяҡ кейеме – былар барыһы ла уны затлы ҡатын итеп күрһәтә.

Байрас Сөмбөлдө үҙ янына алға ултыртты. Азамат артта баҫып барҙы, уға бөтә нәмә яңы, ҡыҙыҡ, юл буйы һөйләне, көлдө. Сөмбөл Ахунға яҡынайған һайын тулҡынланды, ҡулдары ҡалтыраны, аяҡтары хәлһеҙләнде. Ҡыҙыл ҡапҡаны уҙғанда ул төшөп кире йүгерер хәлгә еткән ине. Байрас уның хәлен тойоп, ҡулын ҡыҫты.

– Тыныслан, барыһы ла яҡшы булыр, мин һинең менән, һин минең менән, – тип йылмайҙы. – Шулаймы, улым?

– Юҡ, Байрас, – тине Сөмбөл, ҡурҡып. – Улай тимә, аңламаҫтар, һин үҙең дә ни эшләгәнеңде аңламайһың. Бер йортҡа ике тапҡыр килен булып төшмәйҙәр, мин риза түгел.

Был һүҙҙәрҙән Байрастың кәйефе ҡырылһа ла, һиҙҙермәне.

Бына улар Байрастарҙың тыҡрығына килеп етте. Байрас, ҡапҡа төбөнә килеп туҡтауға, ҡаты итеп ҡыҫҡыртты. Кемдер ҡапҡаны асты, машина ишек алдына инеп туҡтаны. Машина ҡаршыһында баҫып торған Булатты күреп, Сөмбөл ҡурҡып ҡалды, йөҙө ап-аҡ ҡағыҙ төҫөнә инде. Ул да, Сөмбөлдө танып, баҫҡан урынында тораташтай ҡатып ҡалды. Байрастың йөрәген көнсөллөк уты яндырып үтте.

– Әйҙә, улым, килеп еттек, – тине ул, үҙе Сөмбөлдән күҙен алманы. Азаматты күтәреп, машина өҫтөнә баҫтырып ҡуйҙы.

– Атай, кил әле бында. Күрегеҙ, кем ҡайтты беҙгә.

Шәфҡәт ағай, ниҙер һиҙенеп, абына-һөрлөгә машина янына килде. Бер улына, бер балаға текәлде. Бала уға өндәшмәй генә ҡарап торҙо ла, үрелеп, Байрасты ҡосаҡланы.

– Атай, был кем?

– Был һинең олатайың, иҫәнләш, исемеңде әйт.

– Һаумы, олатай, мин Азамат.

– Иҫәнме, улым, ҡайттыңмы? Беҙ һине бик һағындыҡ, бигерәк ҙур үҫкәнһең, – тине олатаһы, тамағына ултырған төйөндө йотоп. – Кил әле үҙемә, өләсәйеңә күрһәтәм.

Баҡсаға йыйылған халыҡ баланы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп һөйҙө.

Машина янына килеп баҫҡан йәш үҫмер Сөмбөлгә текәлеп ҡарап тора башланы. Сөмбөл уны танып, «Солтанай» тип бышылданы. Әлфис, ағаларына оҡшап, оҙон буйлы, бик сибәр егет булып үҫкән. Сөмбөлдөң машинанан сығырға көсө етмәне, аяҡ-ҡулдары уға буйһонорға теләмәне, күҙҙәренән йәш аҡты. Быны күреп, Әлфистең уны ҡосаҡлап илағыһы килде, ун алты йәшлек егеткә күҙ йәшен күрһәтеү оят тойолғанға, ул кинәт боролоп, баҡсалар артына уҡ сығып китте. Шәфҡәт ағай килеп, машина ишеген асты.

– Әйҙә, ҡыҙым, өйгә керәйек, – тип Сөмбөлгә ҡул һуҙҙы. Уның үҙенең дә Сөмбөлгә ҡушылып илағыһы килде.

– Сөмбөл балаҡайым, ҡайттыңмы? – тип Гөлфиә апай ҙа йүгереп килеп етте. Уны ҡосаҡлап баҡсаға алып инде.

Фәриҙә, бер ни аңламайынса, ситтән генә барыһын күҙәтеп торҙо. Булаттан:

– Был кемдәр? – тип һорағас, ире, ни әйтергә белмәйенсә, һарайға инеп китте. Йорттағы хәлдәр уны бик ныҡ тетрәндерҙе, уға үҙен ҡулға алырға кәрәк ине. Улы үҫкән, Сөмбөл үҙгәргән, матур ҡатын булған. Хәҙер Азамат уға кем тиер?

Әле ишетәһеләре алда булған икән...

Булат, әҙерәк тынысланып, башҡалар янына сыҡты. Уны күреүгә, бала, был ағай менән танышманым, тигәндәй:

– Атай, атай, был кем? – тип Булатҡа күрһәтеп һорап ҡуйҙы.

Шәфҡәт ағайҙың йөрәге әрнене. Байрас, башта ҡаушап ҡалһа ла, һиҙҙермәне.

– Таныш бул, улым, был Булат ағайың, – тине, ағаһының күҙҙәренә ҡарап. – Ике атай булмай бит инде, – тип өҫтәне.

Булаттың башына күҫәк менән һуҡҡандай булды, йөҙө ап-аҡ ағарҙы. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Ҡасандыр Байрас уға был баланы көсләп таҡты, Булат иһә уны матур ҡатынға алыштырҙы. Ә хәҙер, рөхсәт тә һорамайынса, тартып алды. Булатҡа Азаматтың ағаһы булыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Сөмбөл, Әлфисте эҙләп, картуф баҡсаһына сыҡты. Ул бер мөйөштә ултырған, ҡул арты менән күҙ йәштәрен һөртә ине.

– Әлфис, солтаным, – тине апаһы, уның алдына теҙләнеп. – Үҫкәнем, һин ниндәй ҙур егет булғанһың, – тип Әлфисте ҡосаҡланы. – Әллә миңә үпкәң ҙурмы? Өндәшмәйһең дә, Азамат менән дә күрешмәнең. Мин уға һинең хаҡта бик күп һөйләнем, ләкин һине былай еткән егет итеп күҙ алдыма ла килтерә алманым.

– Апай, мин һеҙҙе һәр йылды көттөм, сәскәләреңде һаҡлап үҫтерҙем, ә һеҙ бик оҙаҡ ҡайтманығыҙ. Бөгөн һеҙҙе күргәс, юғалып ҡалдым, – тип Әлфис күҙ йәштәрен һөрттө. – Мин һеҙҙе бик һағындым.

Байрас, энеһенең хәлен аңлап, Азаматты күтәреп баҡсаға инде.

– Бына бәләкәй ағайың, ул һине бәләкәй сағыңда гел күтәреп йөрөнө, һинең менән уйнай ине.

– Ә ул ниңә илай?

– Ә һин уны йыуат, ҡосаҡла, улым, һөйләш, ә беҙ өләсәйең янына инәбеҙ.

Сөмбөл менән Байрас, уларҙың икеһен генә ҡалдырып, баҡсанан сығып киттеләр.

Булат ҡатынына:

– Йыйын, киттек, – тине лә машинаһына сығып ултырҙы.

Фәриҙә иренә ҡаршы килмәне. Булатҡа юл буйы сәйер ҡунаҡтар тураһында һорауҙар яуҙырҙы, ләкин һорауҙары яуапһыҙ ҡалды. Ире уны ишетмәнеме, йә иһә ишетеп тә, дөрөҫөн әйтергә көсө етмәнеме...

Эйе, Сөмбөл менән ҡасан да булһа осрашырға тейеш ине ул. Ләкин былай түгел бит. Ә Сөмбөл үҙгәргән. Ҡыҫҡа сәсле, ҡыҫҡа итәкле, сыйырсыҡ кеүек сырлап торған бәләкәй генә Сөмбөл хәҙер йомшаҡ ҡына, үҙ дәрәжәһен белеп кенә һөйләшеүсе һөйкөмлө ханым булған.

Ә энеһе? Энеһе уның улын тартып алды. Байрас быңдай аҙымға барыр, тип башына ла килтермәне бит ул. Киткәс оноттандыр, тип уйланы, асыҡтан-асыҡ бер ни ҙә һораманы. Сөмбөлдө ҡайҙан табып алып ҡайтҡан? Улы ҡайҙа булған, нисек үҫкән? Эх, яҙмыш ағас башынан йөрөмәй шул, кеше башынан йөрөй.

* * *

Сөмбөл Гөлфиә апай тирәһендә ҡайнашты, икәү һөйләшеп туя алманылар. Байрас ҡайҙалыр барып ҡайтты, үҙе ситтән генә Сөмбөлдө күҙәтте.

Атаһы икенсе көндө:

– Улым, ни эшләргә уйлайһың, һөйләштеңме, ризамы? – тип һораны.

– Юҡ, ризалашмай, ағайымдан ситенһенә, ахыры, беҙҙе дошманлаштырыуҙан ҡурҡа.

– Сөмбөл хаҡлы, улым. Уны күргәс, ағайыңдың йөҙө ап-аҡ булды, ул үҙенең кемде юғалтыуын аңланы. Әгәр Фәриҙәне айырып, кире Сөмбөлдө алырға теләһә?

Байрас был хаҡта уйламаған ине.

– Юҡ инде, атай. Мин Сөмбөлдө алты йыл көттөм. Минең нисек ғазапланыуымды үҙегеҙ күрҙегеҙ, ағайымдың ике ятып бер төшөнә лә кермәне, өйләнеү менән онотто. Йәшәһен үҙенеке менән! Мин Сөмбөлдө бер кемгә бирмәйәсәкмен! Ошо ике көн эсендә өйләнмәһәм, исемем Байрас булмаһын! – тине ҡаты

итеп. – Атай, миңә һеҙҙең хәйер-фатихағыҙ кәрәк, ҡалғанында минең эшем юҡ.

– Беҙ риза ла ул, Сөмбөл риза булмаһа, ни эшләрһең?

– Уныһын үҙем хәл итермен, миңә бары ике көн кәрәк.

Шәфҡәт ағай улын яҡшы белә, ике һөйләргә лә яратмай, әйткән икән – эшләмәй ҡалмай.

Шәфҡәт ағайҙарҙа ике көн ҡунғандан һуң, Сөмбөл ҡайтырға йыйынды.

Гөлфиә апай:

– Тағы бер көнгә генә ҡалығыҙ инде, унан Байрас илтеп ҡуйыр, – тип ялбарһа ла, Сөмбөл ризалашманы.

– Юҡ, беҙ ҡайтайыҡ, күрештек, һөйләштек, әсәйем дә көтәлер. Байрас – эш кешеһе, уны борсоп тормайбыҙ.

Ҡапҡанан сығыуҙары булды, туҙан туҙҙырып, Байрас ҡайтып туҡтаны, тиҙ генә машинанан сыҡты.

– Улым, ҡайҙа йыйындығыҙ? – тип Азаматты күтәреп алды.

– Өләсәйгә ҡайтабыҙ, – тине бала.

– Һин, улым, олатай-өләсәйең янында өйҙә ҡалып торорһоң, беҙ әсәйең менән ҡалаға барып киләбеҙ, – тип Азаматты кире өйгә алып инеп китте.

Байрас, улын ҡалдырып сыҡҡас, машина янында аптырап баҫып торған Сөмбөлгә асыулы итеп ҡарап:

– Ултыр машинаға! – тип алғы ишекте асты.

Сөмбөл ҡуҙғалмағас, ялт итеп ҡулына күтәреп, машинаға ултыртты. Машина үрә баҫырға йыйынған ат һымаҡ һикереп ҡуйҙы ла, ауыл урамын туҙанға күмеп, ҡалаға табан елдерҙе.

– Байрас, нишләйһең һин, сапма, – тине Сөмбөл, ҡурҡып.

Байрастың күҙенә аҡ-ҡара күренмәне. Үҙе бер нәмә өндәшмәй, ирендәре ҡыҫылған, күҙҙәре уттай яна. Ауылдан ниндәй тиҙлек менән сығып китһә, шулай ҡалаға килеп инде. Машина ҙур яңы бина ҡаршыһына килеп туҡтаны. Байрас, Сөмбөлдө ҡулынан етәкләп, бина эсенә өҫтөрәне.

– Туҡта, ҡайҙа сабаһың, йығаһың бит. Ниңә өндәшмәйһең?

Байрас уны еңел генә ҡулына күтәреп алды, алдындағы ишекте этеп асты. Бүлмәлә ултырған ҡатын ҡурҡып һикереп торҙо. Байрас:

– Бына, беҙ килдек. Ҡайҙа ҡул ҡуйырға? – тигәс, теге ҡатын ҡабаланып өҫтәлдә ятҡан китапҡа төртөп күрһәтте.

– Ҡуй шунда имзаңды! – тине Байрас, Сөмбөлдө иҙәнгә баҫтырып.

Сөмбөл, аптырап, ҡағыҙға ҡараны, Байрастың һүҙҙәренә буйһоноп, уның артынса бер ни аңламайынса ҡул ҡуйҙы. Ханым, ашығып, өҫтәлгә уларҙың паспорттарын килтереп һалды. Уларҙы нимәлер уңайынан ҡотланы. Байрас, рәхмәт әйтеп, документтарҙы алды. Сөмбөлдө нисек күтәреп ингән булһа, шулай алып сығып машинаға ултыртты. Бер аҙҙан яңы төҙөлгән биш ҡатлы йорттоң ишек төбөнә килеп туҡтанылар. Байрас Сөмбөл яғындағы ишекте асты, уны машинанан һурып ҡына алды ла, ҡулына күтәреп, ҡыҙыу-ҡыҙыу өсөнсө ҡатҡа күтәрелде. Сөмбөлдө ҡулынан төшөрмәй генә бер фатир ишеген асты. Улар бер бүлмәле фатирға килеп инделәр. Бында тормош итер өсөн кәрәкле бөтә нәмә бар ине. Байрас уны бүлмә уртаһында торған диванға әллә ултыртты, әллә ташланы – һәр хәлдә, Сөмбөлдөң башы муйынынан ысҡына яҙҙы. Байрастың ни өсөн уны шулай бесәй балаһы кеүек бәргеләп йөрөтөүен аңлай алманы. Байрас был мәлдә яралы ҙур януарға оҡшап ҡалды, бүлмә буйлап арлы-бирле йөрөй башланы. Уның күҙҙәре асыулы, йөҙө етди. Сөмбөл, ҡурҡып, уны күҙәтте. Байрас кинәт йөрөүенән туҡтаны, уға боролоп:

– Беләһеңме кем һин? – тип һорап ҡуйҙы.

Уның был асыулы һүҙҙәренән Сөмбөл диванға нығыраҡ һеңә төштө. Беләм, тигәндәй, аптырап баш ҡаҡты.

– Юҡ, белмәйһең, йән ҡорто һин! Теге ваҡытта ҡасып китеп, күпме кешене илатҡаныңды, ҡайғыға һалғаныңды беләһеңме? Юҡ, белмәйһең. Атай-әсәй, һинең өсөн борсолоп, бер йылда ун йыллыҡ ҡартайҙы. Һалҡын ҡыш көнөндә, ас килеш, бала менән ҡайҙа йөрөй икән, тип борсолдолар. Һәр көн ҡайтыуыңды көттөләр. Ә Әлфис сабый ғына ине. – Байрас ҡайҙандыр Сөмбөлгә таныш бер халат тартып сығарҙы. – Бына быны танырһыңмы? Ул сабый ошо күлдәкте өс йыл ҡосаҡлап йоҡланы. Әсәйем йыуһа, еҫе бөтә тип, йәшереп һаҡланы. Аҡылдан яҙмаһын тип ҡурҡып, өс йыл ошо халатты үҙемдә һаҡланым. Мин дә һине көтә-көтә аҡылдан яҙыр дәрәжәгә еттем, – тине лә халатты Сөмбөлгә атты. Сөмбөлдөң ғәжәпләнеүҙән күҙҙәре түңәрәкләнде.

– Һин киттең, барыһын оноттоң. Әсәйеңдең күпме күҙ йәштәре түгеүен дә күрмәнең. Мин алты йыл буйы уның янында һине көттөм. Һин уҡый тигәс, һиңә тиң булайым тип, мин дә уҡыным, эшләнем. Һин ҡайтыуға тип, бәләкәй генә булһа ла, ошо ояны әҙерләнем. Ә һин минең бөтә хыялдарымды тапап, тағы ҡасырға йыйындыңмы? Һин минең бөтә йәнемде ашап бөтөрҙөң...

Ул асыу менән бүлмә ишегенә килтереп һуҡты, ишектә тишек ҡалды. Үҙе кухняға сығып китте, унан сәйнүк шылтыраған, һауыт-һаба ватылған тауыш ишетелде. Кинәт фатирҙа тынлыҡ урынлашты. Өйөрмә нисек башланды, шулай тынды. Байрас ишек янына килеп баҫты. Башы ишек башына етә яҙып тора, елкәләре ишек киңлеге. «Йәнәшә баҫһаҡ, айыу менән сысҡанға оҡшайбыҙ икән»,– тип уйланы Сөмбөл. Үҙе бер Байрасҡа, бер ишектәге тишеккә ҡараны. Байрас уның күҙҙәрендә ҡурҡыу күреп, аяҡ осона, иҙәнгә, килеп ултырҙы, туфлиҙарын һалдырҙы. Ҡыл кеүек тартылған Сөмбөл иҫке халатын күкрәгенә ҡыҫты. Байрас моңһоу ғына йылмайҙы.

– Кис ҡайтҡас, мин дә уны шулай күкрәгемә ҡыҫам. Мин бит һау-сәләмәт ирегет, миңә һин үҙең кәрәк. Ҡурҡыттым, ғәфү ит. Башҡа улай эшләмәм, шулай ҙа, әгәр киткән булһаң, мин һине табып, йомшаҡ ереңде ҡайын менән ярған булыр инем. Зинһар, ҡасма, минең һине лә, үҙемде лә бәхетле иткем килә. – Ул Сөмбөлдөң бәләкәй генә ҡулдарын үҙенең көрәк кеүек ҡулдарына алды, күҙҙәренә ҡарап, уның бармаҡтарын үпте. – Һин бер ҡасан да минең ҡатыным булғанға үкенмәҫһең. Ысын күңелеңдән мине ирең, балаңдың атаһы тип ҡабул ит. Әгәр аңлаған булһаң, беҙ ЗАГС-та яҙылышып сыҡтыҡ. Паспортыңда аҡҡа ҡара менән «Арыҫланов Байрастың ҡатыны» тип яҙылған. Һин – минең законлы ҡатыным. Минең бик матур туй яһағым, һиңә аҡ күлдәк кейҙергем килгән ине. Һинең ҡарышыуыңдан, һине юғалтыуҙан ҡурҡтым. Сөмбөл, йәшәйек бергә. Әйт берәй нәмә. Ниңә өндәшмәйһең? – Кеҫәһенән бәләкәй генә алтын балдаҡ сығарып, Сөмбөлдөң бармағына кейҙерҙе. – Мин һине бик яратам, ғүмерлек юлдашым бул. Әгәр ярата алмаһаң, балдаҡты ошо өҫтәлгә ҡуйып китерһең. Мин барыһын да шунан аңлармын.

Ул кеҫәһенән икенсе алтын балдаҡ сығарып, Сөмбөлгә һуҙҙы. Сөмбөл, уйланып, уға ҡарап торҙо ла балдаҡты ҡулына алды.

– Әгәр мине үткәндәр менән битәрләмәһәң, бындай тишектәр яһамаһаң, мин һиңә яҡшы ҡатын булырмын, – тине. Байрастың бармағына ул биргән балдаҡты кейҙерҙе. – Һин тоғролоҡло ир булһаң, балдағыңды бармағымда үлгәнсе һаҡлармын, – тип үҙе лә еңел һулап ҡуйҙы.

Байрас бер мәлгә аптырап ҡалды, ул Сөмбөлдән тиҙ генә бындай һүҙҙәр ишетермен тип уйламаған ине, уның күҙҙәре ялтыраны, аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайып ебәрҙе, шатлығы эсенә һыйманы. Ул ҡатынын ҡосағына алып, яратып

үпте, наҙға һыуһаған ике йөрәк ләззәт донъяһына сумды. Көслө ирҙең ҡайнар һулышы Сөмбөлдө яндырҙы, тылсымлы ҡулдар уны йондоҙҙарға алып менеп китте, башы әйләнде. Ул үҙен мәңгегә ошо ҡулдарға тапшырҙы. Икәүләшеп ләззәт шишмәһенән йотлоғоп һыу эстеләр...

Көн үтеп, төн етте. Төн уҙып, тағы яңы көн тыуҙы. Байрас уянды. Аҡ мендәрҙә ҡара оҙон сәс көлтәһенә уралып йоҡлаған ҡатынына һоҡланды. Уны уятыуҙан ҡурҡып, тыныс ҡына уйланып ятты. Бына ниндәй татлы була икән ул оҙаҡлап көтөп алынған мөхәббәт! Сөмбөлдө ҡосағына алыу тураһында күпме йылдар, күпме көндәр хыялланды. Хыялда бер, ә тормошта бөтөнләй икенсе төрлө... Дөрөҫ, ул, егерме ете йәшенә етеп, суфый булып ултырманы, ҡатын-ҡыҙҙың төрлөһөн күрҙе, ләкин ул бөгөн бер нәмәне аңланы: был донъяла һәр кешенең үҙ пары бар икән, шул парҙы табырға кәрәк. Ул яңылышманы, юҡҡа ғына Сөмбөлдө алты йыл буйы көтмәне, үҙенең хистәрендә аҙашманы, ул быны бөтә йәне-тәне менән тойҙо. Иртәме-һуңмы, Сөмбөл үткәндәрен онотор, ул да, бәлки, уны яратыр.

Байрастың ҡатынына баштан аяҡ ҡарап һоҡланғыһы килеп, әкрен генә өҫтөндәге юрғанын тартты. Ҡатынының матур тәне асылған һайын, уның күҙҙәре янды, һулышы йышайҙы, йөрәген шатлыҡ хисе биләп алды. Бына ул көтөп алған мөхәббәт!

Иренең күҙ ҡарашын тойоп, Сөмбөл дә уянды, үҙенең шәрә ятыуын абайлап, тиҙерәк юрған аҫтына сумырға ашыҡты. Байрастың йылмайып ятыуын күреп, оялыуҙан бите ҡып-ҡыҙыл булды. Көнмө-төнмө икәнен аңларға тырышты. Юрған аҫтынан ике күҙен генә ялтыратып:

– Байрас, ваҡыт күпме? Ниңә уятманың? – тине.

Байрас ҡатынына ҡарап көлдө.

– Тағы дүрт көн ятһаҡ, минең ялым бөтә, йәнем.

– Ни һөйләйһең һин? Атайҙар беҙҙең бында ни менән шөғөлләнеп ятҡанды белһә, ни уйлар? Ояты ни тора. Нисек күҙҙәренә күренербеҙ?

– Бәләкәй түгелдәр, ни эшләп ятҡанды аңлайҙарҙыр, улар ҙа бер-береһен ярата.

– Ни һөйләйһең һин? Атайҙар белһә...

– Һуң, шул атайҙар белгәнгә беҙ тыуған бит инде. Үҙең ҡатын-ҡыҙҙар табибы түгелме һуң? – тип хәйләкәр йылмайып, Байрас уның юрғанын тартты. – Бөгөн беҙҙең ғаилә тормошона аяҡ баҫҡан беренсе көнөбөҙ. Миңә һинең йәнәшәңдә булыу, йоҡлау бик оҡшаны. Ҡартайып бабай булғас та һинең менән шулай йоҡлармын. Һин әле ир менән ҡатын араһында ниндәй матур мәлдәр булыуын белеп бөтөрмәйһең, был институтты мин һиңә үҙем уҡытырмын, Сөмбөл ханым, алда ғүмер оҙон әле, – тип һөйләй-һөйләй, уның сәстәрен таратты. – Һин бөгөн тағы ла матурыраҡ күренәһең, – тип күкрәгенә ҡыҫты.

Улар ауылға икенсе көндө кисен ҡайттылар. Сөмбөл ҡайны-ҡәйнәһе алдында үҙен нисек тоторға белмәне, ғәйепле бала кеүек, уларҙың күҙҙәренә күтәрелеп ҡарарға оялды. Гөлфиә апай, ниҙер һиҙенеп, уны үҙ бүлмәләренә алып инде.

– Ни булды, балам, йөҙөң ҡасҡан? – тип текәлеп ҡараны.

Сөмбөл башын аҫҡа эйеп ултыра бирҙе.

– Нимә тип әйтәйем, ул мине бесәй балаһы урынына, бер ни ҙә әйтмәйенсә, унда-бында болғап йөрөттө лә, беҙ яҙылыштыҡ, һин минең законлы ҡатыным, тип фатирына алып ҡайтты, – тине Сөмбөл, башын күтәрмәйенсә бышылдап. – Мин бер ни ҙә эшләй алманым, әсәй. Кешенән оят, бер йортҡа ике тапҡыр килен булып килгән, тиерҙәр. Булат ни тиер, ҡатыны ни тиер, ул бит мине күрә алмаясаҡ.

Гөлфиә апай көлөп ҡуйҙы.

– Эй, килен, Байрас атаһына оҡшаған шул, әйтһә, эшләмәй ҡалмай инде. Аталары мине лә шулай алып ҡайтҡан ине. Байрас менән юғалмаҫһың. Ә кешелә эшең булмаһын, һин беҙҙеке, бала беҙҙеке, беҙ шат ҡына. Беҙ быны атайың менән күптән көттөк, шулай булғас, төклө аяҡтарың менән, килен, – тип арҡаһынан һөйҙө.

Шәфҡәт ағай Байрасҡа:

– Нисек? – тип ымланы.

– Яҡшы, – тине шатлыҡтан ауыҙы ҡолағына еткән улы.

– Маладис, падлис, – тип йылмайҙы атаһы, улар бер-береһен тиҙ аңланылар.

Иртән Сөмбөл уянғанда, Байрас эшкә киткән ине. Ул аптырап тирә-яғына күҙ һалды. Барыһы шул тиклем тиҙ булды, дүрт көн эсендә кейәү табып, тормошҡа сыҡты. Нисек булһа ла, ғаилә тормошон башлап ебәрергә кәрәк.

Сөмбөл, беренсе эше итеп, хәленән килгәнсә фатирға ремонт яһаны, яңы матур шаршауҙар элде, матур гөлдәр ултыртты, иҙәнгә келәмдәр йәйҙе. Аш бүлмәһен тәртипкә килтерҙе. Сәмәрҡәндтән алып ҡайтҡан йәймәләр һәр ергә матурлыҡ өҫтәне. Ире ҡайтҡан ваҡытҡа һәр ваҡыт тәмле ашы әҙер, сәй янына ҡоймағы-бәрәмәсе бешкән була. Байрас уның шул тиклем эште бер үҙе башҡара алыуына ғәжәпләнде. Сөмбөл фатирҙы гөл баҡсаһы яһаны. Байрас, хәҙер буш ваҡыты булған һайын, өйөнә ҡайтырға атлығып тора. Элек ашханала ашап ҡайта, диванға ятып телевизор ҡарай ҙа йоҡлай ине. Яңғыҙ йәшәгән көндәрен иҫкә төшөрөп: «Нисек йәшәгәнмен икән?»– тип уйлай.

Сөмбөл беренсе ике аҙнаны фатир менән генә шөғөлләнеп үткәрҙе. Азамат иһә ауылда олатаһы янында булды.

Булат Сөмбөлдө күргәндән һуң үҙенә урын тапманы, эштән ҡайтышлай энеһе янына инеп сығырға булды. Ул уларҙы ҡайҙан тапҡан, улы ни өсөн уға атай тип өндәшә – барыһын да ентекләп һорашырға уйланы. Шундай уйҙар менән ишек төймәһенә баҫты, танауына әллә ниндәй тәмле еҫтәр килеп бәрелде. Ишек асылып китте.

– Ҡайттыңмы? – тип йылмайып Сөмбөл ҡаршы сыҡты.

Улар, бер-береһен күреп, һиҫкәнеп ҡуйҙылар.

Ярай әле, эштән ҡайтып килеүсе Байрас уларҙы был ауыр хәлдән ҡотҡарҙы:

– Нимә, ағай, аптырап тораһың, ин, – тигәнгә, улар икеһе лә ҡараҡлыҡта тотолғандай ҡурҡып киттеләр. – Әйҙә, ин. Ай, ниндәй тәмле еҫтәр сыҡҡан, үлеп ашағым килә. Ағай, өҫтөңдө һал, түргә уҙ, сит кеше кеүек торма инде, – тигәс, Булат ҡыйыр-ҡыймаҫ эскә уҙҙы. Энеһенең фатиры танырлыҡ түгел ине. Өйҙә әкрен генә ниндәйҙер көй уйнай, бүлмә яҡты ла, ҡараңғы ла түгел, киске ут яндырылған, ысын-ысынлап мөхәббәт ояһы. Булаттың йөрәген әллә үкенес, әллә көнләшеү киҫтереп үтте.

Байрас ағаһын:

– Әйҙә, ағай, киске аш ашап алайыҡ, унан иркенләп һөйләшербеҙ, – тип аш бүлмәһенә алып инде.

Сөмбөл мул итеп табын әҙерләгән, өҫтәлдә ҡыҙҙырылғаны ла, бешкәне лә, йәшелсәһе лә бар. Улар һөйләшмәйенсә ашанылар, тәмле бәрәмәстәр менән сәй эстеләр. Табынды йыйыштырғас, Сөмбөл ҙур бүлмәгә сыҡты, Байрас уның артынан ишекте япты.

– Ағай, күрәм, һин Сөмбөлдө бында осратып аптырап ҡалдың. Беҙ яҙылыштыҡ, үҙең күргәнсә, хәҙер бергә йәшәйбеҙ. Теге ваҡытта өйгә алып ҡайтып ултыртһам да, һин уға өйләнергә теләмәнең, хәҙер миңә үпкәләмә. Минең һеҙҙең арала йәрәштереүсе булып йөрөгөм килмәй. Ул китеп бармаған булһа, теге ваҡытта уҡ өйләнә инем. Белмәнем тимә, мин һиңә уны яратыуымды күптән

әйтә килдем. Хәҙер минең үткәндәргә кире ҡайтҡым килмәй, һин дә үткәндәрҙе онот. Сөмбөл – минең ҡатыным, мин уны бик яратам.

– Ә ул һине?

– Белмәйем, бәлки, ҡасан да булһа яратыр, һинән һуң янып бөтмәгән булһа...

– Ә Азамат һиңә ни өсөн атай ти?

– «Һин минең атайыммы?» тине, эйе, тинем. Алты йәшлек сабыйға һинең йәшлек хаталарыңды нисек аңлатайым инде. Ағай, нисек бар – шулай ҡалһын, Сөмбөлдөң башҡа балаһы әллә була, әллә юҡ. Хәтерләһәң, теге ваҡытта ҡарт доктор, уға бала табырға ярамаясаҡ, тине. Бына хәҙер икебеҙгәме, дүртебеҙгәме бер бала. Ә һин улың менән аралаш, ҡурҡма, Сөмбөл ҡаршы килмәç. Фәриҙәң үткәндәрең тураһында беләме?

– Юҡ, белмәй.

– Беҙ ҡапсыҡта ятмай, бер тишеп сығыр, һин уға дөрөçөн һөйлә, оҙаҡҡа һуҙма. Кешенән ишетһә, яҡшы булмаç.

Булат уларҙан һуң ғына ҡайтып китте, күңел мөйөшөндә ҡабынған бәләкәй өмөт саткыһы бик тиҙ һүнде, ул һуңға ҡалды... Сөмбөлдөң өйө таҙа, йылы, үҙе яғымлы, бешергән аштары тәмле. Ә улар икәү генә йәшәгәс, Фәриҙә ҡайнар аштарҙы һирәк бешерә, күберәк ҡоро-һары менән туҡланалар, һөйләшер һүҙҙәре лә юҡ, әкренләп бер-береһенән ситләшә баралар. Сөмбөлдөң йылы өйөнән һуң үҙенең өйө шыҡһыҙ, йәнде һалҡын өшөткәндәй тойолдо. Ул Алла урынына табынған, тыйнаҡ, йомшаҡ, күп һөйләшмәй, ҡысҡырып көлмәй торған Фәриҙә менән йәшәй башлағас, унда ниндәйҙер эрелек, һалҡынлыҡ һиҙҙе. Барыһы ла ул көткәнсә булманы, күңеле ниҙер эҙләне, кемделер көттө. Сөмбөлгә килеп ҡағылыуға, ул ҡабынып китә, башын юғалта, Сөмбөл уға бөтә йәне-тәне менән яуап бирә, улар һүҙһеҙ аңлашалар ине. Теге ваҡытта, мунсала, хатаны төҙәтергә ике һүҙ етә ине. Булаттың йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Сөмбөл менән йөрөгәндә, ҡайҙа барып инәһең, шунда байрам, уйын-көлкө, шаян һүҙҙәр ине, бер ҡасан юҡ-барға үпкәләмәне. Фәриҙә, юҡ өсөн үпкәләп, уны айҙар буйы янына ебәрмәй, һөйләшмәй интектерҙе, шуға ла Булат ярамаған һүҙ һөйләп ҡатынын үпкәләтеүҙән ҡурҡып йәшәне. Бала булһа, һөйләшер-уртаҡлашыр һүҙҙәре булыр, уларҙы үҙ-ара бәйләр ине. Ә былай? Бөгөн ул энеһенән ҡайтҡанда, тормошоноң ни тиклем йәнһеҙ һәм буш икәнлеген аңланы. Фәриҙә янына йылы юрған аçтына инеп ятты – йылына алманы. «Ҡайҙа яңылыштым һуң?» тигән уй башынан сыҡманы. «Үкенерһең, улым, Сөмбөл яҡшы ҡатын буласаҡ, юҡҡа рәнйетәһең» тип атаһы нисә тапҡыр киçәткән ине. Бына хәҙер шуның әжәрен йыя.

Аталары Фәриҙәне Сөмбөлдө ятраҡан кеүек ярата алманылар. Уларға һалҡын ғына «Һеҙ» тип өндәшеүе, эшкә артыҡ иçе китмәй торған Фәриҙә менән «атайәсәй» тип өҙөлөп торған, күсөнән килгән барлыҡ эште емертеп эшләүсе Сөмбөл араһында ер менән күк айырмаһы ине шул. Аталарының Фәриҙәне асыҡтан-асыҡ өнәмәүҙәрен күреп, Булаттың йөрәге әрнене. Йортта Сөмбөлдөң урынын бирәү ҙә алыштыра алмай ине, ул хаҡта ҡысҡырып әйтмәһәләр ҙә, һәр ваҡыт һиҙелеп торҙо. Сөмбөл менән йыш осрашырға тура киләсәк, бер түбә аçтында нисек йәшәргә? Эх, теге ваҡытта атаһын тыңлаған булһа... Ҡасандыр Сөмбөлдө илатһа, хәҙер үҙе илай. Әсе йәштәр ирҙең мендәрен сылатты.

Ағаһы киткәс, Байрас Сөмбөл янына инде, ул тәҙрәнән киске урамға ҡарап тора ине. Байрас, һиҙҙермәйенсә, ҡатынын күҙәтте. Беләһе ине: Сөмбөл ниҙәр уйлай икән? Бәлки, ул әле һаман Булатты яраталыр. Түҙергә кәрәк, уны оноттороу өсөн ул барыһын да эшләйәсәк. Сөмбөл илайҙыр тип, үҙенә табан борҙо, улар һүҙһеҙ генә бер-береһенә ҡарашып торҙо. Сөмбөлдөң ҡараштары бер ни аңлатмай, унда бушлыҡ.

– Үткәндәргә кире ҡайтыу юҡ, Байрас. Һин мине ашыҡтырма, ваҡыт бир.
Сөмбөл ике-өс аҙнанан эшкә сығырға йыйынды.
– Байрас, мин эшкә урынлашырға уйлайым. Теге ваҡытта үҙем ятҡан больницаға барып ҡарайым әле, урын булһа, шунда эшләр инем.
– Үҙем илтермен. Һине аҡ халаттан, аҡ башлыҡтан күҙ алдыма ла килтерә алмайым.
– Миңә бөгөн үк эш бирмәйҙәр бит, әле күреп туйырһың. Төндәрен ҡуйыныңдан алып сығып китә башлаһалар, ниңә өйләндем, тиерһең.
– Мин һинән туймам, һин генә минән туйма, – тип Байрас ҡатынын алдына ултыртты. – Мин әле һине күреп тә туйманым, кисен кем мине йылмайып ҡаршы алыр? Төшкө ашты өйҙә ашарға өйрәнеп бөткән инем, ашхананыҡын күргем дә килмәй. Ашау бер сәбәп кенә, һине көндөҙ ҡайтып бер яратып китһәм, эш сәғәте тиҙерәк үткәндәй була. Мин бит һине өйҙән сығыуға һағына башлайым.
– Ярай, ул тиклем арттырма, төн етмәгән һиңә...
– Юҡ, етмәй, һөйөклөм, етмәй, – тине ир, ҡатынының ҡолаҡ япраҡтарын үбә-үбә, – мин юғалған алты йылдың һәр көнө өсөн һинән үс аласаҡмын. Эшкә бараһы булмаһа, өйҙән бөтөнләй сыҡмаҫ инем, шулай һинең менән генә ятыр инем.
Уның күҙҙәре ялтыраны, тыны ҡайнарланды, үҙе халат бауын тартҡыланы.
– Байрас, сабырһыҙ, ялтыратма күҙеңде, май урлап ашаған бесәйгә оҡшайһың, – тип көлдө Сөмбөл, уның үҙенә лә был тормош оҡшай башлаған ине.
Икенсе көндө Сөмбөл бик матур итеп тегелгән йөн костюм, аҡ кофта, бейек үксәле туфлиҙарын кейеп, көҙгө ҡаршыһына килеп ултырҙы. Ул биҙәнеү әйберҙәрен һирәк ҡуллана, ҡайһы саҡ, биҙәнгеһе килеп, көҙгө ҡаршыһына килә. Көҙгөнән үҙенең һүрәтенә ҡарай: тән тиреһе ҡара, ҡашы ҡалын, керпеге ҡуйы оҙон, ирендәре әле ҡыҙыллығын юғалтмаған. Ни һөртөргә белмәй, шулай ҙа ярар, тип көҙгө ҡаршыһынан китә. Бөгөн дә көҙгө ҡаршыһында оҙаҡ ултырҙы, ире янына сығып.
– Шулай барһам яраймы? – тип һораны.
– Минең янға быңдай сибәр ҡатын килһә, бер һүҙһеҙ эшкә алыр инем.
Байрасҡа ҡатынының кейенеүе, ҡыланышы бик оҡшай. Ул уны больница ишеге төбөнә тиклем килтерҙе. Сөмбөлдөң тулҡынланыуын һиҙеп, ҡулынан тотто, уның күҙҙәренә ҡарап:
– Тыныслан, барыһын да онот. Мин һине ошонда көтөрмөн, – тип ишек төбөндә баҫып ҡалды.
Сөмбөл баш табип бүлмәһен эҙләп китте. Теге ваҡытта кемдең ҡайҙа ултырғаны иҫендә ҡалмаған, хәйер, уның ҡайғыһы түгел ине. Бөгөн ул больницаға икенсе кеше күҙлегенән ҡараны: таҙа, яңы ғына төҙәтеү эштәре бөткән, ахыры, тип уйлана-уйлана, «Баш табип Власов Юрий Петрович» тигән яҙыулы ишек янына килеп туҡтаны. Ишек шаҡып, инергә рөхсәт һораны, өҫтәл артындағы ултырған сәркәтип уның кем булыуы менән ҡыҙыҡһынды.
– Миңә Юрий Петровичты күрергә кәрәк, эш буйынса. Мин уның күптәнге танышы, – тине Сөмбөл.
Сәркәтип баш табип янына инеп китте, бер аҙ торғандан һуң сығып:
– Инегеҙ, – тине.
Бүлмәлә йәше алтмыштан уҙған, сәсе ҡойолоп бөткән, шулай ҙа әле ныҡ кәүҙәле, бик етди Юрий Петрович ултыра ине.
– Һаумыһығыҙ, Юрий Петрович, – тине Сөмбөл, йылмайып. – Мине танымайһығыҙҙыр инде. Һеҙ мине ике тапҡыр үлемдән ҡотҡарып ҡалдығыҙ, – тине, тулҡынланып.
Власов уға текәлде, күҙлеген дә һалып ҡараны.

– Хәтерләмәйем шул, бәлки, иҫкә төшөрөрһөгөҙ. Күптәрҙе үлемдән ҡотҡарырға тура килә.

– Мин алты йыл элек бик ауырлыҡ менән бала таптым. Уға тиклем дә бер ай был больницала ятып сығырға тура килгән ине. Берәй ваҡыт мин һеҙгә карточкамды күрһәтермен. Һеҙ мине һис шикһеҙ иҫегеҙгә төшөрәсәкһегеҙ. Һеҙ минең янымда бик күп ваҡыт уҙғарҙығыҙ. Үткәндәрҙе иҫкә төшөргөм килмәй. Уның ни тиклем ҡурҡыныс булғанлығын мин хәҙер генә аңланым. – Сөмбөлдөң күҙенә йәш тулды.

Ҡарт табип, ниҙер иҫенә төшөрөргә тырышып, маңлайын йыйырҙы.

– Һеҙ хаҡлы, карточкағыҙҙы ҡараһам, иҫемә төшөр ине. Ҡурҡыныс булғанлығын нисек аңланығыҙ?

Сөмбөл, бит остарын соҡорайтып, бик матур итеп йылмайҙы.

– Мин хәҙер һеҙҙең коллега.

Ишектә аҡ халатлы бер ханым күренде.

– Юрий Петрович, ҡул ғына ҡуйығыҙ әле, – тине.

Доктор «инегеҙ» тигәнде аңлатып, янындағы урындыҡҡа күрһәтте. Ҡаршыға ултырған ханым Сөмбөлгә ҡарап ҡуйҙы. Сөмбөл уны танып, йылмайып ебәрҙе.

– Һаумы, Римма, әллә һин дә танымайһың инде, Юрий Петрович та онотҡан.

– Туҡта, туҡта, хәҙер әйтәм, Булаттың ҡатыны бит һин, иҫемә төштө: Сөмбөл.

– Мин Булаттың ҡатыны түгел, шулай ҙа таныуың өсөн рәхмәт.

– Риммочка, миңә уның карточкаһын табып килтер әле, һис хәтерләй алмайым.

– Хәтерләр инегеҙ ҙә, ул бик үҙгәргән. Сәстәре ҡыҫҡа, үҙе ябыҡ, бәләкәй генә ине. Һеҙ уны бер ай депрессиянан сығара алманығыҙ, башта өс көн комала ятты. Бала табырға ла беҙгә килтерҙеләр. Һуңға ҡалып килтергәнгә, бик ауыр операция яһарға тура килде. Ул тағы үлем менән көрәште, бер апай уның янынан да китмәне.

– Бына хәҙер иҫемә төштө, һеҙҙе Верочка һаҡланы. Беҙ бит уның менән бер йортта йәшәйбеҙ, күрешкән һайын һеҙҙе иҫкә ала инек. Һуңғы ваҡытта ғына һирәк осрашабыҙ, сирләй ул. Уның янына барҙығыҙмы әле?

– Юҡ шул. Бына бөгөн барырға йыйынам. Минең ҡайтҡаныма әле ике генә аҙна, шул арала ла бик күп ваҡиға булды, һис ваҡытым етмәне. Борсолмағыҙ, мин уны ташламам.

– Беҙгә ниндәй йомош менән килдегеҙ?

– Юрий Петрович, миңә эш кәрәк. Һеҙ миңә теге ваҡытта бик оҡшанығыҙ, шуға күрә мин дә һеҙҙең юлды һайланым, – тип ул уның алдына үҙенең ҡыҙыл тышлы дипломы менән характеристикаһын сығарып һалды.

Юрий Петрович, дипломды асып ҡарағас, һыҙғырып ебәрҙе. Дипломды ҡат-ҡат ҡараны, характеристиканы ентекләп уҡып сыҡты.

– Риммочка, был элекке Сөмбөл түгел, ул хәҙер – юғары белемле ҡатын-ҡыҙ табибы, минең коллегам Сөмбөл Харисовна. Бындай йүнәлеш буйынса яҡшы хирургты күптән эҙләй инек, ҡатмарлы операция яһарҙай ҡатын-ҡыҙ хирургыбыҙ юҡ. Беҙгә килеүегеҙгә бик шатмын. Бөгөн үк кадрҙар бүлегенә инеп, документтарығыҙҙы тапшырығыҙ. Әгәр яҙылғандар ысынлап та хаҡ икән, һеҙ минең уң ҡулым булырһығыҙ. Бына бит, ауырлыҡтар кешене ниндәй һайлау алдына ҡуя, кемдер һынып юҡҡа сыға, ә көслөләр уҫаллашып, тормошта кәмһеткәндәргә үс итеп, сыбыҡ осона йәбешеп булһа ла, юғарыға үрмәләй. Мин һинең менән ысын күңелдән ғорурланам. Кем уйлаған һине, шундай сибәр ханымға әйләнерһең, тип, ышаныуы ла ҡыйын, һин ҡабат сәскә атҡанһың. Аҡ юлдар һиңә, коллега! – тип баҫым яһап әйтте доктор.

Римма Сөмбөлдө больница ишек алдына тиклем оҙатып сыҡты.

– Сөмбөл, һине, юғалған, тип тә, ҡайтып киткән, тип тә һөйләнеләр. Ҡайҙарҙа булдың һуң һин?

– Уҡырға киттем, алты йыл уҡыным. Бына хәҙер ҡайттым, – тип һүҙен теүәлләргә өлгөрмәне, яндарына Байрас килеп баҫты.

– Бәй, Байрас, ни эшләп йөрөйһөң бында?

– Ҡатынды алып килдем. Эшкә алаһығыҙмы үҙен? – тип Сөмбөлдөң биленән ҡосаҡлап алды.

Римма телһеҙ ҡалды, дөрөҫ ишеттеме, тигән һымаҡ уларға ҡарап ҡуйҙы. «Ағаһының ҡатынына өйләндеме икән ни?»

Байрас, уның уйын уҡығандай:

– Ул теге ваҡытта ла минең ҡатын ине, мин уны уҡырға ғына ебәргән инем бит. Әйҙә, матурым, эшең бөткән булһа, өйгә ҡайтабыҙ, – тип ҡатынын етәкләп алды.

Сөмбөл эшкә сыҡты. Беренсе көндәрҙә Юрий Петрович уның һәр эшен һынап-күҙәтеп торҙо. Коллектив Сөмбөлдө яратып ҡабул итһә лә, көнләшеүселәр аҙ булманы. Юрий Петрович уны үҙ янынан йыраҡ ебәрмәҫкә тырышты. Операция көндәре графигы алдан төҙөлә, Сөмбөл өсөн ҡайһы бер еңел операцияларға айырым график төҙөнөләр. Тәжрибәле табип йәш коллегаһының беренсе операцияһын үҙе ҡарап тороп яһатты. Яңы уҡыу бөтөрөп ҡайтҡан тимәҫһең, Сөмбөл операцияны тап-таҙа һәм үҙ-үҙенә ышанып эшләне. Сөмбөл Ғәлимә апаһының ҡул аҫтында бындай операцияларҙы аҙ үткәрмәне, шуға күрә уның тәжрибәһе башҡаларға ҡарағанда күпкә юғары ине. Юрий Петрович аҙна буйы бөтә операцияларҙы Сөмбөлдән яһатты, үҙе уның күҙәтеүсеһе генә булды. «Ҡыйыу тотона, – тип уйланы ул Сөмбөл тураһында, – былай дауам итһә, оҙаҡламай миңә алмаш буласаҡ».

– Һеҙ бик ҡыйыу башланығыҙ, Сөмбөл Харисовна, хуплайым. Былай оҫта эшләргә кем өйрәтте?

– Минең уҡытыусыларым бик һәйбәт, тәжрибәле табиптар ине. Унан мин өсөнсө курстан апайым янына больницаға йөрөй башланым, төнгө сменала ул мине операция яһау серҙәренә өйрәтте. Йәйге каникулда уның янында эшләнем. Һуңғы курста бигерәк тә яман шештәр өҫтөндә эшләргә тура килде.

– Бик яҡшы. Сөмбөл Харисовна, мин һеҙҙең эшегеҙҙән ҡәнәғәт.

Улар ауыр операцияларға бергә әҙерләнә башланылар.

Бер көндө Сөмбөлдө ҡабул итеү бүлмәһенә саҡырттылар. Ул ашығып беренсе ҡатҡа төштө. Байрасты күреп, ниҙер булған, тип ҡурҡып ҡуйҙы.

– Байрас, ни булды?

– Ҡурҡма, бер ни булманы. Һине аҡ халатта күргем килде, – тип ул ҡатынын бер ситкә тартты. – Һағындым.

– Ни һөйләйһең, әле ун ике генә бит.

– Ә мин һигеҙҙә үк һағынған инем. – Сөмбөлдө ҡосаҡлап үпте лә көлә-көлә сығып китте. Сығышлай:

– Ә һин иң сибәр табип, – тине.

Байрастың ҡыланыштарына Сөмбөл әкренләп эйәләшеп килә. Ире уны бер күреү өсөн йә бер үбер өсөн көндөң теләһә ҡайһы ваҡытында килеп китергә мөмкин.

Сөмбөл менән Байрас Верочканың хәлен белергә бергә барҙы. Ҡарсыҡ, уларҙың өйләнешкәндәрен ишеткәс, аптыраманы.

– Мин шулай булырын беләм инем, – тине.

Сөмбөлдөң ҡайтыуына ул шатланып туя алманы. Ул бик ҡартайған, һуғыш йылдарындағы һалҡын тейҙереүҙәре лә эҙһеҙ ҡалмаған. Аяҡтары ауыртҡанға, урамға һирәк сыға икән. Сөмбөл эштән ҡайтышлай уға укол яһай, ашарға ризыҡтар алып инә башланы. «Мин һинең алда ғүмерем буйы бурыслы, Верочка. Мин һине үлгәнсе ташламам», – тине күңелләнеп.

Азамат мәктәпкә уҡырға инде. Байрас:

– Бәләкәй бит әле, тағы бер йылдан бирербеҙ, – тип ҡараған ине.

– Азамат уҡый-яҙа белә. Әнүәр ағаһы уны уҡырға-яҙырға, шахмат уйнарға өйрәтте. Буйы еткән, башы бар, әйҙә, уҡыһын, – тип Сөмбөл ризалашманы.

Тормош шулай дауам итте. Кем уҡыны, кем эшләне.

Сөмбөлдөң эше ни тиклем ҡатмарлы икәнде Байрас та аңлай ине. Сөмбөл эшләй башлау менән, уларға телефон индерҙеләр. Төндөң теләһә ҡайһы ваҡытында саҡыртып йә килеп үк алдылар. Ул төндәрҙә Байрастың күҙенә йоҡо инмәне. Операцияларҙың төрлөһө булды: уңышлыһы, уңышһыҙы. Ҡайһы бер көндәрҙә борсолоуҙан Сөмбөлдөң тамағына бер ҡабым ризыҡ үтмәне.

Баштараҡ йәш табипты күреп, ҡайһы бер ауырыуҙар:

– Бигерәк йәш, нисек яһар? – тип ҡурҡып, операциянан баш тартты, барыһы ла Власовтан яһатырға сират торҙо.

Эйе, Юрий Петрович – районда билдәле кеше, танылған табип.

– Һин уларға үпкәләмә, килер бер ваҡыт – һиңә лә сират торорҙар. Һин үҙ эшеңдең оҫтаһы. Оҙаҡламай мин лайыҡлы ялға китермен. Сәләмәтлек артығын эшләргә ҡушмай: бил, теҙ ауырта, арҡа һыҙлай. Хәйер, был – һөнәри сиребеҙ. Кешене дауалайбыҙ, ә үҙебеҙгә сират етмәй. Шулай итеп, был хужалыҡ минән һуң һиңә ҡаласаҡ, – тип ҡарт табип йәш коллегаһын тынысландырҙы.

Сөмбөлгә больницала ауылдаштарын, класташтарын осратырға тура килде. Уны күреп, барыһы аптырашта ҡалды. Власов менән эшләүенә ышанманылар ҙа шикелле.

Сөмбөл һәр көндө ҡайтыр алдынан үҙенең ауырыуҙары янына инеп, хәлдәрен белешеп сығыуҙы ғәҙәткә алды. Бөгөн дә, ҡайтып киткәнсе, операция яһатҡан ханым янына инергә уйланы. Кисен ауырыуҙар янына хәл белергә туғандары, дуҫтары йыйыла. Ҡатындың үҙен яҡшы хис иткәнен күреп һөйөндө, шәфҡәт туташына кәрәкле күрһәтмәләрҙе биргәс, иртәгә операция буласаҡ ауырыу янына инде. Палатала Фәриҙәне күреп, икеһе лә ҡаушап ҡалды. Сөмбөл тиҙ генә үҙен ҡулға алды.

– Һаумы, Фәриҙә. Нимә булды?

– Бына, һеңлемде операцияға һалдылар.

Сөмбөлдө күреп, ауырыуҙар йәнләнеп китте.

– Һаумыһығыҙ, хәлдәрегеҙ нисек? – тине Сөмбөл, барыһын күҙҙән кисереп. Фәриҙәнең илап-шешенеп бөткән һеңлеһен күреп, уны тынысландырырға ашыҡты.

– Ни булды? Ниңә илайбыҙ? Кем рәнйетте? – тип сәсенән һыйпаны, пульсын һананы.

– Миңә операцияны яңы уҡып ҡайтҡан йәш бер хирург яһаясаҡ икән. Минең ике балам бар, үлтереп ҡуйһа, балаларымды кем ҡарар? – тип үкһене йәш ханым.

Сөмбөл һүҙҙең үҙе тураһында икәнен бик тиҙ аңлап алды.

– Туҡтағыҙ әле, ул йәш хирург берәйһен үлтергәнме әллә? Ниңә улай ҡурҡаһығыҙ?

– Уныһын белмәйем, ләкин мин унан операция яһатырға теләмәйем.

Сөмбөл сабыр ғына уның тынысланғанын көттө.

– Бөттөгөҙмө инде, илап туйҙығыҙмы? Хәҙер мине тыңлағыҙ: мин Юрий Петрович менән һөйләшермен, операцияны ул үҙе яһар һеҙгә, тынысланығыҙ. Борсолорға ярамай. Операцияның уңышлы сығыуының һикһән проценты ауырыуҙың үҙенән тора. Һеҙ үҙегеҙгә үҙегеҙ ярҙам итергә тейеш. һеҙҙең төп бурысығыҙ – тыныс булыу, ҡалғаны инде – беҙҙең эш. Ҡурҡһағыҙ, сирегеҙ әллә ҡайҙа ҡасып ҡалырға мөмкин, ә тыныс булһағыҙ, беҙ уны еңел табып, юҡҡа сығарырбыҙ. Һеҙ тиҙерәк терелерһегеҙ.

– Һеҙгә әйтергә еңел, үҙегеҙ бысаҡ аҫтына ятып ҡараһағыҙ, улай тимәҫ инегеҙ әле.

Сөмбөл уйсан ғына:

– Мин күргәнде һеҙгә күрергә яҙмаһын. Мин табип, ләкин мин дә кеше, һеҙҙең кеүек ҡатын-ҡыҙ. Сиргә бөтә кеше бер: табип та, министр ҙа. Мине урап уҙыр, тип бер кем дә әйтә алмай. Шуға күрә тынысланығыҙ, үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ. Бына был дарыуҙы эсегеҙ ҙә тынысланып йоҡлағыҙ, – тип кеҫәһенән бер дарыу алып бирҙе. – Һөйләштекме? Иртәгә һеҙҙе Власов үҙе ҡаршы алыр. Барығыҙға ла тыныс йоҡо! – тип сығып китте.

Ул сығып киткәс, шәфҡәт туташына бер-бер артлы һорауҙар яуҙы.

– Кем булды был? Үҙе йәш кенә, шундай йомшаҡ һөйләшә, күңелгә рәхәт булып китте.

– Һеҙ операция яһатырға ҡурҡҡан йәш хирург Арыҫланова ошо була инде, – тип йылмайҙы шәфҡәт туташы. – Күрҙегеҙме, ниндәй тыныс, эшен дә еренә еткереп башҡара. Эш йәшлектәме ни...

Икенсе көндө Фәриҙәнең һеңлеһен алып ингәндә, операция өҫтәле янында Власов баҫып тора ине. Сөмбөл йәш ханымға, тынысланығыҙ, теләгегеҙҙе үтәнем, тигәндәй, йылмайып ҡараны. Ауырыу:

– Ниндәй матур күҙҙәр, – тип уйлап, әкрен генә йоҡоға китте.

Ханымдың ҡурҡыуы урынлы булған: инәлектең ярты яғын бик ҙур шеш биләп алған. Юрий Петрович менән йәш табип бер-береһенә ҡарашып алдылар, үҙ-ара кәңәшләшеп, уртаҡ бер фекергә килделәр: инәлектең яртыһын киҫеп алырға, иҫән ҡалған яҡтың каналдарын ябырға. Былдай хәлдә башҡа бала табырға ярамай. Операция биш-алты сәғәткә һуҙылды. Сөмбөл арыны, аяҡтары ҡалтырай башланы. Операцияны тейәлләп, арып-талып, коридорға сығып ултырҙылар. Сөмбөлдөң сәстәре тирләп, тағы ла бөҙрәләнеп маңлайына йәбешкән.

– Маладис, Сөмбөл Харисовна, һеҙ иҫ киткес яҡшы эшләнегеҙ. Мин бик ҡәнәғәт, – тип коллегаһын маҡтап алды Юрий Петрович. – Хәҙер һөҙөмтәһен генә көтәһе ҡалды.

– Унда ауырыуҙың туғандары операция бөткәнен көттө. Ни тиергә? – тине йәш шәфҡәт туташы.

– Әйҙәгеҙ, тынысландырайыҡ үҙҙәрен. Көтөү – ауыр нәмә.

Сығыуға уларҙы ауырыуҙың туғандары уратып алды. Улар араһында Фәриҙә лә бар ине.

– Юрий Петрович, һеҙ үҙегеҙ генә аңлатығыҙ инде, – тип Сөмбөл улар менән иҫәнләшеп, сисенеү бүлмәһенә инеп китте.

Сөмбөл иртә-кис ауырыуҙары янына инеп йөрөгәнгә күрә, уға Фәриҙә менән йыш осрашырға тура килде. Фәриҙәнең һеңлеһе Фәймә Сөмбөлдө шатланып ҡаршы ала торған булды.

– Беҙ бит һеҙҙең менән туғандар икән, терелеп сыҡҡас, Алла теләһә, апайымдар менән бергә ҡунаҡҡа саҡырам әле. Килерһегеҙ бит?

– Һин башта терел, унан күҙ күрер. Һиңә бик ныҡ һаҡланырға кәрәк, ҡунаҡтар әле алда күп булыр.

Бына шулай һалмаҡ ҡына көндәр үтә торҙо. Кемделер йыуатты, кемделер терелтте, күп рәхмәттәр ишетте. Үҙе тураһында ғына уйларға ваҡыты ҡалманы.

Бер көндө операцияға инер алдынан башы әйләнеп, күңеле болғанып китте. Был ҡарт табиптың ҡарашынан ситтә ҡалманы.

– Ни булды, ағарып киттең, күптәнме был хәл, сибәрем?

– Белмәйем, әллә ни булды, башым әйләнә.

– Ни булғаны аңлашыла инде, Сөмбөл Харисовна: һеҙ бит – ир ҡатыны.

Сөмбөлдөң башына һуҡҡандай булды, күңеленән көндәрҙе һанай башланы. Һанай торғас, осона сыҡты: беренсе көндө үк ауырға уҙған булһа кәрәк, эш менән мауығып һиҙмәгән. Дүртенсе ай киткән. Бына һиңә ҡатын-ҡыҙ табибы. Башҡаларҙы быны өсөн тәнҡитләр ине, ә үҙе? Эшләргә ине бит әле. Байрас ни тиер? Ярар, хәҙергә әйтмәй торорға кәрәк, Яңы йылға бүләк булыр.

Яңы йыл етте. Азаматтың ҡышҡы каникулы башланды. Ул да, Әлфис кеүек, мәктәптә өнәп бөтөрмәне. Уны ауылға өләсәй-олатаһы янына ҡайтарып ҡуйҙылар. Азамат олатаһы менән атта йөрөнө, урам малайҙары менән тау шыуҙы. Атаһы кеүек таҙа, матур, әсәһе кеүек һөйкөмлө һөйәкле Азамат бөтә кешене үҙенә тартып торҙо. Ҡуйы ҡара ҡаштары аҫтынан балҡып торған зәңгәр күҙҙәре, бит соҡорҙары кешене ҡабат боролоп ҡарарға мәжбүр итә. Күрше-тирә уның матурлығына, асыҡ йөҙлө, йомшаҡ телле булыуына һоҡлана.

– Олатай-олатай, – тип бер нәмә һөйләй башлаһа, әсәһе шикелле сылтыратып көләп ебәрә, уға ҡушылып олатаһы көлә.

– Өләсәй-өләсәйем, миңә ни бешерәһең? Үлеп ашағым килә, – тиһә, өләсәһе юҡ әйберҙе табып, ейәнен һыйлай.

Азаматты ҡышҡы каникулға ҡайтарып ҡуйғас, Байрас менән Сөмбөл өйҙә икәү генә ҡалдылар. Байрастың эшендә Яңы йыл кисәһен бик ҙурлап уҙҙырырға уйлайҙар ине. Директоры бер көндө Байрасты саҡырып алып:

– Ҡатыныңды алып килеп күрһәт инде, улайһа барыбыҙҙан йәшереп тотаһың, туй ҙа яһатманың. Иртәгә киске алтыла кафеға йыйылабыҙ, һуңламағыҙ, – тине.

Байрас менән Сөмбөлгә быға тиклем бергәләп кеше араһына сығырға тура килмәне. Бөгөн беренсе сығыуҙары. Сөмбөл быға бик етди ҡараны, оҙон буйлы, сибәр иренә нисек тә тиң күренергә теләне. Ире менән эшләүселәрҙең уны энә күҙенән үткәрәһеләре билдәле, шуға күрә ул барлыҡ кейемдәрен яңынан ҡарап сыҡты. Аҙаҡтан сығарылыш кисәһенә тектергән күлдәгенә туҡталды. Был күлдәге тегелеше менән Яңы йыл кисәһенә тура килә, яңы беленә башлаған эсен дә ҡаплай ине. Төҫөнә тура килтереп, бейек үксәле туфли алды. Күҙенә һөрмә тартты, иренենә әҙ-мәҙ иннек һөрттө, сәсен байрамса матур итеп яһатты, алтындарын таҡты. Ире ҡайтып ингәндә, ул кафеға барырға әҙер ине.

Байрас уны күреп телһеҙ ҡалды. Хәйер, ҡатынын һәр көн күрһә лә, уға беренсе тапҡыр күргәндәй һоҡланып ҡарай. Ул көн һайын яңы яғы менән асыла барҙы. Сөмбөл – серле һандыҡ. Байрас уны һәр көн үҙе өсөн әҙләп-әҙләп аса.

– Шулай барһам яраймы? Һиңә оҡшаймы? – тине Сөмбөл, әкрен генә әйләнеп.

– Һинең менән булыуыма мин әле һаман ышанып бөтә алмайым. Матур төштә йәшәгән кеүек. Һиңә нимә кейһәң дә килешә, – тип ҡатынын ҡосаҡлап алды.

Сөмбөл иренә, Яңы йыл бүләгем тип, ҡуйы зәңгәр төҫтәге күлдәк кейҙерҙе һәм, серле йылмайып:

– Тағы бер бүләгем ҡайтҡас булыр, – тине.

Байрас менән Сөмбөл кафеға килгәндә, халыҡ йыйылған, музыка уйнай ине. Бөтә халыҡ уларға боролоп ҡарап, үҙ-ара бышылдаша башланы. Береһе оҙон буйлы баһадир, икенсеһе бәләкәй генә ҡурсаҡ кеүек күренһәләр ҙә, матур пар ине улар. Кисә буйына Сөмбөлдө әле береһе, әле икенсеһе бейергә саҡырҙы. Директор ҙа:

– Байрас Шәфҡәтович, тормош иптәшегеҙ менән бер әйләнәйем, рөхсәт итегеҙ, – тип Сөмбөлдө бейеүгә саҡырҙы.

– Беҙҙең батырҙы кем йүгәнләгәнен бик күргем килгәйне. Күптәр тырышып ҡараны, булдыра алманылар. Һеҙ бик матур пар.

Шулай итеп, кеше күреп, кешегә күренеп ҡайттылар. Ҡайтҡас, ҡапма-ҡаршы ултырып сәй эстеләр. Байрас ҡатынына текәлеп ҡарап ултырҙы.

– Ә мин көнләшәм икән. Һин башҡалар менән бейегәндә, билеңә һалған ҡулдарҙы өҙөп алырҙай булдым. Эшегеҙҙә ирҙәр күпме?

– Күп, – тип йылмайҙы Сөмбөл. – Әгәр мин көнләшә башлаһам? Эшеңдә ана ни тиклем ҡатын-ҡыҙ, кис буйы һинән күҙҙәрен алманылар. Минән ниңә көнләшергә, үҙем бәләкәй генә, һинең шикелле сибәр түгелмен...

Башлаған һүҙен әйтеп бөтөрөргә лә мөмкинлек бирмәйенсә, Байрас уны күтәреп алды.

– Бәләкәй булғас, күтәрергә яйлы, ҡосағыма инеп бөтәһең, – тип һөйләнә-һөйләнә, Сөмбөлдө ҙур бүлмәгә алып сыҡты. – Ҡайтҡас, тағы бер бүләк вәғәҙә иткән инең түгелме?

– Ашыҡма, сабыр ит.

Сөмбөл Байрастың алдынан төшөп, кейемдәрен алмаштырырға инеп китте. Ул сәстәрен таратып, йоҡо кейемен кейеп, ире янына сыҡты.

– Байрас, оҙаҡламай беҙгә тағы бер карауат кәрәк буласаҡ.

– Ниңә? Әллә минән айырым йоҡламаҡсы булаһыңмы? Үлһәм дә риза түгелмен. Әрәм уҙған алты йылдың үсен алам, тип күптән әйткән инем шикелле.

– Етте, алдың үсеңде. Шуға күрә бына хәҙер бер йыл айырым йоҡлатам үҙеңде.

– Ниңә, Сөмбөл? Әллә минән туйҙыңмы? Оҡшамайыммы?

Сөмбөл уға әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәйенсә, усы менән ауыҙын ҡапланы, уның ҡулын үҙенең эсенә ҡуйҙы.

– Һин минән башҡа бер нәмә лә күрмәйһең, ә бында тағы бер кеше бар. Уға инде йән инде, – тип бышылданы.

Байрастың күҙендә әллә ҡурҡыу, әллә аптырау сағылды, ятҡан урынынан тороп ултырыуын һиҙмәй ҙә ҡалды. Сөмбөл уның юғалып ҡалыуын күреп аптыраны:

– Байрас, ни булды? Һиңә лә бала кәрәк түгелме? – тине, ҡурҡып. – Мин шатланырһың тип уйлағайным.

Байрас, бер һүҙ әйтмәй, ҡатынын күкрәгенә ҡыҫты ла шашып үбә башланы.

– Кәрәк, кәрәк. Ләкин мин һинең өсөн ҡурҡам. Азаматты тапҡан ваҡытта доктор, мине һинең ирең тип белеп, башҡа бала табырға ярамай, тигән ине. Шуға күрә бала тураһында хыялланманым. Ә һин таба алырһыңмы һуң? Теге ваҡыттағы кеүек булмаҫмы?

– Һинең кеүек иргә үлһәм дә бер бәпес табып бирәм инде, ләкин кем булыр, белмәйем.

– Сөмбөл, тыңла әле. Мин балаһыҙ йәшәй алырмын, һинһеҙ йәшәй алмам. Миңә ундай ҡорбан кәрәкмәй, беҙҙең улыбыҙ бар. Һинең теге ваҡытта интегеүҙәреңде мәңге онотаһым юҡ. Сөмбөл, мин һине юғалтыуҙан ҡурҡам. Бәлки…

– Т-сс, – тип бармағын Байрастың ирененә ҡуйҙы ҡатын. – Уға йән ингән, ул барыһын ишетә, аңлай, атай минән баш тарта тиер, рәнйер. Улай әйтеү түгел, уйлай ҙа күрмә. – Уның биттәрен усына алып, күҙенә ҡараны. – Ҡурҡма, һин минең табип икәнемде онотма, барыһы яҡшы булыр. Һинең артыҡ дәртеңде генә ҡайҙа ҡуйырбыҙ, – тип яратып, Байрастың ирендәренән үбеп алды. – Ситтәргә ҡарай башлаһаң, ни эшләрмен?

Ошо көндән Байрас өсөн яңы тормош башланды, ул тыныслығын юғалтты, ҡатынының һәр һулышын аңларға тырышты. Сөмбөл иренән көлдө.

– Кем ауырлы: һинме, минме? Бөтөнләй сиргә һабыштың, ябыҡтың.

– Һин иҫән-һау булып, бәпес алып ҡайтҡансы мин тынyслана алмам.

– Байрас, йәнем, мин сирле түгел, мин – ауырлы. Ваҡыты еткәс тә ҡайғырырға өлгөрөрһөң әле…

# Журнал уҡыусылар ижады

**Мөғлифә ҮТӘШЕВА**

## *Хыялдарым минең*

*Бөгөн улар мине күреп китте,*
*Алдарымда туҡтап торҙолар.*
*Башын эйеп бер аҙ йәйләне лә*
*Күккә күтәрелеп уҙҙылар.*

*Хыял, хыял, тиеп һөйләһәм дә,*
*Белмәй инем ниндәй булғанын.*
*Минең хыял йылҡы тоҡомонан,*
*Ут ҡанатлы минең хыялым.*

*Ут тояҡлы икән, етеҙ, сапсан,–*
*Һомғол һыны, ебәк ялдары...*
*Урап-урап сабып йөрөнө лә*
*Алдарыма килеп туҡтаны.*

*Алдарыма килгәс кенә күрҙем:*
*Күҙҙәрендә осҡон юҡ таһа,*
*Ялҡын-ҡанаттары ҡайырылған,*
*Үҙе, башын эйеп, туҡтаған.*

*Эй, тетрәнсе, йәнем, күҙ йәштәрем*
*Йөрәгемде өтөп сыҡтылар.*
*Нишләткәнмен һеҙҙе, хыялдарым,*
*Ҡайҙа булған яҡты саҡҡылар?*

*Үптем хыялымдың күҙҙәренән,*
*«Ғәфү итсе, – тинем, – яраймы,*
*Мин яратам һине элеккеләй,*
*Тик бер аҙға аҙап ҡалғанмын...»*

---

*Мөғлифә Үтәшева Йылайыр районы Исҡужа ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар мәктәптә, аҙаҡ районда мәғариф бүлегендә инспектор булып эшләй. Әлеге көндә хаҡлы ялда.*

*Күҙ күреме хәтлем ут-ҡанаттар,*
*Дауыл-ҡойроҡ, ебәк ялдары,*
*Күҙҙәренән шатлыҡ-осҡон сәсеп,*
*Осто хыялдарым юғары.*

## Барыһы ла үтә

*Барыһы ла үтеп китә икән:*
*Көндәр, төндәр, йылдар, юлдары,*
*Барҙар, юҡтар, дуҫтар, иштәре лә,*
*Яуған ҡарҙар, аҡҡан һыуҙары.*
*Иҫкән елдәй шаулап үтә икән:*
*Йор исемдәр, йомарт килемдәр,*
*Ҡайҙаһығыҙ, беҙҙең йәшлектәге*
*Ут-егеттәр, һылыу килендәр?!*
*Барыһы ла бөтә, үтә икән,*
*Маңлайҙарға һырҙар ҡалдырып.*
*Хатта балалар ҙа китә икән,*
*Ояларҙы яңғыҙ ҡалдырып.*
*Юҡҡа сыға тауҙар, илдәр, телдәр,*
*Ҡойолалар сатнап, ҡаялар.*
*Уңалмай ҙа нишләп, һыҙлай икән,*
*Ғүмеркәйҙәр менән уҙмай икән*
*Йөрәктәрҙә ҡалған яралар?*

## Дәрес

*Күп ерҙәргә юлым төшкөләне,*
*Мәсеттәрҙең күрҙем төрлөһөн,*
*Һәр береһе – дәрес, вәғәз кеүек,*
*Һәр береһе – күңел көҙгөһө.*

*Әммә иҫтә ҡалды Юлдыбайҙың*
*Иҫке генә мәсет бинаһы.*
*Ғүмерҙә лә онотмаҫлыҡ итеп*
*Дәрес бирҙе ғәйет йомаһы.*

*Ул – намаҙлыҡ. Ябай аҡ тауарҙан*
*Ситен ҡайып, сигеп яһалған.*
*Иҫке генә ике табан юлы*
*Башҡараҡ төҫ менән яһалған.*

*Оло ғына апай уға баҫып*
*Намаҙ уҡый, тарта тиҫбеһен.*
*Йәшлегендә сиккән гөлдәр балҡып,*
*Албырғата микән хисләһен?*

*Бәлки, ул намаҙлыҡ ҡомартҡылыр*
*Әсәй-өләсәһе ҡулынан.*
*Улар ошо намаҙлыҡты тотоп*
*Йөрөгәндер мәсет юлынан.*

*Күпме тапҡыр ошо намаҙлыҡта*
*Мөкиббән дә китеп ултырып,*
*Намаҙ уҡып, теләп, доғаларҙан*
*Нурлағандыр улар өй түрен.*

*Тубыҡ тәңгәлдәре һиҙерәгән,*
*Ямау һалған ошо намаҙлыҡ*
*Һүҙһеҙ генә дәрес бирҙе миңә*
*Ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ.*

## *Намаҙ – ул ...*

*Намаҙ – ул нур.*
*Күңелемдә ҡараңғылыҡ*
*баҫып китһә,*
*Ауырлыҡтар баштарымдан*
*ашып китһә,*
*Хәсрәттәрҙән быуындарым*
*бушап китһә,*
*Күңел ҡатып, йән йылыһы*
*ташлап китһә,*
*Намаҙ, һиңә өмөт итеп*
*ҡарайымсы,*
*Үҙ-үҙемде һөйрәп алға барайымсы,*
*Нурың аша киләсәккә бағайымсы,*
*Һинең менән был тормошто*
*аңлайымсы.*
*Намаҙ – ул йыр.*
*Күңел ярып, ҡанат ҡағып осам*
*тиһә,*
*Шатлыҡ тулып, йәнем,*
*Донъя ҡосам, тиһәм,*
*Ҡыуаныстар,ҡайғыларҙан өҫкә*
*сығып,*
*Күкрәгемә һыймай, ярҙан ашам,*
*тиһә,*
*Намаҙ, һиңә кәңәш итеп*
*ҡарайымсы,*
*Алҡышымды алдарыңа һалайымсы,*
*Һаҡла, зинһар, һаҡла, тиеп һорайымсы,*
*Яраларға дауа – имдәр табайымсы.*

*Намаҙ – ул ут.*
*Яҙмыш алға ҡаты-ҡаты*
*һынау теҙһә,*
*Дошмандарым үксәләргә*
*баҫып килһә,*
*Әшәкеләр өҫкә сығып, шашып*
*көлһә,*
*Хыялдарым сәскә атмай,*
*шиңеп бөлһә,*
*Ныҡлыҡ һорап, тағы һиңә*
*торайымсы,*
*Һалдат итеп мин үҙемде*
*тояйымсы,*
*Һинең рухтан арҡа-терәк*
*табайымсы,*
*Ялҡыныңды күңелемә*
*алайымсы.*

*Намаҙ – ул ҡот.*
*Намыҫымда һәр көнөмдө,*
*һәр тынымды*
*Яҙмыш, үҙең һаҡла ишен,*
*доға ҡылам.*
*Балаларым өсөн изге*
*теләктәрҙе*
*Тәсбих итеп һәр намаҙҙа*
*теҙеп барам,*
*Уттан-һыуҙан һаҡла, тием,*
*илкәйемде,*
*Үҙем илле, илем һилле*
*булһа ине,*
*Ер-һыу – иркен, халҡым имен*
*торһа ине,*
*Күңелдәргә иман-инсаф*
*тулһа ине.*

*Намаҙ – ул нур,*
*Намаҙ – ул йыр,*
*Намаҙ – ул ут.*
*Намаҙ – ул ҡот,*
*Намаҙ – оран.*
*Намаҙ – иман.*
*Йә, Хоҙайым,*
*Айырмасы намаҙымдан!*

**Гөлкәй ИСМӘҒИЛЕВА**

## *Изге ер*

*Көмөш һыулы Эйек туғайында*
*Балан, муйыл уңып үҫкән ер.*
*Йомшаҡ ҡына һыйпап, ҡылғандарҙан*
*Ап-аҡ диңгеҙ яһай иҫкән ел.*

*Текә ҡаяларҙың түбәһенә*
*Сая бөркөт оя ҡорор ер.*
*Батырҙарға, сибәр ҡатындарға,*
*Байлыҡтарға тулы ғорур ер.*

*Ете ырыу килеп төйәк иткән,*
*Әүлиәләр тыуып торған ер.*
*Күпме генә маҡтап йырлаһаң да,*
*Һүҙ еткереп булмай торған ер.*

*– Ҡайһы тараф? – тиеп һорамағыҙ,*
*Ул гүзәл ер – минең тыуған ер.*
*Ҡайҙа ғына яҙмыш ташлаһа ла,*
*Гел үҙенә тартып торған ер.*

## *Хоҙай бүләге*

Хоҙай халыҡтарға ер тараҡкан
саҡта, ҡунаҡ килеү сәбәпле,
билдәләнгән ваҡытҡа башҡорт
барып етмәгән.

Легенданан.

*Үҙе өсөн һайлап алған ергә*
*Хужа итеп Алла башҡортто,*
*Күккә ашҡан. Һәм бойорған уға:*
*– Ярат, һаҡла, – тиеп, – баш йортто!*

*Башҡорт биргән уға изге антын:*
*– Булырмын мин ергә бик һаҡсыл!*
*Был легенда һөйләй: борондан уҡ*
*Халҡым булған асыҡ, ҡунаҡсыл.*

---

*Гөлкәй Исмәғилева Күгәрсен районының Моҡас ауылында тыуған. Күмертау педагогия училищеһын тамамлаған. Хәҙерге көндә Федоровка районының Ҡораласыҡ урта мәктәбендә балаларға дәүләт теле — башҡорт телен уҡыта. Әҫәрҙәре республика, район матбуғатында даими баҫыла килә.*

*Шул саҡтарҙан алып ожмах кеүек*
*Гүзәл ерҙә халҡым көн иткән.*
*Ул ҡунаҡсыл һаман, шуға ла бит*
*Нисә милләт беҙҙе үҙ иткән.*

## Һеҙ ҡайҙа?

*Ауыл буйлап теге оска табан*
*Китеп барам ҡояш байығас.*
*Шундай яҡын бында һәр бер урам,*
*Бында таныш һәр йорт, һәр ағас.*

*Ауыл тып-тын. Өйҙәр ҡарап ҡала*
*Моңһоу ғына, ҡапҡа артынан.*
*Эттәр өрөп сыҡмай хәҙер ҡаршы,*
*Элеккеләй, йәше, ҡартына.*

*Ҡасан ғына нурҙар сәсеп торған*
*Тәҙрәләрҙә уттар күренмәй.*
*Яңғыҙ донъя көткән инәйҙәрҙең*
*Нигеҙенең ҡото һиҙелмәй.*

*...Гармун тартып йәштәр үтер ине,*
*Шау-гөр килер ине балалар.*
*Гөрләр ине ҡырҙар көнө-төнө,*
*Көнләшерлек ине ҡалалар.*

*Ҡайҙа ҡалды, ауыл, шундай сағың,*
*Үлән баҫҡан ниңә юлдарың?*
*Ҡайҙа һинең «атай нигеҙе» тип*
*Йәнен бирер ҡыҙ һәм улдарың?..*

## Тулған ай

*Ҡып-ҡыҙыл шар кеүек, яйлап ҡына*
*Тау артынан тулған Ай ҡалҡты.*
*Тылсымдарын һирпеп серле күктең,*
*Ергә ҡарап, аҫҡа күҙ атты.*

*Ә гүзәл Ер сибәр юлдашына,*
*Сәләм биреп, наҙлы өндәште:*
*– Айһылыуым, төш яныма минең! –*
*Йондоҙҙарҙан, гүйә, көнләште.*

*– Бар ғаләмгә көндөҙ хужа Ҡояш,*
*Ә мин һуңлап, кисен килермен.*

*Юл күрһәтеп барса ғашиҡтарға,*
*Услап нурҙарымды һибермен.*

## Йәшен

*Яҙғы йәшен булат ҡылысмы ни:*
*Ялт-йолт итә, күкте телгеләй.*
*Ут ямғыры булып ергә яуа –*
*Әле былай, әле тегеләй.*

*Бөйөк Йыһан, кескәй Ер шарына*
*Ҡаныҡмасы, утың ал унан.*
*Былай ҙа күп яралары уның*
*Мәрхәмәтһеҙ кеше ҡулынан.*

## Ләйсән

*Яҙ килеүен ҡотлап, көнө буйы*
*Ҡоя, яуа ләйсән ямғыры.*
*Ер туйыныр дымға, уңыш булыр,*
*Эй, Хоҙайым, рәхмәт яуғыры!*

*Ер йәшәрер. Туғай, болондары*
*Сәскәләрҙән алға буяныр.*
*Күктән аҡҡан ҡояш нурҙарынан*
*Күңелдәрҙә наҙҙар уяныр.*

*...Тыуған ергә түгеп ләйсән яуа,*
*Әйтерһең дә, һауа ергә ауа...*

## Һуңлаған бәхет

*Моңһоу күҙҙәң болоҡһоуы*
*Күсте кеүек күңелгә.*
*Таптым да кире юғалттым,*
*Һағыштары – ғүмергә.*

*Яҙмыштарҙан уҙмыш булып*
*Юлдар ҡушылған ине.*
*Ҡайтауазы йәшлегемдең,*
*Былай шаяртма мине!*

*Килтермәҫ бәхет был һөйөү,*
*Көйҙөрөр ялҡындары.*
*Уңалмаған яраларға*
*Өҫтәлер яңылары.*

*Араларҙа – йылдар, юлдар,*
*Нисә кеше яҙмышы.*
*Йәшлектәге бер хатабыҙ –*
*Төҙәлмәҫлек яңылыш ул.*

## Саф ине...

*Ҡарағаттай ҡара серле күҙҙәр*
*Ғашиҡ иткән ине үҙенә.*
*Ул мөхәббәт шундай көслө ине,*
*Ялҡынына түҙһәң түҙ генә.*

*Ул мөхәббәт шундай ҡайнар ине,*
*Һис һүрелмәҫ кеүек мәңге лә.*
*Туңдырғанда яҙмыш һалҡындары*
*Ҡайнар тынын өрә әле лә.*

*Ул мөхәббәт шундай нурлы ине,*
*Аҡ шишмәләй ине сафлығы.*
*Шул һөйөүҙең сихри көсө менән*
*Һаҡлайым мин күңел аҡлығын.*
*Мөхәббәтем шундай саф ине...*

## Үкенес

*Артҡа ҡарап әгәр уйға ҡалһам,*
*Өҙөлөп киткән кеүек йөрәгем.*
*Күпме ғүмер бушҡа әрәм үткән,*
*Күпме ерҙә булған кәрәгем.*

*Үтәлмәгән күпме йомош ҡалған,*
*Нәҙер булып быуыр нисәһе?*
*Йәшлегемдең әллә бошмаҫлығы?*
*Әллә тормош шулай кисәге?*

*Ҡалған ғүмер минең етер микән*
*Булмышымды ҡыуып етергә?*
*Әллә Хоҙай үҙе ҡушҡан миңә*
*Ерҙән үкенесле китергә?*

**Зөһрә САФИНА**

## *Аҡ нур*

*Ауыр ҡара пәрҙәләрҙән*
*Һарҡылып инде аҡ нур.*
*Ҡара төндән ал таң матур,*
*Ал таңдарҙан көн матур.*

*Өйрәнелгән һуҡыр тормош*
*Элә ҡара пәрҙәһен,*
*Аҙаштыра бирә әле*
*Кешеләр күңелдәрен.*

*Күңелемдең пәрҙәләрен*
*Ҡуҙғатамын һаҡ ҡына.*
*Изге, йылы яҡтылыҡҡа*
*Йөрәккәйем ашҡына.*

***

*Сихри нурға сумған кистә*
*Әсир алдың йөрәкте.*
*Һағышлы хистәр аҙаҡтан*
*Өҙҙө генә үҙәкте.*

*Яҙмышыма рәхмәтлемен,*
*Һин бүләге булғанға.*
*Һинһеҙ мин – төн, һин – ҡояшым,*
*Яндарымда булғанда.*

***

*Киттең...*
*Ауыр тынлыҡ*
*Урынлашты күңелдә.*
*Гүйә, байыған ҡояштың*
*Һуңғы нуры һүрелә.*

*Исемеңде шыбырланым, –*
*Тик бушлыҡ яуапланы.*
*Юҡһың инде... Мин яңғыҙмын,*
*Ә йөрәк ышанманы.*

---

*Зөһрә Сафина Ҡыйғы районы Йосоп ауылынан. БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында белем ала. «Шоңҡар» әҙәби берекмәһе ағзаһы, шиғырҙары «Шоңҡар тауышы» йыйынтығында баҫылды.*

Рауил
БИКБАЕВ

# Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...

**1.01.2000. Шәмбе.**

**Бисмилларахманрахим! Бына, ниһайәт, ҡағыҙ битенә «2000 йыл» тигән һүҙҙәрҙе тәүге тапҡыр яҙҙым. Күктән йәки хыялдан алып түгел, ҡайҙандыр күсереп түгел, ә үҙемдең яҙмышымдан, үҙемдең ваҡытым ағышынан сығып яҙҙым. Йә, хоҙай! «Ике мең йыл» тигән ваҡытҡа ла килеп еттек. Малай саҡтарҙа «2000» тигән дәүер хыялда ла барып етә алмаҫлыҡ серле донъя ине.*

*Бынан мең йыл элек булған тормошто күҙ алдына килтерергә тырышам. Ниндәйерәк төбәктәрҙә, ниндәйерәк шарттарҙа йәшәнеләр икән ул саҡта минең алыҫ олатайҙарым? Бер уйлаһаң, ул алыҫлыҡ сағыштырмаса ғына бит. Бер быуынды 30-40 йыл менән иҫәпләһәң, 25-30 быуын. Мин, мәҫәлән, ете быуынымды беләм. Ун икешәр быуынын, артығырағын да белгәндәр бар. Тимәк, мең быуындың яртыһын конкрет кешеләр сылбыры – тере шәжәрә итеп күҙ алдына килтереп була тигән һүҙ.*

*Ә шулай ҙа ике мең йыллыҡтар тоташҡан дәүерҙә йәшәү үҙе ҡабатланмаҫ яҙмыш, бәндәләр өлөшөнә мең йылға бер төшә торған көмөш бит.*

**17.01.2000. Дүшәмбе.**

**Йәкшәмбе көн Сәләх Сукбаев ойоштороған «Исламдың рухи ҡиммәттәре» тигән тапшырыуҙы бик яратып тыңлайым, мөмкинлек булғанда ҡалдырмаҫҡа тырышам. Бигерәк тә хәҙистәр бик фекерле, фәһемле. Хәҙистәрҙе ныҡлап өйрәнергә, ижадымда уларға нығыраҡ таянырға ине. Кисә Рәбиға исемле боронғо мосолман шағирәһе*

---

Дауамы. Башы 1-2-се һандарҙа.

*тураһында һөйләнеләр. Ҡоллоҡҡа һатылған ҡыҙ дингә инаныуы һәм зирәклеге арҡаһында ҡоллоҡтан азат ителә, шул замандың иң танылған зыялылары менән аралашыу дәрәжәһенә күтәрелә, шағирә һәм аҡыл эйәһе булып танылa.*

*Ул, тамуҡтан ҡурҡып йәки йәннәткә ынтылып ҡына Аллаға инанырға ярамай, Тәңрегә йәнең-тәнең менән ихлас ышанырға, һис бер файҙа хаҡында уйламайынса табынырға кәрәк, тип һанай. Йәнәтте генә уйлап, һиңә инанһам, Хоҙайым, мине тамуҡҡа ырғыт, ти.*

*Бер заман ул бер ҡулына һыулы, икенсеһенә утлы һауыт тотоп китеп бара икән. «Был нимәне аңлата?» – тигәндәр. Рәбиға әйткән: «Йәннәтте яндырам, тамуҡтың утын һүндерәм!» Ниндәй ҡыйыу фәлсәфә һәм хайран ҡалырлыҡ образлы шиғриәт!*

*Кешеләр тамуҡ ғазаптарын, ожмах рәхәттәрен уйламайынса ла Аллаға инанып, уға ихлас күңелдән бирелеп йәшәһендәр өсөн, ул шундай хәтәр эштәргә уҡталған.*

**18.01.2000. Шишәмбе.**

**Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул, тигәндәр. Был бигерәк тә ил ағаһына, ил хужаһына ҡарата әйтелгәндер. Беҙ ҡыҙып барғанда ла, Президентҡа ҡыҙырға ярамай, беҙ зарланған-мыжыған саҡтарҙа ла, Президент зарланырға-мыжырға тейеш түгел. Ул әллә күпме ғәҙәти кеше хоҡуҡтарынан мәхрүм, йомшаҡлыҡ күрһәтеүҙән мәхрүм. Йыш ҡына хатта иң ихлас кисерештәрен дә йәшерергә мәжбүр.*

*Уның ҡулында ғәйәт ҙур власть, хакимлыҡ уның ҡылыр яҡшылыҡтары ла, ҡылыр яманлыҡтары ла тау дәүмәле булырға мөмкин. Шуға ла дөрөҫ ҡарарға килеүе – уның өсөн иң хәл иткес мәл. Беҙҙең дә тормошобоҙ көн һайын ниндәйҙер һорауҙарға яуап таптыра, нимәнелер һайларға ҡуша. Ләкин оло үлсәүҙәргә һалып үлсәп ҡараһаң, Президенттың һорауҙарға яуап эҙләүҙәре, уның һайлауҙары менән сағыштырғанда, беҙҙең һайлауҙар нимә генә ул... Эш үҙебеҙҙе үҙебеҙ кәмһетеүҙә түгел. Ил ағаһы, ил башының бер һүҙенән илдең яҙмышы хәл ителә: уның алдында йәки бәхет ҡапҡаһы асылырға мөмкин, йәки упҡын уйылырға мөмкин. Суверенитетыбыҙҙың ун йыллыҡ тарихында былдай яуаплы мәлдәр аҙ булманы, һәм Президент дөрөҫ ҡарарға килә алды, һайлай белде. Бына ҡайҙа ул «ашаған белмәй, тураған белә». Аҡыллы ил ағаһына үҙ яҙмышын, үҙ йөрәген дә турарға тура килә бит.*

**Бик аҡыллы кешеләр, ғәҙәттә, яңғыҙ булалар. Ныҡлабыраҡ күҙәтегеҙ, был ысынлап та шулай. Рәшит Солтангәрәев, ике дуҫтың береһе ҡол, тиһә лә, дуҫлыҡ барыбер тиңлектә, бер кимәлдәрәк фекер йөрөтөүҙе аңлата. Ә оло аҡылға үҙенә тиң аҡылды табыуы еңел түгел. Шуға ла оло аҡылдар, ҙур таланттар бер-береһен алыҫтан танып, алыҫтан табып ала. «Рыбак рыбака видит издалека» тигәндең һәйбәт мәғәнәләгеһе. Шул рәүешле Мостай Кәрим менән Рәсүл Ғамзатов, Ҡайсын Кулиев, Сыңғыҙ Айытматов, Давид Кугультинов һ.б. тығыҙ бәйләнеше, ҡайһы берәүҙәренең дуҫлығы хасил була.*

**10.02.2000. Кесаҙна.**

**28 гинуарҙа Башҡортостан тормошонда тарихи ваҡиға – Академтеатрҙың яңы бинаһының тәүге сиратын асыу булды. Бик күп көс һәм байлыҡ сарыф ителгән, бик зиннәтле эшләнгән.*

*Бер ҡыҙыҡлы уй башҡа килде. Халыҡ байлығын байлыҡҡа әйләндереп, килер быуындарға тапшырыу, уны мәңгеләштереү. Академтеатрҙың яңынан тыуыуы – шуның асыҡ миҫалы.*

*Ил күләмендә халыҡ байлығын талау барғанда – былдай яңырыуҙар айырыуса сағыу балҡый.*

*Ләкин беҙҙең сәнғәтебеҙ ошо байлыҡҡа үҙенең ниндәй хазинаһын өҫтәр, был гүзәл һарайҙы ниндәй матурлыҡтар менән тултырыр – хәҙер бына нимә хаҡында уйланырға кәрәк. Яуаплылыҡ тағы ла нығыраҡ арта.*

**Көн ысынлап та тығыҙ булды. Киске ун тула яҙғанға тиклем Премьерҙы көттөм, приемныйында ултырҙым. Х.Х. Ишморатов менән инеп, минең байтаҡтан күңелде өйкәп торған ике мөһим мәсьәләне хәл иткән һымаҡ булдыҡ. Беренсе: башҡорт поэзияһы антологияһына спонсорҙар табыуҙа Р.И. Байдәүләтовтың ярҙамы. Рафаэль Ибраһимович елле резолюция һалып, эште Шакировҡа тапшырҙы. Икенсеһе: эш хаҡтарын көйләү буйынса ла минең хатҡа һәйбәт ҡултамғаһын ҡуйҙы. Тағы ла бер ҡыуаныс: Әнисә Таһированың, Ринат Камалдың торлаҡтарын яңы урынға алыштырыу буйынса хат яҙғайным. Уларын Ф. Ә. Ямалтдиновҡа йүнәлтте. Бына шулай: түҙгәнгә түш, эштәр аҙағына тиклем шулай барһа, әлбиттә. Өйгә төнгө 11-ҙә ҡайтып керҙем.*

**12.02.2000. Шәмбе.**

**Ҡыш көнө кеше тәбиғәткә барыбер йәйҙәге һымаҡ һыйынып, уның менән бер туған булып йәшәй алмай. Йәйен һәр бөжәк, һәр ҡуңғыҙ һиненң менән һин дә мин аралашып, усыңда уйнап, битеңдә йүгереп йөрөй бит. Хәтфә үләндә улар менән бергә аунайһың, һыуҙарҙа балыҡтар менән бергә йөҙәһең.*

**14.02.2000. Дүшәмбе.**

**Ә шулай ҙа уйланырға кәрәк. Ысынлап та, Чечнялағы фажиғәләр тураһында ниңә шағирҙарыбыҙ бик үк яҙып бармай? Заманында Сонгми хаҡында, Чили тураһында әллә күпме һәйбәт-һәйбәт шиғырҙар баҫылды бит. Ельциндың баш-баштаҡлығына ҡаршы ла яҙылманы түгел. Ә хәҙер былдай әҫәрҙәр һирәгәйә бара. Әллә шағирҙар әйтеп арыныменеме, һүҙ әйтеүҙең тәьҫирен күрмәйме? Әллә кешеләрҙә фажиғәләргә ҡаршы, уларҙы тетрәп-ҡайғырып ҡабул итеүгә ҡаршы иммунитет барлыҡҡа киләме? Һуңғыһы бигерәк тә ҡурҡыныс.*

**21.02.2000. Дүшәмбе.**

**Миңә йыш ҡына барлыҡ тәбиғәт ғәйәт ҙур бер тере организм булып күренә. Бигерәк тә киске эңер ҡуйырыр-ҡуйырмаҫ саҡта Ҡариҙел ярынан йыбанып ҡына ағыр-аҡмаҫ ятҡан һымаҡ күренгән йылғаға*

*ҡарап торғанда, тугайҙағы шыйыҡ күгелйем монарға, алыҫта йымйым килгән уттарға ҡарап торғанда мин уларҙың барыһының бер бөтөн булғанлығын, бер йән булғанлығын, ошо күренештәрҙең әллә ҡайҙағы тауҙар, урмандар, далалар, ауылдар, ҡалалар, даръялар менән тоташҡанлығын, ҡитғалар менән ҡитғалар ялғанғанлығын, үҙемдең дә шулар менән айырылғыһыҙ ҡушылғанлығымды тоям. Ошондай мәлдәрҙә бер оло йән эйәһе булған ер-һыуҙар миңә айырыуса үйсан, хатта һағышлы, үҙенсә борсоулы күренә. Күпме тапҡырҙар ошо һағыштың миңә күскәнен тойғаным бар. Ләкин тотош ерҙе ниндәй уй-хәсрәттәр биләгәнен беҙгә аңларлыҡмы ни инде!*

*Ҡитғаларҙы ҡитғаларҙан диңгеҙ-океандар айырмаған, алыҫ утрауҙар улар яңғыҙҙары түгел. Барыһы ла диңгеҙ төптәренән тоташҡан. Ерҙең бер генә киҫәге лә уның башҡа өлөштәренән бүленмәгән. Улар барыһы бергә тын ала, уйлана, борсола, бер яҙмыш менән йәшәй. Уйлап ҡараһаң, тотош кешелек тә шулай бит. Әллә ҡайҙарҙағы алыҫ утрауҙарҙа йәшәгән ҡәбиләләрҙең дә яҙмышы тотош кешелек яҙмышына үрелгән. Әле уларҙың бәғзеләре цивилизациянан айырылып йәшәгән кеүек күренһә лә, меңәр йыллыҡ тәрәндәге ҡатламдар аша, әҙәм балаһының ерҙә һалған тәүге һуҡмаҡтары аша беҙ барыбыҙ ҙа бер-беребеҙгә тоташҡанбыҙ.*

**10.03.2000. Йома. Төнгө ике.**

**Ғинуар аҙағында Башҡорт академия драма театрының 80 йыллыҡ юбилейы хайран ҡалырлыҡ яңы бинала республиканың Президентҡа тиклемге иң юғары етәкселеге ҡатнашлығында үткәйне, наградалар, фатир бирелгәйне. Уҙған йылдың аҙағында донъялағы берҙән-бер нәшриәтебеҙҙең (театрыбыҙ, Аллаға шөкөр, берәү генә түгел) шулай уҡ 80 йыллыҡ байрамы филармонияның ҙур залында бик ихлас үтте, тик республика етәкселәренән унда Президент та, Премьер ҙа, хатта премьер урынбаҫары ла ҡатнашманы, юғары маҡтау-бүләкләүҙәр ҙә булманы.*

*Уйлап ҡараһаң, китап байрамы театр байрамынан юғарыраҡ кимәлдә үтергә тейеш һымаҡ ине. Сөнки китаптың тарихи әһәмиәте милләттең рухи тормошонда күпкә ҙурыраҡ. Барыһы ла, шул иҫәптән атаҡлы театрыбыҙ ҙа, китаптан, әҙәбиәттән башлана.*

**27.03.2000. Дүшәмбе.**

**Кисә яңы ваҡыт менән йәшәй башланыҡ, бер сәғәткә алға күсерҙек. Бөгөндән яңы Президент менән йәшәй башлаясаҡбыҙ. Мәскәү, әлегә 70% бюллетендәр ҡаралған, Путин 51% артыҡ алып алда бара, тип хәбәр итте. Башҡортостанда халыҡ дәррәү ҡатнашҡан – 77%, ҡайһы бер райондарҙа күпкә артыҡ – Баҡалыла 99,7%.*

*Ошо һайлауҙар ҙа Рәсәй яҙмышында яҡшы яҡҡа һынылыш килтермәһә, хәлдәрҙең төҙәлеп китеүенә ышаныс бөтөнләй бөтәр һымаҡ. Күңелем ниндәйҙер һәйбәт үҙгәрештәр һиҙенгән һымаҡ, илдә, ниһайәт, тәртип булыр, закондар эшләй башлар кеүек.*

**19.04.2000. Шаршамбы.**

*«*Батша» тигәндән халыҡ һис кенә лә насар мәғәнә уйламаған. Борон-борондан һәр милләт «батша» тигәндән илдәге тәртиптең таянысы тураһында уйлаған. Юҡҡамы ни руста «без царя в голове», беҙҙә «батшаға баҡмаған» тигән һүҙҙәр – кешенең тиҫкәре ягы тураһындағы һүҙҙәр. Мин монархист түгел – Аллам һаҡлаһын! – әммә илдә тәртип булмаһа, уның закондарын берәү ҙә тыңламаһа, кешеләр закондан ҡурҡмаһа, тарҡалыу шунан башлана.*

**28.05.2000. Йәкшәмбе.**

**Кисә баҡсаға килдек. Бында донъя ап-аҡ: алмағастар, сейәләр шау сәскәгә күмелеп ултыра. Бер-ике көн тағы ла сағыуыраҡ булғандыр, ап-аҡ төҫтә балҡып торғандыр. Әле әҙ генә тоноҡланған, ҡайһы бер алмағастарҙан ҡойолған, тик барыбер иҫ киткес матур. Күптән былай булғаны юҡ ине.*

**Кисә Төркиә буйынса материалдарҙы ҡарап, юлъяҙмалар тураһында уйланып, тезистар сыймаҡлап ултырҙым. Ел иҫеп үтһә, ҡар яуған һымаҡ: тәҙрә янындағы алмағастың сәскәләре елгә ҡойола.*

*Ап-аҡ булып ергә түшәлә*
*Алмағастың ап-аҡ сәскәләре,*
*Сейәләрҙең ап-аҡ балҡышы.*
*Ел иҫтеме – ҡарҙар яуамы ни?*
*Ап-аҡ булып ергә түшәлә,*
*Аҡ бурандар булып яуа сәскә.*

*Сыңғыҙ Айытматовтың «Бәхил бул, Гөлһары!»һы иҫкә төшә. Ат көтөүсе Танабай көтөүен ҡалдырып, төндө һөйгән ҡатыны янында үткәргәндә, таңда сығыуына айғырының һырты ап-аҡ алмағас сәскәләренә ҡапланған була. Уларҙың бәхетле мәлдәре, үкенесле мөхәббәттәре. Ошо алмағас сәскәләре кеүек күкрәп сәскә ата ла, Танабайҙың айғырын үрәпсеткән бер төндәге йәшенле-ямғырлы, ҡойма ямғыр һымаҡ, ике йәнде ҡойондороп-тетрәндереп бәхетле мәлдәр үтеп тә китә.*

**11.06.2000. Йәкшәмбе.**

**Ҡыҙыҡ рифма: сәләмәт – сәйәсәт. Әммә ҡасан булғаны бар сәләмәт сәйәсәттең? Рифмалаша: башкир – банкир. Тик банкир булған башҡорттар юҡ тиерлек шул. Дөрөҫлөккә тап килгәне: заман отто башҡортто; килмешәктәр йотто күпме башҡортто; күпме башҡорттар бөгөн маңҡорттар... Уйлаһаң – уйылдыра, ә уйламайынса булмай. Башҡорттар йырлай, башҡалар урлай. Бына шулай хәлдәребеҙ. Уйҙарҙы ҡыуалап ҡарайым, ҡотолоп булмай, яңынан ябырылалар.*

**Бабич премияһы буйынса комиссияла ниндәй кәбәк баштар йыйылды икән? Салауат Әбүҙәровты күрһәткәйнек Союздан, ни бары өс тауыш йыйған (комиссияла беҙҙән Риф Тойгон, Ә. Әминев).*

*Шағирҙарын танымай башлаған халыҡ – үлә башлаған халыҡ тигән һүҙ. Башта шағирҙары үлер, шунан халыҡ үлер. Бер генә шағиры тере булғанда ла ,халыҡ тере булыр әле. Бер генә шағиры ла ҡалмаһа, халыҡ та ҡалмаҫ.*

**12.06.2000. Дүшәмбе.**

**Ҡайһы саҡта әллә ниндәй һорауҙар тыуа: дин киҫерәкме, әллә тормош, хәйәт, ысынбарлыҡ киҫерәкме? Дин тормоштоҡ бар яҡтарын да иңләй, ләкин тормош барыбер унан киҫерәк түгелме?*

*Һорау быныҡ менән генә туҡтамай, ул мотлаҡ артабан үҫтерелергә тейеш. Һорау былай буласаҡ: Аллаһы Тәғәлә, йәғни барыһын ижад итеүсе Йыһандан киҫерәкме, олораҡмы? Йыһандан, бөтә ғаләмдән дә бөйөгөрәк, өҫтөнөрәкте күҙ алдына килтереп ҡара! Бөйөгөрәк түгел икән, ул нисек һуң барыһын да тыуҙырған булып сыға?*

*Л. Толстой бындай һорауҙарҙы бирергә, уларға яуап эҙләп баш ватмаҫҡа кәңәш иткән. Моғайын, ул хаҡлылыр. Яуаптың табылаһы юҡ бит инде. Әммә һорауҙар барыбер мейене өйкәй.*

**21.06.2000. Шаршамбы.**

*– Һине, уның менән йоҡлап йөрөй, тиҙәр!*

*– Юҡты һөйләйҙәр! Уның менән йоҡлап буламы ни? Уның менән күҙ ҙә йомоп, серем итеп тә булмай. Уның менән йоҡламайһың инде ул, уның менән ҡунаһың ғына. Эйе, ҡунаһың да ҡунаһың... (пьесаға һөйләшеү).*

**23.06.2000. Йома.**

**Рәми ағай тураһында төҫлө альбом әҙерләү уйы күптән йөрөй, ҡайтҡас, һөйләшергә кәрәк. Бәлки, 70 йәшенә өлгөртөп булыр. Ә 75 йәшенә, насип булһа, уның хаҡында китап яҙырмын, тип уйлайым. Киләһе йыл шуға ныҡлап тотонорға иҫәп.*

**Төшөмдә Айҙарҙы күрҙем. Ниҙәлер бик һирәк төшкә инә ул. Әле лә үҙе күренмәне, фотоларын ебәргән, шулар хаҡында һөйләгән тауышы ғына ишетелә. Фотоларҙа нишләптер уларҙы яҙалағандарын төшөргәндәр, имеш, Чечняға ла бәйле һымаҡ. Нимәгәлер йәне ғазапланалыр йәки беҙгә үпкәләйҙер. Ҡайтҡас, зыяратҡа барырға кәрәк.*

**Тынғыһыҙ япраҡ тураһында ҡайһылыр дәфтәремдә яҙғайным шикелле. Кисә кис йөрөгәндә тағы ла шундай хәлгә тап булдым: бер сағандың барлыҡ япраҡтары тып-тын тора, ә берәүһе туҡтауһыҙ сайҡалыуын белә. Ниндәйҙер кескәй генә ел тик уға ғына ҡағыла, ул елдең һулышын тик ошо япраҡ ҡына тоя һымаҡ. Шағир хаҡында йәки ғашиҡ кеше хаҡында шиғыр бит был! Башҡалар тоймағанды шағир һиҙгер тоя, башҡалар тыныс ҡалғанда ул тулҡынлана, өҙгөләнә, йолҡона. Йәки башҡаларҙы битараф ҡалдырған матурлыҡты шул матурлыҡҡа ғашиҡ кеше генә күрә. Бына шулар хаҡында уйландырҙы тынғы белмәй сайҡалған саған япрағы. Ағастағы башҡа япраҡтар өсөн уның был ҡылығы бик сәйерҙер, әлбиттә.*

**11.08.2000. Йома.**

**Әлдә минең халҡыма, япон кешеһе корея халҡы алдында иленең енәйәттәре өсөн ғәфү үтенгән һымаҡ, бер ниндәй милләт алдында ла ғәфү үтенергә тура килмәйәсәк. Халҡым идеаль дә түгел, әммә башҡаларҙың ерен баҫып, йортон емереп, ризығын тартып алып йәшәгәне юҡ.*

*Башҡорт яҙыусыһы ла башҡа милләттең йөҙөнә ҡара яҡҡаны юҡ. Гел аҫылды яҙмаһа ла, башҡа халыҡты рәнйетеп һүҙ әйткәне юҡ.*

**Был яҡтарҙағы ҡоштарҙың тауыштары минең өсөн бары ҡош тауышы. Кемдеңдер ул үҙәген өҙәлер. Ҡабат ишетһәм, мине лә, бәлки, моңайтыр. Һәр ер иң элек – ундағы үҙеңдең кисерештәрең, хәтерләүҙәрең аша ҡәҙерле. Яҙмышыңа ялғанғанда ғына ҡәҙерле.*

**23.09.2000. Шәмбе.**

**Беҙҙе сепаратизмда ғәйепләйҙәр. Күпме йылдар иҡтисади сәйәсәтте, региондар, бигерәк тә донор республикалар менән бәйләнеше сепаратор (беҙ бәләкәстән әйткәнсә, сипарат) принцибына ҡоролған власть хакимлығында йәшәнек: беҙ үҙәктәге сепараторға тир түгеп йыйған хуш еҫле һөттө туҡтауһыҙ ҡойоп торабыҙ, ул ҡаймаҡты үҙенә айырып алып ҡала ла беҙгә тартылған һөттө, уның да бер өлөшөн генә ебәрә. «Обрат» тигән продукция менән туҡланып көн күреүсе провинция һәм балда-майҙа йөҙөүсе Мәскәү. Беҙ сепаратизм яҡлы түгел һәм шул уҡ ваҡытта тапҡан малыбыҙҙы сепаратор аша үткәреп, беҙгә елеге һурылған һөйәк ырғытыуҙы ла ҡабул итә алмайбыҙ.*

**15.10.2000. Йәкшәмбе.**

**Ут күрше. Был һүҙҙәрҙе беҙ тик яҡшы мәғәнәлә аңлап ғәҙәтләнгәнбеҙ: ут алышып йәшәү. Ул шулай, әлбиттә. Юҡҡамы ни «күрше хаҡы – тәңре хаҡы» тигәндәр. Әммә «ут күрше»нең хәүефле яғы ла бар бит әле: күршеңә ут ҡапһа, һиңә лә килеп етәсәк. Ут алыҫтағы өйҙәр аша һикереп килмәҫ, күршеңдән тоҡаныр. Күршең имен булғанда ғына һин имен. Әллә ҡайҙағы Анголалар йәки Кубалар менән дуҫ йәшәүе еңел, ә бына күршеләрең менән дуҫлыҡты гел генә тоғро һаҡлап ҡара! Һәр ил күрше илдәр менән татыу булһа, донъялар ҙа тыныс булыр ине.*

**Донъяны Аллаһы Тәғәлә яратҡан. Әҙиптәр ҙә үҙ донъяларын ижад итергә тырышҡан. Тимәк, улар Тәңренең үҙе менән ярыша түгелме һуң? Шуға ла, бәлки, Ҡөрьән шағирҙарҙы бик үк хуплап бармайҙыр?*

**8.11.2000. Шаршамбы.**

**Ағайҙар яңғыҙҙары китмәйҙәр, яндарына ҡустыларын да алалар. Назар ағайҙың ҡырҡында Атнабай вафат, аралары 10 йыл. Яңыбай ағайҙың ҡырҡында Солтангәрәй вафат, аралары 10 йыл. Әллә нindәй рок һымаҡ, тәҡдирҙең хәтәр тап килеүе һымаҡ.*

*Яңыбай Хамматовтың егермеләп романы – егермеләп артылышҡа артылыу. Ләкин ул яңғыҙы күтәрелмәне, йөҙәр меңәрләгән уҡыусыларын, халҡын күтәрҙе.*

**17.11.2000. Йома.**

**Иртән радионан бирәләр: бөгөн Башҡорт кавалерия дивизияһының ойошторолоу көнө икән – 1941 йылдың 17 ноябре, Дим станцияһы.*

*Эскадрон командиры Насиров ағай һөйләй, 78 Советтар Союзы Геройы түгел, күберәк, ти, һәр үлгән башҡорт яугиры – герой ине, ти. Татарса һөйләһә лә, башҡорт өсөн ғорурланып һәм һыҙланып һөйләй. Дивизияла күпселеге башҡорттар булыуын, 13-14% татарҙар һәм*

*башҡа милләттәр булыуын, ауылдарҙан иң шәп ир-егеттәрҙең һайлап алыныуын әйтә.*

*Быға тиклем уйлаған-сағыштырған юҡ ине. Баҡһаң, башҡорттарҙың үҙ илдәге – Башҡортостандағы яҙмышы – Башҡорт кавалерия дивизияһындағы башҡорттарҙың яҙмышына оҡшаш икән. Башта күпселек, аҙаҡ ҡорбан була-була аҙая бара, аҙая бара.*

*Башҡортостан!*
*Килмешәктәр – түрҙән,*
*Башҡорт – остан...*
*Шулай килеп сыға түгелме һуң?*

**29.12.2000. Йома.**

**Бер тапҡыр батырлыҡ менән тарихҡа ингән шәхестәр була. Беҙ бәләкәстән белеп үҫкәндәренең иң асыҡ үрнәге – Алекасндр Матросов (аҙаҡ ҡына беҙ уның Учалы башҡорто Мөхәмәтйәнов Шакирйән Юныс улы икәнен белдек). Юрий Гагариндың, Ер шарын бер урап төшөп, донъялағы шул замандың иң мәшһүр кешеһенә әүерелеүе лә шундай миҫал. Грек-фарсы һуғышы ваҡытында гректарҙың Марафон ауылы янында фарсы ғәскәрен ҡыйратыуы хаҡындағы шатлыҡлы хәбәрҙе Афинаға еткереү өсөн 40 саҡрым араны йүгереп үткән һәм хәбәрҙе әйткәс йығылып үлгән грек яугирының ҡаһарманлығы – үҙе бер поэма бит! Шулай уҡ бер тапҡыр эшләнгән батырлыҡ менән данланыу. Бындай миҫалдарҙы күп килтереп була.*

*Ләкин ғүмере буйы барлыҡ көсөн, тыштан ҡарағанда тыныс ҡына, әммә асылда туҡтауһыҙ көс, фиҙакәрлек, сабырлыҡ, уңғанлыҡ талап иткән хеҙмәттәр, мәҫәлән, уҡытыусы, игенсе, врач һ.б. эше тағы ла олораҡ ихтирамға лайыҡ бит. Русса әйткәндә, бындай хеҙмәттә рутинная работа етерлек, ваҡыты менән ялҡытҡыс. Ләкин тормоштоң нигеҙе бына шунда.*

**11.06.2001. Дүшәмбе.**

**Көнләшкән көндән дә, төндән дә көнләшер, тигәндәр. Был бик хаҡлы һүҙҙәр интим мөнәсәбәттәрҙә, мөхәббәттәге көнләшеүҙән дә бигерәк ҡара көнсөллөккә, кеше бәхетен күреп, башҡаларҙың уңышына ҡарап, шартлай яҙырҙай булып йәшәүселәргә ҡағыла.*

**Тормошта һәр ваҡыт иң юғары маҡсаттар өсөн күнегелгән ғәҙәттәрҙән, ҡайһы бер рәхәтлектәрҙән, уңайлыҡтарҙан баш тартырға тура килә. Мәҫәлән, ураҙа – бик-бик теләһәң дә, ашауҙан баш тартыу. Хажға барыу – шул уҡ көрәш, ауыр юл ғазаптарына түҙеү. Ижад – башҡалар рәхәтләнеп йоҡлап ятҡанда йәки донъяһын онотоп күңел асҡанда эш менән булыу, ҡәләм менән донъяны аҡтарып һүҙ эҙләү. «Һәр көн маҡсаты өсөн көрәшкә сығыусы кеше генә ысын кеше» тип бер ҙә юҡҡа әйтмәгәндер Гете.*

**Хәҙер ир-ат машинаның көс-ҡеүәте, маркаһы, хаҡы, тиҙлеге, төҫһыны һ.б. яҡтары менән маҡтана, ярыша. Автомобилдәр туҡтауһыҙ яңыра, камиллаша, көсәйә һ.б.*

*Уйлап ҡараһаң, был азарт ир-егеттең ҡанында меңәр йылдар буйына*

*килгән сәм-ҡомарҙың яңыса дауамы бит. Машиналар ярышы шул уҡ аттарҙың бәйгеләге сабышының үҙенсә дауамы бит! Тик ат менән йылдар буйы бер көйө ҡалған: ат – ат булған, уның төҫтәре лә, булмышы ла алмашынмаған. Әлбиттә, әллә нindәй яңы тоҡомдар үҫтергәндәр, селекция эше туҡтауһыҙ барған, иң һәйбәт сифаттарҙы бергә ҡушырға тырышҡандар. Ләкин әкиәттәрҙә ҡанатлыға әйләнһә лә, ат – ат булып ҡалған. Меңәр йылдар буйына ул ни тиклем поэтиклаштырылған, ниндәй образдарҙа, ниндәй сағыштырыуҙар, эпитеттар менән данланған. Беҙҙең эпостарҙа тотош биткә һуҙылған атты һүрәтләүҙәрҙе хәтерләгеҙ. Ҡыҙҙарҙан да былайыраҡ матурлап тасуирлана бит. Ни тиклем һөйөү һәм ни тиклем нәфислек! Шуларҙың барыһын бергә йыйып, ат тураһында фольклорҙағы шиғри һәйкәлде булдырырға, тигән уй күптән йәшәй, һаман тормошҡа ашырып булмай.*

*Донъяла иң поэтиклаштырылған хайуан – ат, тиһәм, хаҡлы булырмын. Ә машина тураһында ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ? Поэмаларҙы, эпостарҙы әйтеп тә тормайым.*

**5.08.2001. Йәкшәмбе.**

**Иң матур ерҙәр ҙә, иң күркәм ауыл-ҡалалар ҙа, әгәр уларға бәйле бер генә лә ҡәҙерле иҫтәлектәрең булмаһа, шунда һине һағынып, үҙҙәре һағындырып торған ғәзиз кешеләрең булмаһа, барыбер һоҡландырғыс, әммә күп яҡтан битараф матурлыҡ ҡына булып ҡала.*

*Һәр бер урын һиңә яҡын кешеләре менән, һинең тормошоңа бәйле хәтирәләре менән күңелеңә уйылып ҡала.*

**3.09.2001. Дүшәмбе.**

**Мөхәммәт ғәләйессәләм – Аллаһы Тәғәләнең һуңғы илсеһе, һуңғы пәйғәмбәр. Ислам дине менән кешелектең аңына Аллаһ килеп ингән. Ә бит уға тиклем дә Аллаһ булған. Тик ул нисек аталған? Хәҙер кеше ислам ҡанундары буйынса йәшәгәндә генә йәшәүе дөрөҫ була. Ҡөрьән шулай өйрәтә. Ә ислам диненә тиклем йәшәгәндәрҙең сауап-гонаһтары, хаҡ һәм нахаҡ эштәре ниндәй үлсәмдәр, ниндәй талаптар менән баһаланырға тейеш була һуң? Боронғо төркиҙәр, фарсылар, гректар, исламға тиклемге ғәрәптәр үҙҙәре, индеецтар, хәҙерге папуастар йәки эскимостар – уларҙың Аллаһты белмәгәндәренә йәки бөгөн ислам донъяһынан бик алыҫта йәшәгәндәренә ни ғәйептәре, ни гонаһтары?*

*Әллә исламға тиклемге кешеләрҙең эшләгән-ҡылғандары сабыйҙарҙың ҡылғандары, уларҙың гонаһһыҙ эштәре һымаҡ ҡараламы?*

**Суверенитетҡа беҙ ҙур һынауҙар аша килдек. Хәҙер суверенитет беҙҙең үҙебеҙҙе һынай: тоғролоғобоҙҙо, кешелек сифаттарыбыҙҙы, шәхес булыуыбыҙ-булмауыбыҙҙы һынай. Уңғанлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе һынай.*

**23.09.2001. Йәкшәмбе.**

**Анталияла бер болот киҫәге лә күрмәнек. Стамбулға иртән килеп төшкәндә көн болотло ине. Бик эҫе булманы, беҙҙәге йәй һымағыраҡ. Әле тәҙрәне асып аҙан тыңланым. Йондоҙло төн.*

*Стамбул менән танышыуыбыҙҙы Зәки Вәлидиҙең Ҡарасәхмәт*

*зыяратындағы «Тоған айылы»на барыуҙан башланыҡ. Юлда Әмир Юлдашбаевты күтәп алдыҡ. Ул бында отпускаһын Зәки Вәлидиҙең архивында эшләп үткәргән икән. Тотош институтлыҡ эш, ти. Иҫәнбикә менән ҡарағандар. Иҫәнбикәнең дә үҙенең ғилми эштәре, быға ваҡыты ҡалмай. Белмәйем, кем аҡтарып, атҡарып сығыр был эште? Әхәт Сәлихов бер үҙе, Ғәйнислам Ибраһимовты Инанға ултыртмаҡсылар.*

*Вәлиди зыяратын Рәжәп бей Иҫәнбикәгә шылтыратып һорашты. Еңел таптыҡ, бер егет өйрәтеп тә барғас. Бер ҡарт, ике-өс бала ҡәбер өҫтөндәге йәшел үләнгә һыу һибә башланылар. Яҙыуҙарындағы буяуҙы яңыртҡандар, асыҡ күренеп тора.*

*Янында «Ҡазанлы Абдулла Таймас» (1881–1969) күмелгән. Ерҙе Баттал менән бергә һатып алғандар, дуҫ булғандар.*

*Зыярат Азия яғында. Йортто ла Вәлиди ошо яҡта, элек халыҡ һирәк йәшәгән яҡта һалған. Юлға 4 сәғәт ваҡыты үтер булған. Боғаздың, Стамбулдың Европа өлөшөнөң рустар ҡулына эләгеүенән ҡурҡҡан.*

*Беҙҙе ҡаршы алып, ҡала менән таныштырып йөрөгән Рәжәп пединституттың физматын бөтөргән (1992 йылдарҙа). Хәҙерге Дәүләт секретары Ҡыҙрасов декандары булған. Беҙ Новостройкала бер йортта йәшәгәнбеҙ. Улар хор капеллаһында йырлаған Рәмилдең фатирын алып торғандар. Бер ураҙа ваҡытында инәйемде төрөк егеттәре ҡунаҡҡа саҡырғайны. Ошо Рәжәптәр булған икән. Аштарҙы үҙем бешерҙем, ти. Роза Исрафилованы, әсәләре һымаҡ, яҡын күреп һөйләй.*

*Бына бит ул донъя ниндәй тар... Рәжәп әле башҡорт-төрөк лицейҙары менән шөғөлләнә.*

**13.10.2001. Шәмбе.**

*Ҡазанда «Ҡол-Шәриф» мәсетенең һигеҙенсе манараһына ай ҡуйыу тантанаһында ҡатнашырға тейеш инек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға ваҡыт етмәне. Мостай Кәрим унда барыуға ҡаршы булды. «Тукай, моғайын, унда бармаҫ ине, мин дә бармайым,» – ти. Тукайҙың барыуы-бармауы хаҡында әйтеүе ҡыйын. Тик минең барғым килгәйне.*

**21.10.2001. Йәкшәмбе.**

*Сыуашстан! Был ямғырлы көндәр*
*Бер йыр булып ҡалыр хәтерҙә.*
*Чебоксар – Шупашкар...*
*Башҡорттар, сыуаштар...*
*Буш тормаһын илдең бураһы,*
*Буш тормаһын милләт бишеге.*

*Сыуаштарҙа биш көн булдыҡ, барған-ҡайтҡан көн менән.*

*Һәр бер булған урында өйрәнәһе нәмәләр табыла. Сыуаштарҙың әҙәби музейы бар, хатта һыра музейы бар. Беҙҙә лә әҙәби музей булыр, тип өмөтләнәйек. Әммә был эш бик оҙаҡҡа һуҙылды. Беҙҙә ниңә башҡорт ҡымыҙы, башҡорт балы музейын булдырмаҫҡа?*

*Шагирҙарға һәйкәлдәр күп. Сеспелдең өс һәйкәлен, К. Ивановтың ике һәйкәлен, И.Я. Яковлевтың һәйкәлен күрҙек, сәскәләр һалдык. Ухсай исемендә, Хузангай исемендә мәҙәниәт һарайҙары бар. Өр-яңы сәнгәт институты асҡандар. «Сыуаш шиғриәте» антологияһы сит илдәрҙә сыҡҡан.*

*Сыуаштан ере Башҡортостандан 8 тапҡыр бәләкәйерәк, әммә унда халыҡ бик тығыҙ йәшәй. Тәбиғәт ресурстары ла беҙҙәгенән күпкә ҡайтыш. Әммә төҙөлөш туҡтамаған, төҙөлөп ятҡан йорттар күренә.*

*Тәбиғәт байлығының күп булыуы халыҡтың йәшәү рәүешенә тәьҫир итмәй ҡалмай торғандыр. Ере бай илдә милләт вайымһыҙыраҡ була, уға йәшәр байлыҡты – ере бирә. Ере ярлы илдә милләткә ныҡыраҡ тырышырға, баш менән күберәк эшләргә, башлыраҡ, йүнселерәк, тилберерәк булырға тура килә. Мәҫәлән, Япония йәки Голландия, Финляндия һ.б. Улар ерҙәренең байлығына таянып түгел, үҙҙәренең уңғанлығына, зирәклегенә, уяулығына ныҡыраҡ таянып, башын ныҡыраҡ эшләтеп йәшәй.*

**30.11.2001. Йома.**

**Ниһайәт, аҙыраҡ буш ваҡыт булды. Кисә кискә табан ике сәғәткә яҡын ҡышҡы сихри донъяға хайран ҡалып йөрөнөм. Урмандарға, ҡыуаҡтарға әллә ниндәй әкиәт төҫ-рәүештәре биреп, ҡырау биҙәгән. Һәр ағас үҙенсә матур. Имәндәрҙең, йүкәләрҙең ҡап-ҡара олоно, йыуан ботаҡтары һәм ап-аҡ ваҡ тармаҡтары, ҡайындарҙың ап-аҡ селтәрҙәре, ҡыуаҡтарҙың ынйы гөлләмә-букеттары, ҡарағайҙарҙың башҡаларҙан айырылып торған көлһыу төҫтәге, төтөнгә сорналған һымаҡ иҫ киткес матурлыҡтары – барыһы ла ҡарап туйғыһыҙ.*

*Өҫтәүенә, Ҡариҙел аръяғынан күтәрелгән түп-түңәрәк, аҡһыл-һарғылт ҙур (ҙуүур) ай күкһел ҡырау ҡаплаған туғайҙарҙы әллә ниндәй илаһи моңға ҡойондора, ағастар араһынан, яңы ғына һыҡҡан оло тәңкә кеүек, серле итеп ҡарай. Күптән быndaй тылсым донъяһында йөрөгәнем юҡ ине.*

**15.01.2002. Шишәмбе.**

**Осоусы өсөн иң мөһиме – имен осоп китеү һәм имен килеп төшөү. Азат Мағазов үҙенең хәрби тормошонда күп тарафтарҙағы күп аэродромдарҙы күргәндер. Әммә уның төп аэродромы үҙгәрмәне. Уның төп таянысы – Башҡортостан, иң изге төйәге – Миәкә ере.*

**6.02.2002. Шаршамбы.**

**Ассимиляцияның төп сәбәбе – мәктәп, унан ҡотолоуҙың төп сараһы – мәктәп.*

**Дуҫтар һәм туғандар. Туғандар тип өндәшеү барыбер яҡыныраҡ, сөнки дуҫты табып, яһап, булдырып була, ә туғанды улай булмай, туғанлыҡ – тыумыштан,яҙмыштан. Дуҫлыҡ та бөйөк көс, әммә ҡаныңдан килмәй. Туғаның үҙ ағзаң, ғәзиз аяҡ-ҡулың һымаҡ. Дуҫлыҡ – хеҙмәт һалып, тир түгеп алған әйбер, йыһаз һымаҡ.*

**18.03.2002. Дүшәмбе.**

**Хәҙерге заман кешеһе ниңә аулаҡҡа сарсай, элекке кеше ниңә асығыраҡ булған? Элекке тормошто күҙ алдына килтерәйек. Мәҫәлән, далалағы беҙҙең күсмә тормош. Нисәмә меңәр йылдар буйына кешеләр араһындағы бәйләнеш бик самалы булған. Нисәмә тиҫтә саҡрымдарға бер йәйләү. Килгән һәр юлсы – үҙенсә яңылыҡ, үҙенсә информация сығанағы, үҙенсә аралашыу шатлығы. Шул уҡ башҡа яҡтарҙа. Тайга булһынмы, тундра булһынмы, тауҙар донъяһы булһынмы – аралашыу ҡытлығы. Изге ниәтле һәр осрашыу – күтәрелеп алынған шатлыҡ.*

*Ә хәҙерге хәлдәр нисегерәк? Кеше бер көн эсендә төрлө йомоштар менән ниндәй генә ишектәрҙе асмай, кемдәргә генә баш эймәй. Йәки уның ишеген кемдәр генә асмай ҙа кемдәр генә уға баш эймәй.*

*Хәйер, хәҙер ишек асыу тигәндәрең дә бик самалы. Бәйләнеш өсөн ниндәй генә саралар юҡ. Хәҙер хат яҙышыу ғына түгел, телефондан һөйләшеү ҙә иҫкереп бара. Интернет селтәре, үрмәкес ауы һымаҡ, донъяны урай, кешенең зиһенен аңдый. Уның кеше рухы өсөн яҡшы яҡтарына ҡарағанда мәкерле яҡтары күберәк булмағайы!.. Әҙәм балаһы Бөйөк интернет ҡолона әйләнмәгәйе, тип ҡурҡам.*

*Бына ошондай информацион иҙеү ваҡытында кеше рухы ниңә үҙенә аулаҡ эҙләмәһен, ниңә яңғыҙлыҡҡа ҡасмаһын. Хәҙерге был хәлдәрҙең кешенең кешенән биҙеүе тиגән бик хәүефле ауырыуға килтереүе һис кенә лә ғәжәп түгел.*

*Хәбәргә сарсаған боронғо кеше һәм хәбәр ташҡынында сәсәүсе, уның шау-шыуында йәне талсыҡҡан хәҙерге кешеләр. Быларҙың насар һәм яҡшы яҡтарын һанауы еңел, әммә уларҙың ҡотолғоһоҙ булыуы айырыуса аяныслы.*

**27.03.2002. Шаршамбы.**

**Татарстандан Роберт Миңнуллин (лауреат иттек), Фоат Ғәлимуллин, Рәмзил Вәлиев (Бөтә донъя татар конгрессы рәйесе урынбаҫары), Илфак Ибраһимов (мәҙәниәт министры урынбаҫары, Мөхәмәт Мирза тигән шағир) килде. Сыуашстандан Валерий Тургай, халыҡ шағиры Юрий Семендер (быйылғы лауреат). Башҡортостандан лауреаттар Юрий Андрианов, Азат Әхмәт (Бәләбәй).*

**Кеше гел генә үҙенә, үҙенең күңеленә йыйып йәшәй алмай. Башҡалар менән бүлешеп өлгөрә алмай, бай уй-тәьҫораттарыңды тик үҙеңә туплау, критик массаның артып китеүенең шартлауға килтергәне һымаҡ, кеше зиһенен емерергә, имгәтергә мөмкин.*

*Рәшит Назаров һымаҡ даһи шағирҙарҙың фажиғәһе шунда түгелме икән? Ул донъяны сабый һәм үҫмер сағынан уҡ шул тиклем нығ тойоп, нескә кисереп, тәрән уйланып йәшәгәндер, улар шиғырға туктауһыҙ түгелһә лә, зиһененә, рухына һыйып етмәгәндер, ҡағыҙға төшөп өлгөрмәгәндер. Шул уй-тойғоларҙың ташҡыны, фекер һәм эмоциональ перегрузка, йәғни критик массаның артып китеүе аҡылдың шартлауына – шәхестең емерелеүенә, ҡот оскос фажиғәгә килтермәнеме икән? Ҡайһы бер генийҙар бындай ҡыҫымдарға, сиктән тыш ауыр,*

*көсөргәнешле һынауҙарға сыҙай, икенселәре уны күтәрә алмайынса, һәләкәткә дусар була.*

**9.07.2002. Шишәмбе.**

**Руханиҙар: «Барыһы ла Алла ҡушҡанса, түҙергә, доға ҡылырға кәрәк» – тип матур кәңәштәр бирәләр. «Кеше тыуғанда уҡ уның һәр аҙымы, һәр сәғәте Аллаһы тарафынан билдәләп ҡуйылған», – тип йыш һөйләй Тәлғәт хәҙрәт. Был хаҡта йыш уҡырға ла тура килгәне бар. Барыһы ла билдәләнгән икән, беҙгә ни эшләргә ҡала? – бына ошо һорау тынғы бирмәй. Кеше булып, лайыҡлы йәшәргә – быныһы шулай, әлбиттә. Был һорауға «Насип булғанды ҡәҙерләргә, аҫыл ғүмерҙе әрәмшәрәм итмәҫкә, яҡшы эштәр менән үткәрергә» тип яуап биреп булалыр.*

*Әйтәйек, һиңә 1000 һум бирелгән, артыҡ та, кәм дә, түгел, нәҡ шунынса. Шуны нисек тотоноуың – һинең ихтыярыңда. Һәйбәт китаптар, яҡшы ризыҡтар алаһыңмы, хәйер өләшәһеңме, ғаиләңдең кәрәк-яраҡтарына тотонаһыңмы – һинең эшең. Әллә эскелек, аҙғынлыҡ юлында туҙҙырып бөтөрәһеңме – быныһы ла һинең эшең.*

*Йәки бына һинең алдыңда ике юл, ҡайһыһынан китһәң дә һиңә бер үк ара үтергә яҙған. Уңынан китһәң, туҡтауһыҙ хеҙмәт, юғары әхлаҡ талаптары, ғәҙеллек һәм ғилем аша яҡтылыҡ донъяһы буйлап бараһың. Һулынан китһәң, еңел әүрәүҙәр, баш әйләндергес йылтыр ялғандар, борғаланыу-ялағайланыуҙар һәм шуларҙың аҙағы – упҡын. Тәүгеһендә ҡыйралыштар булһа ла – рух бейеклектәренә артылыу, икенсеһендә – һатлыҡ рәхәтлектәргә сумып, түбәндән-түбәнгә тәгәрләү.*

*Һиңә йәшәр ғүмереңдең күпме йылдарға һуҙылырын билдәләү хоҡуғы бирелмәгән, әммә ниндәй эштәр ҡылырыңды, яҡшы йәки яман эштәрҙе, хаҡты йәки нахаҡты һайлау хоҡуғы бирелгән. Ә был хоҡуҡ – кешенең кешелек сифаттарын, йәшәүенең асылын, тормошоноң мәғәнәһен билдәләүсе хоҡуҡ.*

**21.09.2002. Шәмбе.**

**Әллә мәсеткә барыуым сәбәп булды. Хәҙистәр яңынан үҙенә тартып алды. Ижадҡа ваҡыт аҙ ҡала, тиһәм дә, тағы ла бер хәҙистәр китабы әҙер булған бит! 115 хәҙис – барыһы ла быйыл, күпселеге йәй яҙылған. Былай булғас, шөкөр итергә кәрәк!*

*Кисә кис, бөгөн төндә-таңда 101 хәҙисте яңы дәфтәргә күсереп ҡуйҙым. Инде бәләкәй генә баш һүҙ яҙып, «Ағиҙел»гә бирәм, йыйынтыҡ итеп әҙерләйем. Хәҙер спонсор эҙләргә.*

**Киләһе аҙна бик тығыҙ: Аксаков көндәре, Ҡыйғыла Р. Сафин, Күгәрсендә Р. Йәнбәк, Дүртөйлә, Борай, Илеш яҡтарында Г. Ситдикова юбилейына арналған осрашыуҙар. Рафаэль ағай менән барырға вәғәҙә биргәйнем, «Оперный»ҙа Аксаков кисәһе менән тап килә.*

**7.11.2002. Кесаҙна.**

**Һуңғы йылдарҙа күп ғүмерем юлда, хәрәкәттә үтә. Элек берәй юлға сығырға булһа, сиркәнеп тора инем, хәҙер оҙағыраҡ сәфәрһеҙ торһам,*

*ҡыйын була башлай. Юлда күңелем йәшәргәндәй, рухымда көс яңыргандай. Хәрәкәт һәм тиҙлек ваҡыт үлсәмен үҙгәртә, тиҙәр. Движение, скорость и измерение времени. Хәрәкәттә – бәрәкәт тигәндәренең мәғәнәһе, бәлки, беҙ аңлағандан тәрәндәрәктер?..*

**9.11.2002. Шәмбе.**

**1 ноябрҙә «Родина» кинотеатрында минең турала «Илемдә илемде һағынам» тигән ярты сәғәтлек фильм, ниһайәт, донъяға сыҡты. «Война и мир»ҙы ла былай оҙаҡ төшөрмәгәндәрҙер. Минең өсөн был фильмда иң мөһиме – заманым, ҡәләмдәштәрем, туғандарым. Йәшәгән ерем, изге урындар тураһында күберәк информация биреп, тере кадрҙар теркәп ҡалдырыу. Шуға ла ул документаль тип атала. Был яҡтан фильм ярайһы уҡ тығыҙ йөкмәткеле сыҡҡан. Юғары баһалап сығыш яһанылар.*

**2 ноябрҙә Башҡортостан мосолмандарының съезы. Башҡорт театрында. Халыҡ күп кенә йыйылған. Мөфти һайлағанда аҙыраҡ тартыш та булып алды. Минең сығышты оҡшаттылар, аҙаҡ байтаҡ кеше килеп рәхмәт әйтте. Съездың резолюцияһын да миңә уҡырға тура килде. Хәҙрәттәр араһында мәғлүмәтле, уҡымышлы, фекерле дин әһелдәре лә бар. Әммә, дөйөм алғанда, муллалар корпусы бик йомшаҡ күренә. Ә бит улар аҙна һайын халыҡҡа вәғәз менән мөрәжәғәт итергә тейеш. Нисәмә йылдар буйы динде эҙәрлекләп килгәс, хәҙер килеп ни хәл итәһең? Сталиндың яҙыусылар тураһындағы һүҙен үҙгәртеп: «У меня нет других мулл» тип әйтергә генә ҡала. Бөтә өмөт килер быуында. Йәштәрҙе күберәк уҡытырға кәрәк.*

**Башҡортостан мосолмандары диниә назаратының тәүге мөфтөйө 1917-1918 йылдарҙа минең Сәғит бабайым Мрәсев (Ҡыуайырҙан) булған икән. Хөсниямал өләсәйемдең ағаһы.*

*Телмәремде киңәйтеп, «Ҡаҙерен белһәң, ҡәҙер кисенә тиң» тигән мәҡәлә эшләнем.*

**23.11.2002. Шәмбе.**

**«Ҡабаланыр мәл түгел» тигән мәҡәләм үткән аҙнала «Башҡортостан»да сыҡҡайны. Хәҙер президент республикаһын яҡлап айырым кешеләр ҙә, ижтимағи ойошмалар ҙа сығыш яһай.*

**26.11.2002. Шишәмбе.**

**«Ҡулды тота торған эш» – мәсьәләне бына ошолай бик конкрет күҙ алдына килтереүсе һүҙҙәр була.*

**«Ҡәләмем» тигән шиғыр яҙыу теләге тыуҙы. Уға вирус та теймәй, ул электр сығанағына ла бәйһонмай, уға ремонт та кәрәкмәй. Бер секундта һеҙҙең бөтә компьютер системаларығыҙҙы бер төймәгә баҫып хәрәкәтһеҙ итеп була, эштән сығарып була, үлтереп була. Ә шағирҙың ҡәләме үҙе менән генә үлә. Ҡулын сапһалар ҙа, ҡәләмен һындырып-юҡ итеп булмай.*

**Юбилей көндәрендә «Тыумышына фәләнсә, ижадына фәләнсә йыл» тигән игландар элена. Уйлап ҡараһаң, ижад тыумыштан уҡ башлана.*

*Күптәр бала саҡтан шиғыр яҙа. Ҡайһы берәүҙәр һуңлабыраҡ тотонһа ла, ижад потенциалы күңелендә тупланып йөрөй. Ижад фәләнсә йылда ғына башланып китә алмай, уның өлгөрөп еткәнен раҫлаусы тәүге миҫалдар ғына булырға мөмкин.*

**Тағы ла ҡәләм һәм компьютер тураһында. Президенттар ҙа ҡәләм менән ҡул ҡуя.*

**24.12.2002. Шишәмбе.**

**Ҡыштың тылсымлы күренештәр менән арбаған бер мәлендә – 22 декабрҙә Рафаэль Сафиндың йөрәге тибеүҙән туҡтаны. «Бер ҡурайың ғына булайым...» тигәйне ул. Шиғриәтебеҙҙең моңло бер ҡурайы һынды. Ярай әле, етмеш йәшендә уҡыусыларын күреп ҡалды, тыуған яҡтарына ҡайтып ҡыуана алды. Рафаэль ағай оҙаҡ ауырыны, әммә һыҙланыуҙарын башҡаларға белгертмәҫкә тырышты. Кеше тураһында бер ваҡытта ла яман һүҙ һөйләмәне, тирәһендә ғәйбәт йөрөтмәне. Һирәгерәк яҙһа ла, ул һәр ваҡыт ижад тип йәшәне, телендә лә, күңелендә лә гел генә әҙәбиәт булды.*

**24.05.2003. Шәмбе.**

*Һөйәктәрҙе сытырлатып*
*Аттар тапап үтәләр.*
*Ауылдарҙа, ҡалаларҙа*
*Ҡайтыр тиеп көтәләр.*
*Һөйәктәрҙе сытырлатып*
*Танктар иҙеп үтә.*
*Ауылдарҙа, ҡалаларҙа*
*Әсәйҙәр һаман көтә,*
*Һылыуҙар һаман көтә.*

*Артабан һүҙ апайҙарға күсергә тейеш. Был шиғыр түгел, пьесала сәхнә артынан башҡарылған йырҙа яңғырарға тейеш. «Атайҙар көтәләр улдарын» мотивы. Был хаҡта әҙәбиәттә һүҙ бөтөнләй тиерлек юҡ. Ә бит һәр атаның иң ҙур горурлығы – улы! Иң ҙур ҡайғыһы ул – улы... Әсә һәр балаһының тыуғанына шатлана. Атай кеше барыһынан да бигерәк улының тыуғанын көтә.*

*«Аталар көтәләр улдарын» тигән йыр тексы яҙғайным, Роза Сәхәүетдиноваға биргәйнем. Етди әйбер итеп ҡабул итмәне, аңлап бөтөрмәне.*

**25.05.2003. Йәкшәмбе.**

**6 майҙа идара ултырышы үткәйне, яҙып ҡуйырға онотҡанмын. Ә ундағы хәлдәр оноторлоҡ булманы бит. Идара ултырышында төп мәсьәлә Тимер Йосопов менән Марат Кәримовҡа халыҡ шағиры исемен биреүҙе һорап яҙған хаттарҙы ҡарау ине. Был мәсьәләнең еңел генә үтмәҫен белә инем, әлбиттә. Ләкин күптәрҙең ысын йөҙө, асылы шулай асылыр тип көтмәгәйнем. Тимерҙе яҡлап йөрөгән дуҫтары ла уға ҡаршы булып сыҡты. Марат ағайҙың да шулай уҡ. Йәшерен тауыш күптәрҙең йәшереп йөрөгән уйҙарын асып һалды. Алдан фекер алышыуҙа хаҡ һүҙҙәр ҙә әйтелмәне түгел, байтаҡ әйтелде. «Шағир бөгөн*

*халыҡ яҙмышы хәл ителгән заманда өйөнә бикләнеп шиғыр ғына яҙып ултырырға тейеш түгел» тигән һүҙҙәр менән нисек килешмәйһең?*

*Был исем хаҡында минең фекерем күптән билдәле. Башҡортостан, халыҡ, шағир – исем бына ошо өс компоненттан тора. Улар айырылғыһыҙ үрелергә тейеш, бер быуыны төшөп ҡалһа, исемдең йөкмәткеһе тулы булмаясаҡ.*

**12.06.2003. Шаршамбы.**

**«Ағиҙел»дең быйылғы бишенсе һанында Хисмәт Юлдашевтың һәйбәт шиғырҙар шәлкеме сыҡты. «Себер» тигәненә ошондай эпиграф ҡуйылған:*

*Башҡорт һарҡындыһы менән тулған Себер. Р. Түләк.*

*Эпиграф итеп алынған был һүҙҙәр Рәйес Түләктең «Себергә» тигән шиғырынан («Ағиҙел», 2002, №6). Бына һиңә проблемаға ҡарата ике ҡараш. Рәйес шиғырына Буранбай Исҡужиндың «Ни күрһәм дә үҙ еремдә» тигән юлын ҡуйған. Икеһе лә һәйбәт шиғыр, Хисмәттә лә, Рәйестә лә хаҡлыҡ бар. Себергә китеүселәрҙе Зөлфиә Ханнанова ла гәйепләп яҙғайны. Уларҙы гәйепләүселәр күп ул. Ләкин мәсьәлә бик ҙур, ул хаҡта мин махсус яҙасаҡмын.*

*Башҡортостандан ситкә һибелгән күбек, сүп-сар ҙа аҙ түгелдер, ләкин Себерҙә ҡара тир түгеп, серәкәйҙән таланып, һыуыҡтарында туңып, хәләл аҡса табып балаларын аҫраусы ирҙәрҙең, тормошон нисек тә көйләп ебәрергә тырышыусы йәш егеттәрҙең күпселеге һис кенә лә башҡорт һарҡындыһы түгел бит.*

*Эш Себергә китеү-китмәүҙә генә түгел бит. Һинең Башҡортостанда йәшәп ғаиләңде ҡарай алмай, донъяңды туҙҙырып, балаларыңдың ауыҙынан тартып алып, һуңғы әйбереңде һатып эсеп йөрөүеңдән милләтең өсөн ни файҙа?*

*Башҡорт һарҡындыһы булған башҡорт ир-аты бында ла етерлек. Үҙен-үҙе ҡырыусылар, тамырын, нәҫелен ҡоротоусылар.*

**13.06.2003. Йома.**

**Кисә Уитменды ҡараштырып ултырҙым. Күптән ҡулға алған юҡ ине, ҡыҙыҡлы. Хәҙер байтаҡ яғын яңыса аңлайһың. Чуковскийҙың мәҡәләһе лә уны тулыраҡ асырға ярҙам итә. «Дали демократии» тигән мәҡәләһендә Уитмен беҙҙең көндәргә, демократияға, һайлауҙарға һ.б. бик ауаздаш фекерҙәр әйтә. Уның үҙ дәүерендә әҙәбиәттең абруйы, барлыҡ сәнғәт һәм матбуғат төрҙәренән өҫтөн урын биләүе, үҙенсә хаким булыуы тураһындағы һүҙҙәрен (мәҡәлә шундай раҫлауҙар менән башлана) көнләшеп уҡыным. ТВ һәм радио күпме ағыу һипкәндә, кассеталар, компьютерҙар, интернет донъяны ағыулағанда әҙәбиәткә хакимлыҡ итеү тураһында түгел, нисек йән аҫрау, кеше рухынан нисек бөтөнләй ҡыҫырыҡланып сығарылмау тураһында уйларға тура килә, намыҫты нисек һаҡлап ҡалырға, тип ҡайғырырға тура килә.*

*Шул мәҡәләне уҡығанда уйланым: Башҡортостан суверенитеты дәүләт системаһындағы ғына күренеш түгел. Суверен шәхестәрҙән генә суверен ил хасил була. Әгәр бер кешеләре араҡы ҡоло, икенселәре*

*аҡса ҡоло икән, әгәр күбеһе үҙен генә уйлап йәшәй, ә бәғзеләре үҙен дә уйлай алмаҫлыҡ түбәнлеккә тәгәрәгән икән, ул ниндәй азат дәүләт булһын? Суверенитет хаҡында Декларация ҡабул итеү – оло тарихи ваҡиға. Ләкин уны тарихи эштәр, көндәлек ауыр хеҙмәт менән нығытырға кәрәк. Дәүләт документтарындағы суверенитетты Мәскәү һыҙып йәки йыртып ташларға ла мөмкин. Ә күңелдәге суверенитетты улай ҡатилдарса юҡ итеп булмай. Намыҫыбыҙ, рухыбыҙ ҡаҡшамаһа, илебеҙ ҙә ҡаҡшамаҫ.*

*Конъюнктура барлыҡ совет әҙәбиәтенең оло бәләһе булды. Был бәлә бигерәк тә драматургияға ныҡ ҡағылды. Йөҙәрләгән әҫәрҙәр араһынан Мостай Кәрим трагедиялары ҡалды, «Башҡорт туйы» менән «Башмағым» ҡалды. Ҡайҙа беҙҙең прозабыҙға, бигерәк тә шиғриәтебеҙгә тиң драматургиябыҙ? Ниндәй мөһабәт театр һарайҙарыбыҙ бар. Тик шунда батша булып хаким итерлек актерҙарыбыҙ булһа ла, драматургтарыбыҙ, режиссерҙарыбыҙ юҡ. Театр – сәнғәттең изге ҡорамы, батша һарайы. Ләкин был изге батша һарайы (ниндәй яңы театр биналары!) беҙҙә бөгөн батшаһыҙ! Титандар ултырыр тәхетте иргәйелдәр һырып алған.*

**16.06.2003. Дүшәмбе.**

**Беҙгә кемдер мотлаҡ ситтән ярҙам итергә тейеш – был имгәк (иждивенческий) холҡо йылдар буйы тәрбиәләнгән, кемдер үҙенсә эшләргә, уртаҡ стандарттан сығырға теләһә, башына һуғып торғандар. Юҡҡамы ни, булдыҡһыҙ нисектер ауыр хәлдән ҡотолһа, «колхоз помог» тиҙәр. «Инициатива наказуема» тигән һүҙ ҙә ерле юҡтан тыуمаған. Хәҙер был мәсьәләләрҙә бик ҙур һынылыш ҡына хәлдәрҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртәсәк. Ләкин тота һалып һындырып булмай, ҙур бәләкәйҙән башлана.*

**21.06.2003. Шәмбе.**

**Реанимацияла аҙыраҡ күҙ асылғас, Абайҙың «Слова назидания»һын уҡый башланым. 1995 йылда Алма-Атыла 150 йыллығына бүләк иткәйнеләр. Элек тә ҡараштырғайным, күрәһең, бик ашығыс ҡына күҙ йөрөтөп сыҡҡанмын. Әле яңынан уның фекерҙәр донъяһына сумдым.*

*Ҡайһы саҡта шулай була: берәй аҡыл эйәһенең уйланыуҙарын уларҙың ысын күләмендә, ҡоласында һәм тәрәнлегендә ҡабул итеү өсөн һинең шул ваҡыттағы рухи хәлең шул шәхестең кисерештәре менән ауаздаш булырға тейеш. Абайҙың был нәсихәттәре менән минең осрашыуым нәҡ бына шундай ауаздашлыҡ шарттарында булды. Реанимация палатаһында 5 кеше ятабыҙ. Миңә береһе генә күренә, өсәүһе алғы яҡта. Килтереп торалар, алып китеп торалар. Бында йәшәү менән үлем бер-береһенә йәнәшә генә. Операциянан һуң ыңғырашыуҙар бында ғәҙәти тын алыш һымаҡ була башлай.*

*Бына ошондай ғазаптар солғанышында мин тумбочкамдан, саҡ-саҡ үрелеп, Абайҙың миниатюр китабын ҡулыма алдым. Уның ғазаптар донъяһына инеп киттем.*

*Әлегә күп уҡып өлгөрмәнем. 45 бүлектең бөгөн төндә һигеҙенсеһен*

*уҡып бөтөрҙөм. Абай был кәңәш-нәсихәттәрен 45 йәшендә яҙа башлаған, һуңғылары 1898 йылда, 53 йәшендә теркәлгән. Тәүгеләрен яҙғанда әле бик үк оло ла булмаған, әммә барлыҡ тормош юлына йомғаҡ яһай. Күпме һағыш, күпме күңел төңөлөүҙәре, ни тиклем яңғыҙлыҡ, ни тиклем һыҙланыу. Ҡаҙаҡ халҡы өсөн йәнен атырға әҙер торған Абай үҙенең һөйөклө милләтенә ҡарата ни тиклем дөрөҫ, аяуһыҙ, ҡырыҫ һүҙҙәр әйтә! Уның алдында тамсы ла ярамһаҡланмай, уны идеаллаштырмай. Киреһенсә, күпме етешһеҙлектәрен фашлай, дөрөҫлөктөң япмаһын йыртып аса.*

*Туған халҡың менән бөгөн нәк бына шулай һөйләшергә кәрәк. Уны нисек тә идеаллаштырырға, ерҙәге кешелек тарихын башлап ебәреүсе итергә тырышып, күккә күтәрергә түгел, уның бөгөнгө оло бурыстары һәм үтә ваҡ ҡылыҡтары тураһында шулай ирҙәрсә дөрөҫлөктөң күҙенә ҡарап һөйләшергә кәрәк.*

**20.07.2003. Йәкшәмбе.**

**Әҙер китап булырлыҡ шәхестәр осрай. Бында Башҡорт дивизияһының эскадрон командиры Әнүәр ағай Насиров дауалана. Һөйләгәндәрен генә яҙып ултыр – йотлоғоп уҡырлыҡ әҫәр. Эх, ваҡыт еткереп булһа, үҙем яҙыр инем! Әммә ҡайҙа ул ваҡыт тигәнең? Ә бит ағай мәңгелек түгел: 84 йәштә, 13 операция үткәргән.*

*Кеше тәбиғәтенең асылы, сәйер яҡтары тураһында уйланғанда, гәҙәттә, үҙең ситтә ҡалаһың, былар, йәнәһе, һиңә бик үк ҡағылып бармай. Ә бына һуңғы ваҡытта мин дөйөм кешеләр тураһында түгел, уларға үҙемде лә ҡушып уйланам. Кешенең мөмкинлектәре тураһында ла, меҫкенлектәре хаҡында ла. Был инде – ологая барыу менән бәйле ниндәйҙер мөһим үҙгәреш, объектив хәҡиҡәткә яҡыная барыу, үҙеңде күктән ергә, кешеләр араһына төшөрөү.*

**3.08.2003. Йәкшәмбе.**

**Матур ҡатынға ирҙәр ҡомһоҙланып ҡараған һымаҡ, бай Башҡортостанға күпме ас күҙҙәр хужа булырға хыяллана. Фәҡир республикаларға улай ташланырға тормайҙар. Хәйер, уларҙың ҡаршылашыр көстәре лә юҡ инде, яҙмыштарына буйһонғандар. Башҡортостанды нисәмә быуаттар буйына бындай күндәмлеккә өйрәтә алмайҙар.*

**9.08.2003. Шәмбе.**

**Етеһендә киңәйтелгән идара ултырышы үткәрҙек. Утыҙҙан артыҡ кеше булды. Төп мәсьәлә – һайлауҙарға әҙерлек. Байтаҡ кеше һөйләне (Ғәзим, ике Филиппов, Н. Асанбаев, М. Садикова, А. Хөсәйенов, Ҡ. Аралбаев, Г. Юнысова, Р. Шәкүр, А. Баһуманов).*

*Нәжип ағай әйтә, 200 яҙыусынан өсәр кешенән 70 команда төҙөп була, ти. Ағай, ағай, көслө генә 7 команда төҙөп, һайлау алдынан ныҡлап эшләтеп булһа икән.*

**28.09.2003. Йәкшәмбе.**

**Алыҫтан ҡараһаң, ҡайын урманы ап-аҡ, ағастар береһенән-береһе зифа. Яҡын килһәң, һәр ағас тиерлек үҙенсә йәрәхәтләнгән, һыҙырылған,*

*ауып ятҡандары бар, яртылаш һерәйеп торғандары, һынғандары, кәкере-бөкөрөләре бар.*

*Һәр урман шулай бит ул. Алыҫтан ҡараһаң – матур йәшеллек, үҙенә саҡырып, арбап тора. Яҡын килһәң, йығылғандары ла, сүп-сары ла етерлек.*

*Шундай хәлде ужым баҫыуында ла күргән бар. Алыҫтан – күҙҙең яуын алып ятҡан йәшел хәтфә. Яҡын килеп, эйелеп ҡараһаң, матур үҫентеләр араһында ҡороп барғандарын, хатта һарғайғандарын да күрәһең.*

*Барыһы ла тормоштоң үҙе һымаҡ инде. Назар Нәжми әйтмешләй, «Был донъялар ниндәй матур юғарынан ҡарағанда». Дөйөм уйлағанда халҡыбыҙ матур, көслө, талантлы һ.б. Араһына инеп китһәң, күпме бәхетһеҙҙәр, фәҡирҙәр, ҡайғылы-хәсрәтлеләр һ.б. Һуңғы йылдарҙа бигерәк тә.*

**17.11.2003. Дүшәмбе.**

**Ерҙең тартыу көсө һәр нәмәне үҙенә йолоп ала. Кескәй генә ҡом бөртөгө лә һауала аҫылынып тора алмай. Хатта күҙгә күренмәгән саң да осоп йөрөй ҙә ергә ята. Ә һуң ниндәй ғәләмәт масса – болот – ҡар – ямғыр! – ниңә тотошлайы менән ергә ишелеп төшмәй? Ниндәй көс уларҙы теләгәндә яйлап ҡына, урынын һайлап ҡына ергә һибәләй, теләгәндә көслө ташҡын-өйөрмә итеп яуҙыра? Был хәл мине һәр саҡ хайран ҡалдыра.*

**21.12.2003. Йәкшәмбе.**

**Беҙ һуңғы йылдарҙа милли үҙаңдың үҫеүе, тарихи хәтерҙең яңырыуы тураһында бик дөрөҫ һүҙҙәрҙе бик хаҡлы рәүештә йыш ҡабатлайбыҙ. Ләкин шәхестең граждانлыҡ үҙаңы тураһында – ләммим. Граждانлыҡ үҙаң милли үҙаңдан юғарыраҡ, дөрөҫөрәге – милли үҙаңдың артабанғы үҫеше, уның иң юғары кәүҙәләнеше. Ватан – йәшәү урыны ғына түгел, географик йәки геополитик киңлек-ара (пространство) ғына түгел, Ватан – һинең рухыңдың изге төйәге, йәшәйешеңдең нигеҙе, йөҙәр быуынлы шәжәрәңдең тамырҙары һут алыр бәрәкәтле тупраҡ. Һуңғы һайлауҙар күптәребеҙ өсөн Башҡортостандың нәк шулай булыуын күрһәтте. Шул уҡ ваҡытта бәғзе берәүҙәр өсөн уның бары йәшәү урыны икәнлеген, унда хужа буласаҡ кеше аҡса өләшһә, буш вәғәҙәләр бирһә, шуның артынан эйәрергә әҙерлеген күрһәтте.*

**4.01.2004. Йәкшәмбе.**

**Һайлауҙарҙан һуң тынысыраҡ ритмда йәшәлерме тиһәм, барыбер килеп сыҡмай. 23-дә Госсобраниеның Конституцияның 10 йыллығына арналған тантаналы йыйылышында телмәр тоттом. Сығышымды оҡшаттылар: Мостай ағай маҡтап шылтыратҡан, үҙем өйҙә юҡ инем, Фәриҙә менән һөйләшкән.*

*Телмәремдә һайлауҙар алдынан яҙыусыларҙың, бәғзе артистар һәм журналистар һымаҡ, һатылмауҙары, берҙәм һәм ныҡышмалы эшләүҙәре тураһында әйттем. Мостай ағайҙың оло эшмәкәрлеген айырым*

*атап киттем. Башҡорттарҙың борондан конституцион тойғоло халыҡ булыуы, Мәскәү менән боронғо килешеүҙә үк Конституцияның принциптары сағылғанлығы, Төп законды туҡтауһыҙ үҙгәртергә ярамағанлығы һ.б. тураһында һөйләнем. Шәхестең Конституция алдындағы яуаплылығының әһәмиәтен һайлауҙар асыҡ күрһәтте. «Гражданское самосознание – высшее воплощение национального самосознания» һ.б. фекерҙәрем дә үҙемсә мөһим һымаҡ.*

**10.01.2004. Шәмбе.**

**«В оковах ритма и рифмы». Яңыраҡ уҡыған шул һүҙҙәремде ҡағыҙға теркәп ҡуйҙым. Ритм һәм рифма менән тышауланыу, хатта бығауланыу, бер уйлаһаң, сикләргә тейеш һымаҡ. Ләкин шиғриәттең һәм сәнғәттең йәшәү рәүеше шулай. Ирекле шиғыр йыш ҡына көйгә баҫа белмәгән бәйһеҙ, мәғәнәһеҙ бейеүгә әйләнә. Бейей белер өсөн билдәле хәрәкәттәрҙе дөрөҫ эшләргә, таҡтҡа баҫа белергә кәрәк. Йырлай белер өсөн көйҙө боҙмаҫҡа кәрәк. Үҙеңсә яңылыҡ өҫтәйем тиһең икән, шиғриәттең һәм сәнғәттең ошо закондарына нигеҙләнеп эшлә. «Көйһөҙ» йәки «бестактно», «нетактично» тигән һүҙҙәр юҡтан түгел.*

**11.01.2004. Йәкшәмбе.**

**Яңыраҡ Дәүләкәндән Рәмлә һеңлем балалары менән килгәйне. Ҙур ҡыҙы Эльвира 3-сө класта уҡый, 6 йәштән барҙы. Фәриҙә менән инглиз теленән байтаҡ ҡына дәрес үттеләр. «Мы и окружающий мир» тигән предметтан «өс» сыҡҡан. Ялҡауланаһыңдыр, ниңә унан «өс» алырға тейешһең әле, тип дәреслеген ҡарарға булдым. Экология һымағыраҡ берәй фәндер тигәйнем. Китабын алып ҡараһам, унда ҡот оскос хәлдәр! Ябай өсөнсө класс балаһы түгел, вундеркинд йырып сыға алмаҫлыҡ шырлыҡтар! Дәреслек Самарала баҫылған. Дәүләкәндәге гимназия программаһына уны кем индергән? Ундағы башҡорт мәктәбендә был предметты уҡымайҙар икән һәм бик дөрөҫ эшләйҙәр! Бындай «дәреслектәр» менән балаларҙың башын ҡатырыу,– минеңсә, бик мәкерле уйланылған емерткес эш, үҙенсә рухи диверсия, енәйәт ул.*

*Беҙҙең мәғариф системаһында ултырған методистар нимә ҡарай? Исмаһам, чиновник күҙе менән тикшерһендәр ине.*

**17.01.2004. Шәмбе.**

**Мин Муса Ғәли менән 40 йылдан ашыу аралашып йәшәүем, төп хәстәре ижад булыуы, һуңғы һулышына тиклем ҡулынан ҡәләмен төшөрмәүе, яҡтылыҡты яҡлап йәшәүсе яҡты шәхес булыуы, йәштәрҙең ижади киләсәген һәр саҡ хәстәрләп йәшәүе тураһында һөйләнем. Ошо шиғри өҙөгөн килтерҙем:*

*Эй һин серле, кинәйәле миҙгел,*
*Ваҡлыҡтар ул фани, юғалыр.*
*Елдәр ҡойған ап-аҡ был таждарҙы*
*Ҡара итер көстәр юҡ әле!*

*Ауылындағы митингта М. Ғәлиҙең тыуған ауылына ҡайтып ята*

*алыуы менән бәхетле булыуы, йөҙөн, маҡсатын һис ҡасан алмаштырмауы, тогролого менән йәштәргә үрнәк булыуы һ.б. тураһында әйттем.*

**31.01.2004. Шәмбе.**

**Ижад кисәм грандиоз үтте, тип маҡтаныуҙан башлайым әле һүҙемде. «Нефтяник»тың 1100 кешелек залы шыгрым тулды. Бик күп кеше, хатта шул тиклем үк халыҡ, тип тә ебәрәләр, инә алмай ҡайтып киткән. Фойела мониторҙан күрһәткәндәр. Уларына үҙем шаһит булманым.*

**17.02.2004. Шишәмбе.**

**Үткән дүшәмбелә Президентҡа биргән хат Премьерга килгән. Мортаза агайҙың резолюцияһы, минеңсә, бик көслө: «Распоряжение Р.И. Байдавлетову. Наше обещание, данное на съезде писателей, должно быть выполнено!!! Прошу ускорить строительство дома. М. Рахимов. 9 февраля 2004 года.» Мин тапшырган көндө үк бойороҡ биргән. Бынан да көслөрәк тагы ниндәй күрһәтмә кәрәк? Инде бынан һуң да ҡуҙгалмаһалар, ул сагында белмәйем. Тик Байдәүләтов ҡушҡан кешеләр араһында (Ғәскәров, Ишморатов, Госстройтранс Мәүлиәров) ниңәлер экономика министры Власов юҡ. Бөгөн Ҡаҙаҡбаевҡа инергә кәрәк.*

**20.02.2004. Йома.**

**Калининград өлкәһенең Балтийск портындагы «Алтын якорь» ҡунаҡханаһында бындагыса иртәнге бишенсе яртыла ошоларҙы яҙып ултырам. Кисә таңгы иртәнге алтыла өйҙән сыгып киттем. Һигеҙҙә Мәскәүгә остоҡ. Өс сәгәттән һуң – Калининградҡа. Унда ла ике сәгәткә яҡын осаһың, ә билет ике тапҡыр тиерлек арзан.*

*Делегацияла 14 кеше. Етәксеһе хөкүмәттән Рафаэль Зиннуров. Стәрлетамаҡ хакимиәте етәксеһе С. Ғ. Әхмәтов, Башвоенкомдан Илдус Гәрәев, I ранг капитаны Ришат Әйүпов, ветеран, I ранг капитаны Рифмир Ҡудашев, Өфө йәштәре етәксеһе – Салауат Сәгитов, йырсы Лилиә Ишемйәрова, йырсы, ҡурайсы, бейеүсе Заһир Шәйәхмәтов (Байыҡ), ике бейеүсе, ТВ операторҙары һ.б. Ҡудашев Кронштадта хеҙмәт иткән, блокаданы өҙөүҙә ҡатнашҡан.*

*«Башҡортостан» противолодочный кораблгә алып барҙылар. Корабль менән танышып сыҡтыҡ. Гавань төрлө хәрби караптар менән тулган.*

**Моряк булырга хыялланганымда мин моряктарҙы башҡасараҡ итеп күҙ алдына килтерә инем һәм улар ысынлап та шулай булгандыр: тәртипле, көслө, матур һ.б. Әле матростар араһында һөкланып ҡарарлыҡтарын күрмәнем тиерлек. Күбеһе ваҡтар, әрпештәр, төшөп ҡалган һымаҡ йөрөйҙәр. Тун-толоп, бийма кейеп, билдәләренә бысаҡ-штык тыгып торгандары күшеккән тауыҡ һымаҡ бөршәйеп тора. Дүрт сәгәт, ныҡ һыуыҡтарҙа ике сәгәт буйы шулай баҫып тороуы еңел дә түгелдер. Тик мин бында барыбер шыҡылдап торган*

*тәртип, хәрби рух күрмәнем. Честь биреүҙәренең дә рәте юҡ, йәки бөтөнләй бирмәйҙәр.*

**«Башҡортостан» карабына ике машинала 20 тоннанан артыҡ гуманитар йөк ебәрелгән. Бер машина килеп еткән. Аҙыҡ-түлек тейәлгәнен Литвала туҡтатҡандар, әле килеп етмәгән, тинеләр.*

*500 тоннанан артыҡ (10 цистерна) дизель яғыулығы ебәрелгән. 100 исемдә китаптар бар, тинеләр, исемлеген күргән юҡ.*

**21.02.2004. Шәмбе.**

**Ҡала янындағы баҡсалар беҙҙеке менән сағыштырырлыҡ түгел. Спартак Әхмәтов Калининградтың бысраҡлығына аптырап бөтә алмай. Балтийскиҙа ла күптән ремонтланмаған йорттар йыш осрай. Улар ремонтҡа аҡсаны ҡайҙан алһын? Производство юҡ, хәрбиҙәр үҙҙәре саҡ йәшәй. Диңгеҙгә сығырға яғыулыҡтары юҡ. Был яҡтан Стәрле менән сағыштырырлыҡ түгел, әлбиттә.*

**16.03.2004. Шишәмбе.**

**Үҙем өсөн ҡыҙыҡ ҡына «асыш» яһаным. Ожеговтың ҡалын һүҙлеген һәм башҡортса ике томлыҡ аңлатмалы һүҙлекте ҡарап сыҡтым. Ожеговта мин белмәгән һүҙҙәр бик һирәк осрай. Башҡортсала – күпкә йышыраҡ. Ғәжәп хәл бит был. Туған тел менән «танышлыҡ» минең өсөн шулай булғас, башҡалар өсөн нисек булырға тейеш?*

**Педучилищела беҙ үҙебеҙсә бер утрау, оло донъянан да, ғаиләнән дә айырылған ауыл балалары булып йәшәнек. Үҙенсә консервация. Интригаһыҙ, хәйләһеҙ донъя. Ололарҙан да тормош һабаҡтары ала алмау. Былар барыһы ла беҙҙең холоҡ-фигелдең формалашыуына йогонтоһоҙ ҡалмағандыр. Һәр хәлдә, үҙемдә мин уны нык тоям. Оло тормошҡа мин күп яҡтан әҙерлекһеҙ көйө, күңеле шарран-яран асыҡ романтик булып килеп индем.*

**4.04.2004. Йәкшәмбе.**

**Кеше һаман донъяның яңынан-яңы серҙәрен аса, дәһшәтлерәк ҡеүәттәр таба. Кеше таба икән, тимәк, Алла рөхсәт итә тигән һүҙ. Ярамаҫ ергә кеше бер ваҡытта ла үтә алмай бит. Мәҫәлән, теге донъя беҙҙең өсөн мәңгелек сер булып ҡаласаҡ, уны асыу әҙәм балаһына бер ҡасан да мөмкин булмаясаҡ, рөхсәт ителмәйәсәк. Әлегә иһә яңы серҙәр асыла бара икән, кеше йәшәү өсөн яңы мөмкинлектәр, яңы көссығанаҡтар таба икән, тимәк, Аллаһы Тәғәлә быға рөхсәт бирә тигән һүҙ. Ләкин был хоҡуҡтар кешегә ҙур һынау шарты менән бирелә: яңы көстәрҙе тик яҡшылыҡ өсөн файҙалан. Әгәр шулай түгел икән, бәрәкәт һәләкәткә әйләнәсәк, благо превратится в беду. Быны фажиғәле миҫалдары аҙмы ни һуң? Шул уҡ экология һәләкәттәре, шул уҡ атом килтергән, дөрөҫөрәге, атомды яман көскә әйләндергән мәкерле бәндәләр килтергән бәләләр...*

450015, Өфө, Революцион урам, 18

**Т Е Л Е Г Р А М М А**

*«Ағиҙел» журналының баҫыла башлауына 90 йыл тулыуы – республикабыҙ мәҙәниәте тормошонда күркәм бер ваҡиға, оло ҡаҙаныш. Халҡыбыҙҙың тарихи йылъяҙмаһына аяныслы хәлдәре менән уйылған мәлдәрҙә лә, аслыҡ, ут уйнап торған ваҡыттарҙа ла рухи аҙыҡ, күңел йылыһы, киләсәккә ышаныс менән йәшәргә дәрт уятыусы был баҫма иң тәүҙә уны алдырып уҡыусылары менән көслө. Журналды булдырыусы, бар итеүсе нәширҙәр менән генә түгел, уның биттәренә үҙҙәренең әҫәрҙәрен тәкдим итеп, күңелдәргә яҡтылыҡ, иҙелек илтеүсе йор һүҙле, сәсән телле яҙыусылары менән дә көслө.*

*«Ағиҙел» – башҡорт мәҙәниәтенең асыҡ сағылышы, көҙгөһө. Алдағы көндәрҙә лә ошо изге башланғыс дауам ителһен, аҡ йылғаның исемен йөрөтөүсе олпат баҫма тел һағында, әҙәп, әҙәбиәт һағында тороусы булып, халҡыбыҙҙың рухын байытһын, арымай-талмай хеҙмәт итһен, йәш ҡәләмдәргә ҡеүәт, ололарға дәрт бирһен, илһам өҫтәһен!*

*Милләтебеҙҙе донъя майҙанында танытыусы ошо көс берҙәм, ныҡлы булһын, «Ағиҙел» киләсәктә лә кешелеккә хеҙмәт итеүҙән туҡтамаһын, аҙымдары ышанычлы, баҫҡан ере ныҡ булһын!*

*Юбилейың менән, «Ағиҙел»! Бергә булайыҡ, берҙәм булайыҡ!*

**Әминә ШАФИҠОВА,**
**Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры**

450077, Өфө, Театраль урам, 5/2

**Т Е Л Е Г Р А М М А**

*Хөрмәтле дуҫтар!*

*Башҡортостандың мәҙәни йылъяҙмаһындағы күренекле ваҡиға – «Ағиҙел» журналының олуғ юбилейы айҡанлы барығыҙҙы ла ихлас күңелдән тәбрикләйем. Әгәр тарих төпкөлөнә күҙ ташлаһаҡ, абруйлы журналдың тәүге һандарынан уҡ халыҡ мәғарифына илтифатлы иғтибар биреләүен тоҫмалларға мөмкин. Хатта ки «Белем» шәрифе менән сыҡҡан осоронда популяр баҫманың ликбез фронтында айырыуса мөһим бурыстарҙы бойомға ашырғаны мәғлүм. Хәҙер ҙә «Ағиҙел» – күп милләтле республикабыҙ мәғрифәтен яҡтыртыуҙа, халҡыбыҙҙың рухи тамырҙарын һуғарыуҙа, әҙәбиәтен, тарихын, милли үҙаңын һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә баһалап бөткөһөҙ роль уйнауын дауам итә. Ул төрлө тарихи боролоштарҙа ла үҙ ҡиблаһын, үҙ тәғәйенләнешен һаҡлай алды, киләсәктә лә һаҡлар тип ышанам.*

*Абруйлы баҫмабыҙ – республика уҡытыусылары өсөн мәртәбәле трибуналарҙың береһе. «Ағиҙел» авторҙары араһында мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә, студенттар ҙа, мәктәп уҡыусылары ла һанап бөткөһөҙ. Бының өсөн беҙ айырыуса рәхмәтлебеҙ.*

*Башҡорт иленең иң оҙон, иң гүзәл һәм мул һыулы йылғаһының аҙашы «Ағиҙел» журналына килер йылдарҙа ла үҙ уҡыусылары булмышында ҡәрҙәш милләттәр менән дуҫлыҡ, рухи туғанлыҡ ептәрен нығытыуға, йәш граждандарҙа ватансылыҡ, ерһөйәрлек һәм телһөйәрлек, юғары әхләҡи сифаттар тәрбиәләүҙә бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс-ҡеүәт теләйем.*

*Байрамыбыҙ менән, ҡәҙерле «Ағиҙел»селәр!*

**Әлфис ҒАЯЗОВ,**
**Башҡортостан Республикаһының**
**мәғариф министры.**

# «Ағиҙел»гә – 90 йыл

## Нәфис әҙәбиәт:
### хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы

### Алдынғы әҙәбиәт – йәмғиәттәге ҡараштар сағылышы

Ярты йыл һуҙымында дауам иткән әңгәмәләрҙән аңлашылыуынса, нәфис әҙәбиәтебеҙ халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөн барса жанрҙарҙа ла художестволы алымдар, сағыу образдар аша күрһәтә килә, үткәнде байҡап, һабаҡ алырға саҡыра, киләсәкте фаразлап, йүнәлештәрҙе билдәләй. Табыштар ҙа юҡ түгел. Башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, халҡының да визиткаһына әйләнгән Мостай Кәрим ҡәләмдәштәренә, милләтенә «түп-түңәрәк ер, сатнамаған ҡояш» ҡалдырҙы. Ғайса Хөсәйенов «Әҙәбиәт теорияһы»н (Өфө, 2010) яңыртты. Нәжиб Асанбаев Зәки Вәлидиҙең ҡатмарлы образын сәхнәгә сығарҙы. Әмир Әминев, милләт яҙмышына бәйле борсолоп, ерһеҙ («Ҡытай-город»), нигеҙһеҙ («Йондоҙ сәскә»), хәтерһеҙ, рухһыҙ («Танкист») ҡала барыуыбыҙ хаҡында саң һуға. Факиһа Туғыҙбаева ил инәһе ролендәге бүре менән бергә үкһей...

Табыштар, эйе, бар. Улар тураһында тағы ла әйтелер. Әммә табышлы тип иҫәпләнгән әҫәрҙәрҙә лә геройҙар баҙнатһыҙыраҡ, аяуһыҙ тормош тулҡынында юғалыңҡырап ҡалалар, төшөнкөлөккә-өмөтһөҙлөккә биреләләр, аныҡ ҡына маҡсаттары юҡ, ҡыҫҡаһы – күпселекте арттарынан әйҙәрлек шәхес түгелдәр. Сәбәптәр нимәлә һуң? Бит милләтебеҙ һүҙ оҫталарына бер ҡасан да ярлы булманы. Һәр дәүер үҙенең сәсәнен, шағирын, әҙибен, халыҡ трибуны итеп, алғы планға сығара торҙо. Улар тел сарлаусылар ролендә түгел, ә аҡыл эйәләре, ил ағалары булараҡ сығыш яһаны.

Тирә-яғым яу булһа ла, өйөм эсе һау булһын, тигән әйтем бар. Бында, тәү сиратта, өйҙә татыулыҡ, берҙәмлек булыуын теләү күҙаллана. Ғаиләнән ҙурыраҡ солғаныш – милләтебеҙҙе ойоштороусы – берләштереүсе республикабыҙ. Унан да олорағы – Рәсәй. Илде, илдәге халыҡты нимә берләштерә? Бер маҡсатҡа йүнәлтелгән фиҙакәр эшмәкәрлек. Ә маҡсат – идеология тигән күренеш аша билдәләнә. Ни тиклем сәйер тойолмаһын, әммә илебеҙ кимәлендә идеология асыҡланмаған. Хикмәт нимәлә һуң? Үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағында проблемаларҙың ҡуйырыуын (ысынында ла социалистик йәмғиәт алдында хәл итәһе мәсьәләләр ныҡ ҡырҡыулашҡайны) ниндәй юлдар менән булһа ла власты ҡулға төшөрөргә тырышыусылар, Рәсәйҙе быуаттар буйына нисек тә теҙ сүктерергә хыялланыусылар – Горбачевтың Европалағы, океан арьяғындағы дуҫтары бик оҫта файҙаланды. Ельциндың тәхеткә ултырыуы иһә башланған процесты тағы ла тиҙләтте. Уның урынына килеүселәр, бик-бик теләһә лә, ҡырҡа үҙгәрештәр индерә алмай ине: сөнки улар кем ҡулынан власть ҡабул итеүен онотманы, ә «онота» ҡалһалар, тиҙүк иҫтәренә төшөрәсәктәрен яҡшы аңланы.

Ошондай солғанышта «модернизация, оптимизация» һ.б. шундай төшөнсәләр модаға инде, әммә йәшәйеш кимәле, культураһы бик сыбар булған, йәшәү маҡсаты ҡапма-ҡаршылыҡлыға әйләнгән күп милләтле рәсәйлеләрҙе берләштерә алырҙай идеология табылманы. Илдең әүҙем позициялы, патриотик рухлы аҡыл эйәләре был йүнәлештә эҙләнеүҙәр алып бара. Тик күңелдәрҙе яуларҙай, аҡылды биләрҙәй, йөрәккә дәрт осҡондары һалып, беләккә көс өҫтәрҙәй идеология юҡ әлегә. Бәлки, ил тотҡаларына быны кәрәге лә юҡтыр?

Әммә милли йөҙөбөҙҙө, илебеҙ менән телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалайыҡ тиһәк, беҙгә, һис кисекмәҫтән, Рәсәй конституцияһына, милләт-ара ҡабул ителгән хоҡуҡи документтарға нигеҙләнеп, үҙебеҙҙең милли идеологиябыҙҙы булдырыр кәрәк. Сөнки аныҡ идеологияһыҙ төп йүнәлеште билдәләүе ҡыйын. Тап ана шул милли идеологияла халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу, берләштереү, нығытыу, артабан үҫтереүгә бәйле ниндәй йүнәлештә, ниндәй маҡсатта, ни эшләргә кәрәклеге билдәләнә. Ни өсөн эшләнә барыһы ла? Ниндәй маҡсаттар хаҡына иртәгәң бәрәбәренә бөгөнөңдән, күктәге торнаға ышанып, ҡулыңдағы турғайҙан баш тартырға мөмкин? Кем эшләйәсәк милли идеологияны? Уны, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тарихи тәжрибәһенә нигеҙләнеп, бөгөнгө зыялыларыбыҙ: халҡым тип янған сәйәсмәндәр, милли рухлы фәйләсуфтар, социологтар, иҡтисадсылар, әҙәбиәтселәр, халҡыбыҙҙың уйлы ул-ҡыҙҙарыбыҙҙан башҡа кем эшләүе мөмкин?! Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы съездарында ҡабул ителгән документтарға таянып булмаймы ни? Була, әлбиттә. Тик ваҡиғаларҙың уғата йылдам үҙгәреүен, Ҡоролтай съезы документтары уяу власть контроле аҫтында ҡабул ителеүен, ғөмүмән, ойошманың «кеҫәләге орган» булыуын, шул сәбәпле халыҡ араһында ҙур абруй ҡаҙана алмауын иҫтән сығарырға ярамай.

Иң мөһиме – донъя кимәлендә барған процестарҙы күҙ уңынан ысҡындырмау фарыз. Бөгөн күпселек: «Идеялар осоро үтте, мәнфәғәттәр дәүере етте» тип ҡарау ғына түгел, шул принципҡа нигеҙләнеп йәшәй. Уйлаһаң, теләһә ҡайһы мәнфәғәттәр артында ла ниндәйҙер идеялар тороуын асыҡлауы ҡыйын түгел. Шуныһы бәхәсһеҙ: прагматик идеология йәшәйештең бөйөк асылын аңларға ҡамасаулай. Капитализмдың төп ҡануны бер ниндәй ҙә үҙгәреш кисермәгән, һаман да шул көйөнсә: теләһә ниндәй ысулдар менән булһа ла мөмкин тиклем күберәк табыш алыу. Тап шул сәбәпле «Булғария» карабы һәләкәткә осраны, совет осоронда төҙөлгән предприятиеларҙың, техниканың ресурстары һуңғы тамсыһынаса һығып алына, ә тейешле ремонт үткәрелмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, «алдынғы капитализм» былай эшләмәй, әлбиттә. Ҡыраҡайына ғына әлегеһеләй сифаттар хас...

Прагматизм, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, рухиәт донъяһына ла йылдам үтеп инде. Прагматик әҙип иһә халҡының әйҙәүсеһе була аламы? Әҙип – байраҡсы ул, ә байраҡ юғарыла булғанда ғына тәғәйен бурысын үтәй. Дошман да тәү сиратта байраҡсыны юҡҡа сығарырға тырыша. Тимәк, әҙип, байраҡсы булыу хаҡына, аңлы рәүештә үҙенең шәхси мәнфәғәттәренән ваз кисергә бурыслы. Тап ошо юҫыҡта Пушкин Аполлондың (сәнғәт Аллаһының) шағирҙы изге ҡорбан килтерергә саҡырыуы тураһында әйтә лә инде. Бөгөн килеп әҙиптең уңышы аҡса, премия, маҡтаулы исемдәр менән үлсәнеүе ни тиклем ҡыҙғаныс! Йәнә бер парадокс шунда: маҡтаулы исем алыусыларҙың барыһын да яманлап, үҙенә шул исемде алыу өсөн ҡырталашып йөрөүселәр бар... Ундайҙарҙың теләктәренә ирешә алыуҙары ла ғәжәпләндермәй башланы. Сөнки әрһеҙлеге менән гәзит битендә үҙе хаҡында бер-ике ыңғай материал баҫтыра ла хөкүмәт ишеге алдын тапай башлай. Теге байраҡҡа урана ла бер бара, ике бара, ун бара, әммә үҙенекенә барыбер ирешә. Бына ҡайҙа ул әҙәбиәттең, әҙиптәрҙең абруйы төшөүенең бер сәбәбе.

Тулайым әҙәбиәтте, теге йәки был әҙиптең ижадын объектив баһалай алмай башланыҡ. Критерийҙар үҙгәрҙе, үлсәмдәр буталды, талаптар бушаны. Ә улар изгелек менән яуызлыҡты аныҡ билдәләй алыу менән туранан-тура бәйле. Бында ла асыҡлыҡ юҡ икән, әҙәм балаһы таяныслыҙ ҡала, уның менән идара итеүе лә анһаттың анһатына әйләнә. Шулай ҙа намыҫлы талант эйәһе лә, әҙерлекле әҙәбиәт белгесе лә уңды һулдан яҡшы айыра. Яҡшы айыра, әммә ҡараны ҡара тип әйтеүе бер кемгә лә еңелдән түгел.

Сәнғәт әҫәренең камиллығын, бөйөклөгөн билдәләргә ярҙам итеүсе төп үлсәмдәрҙең, критерийҙарҙың береһе, һәлмәге – юғары художестволылыҡ тураһында әйтеп тә тормаҫтан – моғайын, әҫәрҙең тормошсанлығылыр, йәғни уның тормошто бар дөрөҫлөгөндә сағылдыра алыу кимәле менән баһаланалыр. Тормош, ысынбарлыҡ менән бәйлелеге самалы икән, әҙиптең иң юғары кимәлдәге оҫталығы ла һүҙ уйнатыуға ғына ҡайтып ҡаласаҡ. Әлбиттә, әкиәттә лә хәҡиҡәт, тормоштан алынған күренештәрҙең дә төрлөһө булыуы бик ихтимал. Бар күпселек өсөн прогрессив, перспективалы күренештәр, бар әҙиптең үҙекәйе өсөн генә мөһимдәрҙән-мөһим мәсьәлә. Кемдер, башҡаларҙың иномаркаларҙа елдереүҙәрен күреп, «трамвайҙа китеп барам» тип илаулай икән, уға ниндәй теләктәшлек белдерергә мөмкин?! Әгәр ҙә ул ғүмер буйы тир түгеп, иң түбән пенсияға ҡарап ҡалған йәмғиәтебеҙҙең типик вәкиле икән, быныһы– бер хәл, ә елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөгән булһа ни әйтерһең?! Бит бер кем дә «Мин үҙемде генә ҡайғыртам!» тип ҡысҡырып йөрөмәй. Ундайҙарҙың төп принцибы Талейрандың әйткәне булыр: «Тел кешегә фекерен йәшереү өсөн бирелгән». Күбеһенсә сәйәсәткә бәйле ҡулланылған асыҡтан-асыҡ цинизм. Ихласлыҡ хөкөм һөрөргә тейешле рухиәт донъяһында ла ошондай ҡараштарҙың өҫтөнлөк ала барыуы ни тиклем аянкыслы. Дөрөҫ, сәнғәт өсөн сәнғәттең дә, башҡа төрлө ағымдарҙың да йәшәүгә хоҡуғы бар, тик күпселек барыбер ҙә традицион алымдар менән ижад ителгән әҫәрҙәрҙе, геройҙары изгелек, кешелеклелек юлында булғандарҙы, башҡалар өсөн үҙен аямағандарҙы юғары күтәрә. Тап шуның өсөн әҙәбиәт донъяһындағы Урал менән Шүлгән, Ләйлә менән Мәжнүн, Андрей Болконский менән Наташа Ростова, Онегин менән Печорин, Дон Кихот менән Гамлет, Фауст менән Бәләкәй Принц, Емеш менән Аҡйондоҙҙар һ.б. бик күптәр үлемһеҙ. Улар – әҙәбиәт донъяһының йәншишмәһенән тереһыу уртлаған геройҙар. Әйҙәгеҙ, бына ошондай юғарылыҡтан беҙҙең бөгөнгө «байраҡсылар»ыбыҙҙың ҡайһы бер әҫәрҙәренә баһа биреп ҡарайыҡ (башлыса, «Ағиҙел» биттәрендә һуңғы ике-өс йыл эсендә донъя күргәндәренә иғтибар итербеҙ. Кемдәрҙеңдер исеме аталыр, кемдәренеңдер, билдәле сәбәптәр арҡаһында, әҫәрҙәре генә әйтеп кителер).

Бөгөн рәсми рәүештә халыҡ яҙыусыһы, халыҡ шағирҙары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары ысын мәғәнәһендә халыҡтың рухи әйҙәүсеһе була алырлыҡ кимәлдәме? Был исемде алған мәлдә уларҙың күбеһе данға лайыҡ та булғандыр, бәлки. Әммә йәшәйештең ябай ғына талабы шундай: көндәлек эш, ижад, бөгөнгө донъя менән ҡыҙыҡһыныу, уны белергә, аңларға тырышыу юҡ икән – тормоштан артта ҡалдың тигән һүҙ. Ғөмүмән, «өлкән быуын ҡәләмдәштәребеҙ иң оло хөрмәткә лайыҡ» тигән хәлдә лә, әҙәбиәт алдында торған әлегеһе проблемаларҙы заманса хәл итеү йәштәрһеҙ мөмкин түгел. Уйлауымса, быуынға ултырып, әүҙем ижад итә алыу осоро бөгөн – 40 менән 60 араһы. Феноменаль күренештәр тураһында һүҙ бармай. Туҡай менән Лермонтовтың ер йөҙөндәге ғүмере 27 генә йыл, ә Шәйехзаданың – 24. Рәшит Назаровтың да ижади биографияһы 22 тирәһе менән сикләнә. Тик әле беҙ үҙ сафында 230-ҙан ашыу ағзаһы булған Башҡортостан Яҙыусылар союзындағы ҡайһы бер әҙиптәр ижады хаҡында дөйөмләштерелгән фекер әйтмәксебеҙ. Уларҙың

уртаса йәше – 62. Тимәк, Союздың (йәғни, дөйөм алғанда, барса яҙыусыларыбыҙҙың) ижади әүҙемлеге бигүк ҡәнәғәтләнерлек түгел, ҡыйыулыҡ яғы ла самалы икән – быға аптырарға ярамай: олоғаябыҙ. Күп кенә етешһеҙлектәрҙе лә ошоноң менән аңлатырға мөмкин. Оло кешегә ни кәрәк? Тыныслыҡ, ҡәҙер-хөрмәт, ә эше самалы (тағы ла ҡабатлайыҡ: ижад, әлбиттә, уғата шәхсән күренеш. Мостай ағай ғүмеренең ахырынаса бынамын тигән шиғырҙар яҙҙы, салт аҡылға эйә булыуын көндәлегендәге юлдар ҙа тәкрарлап тора. Нәжиб Асанбаевтың да һикһән аръяғында драматик трилогия тыуҙырыуына һоҡланырлыҡ. Ғайса ағай Хөсәйенов, Ноғман Мусин, Тимер Йосопов, Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Әнисә Таһироваларҙың ижади әүҙемлегенә күҙ тейә күрмәһен). Йәшлек иһә күберәк эҙләнә, ҡыйыуыраҡ та, саяраҡ та. Хәйер, конкрет әҫәрҙәр ни тиер?

Археолог Нияз Мәжитов бөгөнгө Өфө урынында беҙҙең эраға тиклем үк ҡала булыуын асыҡланы. Әйткәндәй, боронғо сәйәхәтселәр, тарихсылар төшөргән карталарҙа ла был урында ҡала булыуы белгестәргә мәғлүм ине. Археология мәғлүмәттәрен иһә бер нисек тә инҡар итеп булмай. Факиһа Туғыҙбаева ғалим Нияз Мәжитовҡа бағышлаған «Тормош ағасы» шәлкемендә (2012, № 12) ҡан замандарҙан килгән рухи бәйләнеште, тәрән ҡатламдарға китеүсе тамырҙарҙы юллай, быуаттар буйы тупланған халыҡ аҡылы һәр дәүерҙә лә проблемаларҙы хәл итеүҙә таяныс булыуын күрһәтә:

*Урал батыр!*
*Башҡорт бөгөн дә бит*
*Һинең аҡылыңа таяна:*
*Кешелекле булсы, кеселекле,*
*Ауыр булғанда ла замана!..*

Ғөмүмән, башҡорт шиғриәтендә изге төйәгебеҙҙе, атайсалыбыҙҙы символлаштырған Уралға табыныу көслө. Һәр шағир уны үҙенсә яңғырата, үҙенсә балҡыта. Мәҙәниәтебеҙҙең арҙаҡлы уҙаманы Рәшит Шәкүр Факиһа һеңлеһенең ҡанатлы һүҙен ана нисек ҡеүәтләй:

*Заманалар башланалыр бында*
*Тәүтормоштан, алыҫ тәү мәлдән.*
*Йәнбирҙе лә менән Йәнбикәнән,*
*Урал батыр менән Шүлгәндән.*

*Ошо ерҙе изге Урал батыр*
*Беҙгә төйәк итеп ҡалдырған,*
*Йәншишмәнең тере һыуын бөркөп,*
*Ырыҫ ямғырҙары яуҙырған...*

(2012, №1)

Гүзәл Ситдиҡова өсөн дә ул шулай:

*Бәхете лә – ошо ерҙә,*
*Ләхете лә – ошонда,*
*Ҡанбаба ҡаны һуғарған*
*Урал тигән йортонда...*

(2012, №6)

Әнисә Таһирова ерен генә түгел, рухын да һаҡлай алған ата-бабаларыбыҙға дан йырлай, тыуған ереңә һөйөү булғанда ғына рухың да ныҡлы булыуына инандыра:

*Урал ере Тәңре көсө менән*
*Диңгеҙ төптәренән терелгән.*
*Шул бөйөклөк менән ошо ергә*
*Ҡурай һәм уҡ-һаҙаҡ бирелгән.*

*... Башҡорт ерҙәренә кемдәр генә*
*Яҫҡынмаған, ҡараш атмаған.*
*Башҡорт ерен – осҡор уҡ-һаҙағы,*
*Башҡорт йәнен ҡурай һаҡлаған.*

(2011, №12)

Күренеүенсә, башҡорт өсөн Урал бөгөн дә рухи терәк булып ҡала. Әммә Атайсалыңды сеймал итеп кенә күрергә теләүселәрҙең арта барыуы ла – бөгөнгө ысынбарлыҡ. Быныһы нисек сағыла шиғриәттә? Тәнзилә Дәүләтбирҙина, мәҫәлән, урмандарыбыҙҙың яныуын үҙебеҙҙең ғәмһеҙлектә күрә:

*Тәбиғәтте әсә кеүек һөйһәк,*
*Тығылыр ине өнө*
*уттың күптән!*

(2012, №3)

(Шулай ҙа  һәләтле шағирәнең был ҡырҡыу теманы яҡтыртыуҙа ябай хәбәр һөйләүҙән уҙа алмауын, күренеште образ дәрәжәһенә еткерә алмауын әйтмәй булмай. Бындай һығымтаға авторҙың был шәлкемдәге башҡа шиғырҙары ла дәлил.)

Уның ҡәләмдәше шул уҡ янғынды бына нисегерәк дөйөмләштерә һәм образ кимәленә күтәрә:

*... Һыуһылыуҙар ҡайғыһымы –*
*Сәмреғош ҡаҙалғанда,*
*Ил-бауырың суҡылғанда,*
*Табан аҫтың янғанда.*

*Иблис-шайтандар туйынан*
*Күрәһен күрә илем.*
*Таң аталмаҫ ниндәй төн был?!*
*Янғында минең ерем...*

Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары ла күңелгә уйыла:

*Бөгөн яуыздар тормошто*
*Ҡара упҡынға тарта.*
*Дуҫлыҡ ҡаҡшай. Йыр өҙөлә.*
*Илде ялмап ут арта...*

Был юҫыҡта шағир уйы икенсе бер исемһеҙ шиғырында шулай дауам итә:

*Донъялағы иң урманлы илдә*
*Урмандарға инер юл ҡалмай.*
*Янғындарҙа бөгөн Рәсәй сәсәй,*
*Башҡорт урмандарын ут ялмай.*

*Үҙ еренә халыҡ хужа түгел,*
*Ҡанундарҙан кәртә ҡорғандар.*
*Бер ҡарауһыҙ ҡалып,*

*Ғәрлегенән*
*Яна микән әллә урмандар?*

(2012, №5)

Бында әҫәрҙе художестволылыҡ юғарылығына күтәреүсе парадоксаль фекер һуңғы өс юлда ғына әйтелгән.

Бөгөнгөнөң ҡырҡыу проблемаларын хәл итә алмау сәбәпле кешенең шәхес булараҡ ҡыйралыуын Марат Кәримов «ҡоштар һайрауын онотҡан ҡала ҡайыны» аша картиналы еткерә алған. Сөнки:

*... Ҡаланың үҙ ҡалыбы,*
*Һыйғаны – һыя.*
*Һыймағанын һыйҙырам тип,*
*Имгәтеп ҡуя.*

Шағир, баҙар шарттарына яраҡлашам тип, динен-иманын һатҡандарҙан тап үҙенсә, Кәримовса, әсе көлә:

*«Хәләл» һүҙен йәбештереп,*
*Һатам тауыҡ күкәйҙәре.*
*«Хәләл» тигәс, ҡырылышып*
*Ала ҡала түтәйҙәре...*

*Тиҙҙән ҡала баҙарында*
*Әйтеремде уйлап ятам:*
*«Мосолмандар! Ашығығыҙ!*
*Хәләл дуңғыҙ ите һатам!»*

(2012, №7)

Ошондай алдаҡҡа ҡорола барған болғауыр замандан ир намыҫын, ил тойғоһон юғалтмағандар ғына яҡтыға алып сығыуы мөмкин. Ундайҙарға Тамара Ғәниева туранан-тура өндәшә:

*... Ил ирҙәре!*
*Меңәр йылдар буйы*
*Нәҫелебеҙ йыйған рух көсөн*
*Тәләфләргә*
*Хоҡуҡ юҡ ул һеҙҙә.*
*Телебеҙ өсөн,*
*Илебеҙ,*
*Ер өсөн*
*Баш һалырға ғына хаҡығыҙ бар...*

(2011,№6)

Бөгөнгөнө фәлсәфи, художестволы дөйөмләштереү айырыуса Мәүлит Ямалетдин ижадында күслө:

*Өр-яңы бер китап сыҡты.*
*Ул һөйөнсө, әлбиттә.*
*Фотоң күплеге буйынса һин беренсе, әлбиттә.*
*Шиғриәттә шәүләң түгел – ижади йөҙөң зарур.*
*Ошо яҡтан ҡарағанда, һин көнләксө, әлбиттә.*

Икенсе бер робағийында автор ҡайҙа, ни өсөн ҡабалана-ҡарһалана, эләгә-тәгәрәй йүгереүҙәре хаҡында уйланып та тормағандарҙан ғибрәт алырға кинәйәләй:

*Был ни заман: ер йөҙөндә кеше яман,*
*Ә бит халыҡ һис кәмемәй, арта һаман.*
*Төбәп кенә һорашырлыҡ һис бер зат юҡ:*
*Хаттин ашып, ашҡынабыҙ ҡайҙа табан?*

Байлыҡты ғына ҡайғыртыусыларҙы нимә көтөүен дә фаразларға тырыша ул:

*Ҡарундан ҡыш ҡар һораһаң, биреүҙәре икеле,*
*Мохтаждарҙың хәлен күреп, әрнеүҙәре икеле.*
*Ундайҙарҙың яҙмыштары аяныслы: һарандың*
*Ике донъя рәхәтлеген күреүҙәре икеле.*

(2012, №2)

Эйе, шиғриәт – сәскә наҙы, һандуғас моңо, ғашиҡ теле генә түгел. Сал ҡылғандың ул күҙ йәшеләй саф ысыҡта тирбәләһе урында, «цивилизациялы» төбәктәр аша ямғыр болоттары алып килгән ыулы матдә тамсыларынан эйелеүен дә абайлай, әҙәм балаһының вәхшилеге, вайымһыҙлығы арҡаһында урмандарыбыҙҙың дөрләп яныуын ғына түгел, кешенең рухи донъяһы үртәлеүен, ҡотһоҙлана барыуын күреп тетрәнә. Борсолоп, хәүефләнеп кенә ҡалмай, кәрәк мәлендә шиғри һүҙҙе яуға-дауаға өндәр оранға әүерелдерә.

Бөгөн, миңә ҡалһа, шиғриәттең тап ошо йүнәлештәгеһе әһәмиәтлерәк. Абдулхаҡ ағай Игебаев уҙған быуаттың 60-сы йылдарында уҡ әле Ер-Әсәбеҙгә ҡарата уландарса мөнәсәбәт кәрәклеге хаҡында саң һуҡҡайны. Артабан да был темаға бәйле йөрәктәргә үтеп инерҙәй, аңды ҡуҙғытырҙай әҫәрҙәр ижад итте. Былдай әҫәрҙәр иҫкермәй. Улар һәр дәүерҙә лә көн үҙәгендә буласаҡ. Әммә әлегеһе мәлдә аныҡ эштәргә дәртләндерерҙәй ҡанатлы һүҙ кәрәгерәк. Шиғриәтте байраҡ урынына күтәреү ихтыяжы көсәйгән мәл етте. Заманында Аҡмулла: «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» тип доға урынына тәкрарлаһа, бөгөн:

*Уҡыу ғына етмәй,*
*Эш кәрәк,*
*Эшкә рухландырыр*
*Һүҙ кәрәк,*
*Эшкә әйләнальған*
*Һүҙ кәрәк...*

йүнәлешендәге эҙләнеүҙәр талап ителә.

Шиғриәт шулай ҙа шиғриәт инде. Күбеһенсә ул хис-тойғо менән бәйле, ысынбарлыҡҡа ҡарағанда хыял донъяһына өҫтөнлөктө күберәк бирә. Был йәһәттән прозаның мөмкинлектәре киңерәк, шуның өсөн бурыстары ла һәлмәгерәк. Әммә тулышҡан проблемаларҙы хәл итешеүҙә уларҙың ҡатнашлығы бигүк һиҙелмәй. Мин бында: «Әҫәр баҫылды ла ҡарар ҡабул ителде, эш башланды. Бына шулай булырға тейеш»,– тип әйтергә йыйынмайым, әлбиттә. Художестволы әҙәбиәт күтәргән мәсьәләләр буйынса ғына түгел, журналистың проблемалы аналитик мәҡәләһенә лә иғтибар итеп бармайҙар хәҙер. Ә бит ысын мәғәнәһендә халыҡ өсөн эшләгән хөкүмәт күтәрелгән проблемаларға битараф булырға тейеш түгел. Әйтәйек, ергә бәйле хужаларса ҡараш етешмәүе тураһында күпме мәҡәләләр, хикәйәләр, повестар яҙылды. Әмир Әминевтың Рәсәй кимәлендәге конкурста еңеү яулаған «Ҡытай-город» әҫәре үҙе генә лә ни тора! Ә бит уның буйынса хөкүмәт кимәлендә һөйләшеү генә ойошторолһа ла, йәмәғәтселектә ҙур резонанс булыр ине. Һис юғы, авторҙы, проблеманы яҡшы күҙалларға тейешле белгестәрҙе, яуаплы һәм яуап бирәсәк әһелдәрҙе саҡырып, кәңәштөңәш иткәндә? Башҡортостан еренә сит-яттарҙың тулғандан-тула барыуы

хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Милли республиканың киләсәген ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған был процесҡа ҡаршы хөкүмәт кимәлендә ниндәйҙер аныҡ, һөҙөмтәле эш эшләнмәүе нимә тураһында һөйләй һуң?..

Беҙгә, халыҡҡа, халыҡтың алдынғы иҫәпләнгән зыялыларына кемгәлер, бигерәк тә «Халыҡ өсөн эшләйбеҙ» тип йөрөгәндәргә иҫәп тоторға ярамайҙыр, күрәһең.

Ярай, әҙиптең төп бурысы – ысынбарлыҡты үҙенең художесто саралары менән бар дөрөҫлөгөндә күрһәтеү, ошо нигеҙҙә замандаштарына рухи терәк булыу, уларға һәр кемгә лә берҙән-бер бирелә торған ғүмереңде мәғәнәле итеү, кешелеклегеңде юғалтмау, йәшәйештең илаһилығын, мөғжизә булыуын күрһәтә алыу, тип килешәйек тә был бурыстың үтәлешенә иғтибар туплайыҡ.

Һуңғы өс йылда «Ағиҙел» биттәрендә (бөгөнгө әҙәби процесты был баҫма аша ғына күҙаллаһаҡ та ҙур хилафлыҡтар китмәҫкә тейеш. Сөнки хатта Союз ағзаһы булған әҙип өсөн дә әҫәренең бында, төп баҫмабыҙҙа, донъя күреүе мәртәбә һанала) ете роман, шул иҫәптән, трилогия, 13 повесть, 2 бәйән, 24 эреле-ваҡлы хикәйә нәшер ителгән.

Фәрзәнә Аҡбулатованың «Яҙылып бөтмәгән китаб»ы хаҡында әңгәмәләр барышында фекер әйтелде. Бөгөнгө ваҡиғаларға күпмелер бәйләнеше булғанлыҡтан, Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһына бер ни тиклем туҡталып китмәү ярамаҫ. Авторҙың тел байлығы, йүгерек стиле, ваҡиғаларҙы сигеү сиккәндәгеләй бәйләй алыуы әҫәрҙе ярайһы уҡымлы итә. Үҙенсәлекле урын һөйләше лә «бәйләм»гә нурлы биҙәк булып ингән.

Һәр авторҙың үҙ әҫәре исеменә үк тәрән мәғәнә һалырға тырышыуы, шуның менән уҡыусыһын күңеленә ҡағылырға тейешле тулҡынға көйләргә ынтылыуы яҡшы билдәле. Ҡатындар... Тимәк, өләсәйҙәребеҙ, әсәйҙәребеҙ, йәрҙәребеҙ, ҡыҙҙарыбыҙ, ейәнсәрҙәребеҙ хаҡында? Фаразыбыҙ аҡлана. Ете быуынды берләштереүсе төп героиня – Нурия аша нисәмә-нисә ҡатын-ҡыҙ яҙмышы бәйән ителә әҫәрҙә! Бигерәк тә үҙенән алдағы быуын хаҡында ниндәй ҙә тәрән ихтирам, хөрмәт менән уйлана ул: «Китаптан ғына уҡып белмәйем дәһә мин уларҙы, сөгөлдөрҙә бергә эшләп, аулаҡтарҙа зарҙарын тыңлап үҫтем...» Улар өлгөһөндә ауырлыҡты ла еңелерәк үткәрә Нурия: «Улар, ана, ғүмер буйы сыҙаған, миңә ебеп ултырырғамы, оялмайынса...», илһөйәрлеге менән дә рухташ уҡыусыларында теләктәшлек тыуҙырыр: «"Би-би-си", СССР-ҙа торғонлоҡ дәүере, тимер шаршау, ирекһеҙ матбуғат, тип төкөрөк сәсә. Төптө юҡты һөйләмәйҙәр кеүек тә, барыбер үҙ илемә бер генә ҡырын һүҙҙе лә ҡағылдырғы килмәй».

Шулай ҙа әҙибәнең хикәйәләүҙе беренсе зат исеменән бәйән итеүсе героиня (әлбиттә, Нурия, һүҙ ҙә юҡ, бик ыңғай тойғолар уятырҙай һөймәлекле, алдынғы ҡарашлы, шағирәнә һыҙатлы ауыл уҡытыусыһы булараҡ күҙаллана) кимәленән күтәрелә алмауы үҙен ныҡ һиҙҙерә. Әйтәйек, романда ауыл кешеһе быйма баҫыусылар булыуына, ир-аттың эшһеҙ ултырмауына, йүнен күрергә тырышыусылар табылыуына ихлас ҡыуана. Әлбиттә, ни эшләргә белмәй, аҙып-туҙып, эске-мескегә бирелеүгә ҡарағанда ниндәй ҙә булһа файҙалы шөғөл таба алыу бары хуплауға ғына лайыҡ. Әммә... Интернет заманында, башҡалар кеше эшмәкәрлегенең һәммә тарафында ла иң алдынғы технологияларға мөрәжәғәт иткәндә, космосты үҙләштергәндә башҡорт һаман да сана табаны бөгөү, арба тәгәрмәсенә дегет ҡайнатыу кеүек эштәр менән хушһынып ултырһынмы? Ниңә, республикала, илдә ауыл хужалығы тауарҙарын үҙе тулыһынса эшкәртеп, тура-нан-тура ҡулланыусыларға еткерә алған комплекстар юҡмы ни?! Ниндәйҙер ыңғай башланғыстар ҡайҙа ла бар. Алексеевкала йәшелсә етештереү, мәҫәлән. Райондарҙың баш ҡалала үҙ магазиндарын асыуы ла насар түгел булһа кәрәк.

Ҡышҡа инер алдынан аҙыҡ-түлек һатыу буйынса баш ҡалала йәрминкәләр ойошторолоуы ла мөһим сараға әйләнә бара...

Хикмәт эпик ҡоласлы булаһы әҫәр сюжетын, ваҡиғаларҙың көсөргәнешле үҫтерелешен, композиция мәсьәләләрен тейешле художестволы кимәлдә хәл итә алыу-алмауҙа ла түгел. Мөһимдәрҙән-мөһиме, миңә ҡалһа, бындай күләмле әҫәрҙә осор проблемаһын трилогия юғарылығына күтәрә алыуҙа. Әлбиттә, авторҙың төп маҡсаты совет дәүерендәге ҡатын-ҡыҙ яҙмышын һүрәтләү бит, шул яҙмыш аша дәүер һулышы һиҙелмәйме ни, тип тәнҡитсегә дәғүә ҡуйыусылар ҙа табылыр. Һәм ул дәғүәләр бөтөнләй үк нигеҙһеҙ ҙә булмаҫ. Эйе, ямғыр тамсыһында ла тотош йәйғор балҡышын шәйләргә мөмкин. Шулай ҙа ул балҡыш шиғыр өсөн йәтешерәк булыр, ә трилогия өсөн офоҡтан-офоҡҡаса тартылыусы йәйғорҙоң үҙен тасуирлау менән ярыша алмаҫ. Ҡыҫҡаһы, трилогияға ошондай ҡолас етеңкерәмәй. Әҙибә ҡатын-ҡыҙ психологияһын бик яҡшы белә, шағирәнең прозаны ла шиғыр яҙғандағылай ижад итә алыуына ышандыра, әммә бер нисә быуын яҙмыштар тасуирында, Толпарлы ауылы тарихын хикәйәләү аша роман кимәлендә булырға тейешле киң дөйөмләштереүҙәргә күтәрелә алмай. Улар урынына, әҫәр туҡымаһына ил буйынса башланған боларыштарға бәйле радио, гәзит аша еткерелеүсе хәбәрҙәр индереү менән генә сикләнә. Шундай етешһеҙлектәренә ҡарамаҫтан, дөйөм алғанда, әҫәрҙе уҡыусылар ҙа, тәнҡитселәр ҙә, моғайын, ыңғай баһалар. Әҫәрҙе шартлы рәүештә хатта нәҫер-трилогия (ыңғай мәғәнәһендә!), лирик ағымы көслө булған трилогия тип тә билдәләргә була. Авторҙың табыштары ла, етешһеҙлектәре лә ошоноң менән бәйле: иң нескә күңел ҡылдарына ҡағылырҙай лирик тасуирҙарҙан туҡылған ул, әммә уларҙан күтәрелә алмау, улар менән авторҙың үҙенең үк арбалыуы тәрән дөйөмләштереүҙәр яһарға ҡамасаулаған.

Беҙ һаман да, башлыса, ауыл әҙәбиәте, дөрөҫөрәге, ауыл хаҡындағы әҙәбиәт булып ҡала бирәбеҙ. Мин, был төптө насар, тип әйтергә лә, ауылды хурларға ла йыйынмайым, ә, ысынбарлыҡтан сығып, бөгөнгөбөҙ хаҡында уйланам. Урыҫ әҙәбиәтендә, мәҫәлән, «ауыл прозаһы» (һәйбәт мәғәнәһендә!) тигән ағым барлыҡҡа килеп, унда Василий Белов, Федор Абрамов кеүек әҙиптәр донъя әҙәбиәте кимәлендә танылыу яуланы. Йәғни был йүнәлештә лә «ҙур һүҙ» әйтергә мөмкин. Был – бер булһа, икенсенән, художестволы эшләнеше буйынса башҡа йүнәлештәрҙә лә шуға торошло әҫәрҙәр булһа икән.

Бөгөнгөбөҙгә арналған повестарҙан Әмир Әминевтың «Йондоҙ сәскә»һе хаҡында матбуғатта һүҙ булды: әҫәр ыңғай баһа алды. Ҡалғандары араһынан Ғималетдин Яруллиндың «Зимагур»ын (2012, № 11) айырыңҡырап күрһәтергә мөмкин. Автор тормошобоҙҙоң ғибрәтле яҡтарына күберәк иғтибар туплай: күмәк хужалыҡ тарҡалғас, көнитмешен яйға һалырға, хәләл көсө менән ғаиләһен ҡарарлыҡ аҡса табырға тырышып ҡарай Ҡәҙим, әммә тормош аяуһыҙыраҡ булып сыға – осраҡлы ғына туҡмалып, шунан мандый алмай үлеп тә ҡуя...

Ғөмүмән, һуңғы осор яҙылған әҫәрҙәрҙә ваҡиғалар үҫтерелешендә осраҡлылыҡ йыш ҡабатлана, әгәр шулай әйтергә яраһа – мәғәнәһеҙ, тәү сиратта эскелек арҡаһында, үлемдәр күп. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бында тормош дөрөҫлөгө лә бар. Тик ана шул тормош дөрөҫлөгөн тейешле художестволы кимәлдә аса алыу етеп бөтмәй. Мәғәнәһеҙ үлемдәрҙең төп сәбәптәре, моғайын, шундалыр: беренсенән, маҡсатһыҙ ғүмер һөрөү, йәғни йәшәү мәғәнәһен юғалтыу; икенсенән, проблемаларҙы хәл итә алмау, шул арҡала ауырлыҡтар алдында баҙап, юғалып ҡалыу; өсөнсөнән, тормош тиҙлегенең ныҡ артыуы ла эҙһеҙ үтмәй (50-60 йәштәрҙәге быуынды, арбаны ракетаға, «йүкә» телефонды Интернетҡа алыштырған быуын, тип ҡарарға мөмкин – бындай тиҙләнешкә һәр кемдең психикаһы яраҡлашып өлгөрә алмауына, аҙым һайын стресс хәлендә ҡалыуына аптырайһы

түгел). Бына ошо һәм башҡа сәбәптәрҙе юғары художестволылыҡ кимәлендә юллайһы ине.

Хикәйәләрҙән Тәскирә Даяновaның «Һөйөү фәрештәһе» (2013, № 1), заманыбыҙҙың уғата ҡырыҫ булыуына ҡарамаҫтан, арабыҙҙа изге күңелле, яҡты сырайлы, ярҙамсыл кешеләрҙең дә булыуына инандыра. Миләүшә Ҡаһармановaның Талха Ғиниәтуллиндың «Әсә һәм бала» әҫәрен хәтерләткән «Ситса күлдәг»е (2012, №2) тол ҡатындың олоғайған көнөндә берҙән-бер балаһынан игелек күрә алмауы хаҡында. Әсәһенә ғүмер буйы вәғәҙә иткән ситса күлдәк тә алып бирә алмай улы. Донъяға килтергән, бәпләп үҫтергән... Тик... Тейешле тәрбиә бирә алмауҙа Талха Ғиниәтуллиндың героиняһын ғәйепләргә тел әйләнмәһә, Миләүшә Ҡаһармановaның Нәзирәһе уҡыусыла теләктәшлек уята алыуы икеле (авторҙың маҡсаты ла, әлбиттә, шулай). Уға ҡапма-ҡаршы һүрәтләнгән күп балалы Гәүһәр иһә таш менән атҡанға ла аш менән яуаплаусы булып хәтерҙә ҡала. Ошо йәһәттән, характерҙы психологик нигеҙләүҙе көсәйтә алғанда, әҫәрҙең тормошсанлығы бермә-бер артыр ине. Ғөмүмән, Миләүшә Ҡаһармановала ваҡиғаларҙы бәйән итә белеү, характерҙарҙы аса алыу һәләте, тел байлығы бар. Әҙибә булараҡ артабан камиллашыу, күбеһенсә, ныҡышмал эҙләнеүҙәргә, ижадты йәшәү рәүешенә әйләндереүгә ҡайтып ҡала һымаҡ.

***

Әҙәбиәтебеҙҙе барлау шуны күрһәтә: дөйөм кимәлебеҙ ул тиклем үк бөтөрөнөп китерлек түгел, әлбиттә. Әммә булғаны менән ҡәнәғәтләнеп, бары менән байрам тип үҙебеҙҙе тынысландырып йәшәһәк, ҡомға терәлмәҫбеҙме? Әҙәм балаһы шулай яратылған, тәбиғәте шундай: ул бер ҡасан да булғанына мөрхәтһенеп кенә йөрөй алмай. Һәйбәтме был, әллә насармы? Әгәр ҙә кемдер, башҡалар иҫәбенә үҙ яғын ғына ҡайырып, донъя малы тип әсәһен һатырға әҙер икән, уның эшҡыуарлығына кем ҡыҙығыр? Тапҡан малының бәрәкәте булырмы ла илйортона ҡот ҡунырмы? Былдай рухтағы ижадсының таланты ла бары һайығыуға ғына йөҙ тотасаҡ. Был йәһәттән донъя әҙәбиәтенән художестволы образдарҙы ла (Гоголдең «Портрет» повесынан рәссам, мәҫәлән), ҡайһы бер әҙиптәрҙе, сәнғәт әһелдәрен миҫал итеп килтерергә мөмкин. Һәр хәлдә рухи ҡимммәттәрҙе матди байлыҡҡа алыштырыусы ижадсының үҙ-үҙенә, талантына хыянат итеүе бер ҡасан да яҡшы тамамланмаған.

Художестволы әҙәбиәттең төп маҡсаты изгелекте, матурлыҡты күрһәтә белеүҙә, кешелекле булыуҙы данлауҙа, кешенең рухын нығытыуҙа, ғөмүмән, йәшәү мәғәнәһен эҙләүҙәлер. Ә был ҡимммәттәр һәр дәүерҙә лә, теге йәки был шәхес ғүмеренең һәр мәлендә лә бер төрлө микән? Үҙгәрешһеҙ ҡала микән улар? Беҙ, мәҫәлән, күрә тора алдынғы тип иҫәпләнгән илдәрҙең хаталарын туранан-тура, хатта ки арттырып ҡабатлайбыҙ. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Һәр осраҡтағылай, ябай ғына яуап та юҡтыр. Күп етешһеҙлектәр шуның менән бәйле булһа кәрәк: мәсьәләне хәл итә алырҙай, хәл итергә тейешле вазифалы кешеләрҙең маҡсаттары тормош ҡуйған талаптар менән тап килмәй. Улар үҙҙәренең, күп тигәндә лә яҡындарының мәнфәғәте менән генә йәшәй. Был – бер булһа, икенсенән, ябай халыҡ та, уның алдынғы вәкиле булырға тейешле әҙиптәр ҙә үҙенә генә бәйле булған мөмкинлектәрҙе тулыһынса ҡулланмай (йә ҡуллана алмай – етәкселек, ҡанға һеңгән ҡоллоҡ психологияһы аяҡ сала; йә ҡуллана белмәй – Конституция сиктәрендә лә хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп бөтмәйбеҙ; йә ҡулланырға теләмәй – баҙнатһыҙлыҡ, һәлкәүлек, битарафлыҡ көслө). Иң мөһиме: Көнбайыш Европаның атаҡлы фәйләсуфы Лейбництың (1646–1716) әле XVIII быуат башында уҡ «Ижадсы зиһенен юғары рух эшләтмәһә, сәнғәт юҡ» тигән һығымтаһы менән иҫәпләшмәйенсә мөмкин түгел.

Әйткәнебеҙсә, айырым-айырым табыштарыбыҙ булһа ла, дөйөм алғанда, һай йөҙәбеҙ, ҡәләмдәштәр. Ғәжәбе шунда: был турала уйланыусыларыбыҙ ҙа күп түгел. Күрәһең, был күпселектең уртаҡул булыуынан киләләр. Сөнки асыҡтан-асыҡ һөйләшеү ундайҙар файҙаһына түгел. Дөйөм уртасалыҡ тотош әҙәби процесҡа көслө йоғонто яһай, уның үҫешенә урап та үтә, һикереп тә сыға алмаҫлыҡ кәртәләр ҡора. Былдай солғанышта иң ҡыйыуҙар ҙа баҙап ҡала. Улар араһынан килеп сыҡҡылаған бик һирәк тәүәккәлдәрен иһә ҡуштандарға юҡҡа сығарыу, аҡты ҡара итеп күрһәтеү сүп тә түгел. Кешелек тарихында бындай хәлдәр бер бөгөн генә тыумаған ул. Боронғо Грецияла, мәҫәлән, ҡалыптарға һыймағандарҙы остракизмға дусар итер булғандар: ундайҙар йә үҙҙәре илде ташлап китергә мәжбүр, йә уларҙы сығарып ебәрәләр. Уларҙы диссиденттар менән бутарға ярамай, сөнки диссиденттарҙың күпселеге системаны ғына түгел, илде хурлап, Көнбайышты маҡтап, үҙҙәрен генә шәпкә сығарыу өсөн бер ниҙән дә тартынмайынса сит илдә йәшәүҙе төп маҡсат итеүселәр ине. Уларҙан айырмалы рәүештә, ил өсөн («За державу обидно!»), халҡы өсөн янып-көйөүселәр бар. Бына шундайҙарҙы әҙәбиәт төп герой итергә тейеш ине бит. Ә нимә килеп сыға? Парадокс – ундай әҙиптең хатта үҙенә көн юҡ! Сәбәп? Әлеге шул уртасалыҡ! Уртаса булғандарҙың ижады хаҡында саҡ ҡына асығын әйтеп ҡара (әле тулайым баһа хаҡында һүҙ ҡуҙғатылмай, ә айырым китабы йә ҡайһылыр бер әҫәре тураһында ғына ниҙер әйтелә) – минутында уҡ береһе: «Талантһыҙҙар талай талантты», – тип яр һаласаҡ, икенсеһе: «Күрһәтермен әле мин һиңә!» – тип туранан-тура янаясаҡ. Һәм ысынында ла «күрһәтеп» тә ҡуя, сөнки күпселек уның яғында. Ғөмүмән, күпселекте тәшкил итеүсе уртасалыҡ ғәйәт берҙәм, ишектән ҡыуһаң, тәҙрәнән инерҙәй әрһеҙ, амбицияһы – халыҡ шағиры исемен бирһәң дә бүҫкәрмәйәсәк. Ошондай солғанышта әгәр ҙә беҙҙең «барҙы – бар, юҡты – юҡ!» тип әйтергә ҡыйыулығыбыҙ етмәһә, «бар»ын да, «юҡ»ын да асыҡ һәм дәлилле күрһәтерҙәй һәләтебеҙ булмаһа, уртасалыҡтан күтәрелә алмаясаҡбыҙ!

Ижадсыға иһә, хатта йәшәү өсөн етерлек килеме булған ижадсыға ла (уға, бәлки, айырыуса, сөнки ул гонорар өсөн генә яҙышмай) хеҙмәт емештәренең ваҡытында донъя күреүе, тейешенсә баһаланыуы бик мөһим. Шунһыҙ үҫеш юҡ. Был әле – айырым бер әҙипкә, рәссамға, ғөмүмән, сәнғәт әһеленә ҡарата, ә тулайым әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә мөнәсәбәт? Ярай, етәкселектеке аңлашылды ла, ти («Культура подождет!»). Ә йәмәғәтселектеке һуң? Шул йәмәғәтселекте әҙәбиәт тәрбиәләмәйме ни?! Ә әҙиптең үҙен? Бына ошо өҙә алмаҫтай күренгән дүңгәләкте («порочный круг») өҙөп сығыуҙы алдынғы булырға тейешле әҙиптәрҙән тыш кем башлай алһын?! Бында уртасалыҡҡа иҫәп тотоп булмай. Тимәк, айырыуса бөгөн талант иңенә икеләтә-өсләтә яуаплылыҡ өҫтәлә. Ә төптән уйлаһаң, һәр осорҙа ла кемгә күп бирелгән – шунан күп һорала.

Әңгәмәләрҙә беҙ, хәлдән килгәненсә, бөгөнгө ысынбарлыҡты, әҙәби көстәрҙе, әҙәбиәтебеҙ торошон, ундағы проблемаларҙы барларға тырыштыҡ. Уйланған кешегә күп нәмә асыҡ. Проблемаларҙы хәл итәйек тиһәк, хәҡиҡәттән ҡурҡырға ярамай. Тәүге аҙымыбыҙ шул булһын: уртасалыҡты үҙ исеме менән атайыҡ, уның да әҙәби процеста үҙ урыны булыуын, мәҙәниәт үҫешенә үҙ өлөшөн индереүен танайыҡ, әммә, әрһеҙләшеп, «дежур тәнҡитселәр»ҙән үҙен маҡтатыуына, исемдәр юллауына, ҡыҫҡаһы, уртасалыҡты осондороуҙарға сик ҡуяйыҡ. Диндар өсөн мәсет ни дәрәжәлә изге икән, әҙип өсөн ижад өлкәһе шулай булғанда ғына әҙәбиәт үҙ миссияһын кәрәгенсә үтәй аласаҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# «Ағиҙел» архивынан



*Бер төркөм башҡорт яҙыусылары.*

*1954 йылдың йәйе.*



*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ менән Рәми ҒАРИПОВ СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы китапханаһында.*

*1955 йыл.*



*Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ (уңда) студент йылдарында дуҫы Өршәт ТАБЫНҒОЛОВ менән.*

*1958 йыл.*



*Башҡорт яҙыусылары (беренсе рәттә) Фәрит ИҪӘНҒОЛОВ, Баязит БИКБАЙ, Сәгит АГИШ, Ғәйнан ӘМИРИ, Шакир НАСИРОВ, (икенсе рәттә) Рафаэль САФИН, Яҡуп ҠОЛМОЙ, Рәйес ҒАБДРАХМАНОВ Татарстан балалар гәзите «Яшь ленинчы» редакцияһында.*

*1961 йыл, Ҡазан.*

*А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты буйынса һабаҡташтар Рафаэль САФИН, Рәми ҒАРИПОВ, Рәйес НИЗАМОВ, Шакир ЯНБАЕВ остаздары Мостай КӘРИМ менән Башҡортостан яҙыусыларының VI съезында.*

*1968 йыл, май. Өфө.*





*Яҙыусылар союзы идараһы бүлмәһендә (һулдан уңға) Әсхәл ӘХМӘТ-ХУЖА, Кирәй МӘРГӘН, Әсгәт МИРЗАҺИТОВ, Рафаэль САФИН, Әхнәф БАЙРАМОВ, Ҡәҙим АРАЛБАЙ.*

*70-се йылдар.*



*1974-1978 йылдарҙағы баш мөхәрриребеҙ Рәйес НИЗАМОВ.*



*Башҡорт яҙыусыларынан бер төркөм: Муса ҒӘЛИ, Әсғәт МИРЗАҺИТОВ, Марат КӘРИМОВ, Әнүәр БИКЧӘНТӘЕВ, Рафаэль САФИН.*



*Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ менән Яныбай ХАММАТОВ.*






*«Агиҙел» журналы менән «Ҡазан утлары» журналы редакцияларының дуҫлыҡ кисәһендә.*

*1989 йыл, апрель,*
*Яр Саллы ҡалаһы.*



*Рафаэль САФИН менән Муса ҒӘЛИ.*

## ТӘҮГЕЛӘРҘЕҢ БЕРЕҺЕ

*(Прозаик Закир Һаҙиҙың тыуыуына – 150 йыл)*



XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте тарихына яңырыу осоро булып ингән. Нәҡ ошо осорҙа быуаттар һуҙымында ҡатнаш-синкретик рәүештә йәшәп килгән художестволы проза айырым әҙәби төр булараҡ үҫеү юлына баҫа, хикәйә, нәсер, повесть жанрҙарында тәүге әҫәрҙәр донъя күрә башлай. Нәфис проза өлкәһендә беренселәрҙән булып ҡәләм тирбәтеүсе Риза Фәхретдинов, Мәжит Ғафури, Әхнәф Танғатаров, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Һаҙи Сәғҙи, Зыя Өммәти, Әхкәметдин Иҫәнбирҙин, Вәсим Солтанов, Кәбир Туйкин, Фәйзи Вәлиев, Афзал Таһиров, Ғәли Рафиҡиҙар сафында үҙенсәлекле әҫәрҙәр авторы Закир Һаҙи ҙа була.

Закир Һаҙи улы Һаҙиев 1863 йылдың 15 мартында Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе Ҡорос волосының (хәҙерге Шаран районының) Йәрәмкә ауылында донъяға килгән. Башланғыс белемде ауылда хәлфә булып эшләгән үҙ атаһынан ала. 1876 йылда атаһы уны Йәрәмкәнән 40 саҡрым алыҫлыҡтағы Тымытыҡ ауылы мәҙрәсәһендә уҡырға бирә. Иҫке типтағы был мәҙрәсәлә 10 йыл самаһы ғүмер уҙҙырғандан һуң, Закир Ҡасим ҡалаһының йәҙитсе ысулы менән уҡытылған бер мәҙрәсәһендә белем ала. Унда, дини дәрестәрҙән тыш, география, хисап, тарих буйынса ла күпмелер белем бирәләр. Уҡыуын тамамлағандан һуң, З. Һаҙи ғүмере буйына төрлө ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа балалар уҡытыу менән шөғөлләнә. Ҡалалағы ҡайһы бер уҡытыусылар ярҙамында рус телен дә үҙләштерә. Әҙип 1932 йылда хәҙерге Рязань өлкәһенә ҡараған Бимсала ауылында вафат була.

Закир Һаҙиҙың әүҙем ижад осоро XX быуаттың тәүге ун йыллығына тура килә. 1904 –1905 йылдарҙа Ырымбурҙа уның “Бәхетле ҡыҙ”, “Официант”, “Хәйер-доға” һәм “Бәхетһеҙ ҡыҙ”, 1906 –1908 йылдарҙа Ҡазанда “Мәғсүм”, “Яңы әсхәбе кәһәф” (“Мәмерйәнең яңы хужалары”) һәм “Йыһанша хәҙрәт” исемле әҫәрҙәре айырым китаптар булып нәшер ителә.

Яҙыусы үҙенең ижадында заманына хас булған мөһим проблемаларҙы мәғрифәтселек позицияһынан сығып күтәрә. Йәш быуынға заманса тәрбиә, белем биреү, төрлө һөнәрҙәргә өйрәтеү, ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлау, йәмғиәттә юғары әхлаҡ сифаттарын өлгө итеп ҡуйыу – уның әҫәрҙәренең үҙәгендә торған төп мәсьәләләр.

Ауыл халҡының көнкүреш йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, холоҡ-ҡылыҡтарын, мәҙрәсәләрҙәге уҡытыу тәртиптәрен яҡшы белгән әҙип үҙенең һәр ижад емешендә ауыл тормошон яҡтыртыуға ҙур урын бирә. Был, бер яҡтан, уның әҫәрҙәренең реалистик нигеҙен нығытһа, икенсе яҡтан, ауылдарҙағы алама ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, ҡәҙимсе муллаларҙы, хәлфәләрҙе, иҫке мәҙрәсәләрҙәге ҡырағай тәртиптәрҙе тәнҡитләргә киң мөмкинлектәр асҡан.

“Бәхетле ҡыҙ” тигән тәүге хикәйәһе бәләкәй генә бер башҡорт ауылының тормошон тасуирлау менән башланып китә. Ундағы ябай халыҡ араһында наҙанлыҡ һәм ярлылыҡ хөкөм һөрә. Һибәтулла мулла, ауыл старостаһы Тимербулат кеүектәрҙең һәр яңылыҡҡа, тырышлыҡҡа ҡаршы сыҡҡан “өйрәтмәләре” лә кешеләрҙе вайымһыҙлыҡҡа, ялҡаулыҡҡа, торғонлоҡҡа этәрә. Ҡатын-ҡыҙҙың хәле иһә бөтөнләй аяныслы. “Был ауыл халҡы ҡатындарҙы ат, ишәк кеүек хеҙмәт өсөн яратылмыш бер хайуан тип беләләр ине”, – ти автор.

Хикәйәнең төп сюжеты ауыл ярлыһы Биктимерҙең улы Ғәббәс менән Һибәтулла мулла ҡыҙы Ғәйшәнең тормошо, үҙ-ара мөнәсәбәтенә бәйле үҫтерелә. Бәләкәйҙән зирәк һәм отҡор булған Ғәббәс тәүҙә үҙ ауылындағы Хәҙисә абыстайҙан һабаҡ ала, әммә уның менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, күрше ауылдағы алдынғы ҡарашлы Кәрим хәлфәгә дәрестәргә йөрөй, аҙаҡ Ҡазан ҡалаһында уҡый, үҙ аллы төрлө фәндәрҙе өйрәнә, рус телен үҙләштерә һәм ауылына заманса аңлы, юғары мәҙәниәтле кеше булып ҡайтып төшә. Ул ҡайтып бер күреүҙән ғашиҡ булған Ғәйшә лә кескәй саҡтан уҡ әсәһенән яҡшы белем алып, аҡыллы, уңған, һылыу ҡыҙ булып етешкән була. Йәштәр араһында мөхәббәт уты тоҡанып, киләсәккә матур пландар ҡороп йөрөгән саҡтарында, Ғәббәс ҡапыл сит ауылға мөғәллимлек ҡылырға сығып китә. Шул арала күрше ауылдан алтмышҡа етеп барған Сәлим мулла Ғәйшәне икенсе ҡатынлыҡҡа алырға яусы ебәрә. Әммә, Ғәйшәнең йәше етмәү сәбәпле, никах туйы кисектерелә һәм аҙаҡ, Сәлим ҡатыны Ғаян абыстайҙың заманында Ғәйшәне һөт имеҙеп үҫтергәнлеге асыҡланып, унан бөтөнләй баш тарталар.

Әҫәр аҙағында Ғәббәс менән Ғәйшәнең тиң мөхәббәткә нигеҙләнгән бәхетле тормошо һүрәтләнә. Ғәббәс, дин эше менән шөғөлләнергә бик үк теләмәһә лә, ауыл халҡын боҙоҡлоҡтан, иҫке йәмһеҙ тәртиптәрҙән арындырыу, заманса йәштәргә өйрәтеү ниәте менән имам булырға ризалаша. Ауылға яңы мәсет, мәҙрәсә һалдырта, ҡыштарын балалар уҡытһа, йәйен иген кәсебе менән шөғөлләнә. Шулай итеп, үҙенең изге, яҡшы эштәре менән халыҡтың күңелен яулай. Ғәйшә лә уңған ҡатын булып сыға. Ғәббәс ярҙамында үҙ белемен күтәреп, ауыл ҡыҙҙарын уҡытырлыҡ дәрәжәгә ирешә. Халыҡ иһә уларҙың йоғонтоһонда күҙгә күренеп яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлай.

Әгәр был әҫәрҙәге Ғәйшә үҙенең итәғәтлелеге, инсафлылығы, белемлеге арҡаһында бәхет-сәғәҙәткә ирешһә һәм бар ҡатын-ҡыҙға өлгө булырлыҡ образ итеп бирелһә, З. Һаҙиҙың икенсе әҫәре “Бәхетһеҙ ҡыҙ”ҙағы Хәнифә уның киреһе итеп тасуирлана. Хәнифәнең фажиғәһе иң элек уның тәрбиәһеҙлегенә, наҙанлығына бәйләнгән, тигән фекер үткәрә автор. Ваҡытында заманса тәрбиә, белем алмаған ҡыҙ тормош мәшәҡәттәренә бирешеп, үҙенең тормошон бик аянысы итеп тамамларға мәжбүр. Унда-бында аҙып-туҙып йөрөп, яҡты донъянан ваз кисеп, ахырҙа аҫылынып үлә.

Был әҫәрҙә, тәүге хикәйәнән айырмалы рәүештә, реалистик һүрәтләү ҙурыраҡ урын тота. Автор геройҙарын тормошта самаһыҙ идеаллаштырыуҙан, уларҙы һәр яҡтан камил шәхестәр итеп, тасуирлауҙан баш тартҡан, ауылдарҙағы наҙанлыҡ, томаналыҡ арҡаһында килеп сыҡҡан аянысы хәл-ваҡиғаларҙы йәштәр ғибрәт алырлыҡ итеп бар дөрөҫлөгөндә хикәйәләргә ынтылған.

Яҙыусының “Официант” хикәйәһе тотошлайы менән өгөт-нәсихәткә ҡоролған. Унда ауылдарҙа мәҙрәсәләр асыу һәм был эште матди яҡтан тәьмин итеү өсөн байҙарҙы ылыҡтырыу, мәхәллә башлыҡтары итеп халыҡ араһында һүҙе үтерҙәй мәғрифәтле муллаларҙы һайлап ҡуйыу кеүек мәсьәләләр күтәрелгән.

“Мәғсүм”, “Яңы әсхәбе кәһәф” кеүек әҫәрҙәрендә иһә автор, иҫке мәҙрәсә

тәртиптәрен аяуһыҙ тәнҡит итеп, “милләт хеҙмәтселәре” әҙерләргә тейеш булған был мәҙрәсәләрҙең, киреһенсә, йәш быуынды рухи һәм физик яҡтан зәғифләп сығарыуын күрһәтә. Әйтәйек, “Мәғсүм” хикәйәһендә арыу ғына ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән Мәғсүмдең тәртипһеҙлектәр, боҙоҡлоҡтар менән тулған сит ауыл мәҙрәсәһендә һигеҙ йыл ғүмерен заяға уҙғарып, хатта ҡайһы бер алама ғәҙәттәргә лә бирелеп, һуңғы уҡыу йылында аянысль үлеп ҡалыуы бәйән ителә, “Яңы әсхәбе кәһәф” әҫәрендә буйға еткән егеттәр Сәфәрғәли менән Миңлешаһ, уларға ҡушылған Тимербай үҙ ауылдарындағы ауыр һәм ҡараңғы тормоштан биҙеп, Ташлы Йылға ауылының мәҙрәсәһенә урынлашыуҙары, әммә унда утыҙ йыл ятып та тейешле белем ала алмауҙары, аҙаҡ ауылдарына әйләнеп ҡайтҡас, тормошҡа бөтөнләй ятҡһыҙ булып сығыуҙары һәм бер-бер артлы яҡты донъянан китеүҙәре хикәйәләнә. Һуңғы хикәйәһендә автор иҫке типтағы мәҙрәсәне донъянан айырымланып ҡатып ҡалған мәмерйәгә тиңләй һәм уны ғәрәпсәләп “кәһәф” тип атай.

Закир Һаҙиҙың әҙәби мираҫынан шулай ҙа иғтибарҙы иң йәлеп иткәне – “Йыһанша хәҙрәт” повесы. Был әҫәрҙә әҙиптең тормошҡа ҡарашы, ижад принциптары, әҙәби маһирлығы күпкә тулыраҡ һәм тәрәнерәк сағылған. Повесты уның нәфис һүҙ оҫтаһы булараҡ иң юғары ҡаҙанышы, тип әйтергә булалыр.

Был әҫәрендә лә автор башта хәл-ваҡиғалар барасаҡ урынды – Өфө губернаһы Б. өйәҙе (аҙағыраҡ уның Бәләбәй өйәҙе икәнлеге асыҡлана) Шүрәле исемле, күпселеге башҡорттар һәм күпмелер типтәр, ҡазан татары йәшәгән ауылды тасуирлай. Ауылдың ултырған урыны, тирә-яҡ тәбиғәт, урамдары, мәсет-мәҙрәсәләре, халҡы тураһында күпмелер һүҙ йөрөткәндән һуң, “шөһрәтле вә данлыҡлы имамдар” менән таныштыра һәм был урында иң беренсе башҡорттар мәхәлләһе башлығы – Йыһанша хәҙрәтте атай. Ошондай “бөйөк” дин әһелдәре булып та, ауыл халҡы нилектән үтә лә наҙан икән, тигән һорау ҡуя автор һәм Йыһаншаның бала сағынан башлап тормошон, “үҫеш” юлын тасуирларға тотоноп китә.

Йыһанша бәләкәйҙән “бигерәк тә үткер” булып үҫә. Атаһы уны һәр саҡ, минең улым мулла булыр, мәзин булыр, тип һөйөр булған. Үҫә төшкәс, Йыһанша үҙе лә ауылдағы иң рәхәт йәшәгән Ғибаҙулла хәҙрәт кеүек мулла булыу хаҡында хыяллана башлай. Һәр йәһәттән уға оҡшарға тырыша, хатта тиҫтерҙәре менән уйнаған ваҡытта ла үҙен күберәк мулла итеп күрһәтә. Башланғыс белемде тыуған ауылында Фатима абыстайҙан алғандан һуң, тиҙерәк мулла булыу ниәте менән йыраҡтағы Сорнаш ауылы мәҙрәсәһендә уҡый. Унда ике ҡатын менән рәхәтлектә көн иткән Ғабдрахман хәҙрәт кеүек кешеләрҙең донъяһын күреп, уның нәфсеһе тағы ла көсәйә, уларҙан да байыраҡ, шөһрәтлерәк дин әһеле булыу хыялы менән яна башлай һәм ахырҙа Бохараға уҡырға китә. Унан ҡайтҡас, әлбиттә, еңел генә муллалыҡҡа указ алып, бай ҡыҙына өйләнеп, күршеләгә ҙур Шүрәле ауылына имам булып урынлаша. Оҙаҡламай төрлө хәйләле юлдар менән ауылдың мәҙрәсәһен дә үҙ ҡулына ала, үҙен дин, шәриғәт ҡанундарын бик яҡшы белгән, ғәрәп, фарсы телдәрен һыу кеүек эскән кеше итеп күрһәтеп, янына мөриттәр туплап, ишанлыҡ дәрәжәһенә лә ирешә. Мәхәллә кешеләренән килгән мул саҙаҡаларға ғәйәт ҙур байлыҡ туплағандан һуң, Йыһанша хәҙрәт икенсе ҡатын алып ебәрә һәм, быбының менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, Искәндәр хажиҙың йәш ҡыҙы Фәхрелбанатҡа ымһына башлай. Әммә был татлы хыялы боймға ашмай. Ғүмеренең аҙағына, ҡылған мәкерлектәре, боҙоҡлоҡтары фаш булып, мәҙрәсәһен тәртипһеҙлек, наҙанлыҡ баҫып, халыҡ алдындағы уның абруйы, дан-шөһрәте тамам юҡҡа сыға.

Шулай итеп, З. Һаҙи әҫәрҙә Йыһанша хәҙрәттең баҫкыстан-баҫкыска үрләй, үрләгән һайын байый, ҡомһоҙлана һәм әхлаҡи тарҡала, уҫаллаша барыуын күрһәтә. Ул үҙенә ҡаршы тороусыларҙы бәддоға менән ҡурҡытһа, яҡындарын хәйер-доға менән арбай. Берәйһе байып китһә, “минең хәйер-доғам арҡаһында байыны” тип маҡтана, берәй дошманы зыян күрһә, “үҙенең бәддоғаһы төштө” тип ҡыуана. Шул рәүешле ул, дингә һылтанып, мал-мөлкәт, дан туплау өсөн шәриғәт юлынан үҙенә һуҡмаҡ һала, әммә был һуҡмағы һис кенә лә халыҡ файҙаһына, уның аң-белемен күтәреүгә, тормошон яҡшыртыуға йүнәлтелмәгән.

Әҫәрҙә, автор дини карьеристарҙың типик образын һынландырыу менән бергә, уның кеүектәргә ҡаршы торорҙай айыҡ аҡыллы, алдынғы ҡарашлы кешеләрҙе күрһәтеүгә лә ҙур ғына урын биргән. Шундайҙарҙың береһе – байтаҡ донъя гиҙеп, сит ил мәҙрәсәләрендә белем алып ҡайтҡан Хәсән мулла. Ул үҙ ауылына ҡайтып мулла булғас, ҡайныһы Искәндәр хажиҙың матди ярҙамы менән уҡытыу-тәрбиә эштәрен бөтөнләй яңыса ҡороп ебәрә: китапхана аса, унда бик күп гәзит-журнал алдыртып, халыҡҡа аң-белем таратыу эшенә ныҡлап тотона. Хәсән Йыһанша хәҙрәттеке кеүек тик муллалар әҙерләү маҡсат итеп ҡуйған мәҙрәсәләргә ҡырҡа ҡаршы сыға: балаларҙы, тәбиғи һәләттәренә ҡарап, төрлө һөнәр эйәләре итеп әҙерләп сығарыу кәрәклеге мәсьәләһен күтәрә. Уның образы, “Бәхетле ҡыҙ” хикәйәһендәге Ғәббәстеке кеүек, бер аҙ идеаллаштырып бирелгән һәм уның халыҡ алдында һөйләгән телмәре аша автор үҙенең мәғрифәтселек, педагогик ҡараштарын уҙғара.

Әҫәрҙең төп уңышы, шулай ҙа, Йыһанша образында. Уны автор, үҙ заманының күпселек әҫәрҙәренән айырмалы рәүештә, кире герой булғанға фәҡәт ҡара буяуҙарға мансымаған, ярайһы уҡ ҡатмарлы холоҡло реаль шәхес итеп кәүҙәләндерергә ынтылған. Йыһанша тырыш, иғтибарлы, отҡор, киләсәккә ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәй. Әммә уның йүнселлеге, теләк-өмөттәре, ахыр siktә, үҙ-үҙен генә ҡайғыртып, өс-дүрт бисә алып, балда-майҙа йөҙгән мулла булып йәшәүгә ҡоролған. Халыҡтың төптө наҙан булып, ҡараңғылыҡта, хәйерселектә көн күреүе уның өсөн бик тә ҡулайлы.

Шуны ла әйтергә кәрәк: повестағы Йыһанша хәҙрәт күпмелер кимәлдә Риза Фәхретдиновтың “Әсмә, йәки ғәмәл вә яза” повесындағы Бикбулат хәҙрәтте хәтерләтһә, Хәсән мулла, үҙ сиратында, шул уҡ әҫәрҙәге Ғәли хәлфәне төҫмөрләтә. Был иһә Закир Һаҙиҙың Риза Фәхретдиновтың үрҙә аталған повесы менән яҡшы таныш булғанлығы һәм уның көслө йоғонтоһо тураһында һүҙ йөрөтөргә нигеҙ бирә. Ошо уҡ фекерҙе “Бәхетле ҡыҙ” хикәйәһендә Ғәббәс менән Ғәйшәнең холоҡ-ҡылыҡтары ғына түгел, хатта исемдәре менән дә Р. Фәхретдинов әҫәрендәге геройҙарға тап килеүе лә ҡеүәтләп тора.

Әлбиттә, үҙ-ара ижади йоғонто – һәр осор әҙәбиәте өсөн дә тәбиғи күренеш. Ул әленән-әле бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә лә күҙәтелә. Иң мөһиме, З.Һаҙи үҙенең өлкән ҡәләмдәшенә һуҡырҙарса эйәрмәгән. Әҫәрҙәренә шул уҡ типтағы, хатта шул уҡ исемдәге геройҙарҙы индерһә лә, замана проблемаларын үҙенсә күтәргән, формалашып килеүсе милли прозабыҙға бик күп яңы биҙәктәр өҫтәгән. Уның халыҡсан рухлы әҫәрҙәре әлеге көндә лә уҡыусыларҙы битараф ҡалдырмай.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре докторы.**

# ҠЫҪҠА ЖАНР ОҪТАҺЫ

*(Шакир Насировтың тыуыуына – 100 йыл)*



Шакир Ғиниәт улы Насиров 1913 йылдың 6 мартында хәҙерге Ғафури районының Ибраһим ауылында тыуған. Башланғыс белемде үҙҙәренең ауыл мәктәбендә ала. 1929 – 1931 йылдарҙа Өфө сәнәғәт-иҡтисади техникумын тамамлай. Артабан уның журналистлыҡ эше башлана: «Башҡортостан» гәзите редакцияһында махсус хәбәрсе, әҙәби хеҙмәткәр, бүлек мөдире була. 1935 – 1937 йылдарҙа иһә Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә.

1942 йылда Быҙаулыҡ хәрби училищеһын тамамлап, Башҡорт атлы дивизияһының фронт шарттарында сыҡҡан гәзитендә яуаплы секретарь, полк агитаторы булып эшләй. 1943 йылда яралана. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдар менән наградлана.

1946 йылда демобилизацияланып ҡайтҡас, «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһында яуаплы секретарь вазифаһында эшләй, унан уҡырға китә. Свердловскиҙа ике йыллыҡ партия мәктәбен тамамлай һәм 1948 – 1955 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә нәфис әҙәбиәт редакцияһы мөдире, баш мөхәррир була. 1955 йылда «Һәнәк» журналының яуаплы секретары итеп күсерелә.

Шакир Насиров утыҙынсы йылдарҙа иң әүҙем журналистарҙың береһе булып танылa. Уның колхозға берләшкән ауыл кешеләре, сәнәғәттең үсеше һәм сәскә атыуы тураһындағы очерктары, мәҡәләләре республика матбуғатында йыш баҫыла. Ул шулай уҡ әҙәби ижад менән дә даими шөғөлләнә: «Хәтер», «Вәғәҙә бүләге», «Килешеү» исемле новеллалары, «Бүләгем», «Ҡолмәт ҡоҙа» тигән бер актлы пьесалары авторға танылыу килтерә.

Һуғыш осоронда һәм һуғыштан һуң Шакир Насировтың әҙәби эшмәкәрлеге бер аҙ тоҡтарлана. Илленсе йылдарҙа ул йәнә ижади әүҙемлек күрһәтә. Ошо осорҙа бер нисә хикәйәләр йыйынтығы башҡорт, татар, рус телдәрендә донъя күрә. Уның әҫәрҙәре авторҙың халыҡ тормошон яҡшы белеүе, ябай кешеләрҙең уй-тойғоларын, кәйеф-кисерештәрен, холоҡ-фиғелен тәрән лириклыҡ һәм образлылыҡ ярҙамында мауыҡтырғыс һүрәтләү оҫталығы менән айырылып тора.

Шакир Насиров оҙаҡ йылдар дауамында кескәй формалағы драматургия жанрында эшләне. Тиҫтәләгән бер актлы пьесалары республика халыҡ ижады йорто коллективтарында, халыҡ театрҙарында, үҙешмәкәр драма түңәрәктәрендә ҡуйылды. Башҡорт дәүләт филармонияһының эстрада коллективы өсөн ул күп фельетондар, интермедиялар яҙҙы.

Әҙип тәржемә өлкәһендә лә байтаҡ хеҙмәт күрһәтте. Ул Е. А. Крашенинников, Л. Н. Толстой, И. С. Тургенев, А. М. Горькийҙың айырым әҫәрҙәрен, С. Бабаевский, Е. Кошевая, Ю. Фучик, В. Овечкин, И. Ликстанов һәм башҡа яҙыусыларҙың роман-повестарын башҡорт теленә тәржемә итте.

Шакир Насиров телебеҙҙең нескәлектәрен белгән, тәрән белемле һәм уңған мөхәррир ҙә ине. Байтаҡ күренекле яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәре уның мөхәррирлегендә донъя күрҙе.

**Әхмәт МӘХМҮТОВ.**

# ЯУГИР ШАҒИР, ҠОЛАСЛЫ ПРОЗАИК, АЛЫШТЫРҒЫҺЫҘ МӨХӘРРИР

*(Хәким Ғиләжевтың тыуыуына – 90 йыл)*

Лоҡман-Хәким Ғабдрахман улы Ғиләжев (1923 – 1997) – башҡорт художестволы әҙәбиәтенә генә түгел, ваҡытлы матбуғат үҫешенә лә тос өлөш индергән, иң оло хөрмәткә лайыҡ арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе. Замандаштары уны илһөйәр, телһөйәр, сая рухлы, ҡырыҫлыҡ һирпелткән ғорур тәбиғәтле итеп һынландыра. Шиғриәтендә лә сағылыш тапҡан был сифаттар ун һигеҙе тулыр-тулмаҫтан яуға ингән быуынды ла тулыһынса тиерлек ҡылыҡһырлайҙыр һымаҡ. Ысынында ла шағир Хәким Ғиләжевтың:

*... Эй-йе, миңә ун һигеҙ йәш ине, –*
*Иртә эйәр һалған тай кеүек,*
*Йәшлегемдең хозур сахраһына*
*Дыулап килеп керҙе яу көнө.*

*Яуҙарҙа мин татыным мөхәббәтте,*
*Ул – тәүгеһе һәм ул – бер ине.*
*Үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр үптем,*
*Һәм ул – тыуған ғәзиз ер ине... –*

тиеүендә бер ниндәй ҡоро риторика ла, ҡыланыу ҙа юҡ. Тап ошондай яугирҙар булғанда ғына яулана Еңеү! Бындай һығымта «Ҡырҡ алтынсы һалдат» поэмаһы менән дә нығытыла. Кем һуң ул – ҡырҡ алтынсы һалдат? Ул – йәреңә, атай-әсәйеңә, ғәзиз балаңа, кендек ҡаның тамған ереңә, илеңә булған һөйөү тойғоһо. Иң ауыр мәлдә бына ошо «һалдат» ярҙамға килә лә инде.

Яугирлыҡ һыҙаты әҙиптең прозаһына ла ҡыйыу үтеп инә. «Погонһыҙ һалдаттар»... Романдың исеме үк тәрән йөкмәткеле, ассоциатив тамғалы. Һалдат үҙе теләгәнсә генә йәшәй алмай – ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла, Ватан ҡушҡанын үтәргә бурыслы. Кисәге яугирҙарҙың тыныс тормошта ла ил йөгөн һалдаттарса иңдәренә алыуы – тормош талабын йөрәк менән аңлауҙарынан килә. Яҙыусының был әҫәре башҡорт прозаһының үҫеш кимәлен билдәләй алыуы авторҙың таланты менән генә түгел, ә уның граждандлыҡ позицияһы менән дә аңлатыла.

Хәким Ғиләжев беҙгә, «Ағиҙел»селәргә, айырыуса яҡын. Тап ул баш мөхәррир булып эшләгән осорҙа (1955 – 1968) журналыбыҙ бөгөнгө исеме менән аталып, яҙғы ташҡындай алҡынып, яңы бер дәрт менән «урғыла» башланы. Хәким ағай ҡабул итеп алғанда тиражы ике мең ярым тирәһе булған баҫма бары уның фиҙакәрлеге менән ҡырҡ меңгә еткерелә. Әйтеүе генә анһат! Эш башлау менән

ул, редколлегия ағзаларының «Ай-һай, ҡаты тотонмаҡсыһың!» тиеүенә ҡарамаҫтан, һалдаттарса тәүәккәллек күрһәтә: ошоға тиклем нәшриәткә буйһонған журналды үҙ аллы итеүгә өлгәшә, иллюстрациялар, фотолар баҫтырыуҙы, гонорар түләүҙе юлға һала, баҫма күләмен ике табаҡҡа арттыра. Иң мөһиме – ныҡышмалы рәүештә йөкмәткене байытыу өҫтөндә эшләй.

Хәким ағай Ғиләжев сикһеҙ ғорурлыҡ менән: ««Ағиҙел» – минең яҙмышым!» – тип әйтергә тулыһынса хаҡлы ине.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

***

Был һанда һалдат-шағирҙың төрлө йылдарҙа яҙылған бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ. Улар беҙгә һоҡланғыс шәхестең ҡабатланғыһыҙ күңел донъяһын аса алыуы менән ҡиммәт.



**Хәким ҒИЛӘЖЕВ**

## *Һәйкәл ҡуйыр инем*

*Йырлайһы ине, дуҫтар, шундай йырҙы,*
*Йырҙарҙың да иң-иң матурын,*
*Сулпан кеүек, беҙҙең һәр бер ҡыҙҙың*
*Даны торһон ине яҡтырып.*

*Лайыҡ улар иң-иң гүзәл йырға,*
*Мөхәббәттең иң-иң сафына,*
*Һәйкәл ҡуйыр инем мин ҡыҙҙарға*
*Уралтауҙың ҡыҙыл ташынан.*

*Ләкин һөйләп бирә алырмы икән*
*Һәйкәлдәрҙең һалҡын мәрмәре?!*
*Банаттарҙың хеҙмәт бөйөклөгөн,*
*Зояларҙың үлмәҫ ғүмерен.*

*Белмәйем һәм күргәнем юҡ минең*
*Беҙҙең ҡыҙҙар кеүек ҡыҙҙарҙы.*
*Мин, уларға бүләк булһын, тимен,*
*Иң-иң сафы беҙҙең йырҙарҙың.*

***

*Көндәр уҙа йәшәлгән йәш булып,*
*Сәғәттәргә сәғәт өҫтәлә.*
*Оҙонайған һайын ғүмер юлы,*
*Башланмаған эштәр көтәләр.*

*Елкәбеҙгә һалып заман йөгөн,*
*Эх, барырға ине, иптәштәр,*
*Йылдар итәгенә йәбешеп түгел,*
*Ана шул йылдарҙы етәкләп.*

***

*Һиңә һаман ун һигеҙ йәш кеүек,*
*Тиҙәр олпат ҡына кешеләр;*
*Ҡай берәүҙәр үткән ауыр юлды*
*Һәм сал сәсте иҫкә төшөрә.*

*Эйе, миңә ун һигеҙ йәш ине,–*
*Иртә эйәр һалған тай кеүек,*
*Йәшлегемдең хозур сәхрәһенә*
*Дыулап килеп керҙе яу көнө.*

*Яуҙарҙа мин татыным мөхәббәтте,*
*Ул – тәүгеһе һәм ул – бер ине.*
*Үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр үптем,*
*Һәм ул – тыуған ғәзиз ер ине.*

*Шуға ла ун һигеҙ йәшлек мин,*
*Бөтә ғүмер буйы ғашиҡ мин.*

## *Шағир дуҫ менән бәхәс*

*– Тәбиғәт ул – мәңгелек! Һәм ошо*
*Минең шиғриәтем, – тиһең һин.*
*Булһаң да һин шул тәбиғәт улы,*
*Йәшермәйһең ғүмер үтәһен.*

*Йыһан йәшәй мәңге,*
*йәшәгән ул,*
*Йәшәйәсәк беҙҙән башҡа ла.*
*Һинең менән икәү бәхәсләшкән*
*Урындарға килер башҡалар.*

*Улар ҙа бит кәкүк тауышын тыңлар,*
*Кәмәләрҙә ҡыҙын йөрөтөр...*
*– Эйе, былар бары ла мәңге, – тиһең,*
*Күрһәтәһең оло сер итеп*
*Муйыл сәскәһенә,*
*уның һутын*
*Татып белә хатта бал ҡорто.*

*Күңелдәргә гөлдәр сәсәм, тигән*
*Һүҙҙәреңде, ахыры, онottоң:*
*Өҙөп алып ана шул сәскәне,*
*Мәңгелектең йәмен ҡороттоң!*

*Үндай шиғриәт ниңә миңә,*
*Ниңә миңә моңһоҙ уйланыу?*
*Үҙең матурлыҡты һәләк итеп,*
*Уның йырсыһы булып ҡыланыу?!*

*Мин мәңгелек яҡлы.*
*Ләкин, дуҫҡай,*
*Ул мәңгелек бөгөн өлгөрә.*
*Юлдаш булып бар йыһанды байҡай,*
*Атомовоз булып йүгерә.*

*Һинең менән бәхәсләшкән саҡта*
*Өфө өҫтөндә Юлдаш күренде.*
*Тимәк, шулай беҙҙең замандашҡа*
*Мәңгелеккә старт бирелде.*

*Бына ошо минең шиғриәтем:*
*Йондоҙҙар ҙа, ай ҙа бар унда.*
*Ундай саҡта яҡтыраҡ та тойола*
*Иҙел өҫтөндәге тулҡындар.*

*Бына ошо минең шиғриәтем:*
*Күтәргем бик килә кешене.*
*Күтәрер инем Ерҙең үҙен дә мин,*
*Сараһы юҡ шиғыр көсөнөң.*

## *Утыҙ һәм ҡырҡ яҙым юҡ минең*

*Яҙҙар килеп, яҙҙар китә, тиҙәр,*
*Наҙлап, моңлап тауын, яланын.*
*Тәбиғәттең ошо күркәм мәлен*
*Ә мин һиҙмәйсә лә ҡаламын.*

*Йә ул, ахыры, оҙаҡ килә, йәки*
*Күҙҙе асып йомған арала,*
*Йыһан хакимының уты тейеп,*
*Шыйыҡ томан кеүек тарала.*

*Юҡ, яратам мин дә һандуғасты,*
*Туң йөрәк, тип әйтә күрмәгеҙ.*
*Мин ҡағырға әҙер һәр тәҙрәне,*
*Үҫһә әгәр унда үрмә гөл.*

*Мин әҙермен, аҡ аҡсарлаҡ булып,*
*Ташҡындарға ҡунып ағырға.*
*Ҡара күҙем зәңгәр төҫ алғансы*
*Ғашиҡ сирендәргә бағырға.*

*Мин әҙермен...*
*Ләкин яҙҙарға мин*
*Тиңләмәйем ғүмерем үтеүен.*
*Һиҙмәнем мин яҙҙың килеүен дә,*
*Һәм күрмәнем ҡасан китеүен.*

*Яҙғы япраҡ көҙөн ҡойолғанда,*
*Ҡайын япрағылай, йөрәгем*

*Һарғайманы. Тимәк, был донъяға*
*Булған әле минең кәрәгем.*

*Яҙғы ташҡын үҙәндәргә ҡайта,*
*Шул ташҡынға оҡшаш хистәрем*
*Һайыҡманы. Тимәк, был донъяға*
*Биреп бөтөлмәгән көстәрем.*

*Утыҙ һәм ҡырҡ яҙым юҡ минең,*
*Ул яҙ бирәү — яҡты ғүмерем.*

## Ғорур күл тураһында хикәйәт

*Белә инем шундай ғорур күлде,*
*Үҙ йәменә үҙе һоҡланып,*
*Йәйрәп ята ине,*
*быуа бер саҡ*
*Болот китте уға тукталып.*

*– Йәшерәһең мине ҡояштан, – тип*
*Һауалы күл йөҙөн йыйырҙы, –*
*Һиндә булған тамсы миндә лә күп,*
*Бар донъяны ҡаплап ҡуйырлыҡ!*

*Өндәшмәне болот, ағып китте,*
*Ағып китте, тамсы төшөрмәй.*
*Хәҙер, күлдең тулҡындарын ҡыуып,*
*Күл өҫтөнән ел дә йөрөмәй.*

*Күл тып-тыныс.*
*Ул ярһый ҙа белмәй,*
*Йәшен йәшнәп, дауыл уҙмағас.*
*Кибеп барған күлгә моңһоу ҡарап,*
*Текә ярҙа ойой ҡарағас.*

*Ҡамыштарҙан төшкән наҙлы шәүлә*
*Тоноҡланды, аҙаҡ юғалды.*
*Аҡҡоштар ҙа ҡабат килмәнеләр,*
*Ғорур күлдән фәҡәт ҡом ҡалды.*

## Яҙ һәм гөлдәр

*Яҙҙар килә, яҙҙар – гөлдәр бит ул,*
*Гөлдәр сәскә ата, яҙ килгәс.*
*Яҙҙар яҙға оҡшап килмәй бит ул,*
*Үҙ гөлдәре сәскә бирмәгәс.*
*Онотма һин, мин һағынған саҡта,*
*Шаян елдәр әйтеп китәләр:*
*Гөлдәр ҙә бит тик бер сәскә ата,*
*Яҙҙар ҙа бит тик бер киләләр.*
*Яҙҙар килә, яҙҙар гөл килтерә,*

*Гөл килтерә сыуаҡ яҙҙарым,*
*Һәр сәскәнең үҙенең яҙы була,*
*Үҙ сәскәһе була яҙҙарҙың.*
*Онотма һин, мин һағынған саҡта,*
*Шаян елдәр әйтеп китәләр:*
*Гөлдәр ҙә бит тик бер сәскә ата,*
*Яҙҙар ҙа бит тик бер киләләр.*
*Һөйәһеңме, тиеп һорама һин,*
*Елдәр серҙе алып китерҙәр,*
*Һин дә әйтмә, мин дә әйтә алмам,*
*Яҙ һәм гөлдәр һиңә әйтерҙәр.*
*Онотма һин, мин һағынған саҡта,*
*Шаян елдәр әйтеп китәләр:*
*Гөлдәр ҙә бит тик бер сәскә ата,*
*Яҙҙар ҙа бит тик бер киләләр.*

## Кил һин миңә...

Хәләл ефетем Линаға

*Кил Һин миңә*
*Үҙ һуҡмағың буйлап,*
*Таң ысығы ҡунған болондан;*
*Ярылып ҡалһын, әйҙә,*
*Һинең эҙең*
*Ҡабатланмай торған юлыңда.*
*Таң нурҙары һеңгән эҙҙәреңә*
*Ҡараһындар, әйҙә, һоҡланып,*
*Һөйөүең булып,*
*Яҙғы болон аша*
*Йөрәгемә килһен һуҡмағың.*

## Ғүмерем башы

*Усаҡта ут һүнгән, тимәле һин,*
*Йыназаны иртә башлама.*
*Дуҫтар ташлар, туғандарым ташлар,*
*Ә йырҙарым мине ташламаҫ.*
*Йырым миңә атам-әсәм һымаҡ,*
*Ауыр саҡта уға ылыҡтым:*
*Тыуған тупраҡ кеүек, дауа булды,*
*Сыныҡтырҙы мине, йылытты.*
*Ығы-зығыларға алмаштырып,*
*Ҡыйырһытҡанмындыр нахаҡҡа.*
*Мин һаман да йырҙарыма тоғро,*
*Тойғоларҙы булмай йоҙаҡлап.*
*Усаҡта ут һүнгән, тимә, дуҫҡай,*
*Үпкә һүҙҙәр миңә ташлама.*
*Тулғаҡ тотоп тыуған һәр йыр һайын,*
*Ғүмерем минең яңынан башлана.*

# ҺӨНӘРҘЕ ТЫУҒАН ЕРЕНДӘ ТАПТЫ



XIX быуаттың уҡырға-яҙырға һәләтле кешеләре, моғайын, Л. И. Добротворскийҙың «В глуши Башкирии» тигән очеркында башҡорт Вәлиҙең: «Урыҫ законы яҡшы, бик яҡшы, тик тәртип кенә юҡ» тигән фекеренә иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Ысынлап та, арабыҙҙа әле лә, быуат ярым ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ошондай һығымтаға килгән кешеләр аҙ түгел. Ә бит был фекер бөтөнләй башҡа шарттарҙа, күптән үткән тарихи дәүерҙә әйтелгән. Солох судьяһы булып эшләгән автор Өфө губернаторы Ипполит Щербитский менән аслыҡ йылды губернаның көнбайыш ауылдарында йөрөгәндә ишетә уны.

Башҡорт Вәли менән Добротворский башҡорт ауылы Үрге Бишендел өсрашып һөйләшә. Был ауыл исеме тәү тапҡыр 1743 йылғы рәүиз мәғлүмәттәрендә телгә алына. Ә 1816 йылғы иҫәп алыуҙа унда 44 өйҙә 328 кеше йәшәгәне күренә. Очерк авторы телгә алған йылдарға яҡын дәүерҙә, 1870 йылда, Үрге Бишендел 110 йорт иҫәпләнеп, уларҙа 785 йән теркәлгән. Ауыл олоҫ үҙәге булып, идара органының хакимиәте лә ошонда урынлашҡан. Һәр кесаҙнала Бишенделә баҙар эшләгән, ауылдың ике тирмәне булған, мосолмандар ике мәсеткә йөрөгән. Ауыл халҡы башлыса игенселек менән шөғөлләнеүгә ҡарамаҫтан, баҫыуҙарҙан уңыш бик түбән булыуы билдәле. Ашлыҡ уңды тигән йылдарҙа ла, хәҙерге иҫәпкә күсергәндә, гектарынан 4-5 центнер ғына иген һуғып алғандар. Яуым-төшөмгә ҡытлыҡлы йәйҙәрҙә иһә крәҫтиәндәр унан ике тапҡыр кәмерәк уңыш менән сикләнергә мәжбүр булған: ундай ҡыҫыр йылдар һәр ун йылға ике тапҡыр ҡабатланған.

XIX быуатта был яҡтарҙа еңел сәнәғәт тармағы үҫешә башлау менән крәҫтиәндәргә кәсепселек менән шөғөлләнеү яйы асылып, ҡайһы берәүҙәр үҙ ылауы менән Түбәнге Троицкиҙағы буҫтау фабрикаһына эшкә ялланған. Бәләбәй менән Бөгөлмә тарафтарында тимер юл һалына, яңы предприятиелар асыла башлау ҙа ауыл халҡын шунда эшкә ылыҡтыра. Урман сәнәғәте менән шөғөлләнеүсе байҙар тирә-яҡ ауылдар халҡын йүкә һалабаш һалыуға, септә һәм бау үреү кеүек кәсептәргә йәлеп итә. Үрге Бишенде һәм башҡа тирә-яҡ ауылдарҙың эшкә ярарлы халҡы тәгәрмәс, арба, дуға, сана яһау кеүек эшкә лә өйрәнеп ала. Йәйләп улар итек тегеү, быйма һәм кейеҙ баҫыу һөнәрен дә үҙләштерә. Олоҫ үҙәгендәге баҙарға, иген, мал-тыуар, тире-яры һәм йөн менән бергә, үрҙә атап үтелгән әйберҙәр ҙә һатыуға сығарыла.

Беренсе Донъя һуғышы ауыл халҡы өсөн оло ҡазаға әүерелә. Ирҙәрҙең даими

рәүештә фронтҡа оҙатылыуы ауылды бөлгөнлөккә төшөрә: йылҡы малы кәмей, сәсеүлек майҙандары ҡыҫҡара. Унан-бынан төрлө яфалар сигеп һуғып алынған иген дә, мал-тыуар ҙа, һуғыш ихтыяждарына тип, бик арзан хаҡҡа һатып алына, тоҙ, шырпы, кәрәсин, һабын кеүек көндәлек тормош кәрәк-яраҡтары сауҙала юҡҡа сыға. Шуға күрә 1917 йылдың Февраль һәм Октябрь инкилаптарын халыҡ, нигеҙҙә, ыңғай ҡабул итә.

Граждандар һуғышының хәл иткес эпизодтары Үрге Бишендене урап уҙа, сөнки улар көньяҡтараҡ – Бәләбәй – Үрге Троицк – Түбәнге Троицк – Бөгөлмә тирәһендә һәм төньяҡ тарафтарҙа – 1912 йылда һалынған тимер юл буйында күҙәтелә. 1920 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа Үрге Бишенделә 277 хужалыҡта 1482 кеше йәшәгәне күренә.

Артабанғы ваҡиғалар, мәҫәлән, 1921 йылғы ошоғаса күрелмәгән ҡот осҡос аслыҡ, көслө янғын ауыл тарихында тәрән эҙ ҡалдыра. Халыҡ яңынан йорт-хужалығын күтәрә. 1921 йылда Себерҙән екке аттар һатып алалар. Йылҡы олоҫ крәҫтиәндәренең мохтажлығын кәметә төшә. 1929 йылда ауыл халҡы колхозға берләшә башлай. Тәүҙә 129 хужалыҡтың 17-һе генә колхозға инә. Сөләймән Харрасов уның тәүге рәйесе итеп һайлана. Күп тә үтмәй, район үҙәге Аҙнағол ауылына, унан һуң Туймазыға күсерелгәс, Үрге Бишенделә, иң әүҙем кадрҙарҙың кәмеүенә бәйле, хужалыҡ эштәре һүлпәнәйә.

30-сы йылдарҙа нефть ятҡылыҡтарын үҙләштерә башлау менән бәйле, ауыл халҡының эшлеклерәк һәм ҡыйыуыраҡ өлөшө эшкә ошо тармаҡҡа ынтыла. Был да колхоздың продукция етештереү һөҙөмтәләрендә кире сағылыш тапмай ҡалмай, 1961 йылда Үрге Бишенде «Туймазы» совхозының Туҡай бүлексәһе булып китә. Был йылдарҙа хужалыҡтың етештереү базаһы ярайһы нығына, игендән уңыш алыу, малсылыҡ продукцияһы етештереү арта. Ләкин уҙған быуаттың 80-се йылдар уртаһында башланған үҙгәртеп ҡороу процесы һөҙөмтәһендә эре етештереү базаһы булған совхоздың күрһәткестәре түбәнәйә башлап, 1989 йылда ул тарҡала. Үрге Бишенде үҙенә башҡа хужалыҡ булып китә, уның етәксеһе итеп Вингал Фазлыйәхмәтов һайлана. Уның етәкселегендә ауыл халҡы ҡатмарлы социаль-иҡтисади осорҙо уңышлы үтә, тыуған төйәген үҫтереү буйынса байтаҡ эштәр атҡара. Бала саҡтарынан хәтерләүенсә, Вингал Усман улы тыуған яҡтан ҡайҙалыр китеп, кескәй генә Бишенде йылғаһынан, уны уратып алған ялан һәм төрлө серҙәргә бай ҡалҡыулыҡтарҙан башҡаны күҙ алдына ла килтермәне.

Эйе, был ҡалҡыулыҡтарҙан Таш быуат дәүеренә генә хас ҡомартҡылар ҙа табылғыланы. Күрше урмандарҙа иһә төрлө кейектәр, еләк-емеш, дарыу үләндәре мул булды. Һуңынан был тирәлә урман питомнигы ойошторолдо. Бындағы шишмәләрҙәге һыуҙың сафлығы һәм тәме тураһында әйтергә лә түгел. Йылдан-йыл ҙурая барған Туймазы ҡалаһына һыуҙы тап ошо шишмәләрҙән ала башланылар.

Вингалдың бөтә иптәштәре лә тиерлек нефтсе булырға хыялланды, сөнки был тармаҡта эш хаҡын мул түләйҙәр, эш сәғәте лә иҫәпле, ауыл халҡы хыял да итмәгән уңайлыҡтары булған ҡала һәм ҡасабаларҙа йәшәргә, артабан үҫергә мөмкин. Тәбиғәт менән бәйле эшкә самалаған кешеләргә Бишенде урман хужалығында эш бар, уның да даны тирә-яҡҡа киң билдәле. Әммә Вингал үҙенә һөнәрҙе тыуған ерендә тапты. Бында, бәлки ата-әсәләренең тәрбиәһе лә булышлыҡ иткәндер, сөнки улар бар ғүмерен тигәндәй бураҙнала үткәреп, мал ҡарап, улдарына ла ошо шөғөлдө һеңдереп өлгөргәйне. Бәлки, егеттең үҙенең тәбиғәттән бирелгән холҡо, ауырлыҡтар менән алыша белеүе, ныҡышмалылыҡ, маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бөтә оҫталығын еңеү һөҙөмтәһе сағылыш тапҡандыр.

Мохтажлыҡтар хужалыҡта тулып ята. Иң элек эшләргә кешеләр табыуы

ҡыйын, сөнки эшкә яраҡлы механизатор булһынмы ул, йәштәрме – барыһы ла, тотороҡло эш хаҡы, уңайлы йәшәү шарттары артынан ҡыуып, Туймазы, Октябрьский ҡалаларына, Серафимовка ҡасабаһына китеп тора. Бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, Вингал Усман улы эш шарттарын яҡшыртыу, хужалыҡ эшсәндәре өсөн торлаҡ төҙөү кеүек мәсьәләләр менән дә шөғөлләнде. Һөтсөлөк фермаһына реконструкция яһанылар, яңы иген келәттәре һалынды. Фермаға, гаражға һыу үткәргес килде. Үрге Бишенделә башы ябылған ырҙың табағы барлыҡҡа килде.

Механизаторҙар һәм малсылар фекеренсә, башҡарылған эштәр араһында иң отошлоһо торлаҡ төҙөлөшө булды, сөнки ул эш менән шөғөлләнеү хәҙерге шарттарҙа бик ауыр. Фазлыйәхмәтов «Бишенде» хужалығында рәйес булып эшләй башлаған тәүге йылда уҡ ике фатирлы өс йорт һалып ташланылар. 90-сы йылдар дауамында тағы ла ике һәм дүрт фатирлы 11 ошондай торлаҡ сафҡа индерелеп, төп һөнәр белгестәренең яртыһы совхоз торлағында йәшәй башланы. Артабан, продукция етештереүҙе арттырыу мәсьәләләре менән бергә, Үрге Бишенденең дөйөм социаль ихтыяждарына ла иғтибар бүленде. Һөҙөмтәлә ауылда фельдшер-акушерлыҡ пункты, китапхана, ашхана һәм хужалыҡтың административ бинаһы төҙөлөп, сафҡа инде. Клуб, балалар баҡсаһы, машина гараждары яҡшылап ремонтланғандан һуң, улар ҙа йәмләнеп китте. Үрге Бишенделә тирмән һәм бешереү цехы эшләй башланы. Бынан тыш, ауыл урамдарына, эске юлдарға асфальт түшәлеп, газ да үткәрелгәс, халыҡтың тормош-көнкүреше тамам еңеләйҙе.

Иҫке ҡараштар нигеҙендә хәҙерге шарттарҙа алдырып булмаясағын яҡшы аңлаған Вингал Усман улы яңы ғәмәлдәр индереүҙе лә хәстәрләне. Һөтсөлөк фермаһына сит илдә етештерелгән һауыу аппаратын монтажлау, ырҙын табағы, һөтсөлөк фермаһы һәм административ бинаға видеокүҙәтеү ҡоролмалары ҡуйыуҙы ла ошо күҙлектән баһаларға кәрәктер. Хужалыҡ етәксеһенең, белгестәр һәм эшсәндәрҙең тырышлығы һөҙөмтәһендә 20 йыл эсендә «Бишенде»лә иген етештереү ике, малсылыҡ продукцияһы ике ярым тапҡырға артты.

Үҙенең хеҙмәте хаҡында телгә алырға яратмаһа ла, Вингал Усман улы механизаторҙарҙан Айҙар Йомағолов, Фәрит Ғәбдрәзитов, Александр Левин, малсыларҙан Фәрит Вәлиев, Гүзәл Йомағолова, Адель Левинаның тырыш хеҙмәттәрен маҡтағанда йылы һүҙҙәрен йәлләмәй. Хужалыҡ белгестәренән Рәшиҙә Ғимазетдинова, Гөлфиә Мулләхмәтова, Лилиә Закирова, Фәһимә Сафина, Илдар Фазлыйәхмәтов һ.б. тураһында ла ул яҡшы фекерҙә. Төрлө кимәлдәге һөнәри бәйге булһынмы йәки конкурсмы, хатта спорт ярышымы – бишенделәр исеме йыш телгә алына.

Эйе, спорт, сөнки Үрге Бишенделә йөк аттары үрсетеү менән шөғөлләнә башлау менән, был өлкәлә лә үҙҙәрен һынап ҡарау мөмкинлеге тыуҙы. Илдә бындай толпарҙарға ихтыяж күп икән. Ә спорт йылҡысылығы менән бында йән аҙығы табыу өсөн шөғөлләнәләр. Оло һәм бәләкәй ярыштарҙа ҡатнашып, дан яулағандары ла юҡ түгел. Вингал Усман улы йүгерек аяҡлы, йылҡылдап торған аттарына ҡарап, һоҡланыуын йәшермәй. «Башҡорт атһыҙ булмай инде ул!» Ул һуңғы йылдарҙа Үрге Бишенделә алып барған эшмәкәрлеген Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты булараҡ башҡарылған хеҙмәт тип иҫәпләй.

**Рим ГӘРӘЕВ.**
**Туймазы районы,**
Әнәс Арыҫланов фотоһы.

***

Баш ҡалабыҙҙың «Нефтсе» мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыуға арналған «...Мин рухымдың аҫыл хазинаһын, Илем, һиңә биреп ҡалдырҙым» тип исемләнгән хәтер кисәһе уҙҙы. Кисәне Күгәрсен районының Өфөләгә «Оло Эйек» яҡташтар ойошмаһы, Күгәрсен районы хакимиәте ойошторҙо.

Шуға ла мәшһүр әҙибәгә арналған кисәне «Оло Эйек» яҡташтар ойошмаһы рәйесе Венир Аҙнағолов асып, З. Биишеваның һоҡланғыс тормошона һәм оло әҙәби мираҫына ҡыҫҡаса байҡау менән сығыш яһаны.

Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Наилә Юнысова шулай уҡ бөйөк яҡташтарының ҙур исеме район хеҙмәтсәндәрен һәр саҡ фиҙакәр хеҙмәткә рухландырыуы һәм райондың төрлө өлкәлә эҙмә-эҙлекле уңыштарға ирешеүе хаҡында һөйләне.

Халыҡ шағирҙары Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Әнисә Таһирова, Факиһа Туғыҙбаева, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов остаздарына ҙур ихтирамы хаҡында һөйләп, уға арнауҙарын уҡыны.

Күгәрсен таланттары Fәзим Ильясов, Мәҙинә Рәхмәтуллина моңло йырҙары менән һоҡландырҙы, райондың төрлө ансамблдәре юғары зауыҡлы концерт номерҙары күрһәтте.

Кисәлә яҙыусының улы, химия фәндәре докторы, академик Тельман Әминев рәхмәт һүҙҙәре менән сығыш яһаны.

***

Үҙе тамамлаған Сәйетбаба урта мәктәбендә шағир, яҙыусы, ғалим Әнүр Вахитовтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе үтте. Кисәлә Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың комитет рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры Әхмәт Сөләймәнов, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының әҙәбиәт секторы мөдире, филология фәндәре докторы Миңлеғәли Нәҙерғолов, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, «Шоңҡар» журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, «Башҡортостан» гәзитенән Венер Исхаҡов, «Аманат» журналынан Марат Әминев ҡатнашты һәм хәтирәләре менән уртаҡлашты, әҙиптең күп яҡлы ижады тураһында һөйләне. Әнүр Вахитовты яҡындан белгән, аралашҡан хеҙмәт ветерандары, элекке хужалыҡ етәкселәре, уҡытыусылар иҫтәлектәр һөйләне, мәктәп уҡыусылары шағирҙың шиғырҙарын уҡыны, йыр һәм бейеү номерҙары күрһәтте.

Хәтер кисәһен ойоштороуға ауыл хакимиәте башлығы Рәмил Латипов, мәктәп директоры Зөһрә Хәйруллина һәм уҡытыусылар коллективы ҙур көс һалған.

***

Ҡырмыҫҡалы районының Һәүәләй урта мәктәбендә БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев ҡатнашлығында ошо мәктәпте тамамлаусы БДУ доценты, филология фәндәре кандидаты Фәнзил Санъяровҡа 60 йәш тулыуға арналған күңелле әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы.

Яҡташын ҡотларға район хакимиәтенең эштәр идаралығы етәксеһе Фәрғәт Ҡотлобаев, Һәүәләй ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Тәлғәт Вахитов килгәйне.

Уҡыусылар юбиляр хөрмәтенә тәрән йөкмәткеле тамаша күрһәтте.

***

Силәбе ҡалаһында йәш авторҙар ижадына арналған әҙәби семинар уҙғарылды. М. Аҡмулла исемендәге өлкә әҙәби берекмәһе, Ш. Бабич исемендәге ҡала милли китапханаһы, Силәбе өлкәһендәге Башҡортостан вәкиллеге тарафынан ойошторолған сара инде икенсе йыл рәттән үтә. Был юлы семинар Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыуға бағышланды.

Башҡортостандан был сарала «Ағиҙел» журналының яуаплы секретары, шағирә Гөлназ Ҡотоева менән «Йәшлек» гәзите хәбәрсеһе Мөнир Иҡсанов ҡатнашты.

Силәбе ҡалаһының Халыҡтар дуҫлығы йортонда үткән осрашыуҙа Арғаяш районынан, Магнитогорск, Үрге Өфөләй ҡалаларынан да башлап ҡәләм тибрәтеүселәр килде.

Әҙәби берекмәгә башҡорт авторҙары ғына түгел, татар, рус телдәрендә ижад итеүселәр ҙә йөрөй. Шуға семинарҙа өс телдә тәҡдим ителгән ҡульяҙмалар тикшерелде. Магнитогорск ҡалаһынан «Урал ынйылары» әҙәби бермәһе етәксеһе Файза Мәғәсүмова осрашыуға 11-се синыф уҡыусыһы Эльмира Әхмәҙинаны алып килде.

Арғаяш ҡыҙы Гөлъямал Нәзмиева икеөс йыл элек кенә яҙыша башлаған. Байтаҡ йыл мәктәптә француз, немец телдәрен уҡытҡан. Мәктәп ябылғас, уға үҙ эшен асырға тура килә. Шиғырҙарҙы французса ла яҙып ҡарай икән. «Әлегә тиклем ижадымды бер кемгә лә күрһәткәнем юҡ. Шиғырҙарҙа етешһеҙ яҡтар күп булыуын аңлайым. Шуға күрә һеҙҙән ғәҙел тәнҡит көтәм», тине ул үҙе менән таныштырғанда.

Тағы бер башҡорт авторы – Үрге Өфөләйҙә йәшәүсе Фәнүзә Зарипова. Бөгөн ҡалала өс балалар коллективының художество етәксеһе булып тора.

Семинарҙың икенсе өлөшөндә әҙәбимузыкаль кисә ойошторолдо. Силәбе өлкәһендәге Башҡортостан вәкиллеге берекмә уҙғарған сараларҙа әүҙемлек күрһәткән ижадсыларға Рәхмәт хаттары тапшырҙы.

***

Азамат Юлдашбаев һәм Рита Фәтҡуллина үҙ уҡыусылары менән осрашты. Тамашасылар шиғыр тыңлап ҡына ҡалманы, ижад нескәлектәренә, тормоштарына ҡағылышлы төрлө һорауҙар бирҙе.

Был кистә гитара моңо ла яңғыраны. Нәжип һәм Рәжәп Юлдашбаевтар, “Кош юлы” проекты аша таныш Лидия Таңатова, Андрей Харитонов, Альбина Шәмсетдинова, Роберт Хәмиҙуллин, Тимур Ямалов кисәне музыкаль яҡтан биҙәне.

***

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Бөйөк Ватан һуғышында ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәткән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры генерал Миңлеғәли Шайморатовтың вафатына 70 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе уҙҙы.

Кисәлә һуғыш һәм хеҙмәт, хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандарының республика советы рәйесе Марат Муллағәләмов, генерал-майор Ростислав Сибәғәтуллин, Ҡырмыҫҡалы һәм Архангел районларының берләшкән хәрби комиссары Ринат Ғималов, тыныс осорҙағы хәрби хәрәкәттәр ветерандары советы рәйесе Тимерйән Рәжәпов М. Шайморатовтың һоҡланғыс батырлыҡтары халыҡ хәтерендә мәңге һаҡланасағы хаҡында һөйләне.

Сәхнә оҫталары Фәниә Дауытова, Татьянова Боброва, Екатерина Ҡутушева һәм башҡа йырсылар тулҡынландырғыс патриотик йырҙар башҡарҙы.

М. Шайморатов яҡташтары – Ҡырмыҫҡалы районы сәхнә һәүәҫкәрҙәре айырыуса илһамланып концерт номерҙары күрһәтте.

Шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов данлы башҡорт атлыларына арналған шиғырҙарын уҡыны.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһында ике йәш ижадсының – Айгөл Айытҡолова менән Гөлдәр Ишҡыуатованың шиғри ҡульяҙмалары ҡаралды. Абруйлы әҙиптәр – Хәсән Назар менән Ирек Кинйәбулатовтың әҙәбиәт, ижад хаҡында фекер-кәңәштәрен ишетеү, йәшерәк ижадсылар менән аралашыу башлап ҡәләм тибрәтеүселәргә фәһемле лә, тулҡынландырғыс та булды.

Айгөл Айытҡолованың шиғырҙарын айырым йыйынтыҡ итеп әҙерләп, нәшриәткә тәҡдим итергә ҡарар сығарылды.

## Ҡотлайбыҙ!

Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Указы менән күренекле драматург Флорид Миңнулла улы Бүләковҡа «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» исеме бирелде.

Ҡәләмдәшебеҙҙе мәртәбәле исем алыуы менән ихлас ҡотлайбыҙ!